БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
СОЦИАЛЬ-ГУМАНИТАР ФӘНДӘР ҺӘМ ТЕХНОЛОГИЯЛАР БҮЛЕГЕ
РФ ФӘН ҺӘМ ЮҒАРЫ УҠЫУ МИНИСТРЛЫҒЫ
РФА ӨФӨ ФЕДЕРАЛЬ ТИКШЕРЕНЕҮ ҮҘӘГЕ
ПОЧЕТ БИЛДӘҺЕ ОРДЕНЛЫ ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

**Н. Ә. Хөббитдинова**

# ӘҘӘБИӘТТӘ ФОЛЬКЛОР ИНТЕРТЕКСЫ (БАШҠОРТ ҺҮҘ СӘНҒӘТЕ МИҪАЛЫНДА)

Өфө
«Башҡорт энциклопедияһы»
2020

УДК 82.09(470.57)
ББК 83.3(2Рәс.Баш)
Х98

*Баҫма БР ФА Ғилми тикшеренеүҙәрҙе яҡлау фонды булышлығы менән тормошҡа ашырыла*

Яуаплы мөхәррир
*М. Х. Нәҙерғолов,* филология фәндәре докторы

Рецензенттар:
*Г. Х. Абдрафиҡова,* филология фәндәре кандидаты
*А. О. Хужәхмәтов,* филология фәндәре кандидаты

**Хөббитдинова, Н. Ә.**
Х98 Әҙәбиәттә фольклор интертексы (башҡорт һүҙ сәнғәте миҫалында) / Н. Ә. Хөббитдинова. – Өфө : Башҡ. энцикл., 2020. – 184 б.
ISBN 978-5-88185-483-6

Монография сит ил һәм рәсәй филологияһы фәнендә күптән билдәле һәм ярайһы уҡ ҡаралған актуаль методтарҙың береһе булған интертекст теорияһы башҡорт әҙәби ғилеменә лә яраҡлаштырылып, тикшереү тәжрибәһенә нигеҙләнеп яҙылды. Ул фәндә шулай уҡ ҡыҙыҡлы, мөһим фольклор һәм әҙәбиәт бәйләнештәре сиктәрендә файҙаланылды. Ҡасандыр кемдер тарафынан әйтелгән фекер йәки әҫәрҙә сағылған сюжет бөгөн милли әҙәбиәтебеҙҙә художестволы яҡтыртылыуын һиҙемләү әҙерлекле уҡыусыла шул боронғоға һылтанма тыуҙыра (ул эксплицив йәки имплицив булыуы ихтимал). Ошо оҡшашлыҡ тойғоларын, текстар араһындағы «диалогты» интертекст методы асыҡларға ярҙам итә. Бындай тикшеренеүҙәр, бөгөнгө глобаллӘштереү барған осорҙа, әҙәбиәтебеҙҙе бөтә донъя әҙәбиәте өлөшө булараҡ һаҡлау, уны художестволы һәм мәҙәни универсалийҙар кимәленә күтәреп ҡарау мөмкинлеген бирә.

Китап филология факультеты студенттарына, аспиранттарға, ғалимдарға, фән менән ҡыҙыҡһыныусы уҡыусыларға тәғәйенләнә.

**УДК 82.09(470.57)**
**ББК 83.3(2Рәс.Баш)**

© Хөббитдинова Н. Ә., 2020
© Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәге Почет Билдәһе орденлы тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, 2020
© «Башҡорт энциклопедияһы», 2020

ISBN 978-5-88185-483-6

*Ҡәҙерле атайым – күренекле фольклорсы ғалим*
*Әхмәт Сөләймәновтың*
*якты иҫтәлегенә бағышлайым*

## ЙӨКМӘТКЕ

**Инеш** ............ 5
**Беренсе бүлек. Фәндә интертекст – текст бәйләнештәре теорияһының урыны һәм уны башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүҙә метод булараҡ ҡулланыу** ............ 14
1.1. Башҡорт әҙәбиәтен тикшереүҙә яңы мөмкинлектәр ............ 14
1.2. Милли әҙәби фекер мәҙәни универсалийҙар системаһында ............ 18
**Икенсе бүлек. Халыҡ ауыҙ-тел поэтик ижады менән әҙәби текст бәйләнештәре: художестволылыҡ аспекты** ............ 28
2.1.Урта быуат әҙәбиәте менән ауыҙ-тел ижады бәйләнештәрендә интертекстуаллек: художестволылыҡ аспекты (Й. Баласағунлы, С. Сараи әҫәрҙәре) ............ 28
2.2. Тәүҙә Ҡөрьән сүрәһе – шунан әҙәби әҫәрме, әллә әкиәтме? (Насретдин Рабғузиҙың «Киссас әл-әнбийа»һына ҡарата) ............ 31
2.3. XIX быуат аҙағы – XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә интертекстың урын алыуы. ............ 35
2.4. М. Ғафуриҙың замандашы, теләктәше һәм ҡәләмдәше булған Ғ. Туҡайҙың Шүрәлеһе, Таҙы менән Һыу инәһе һәм башҡорт халыҡ ижады: мәҙәни универсаллек һәм интертекст күҙлегенән. ............ 56
**Өсөнсө бүлек. Башҡорт әҙәбиәтендә фольклор интертексы күренеше** ............ 71
3.1. Башҡорт әҙәбиәтендә халыҡ ижады менән Ҡол Ғәлиҙең «Йософ ҡиссаһы» поэмаһы интертекстары (Баһауи, Ғ. Хоҙаяров, Б. Мирзанов, Я. Йомаев ижады) ............ 72
3.2. Хәҙерге осор әҙәбиәтендә реминисценциялар (алынмалар) (Һ. Дәүләтшина, Мостай Кәрим, Ә. Атнабаев, Ә. Әминев, Г. Яҡупова әҫәрҙәре). ............ 83
3.3. Гендер прозаһы һәм поэзияһы мәсьәләһенә ҡарата йәки хәҙерге башҡорт ҡатын-ҡыҙ ижадында интертекстуаллек ............ 91
**Йомғаҡлау** ............ 122
Әҙәбиәт исемлеге ............ 124
Ҡушымта ............ 131

## ИНЕШ

Билдәле булыуынса, әҙәбиәт ғилемендә фольклор менән әҙәбиәт бәйләнештәре проблемалары ярайһы уҡ тикшерелгән. Был өлкәлә бигерәк тә А.Н. Веселовский, В.Я. Пропп, Е.М. Мелетинский, В.М. Жирмунский, М.К. Азадовский, У.Б. Далгат, М. Ауэзов, К.Ш. Нурланова, Б.Н. Путилов, Д.Н. Медриш[1] кеүек рус һәм башҡа милләт ғалимдары менән бер рәттән Кирәй Мәргән (Ә.Н. Кирәйев), Ә.И. Харисов, К.Ә. Әхмәтйәнов, Ғ.Б. Хөсәйенов, Ә.М. Сөләймәнов, С.Ә. Галин, Ғ.С. Ҡунафин, И.Ғ. Ҡолсарина ише башҡорт тикшеренеүселәренең хеҙмәттәре мөһим. Тик быға саҡлы башҡорт әҙәбиәтенең художестволы биҙәктәре, шул биҙәктәрҙе тағы ла сағыуыраҡ, баҙығыраҡ иткән халыҡ ижадының үҙенсәлекле поэтик сағылышын тикшереүҙәр традицион, ҡалыплашҡан әҙәби-ғилми методтарға нигеҙләнә килде. Әммә, шул уҡ мәлдә, был йәһәттән яңыса ҡарашлы тикшеренеүҙәрҙең яйлап башланыуын да күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай[2].

---

[1] *Веселовский А.Н.* Историческая поэтика. – М.: Высшая школа, 1989; *Пропп В.Я.* Фольклор и действительность. – М.: Наука, 1976; *Мелетинский Е.М.* Введение в историческую поэтику эпоса и романа. – М.: Наука, 1986; *Жирмунский В.М.* Сравнительное литературоведение. – Л.: Наука, 1979; *Азадовский М.К.* Статьи о литературе и фольклоре. – М.–Л.: Наука, 1960; *Далгат У.Б.* Литература и фольклор. – М.: Наука, 1981; *Ауэзов М.О.* Мысли разных лет. – Алма-Ата: Наука, 1959; *Нурланова К.Ш.* Эстетика художественной культуры казахского народа. – Алма-Ата: Наука, 1987; *Путилов Б.Н.* Героический эпос и действительность. – Л.: Наука, 1988; *Медриш Д.Н.* Литература и фольклорная традиция. Вопросы поэтики. – Саратов, 1980; *Харисов А.И.* Литературное наследие башкирского народа (XVIII–XIX вв.). 2-е издание, дополненное. – Уфа: Китап, 2007; *Әхмәтйәнов К.Ә.* Поэзияла матурлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1982; *Сөләймәнов Ә.М.* Өс мөғжизә. – Өфө: Китап, 2009; *Хөсәйенов Ғ.Б.* Быуаттар тауышы. Башҡорт әҙәбиәте тарихы, теорияһы һәм тарихи поэтика буйынса очерктар. Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1984; *Кунафин Г.С.* Башкирская поэзия XIX – нач. XX в.: Вопросы жанровых и идейно-художественных особенностей. – Уфа: Гилем, 2011; *Галин С.А.* Фольклор һәм заман. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1972 һ.б.

[2] *Хөббитдинова Н.Ә.* Башҡорт әҙәбиәтендә фольклор. – Өфө: Ғилем, 2005;

Тәҡдим ителгән әлеге хеҙмәттең нигеҙендә лә, һис шикһеҙ, әле әйтелгән комплекслы – фольклористика, әҙәбиәт ғилеме, культурология фәндәре юҫығында, эҙмә-эҙлекле һәм системалы тикшеренеү ысулы ята. Был осраҡта гуманитар фәндәр өлкәһенә ҡараған был әҙәби анализ бер ниндәй ҙә фәнни-техник, тәбиғәт фәндәре өлкәләре менән бәйләнештә түгел. Бында фән күренеше булараҡ әҙәбиәт менән фольклор өлгөләре анализланып, уларҙың әҙәбиәттәге художестволы сағылышы постмодернистик ғилми мәктәбенән билдәле булған *интертекстуаллек алымы* ярҙамында, йәғни культурология юҫығында ҡаралды. Ошо алым тураһында артабан бер нисә һүҙ.

Совет осоронда фәнни эҙләнеү-тикшеренеүҙәрҙең тарихи-материалистик методологияһы марксизм тәғлимәтенә таяна ине. Ғилми хеҙмәттәрҙә ошо алым телгә алынып ҡына кителә лә, ғәҙәттә, шулайыраҡ яңғырар ине: «Методологической основой диссертации (йәки башҡа берәй хеҙмәт. – *Н.Х.*) явились теоретические положения классиков марксизма-ленинизма о культурном наследии, решения партийных съездов и пленумов ЦК КПСС. Научно-теоретическим ориентиром исследования служили работы советских литературоведов»; «…Теоретической базой нашего исследования послужили работы классиков марксизма-ленинизма по вопросам языкознания и научные труды ведущих диалектологов нашей страны» һ.б.[3]

Постсовет осоронда иһә диссертация менән авторефераттарҙың тейешле ерендә «Методологическую основу работы составляют труды следующих авторов» тип, яңғырашлы исемдәр теҙеме бирелеүсән. Бындай ғәҙәт бөгөн дә һаҡлана, әммә ҡулланылған методтар конкрет һәм объектив бирелергә тейеш, әлбиттә.

Шул уҡ мәлдә фәндә барлыҡҡа килгән төрлө ҡараштарҙың, методологик алымдарҙың бөгөнгө көндә лә мөһим булып ҡалыуы хаҡында онотторға ярамай. XX быуаттың икенсе яртыһында илебеҙҙә

---

*Шулай уҡ уныҡы.* Художественное отражение фольклора в литературе XIX века (к проблеме русско-башкирских фольклорно-литературных взаимосвязей). – Уфа: Гилем, 2011; XIX быуат аҙағы – XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә фольклор традицияларының художестволы сағылышы. – Өфө: Ғилем, 2013; Фольклор в башкирской литературе: художественно-эстетический аспект (XIII–нач. XX века). – Гилем, 2016 и т.д.

[3] Ҡара: *Сөләймәнов Ә.М.*, *Хөббитдинова Н.Ә.* Әҙәби әҫәрҙе тикшереү юлдары. – Өфө: Китап, 2012. – 5-се б.

барған «фәнни тикшеренеүҙәрҙә комплекслылыҡ», һуңғараҡ «системалылыҡ» (системность) кеүек ысулдар менән бер рәттән, «эшмәкәрлек күҙлегенән сығып эш итеү юлы» (деятельностный подход) тигән методологик ҡараштар ана шундайҙарҙан[4].

Бөгөн иһә төрлө фәндәрҙең берләшеү – интеграция процесын кисереү күренеше күҙәтелә. Хәҙерге ғилми хеҙмәттәрҙә методологик ысул итеп телгә алынған комплекслы һәм системалы тикшеренеү юлы (подход) файҙаланыла. Ошо ерҙә модаға әүерелеп барған методтарға туҡталып китеү зарурҙыр. Уларҙың нигеҙендә теге йәки был ғилми тикшеренеүҙең маҡсаты һәм бурыстарына ярашлы рәүештә төрлө фәндәрҙең ысулдарын, алымдарын берләштереп ҡарау ята. Комплекслы юл (подход) менән тикшереү тигәндә, уның төрлө фәндәрҙең (хатта бер нисек тә яҡын булмаған гуманитар һәм техник фәндәр булыуы ихтимал) бәйләнешендә алып барылыуы күҙ уңында тотола. Мәҫәлән, фольклор менән әҙәбиәт, әҙәбиәт менән лингвистика, әҙәбиәт менән этнология йәки әҙәбиәт менән культурология, математика, химия йәки архитектура һ.б. фәндәрҙең бәйләнеше лә булыуы мөмкин. Мәҫәлән, С.И. Сухих тикшеренеүҙең ғилми юлдары, ысулдары хаҡында һүҙ йөрөткәндә, М.М. Бахтиндың «Проблемы поэтики Достоевского» тигән хеҙмәтендә йыш ҡына «полифония»[5], «полифонический роман» кеүек музыка өлкәһенә ҡараған терминдарҙы ҡулланыуы хаҡында ла әйтеп үткәйне[6]. Йәки А.А. Арзамазов удмурт әҙәбиәте образлылығы менән лингвосемантик үҙенсәлектәрен берләштереп, филология күҙлегенән ҡарауы етмәгән, уны хатта «флористическо-фаунистический блок», «удмуртский континуум», «корреспонденция мифическая» кеүек төрлө фәндәр өлкәһенән (ботаника, биология, физика, лингвистика, журналистика һ.б.) билдәле булған терминдарҙы йәлеп итеү һөҙөмтәһендә, удмурт әҙәбиәтенең поэтик үҙенсәлектәрен асыҡлауҙа

[4] *Шәрипова З.Я.* Әҙәбиәт ғилеме һәм заман. – Өфө: Китап, 2001. – 30–31-се бб.

[5] Ҡара: Полифония в теории музыки – склад многоголосной музыки, определяющийся функциональным равноправием отдельных голосов (мелодических линий, мелодий в широком смысле) многоголосной фактуры.

[6] *Сухих С.И.* Методология литературоведения; комплексный и системный методы анализа литературы // Вестник Нижегородского университета им. Н.И. Лобачевского. 2012. – № 6(1). – С. 303.

ҡыҙыҡлы һығымталарға килде[7]. Йә булмаһа, әкиәттәрҙе философия күҙлегенән сығып, уларҙа әхлаҡи һайлау проблемаһын (проблема выбора) ҡараусы Л.Ә. Иткулова, мәҫәлән, халыҡ ижадының был жанрын фольклористика, әҙәбиәт ғилеме, этнография, археология, философия фәндәренең материалдарын бергә уҡмаштырып, файҙаланып өйрәнеүҙе хуп күрә[8]. Бындай тикшеренеүҙәр *комплекслы* тикшеренеү тип атала.

*Системалы* юл менән алып барылған тикшеренеүҙә иһә (бында һүҙ, әлбиттә, әҙәбиәт хаҡында бара) әҙәби әҫәрҙе художестволы әҫәр иткән өлөштәре төрлө методҡа таянып анализлана. Йәғни әҫәр үҙе бер структура, система булып сығыш яһай, ана шул системаны булдырған сюжет, композиция, мотив йәки әҙәби формаһы, жанры һ.б. мәсьәләләре бер-бер артлы, логик бәйләнешле ҡарала. Уларҙың үҙенсәлектәрен асыҡ күрһәтеү маҡсатында төрлө методтарға мөрәжәғәт ителә (тарихи-сағыштырма, типологик- йәки генетик сағыштырма, аналитик һ.б.). Мәҫәлән, беҙҙең осраҡтағы әҙәби сюжетты булдырған мотивтың семантикаһы фольклор традицияһына нигеҙләнеүе ихтимал. Фольклор традицияһына мөрәжәғәт иткәндән һуң ғына әҙәби әҫәрҙең художестволы үҙенсәлегенә башҡа күҙлектән ҡарап, унда ярайһы уҡ сағылыш тапҡан фольклор традицияларын анализлап, ҡыҙыҡлы тәжрибә, күҙәтеү яһарға була. Был осраҡта әҫәрҙең поэтик нескәлектәре бөтә киңлегендә һәм тулылығында күренеп, төрлө төҫтәрҙә сағыуыраҡ баҙыҡланыуы ихтимал. Йәки халыҡ ижадында (әкиәттә, эпоста, легендала һ.б.) һүрәтләнгән фольклор мотивтары, сюжеттары «күҙ өйрәнгәнлектән» бөтә үҙенсәлегендә асыҡ уҡ күренмәй башлауы ла мөмкин. Әҙәбиәттә урын алғандары иһә яңы художестволы киңлектә (пространство) трансформацияланып, көслөрәк сағылыуы, хатта ки уның шулай бөтә сафлығында, тулылығында һаҡланыуы мөмкин. Йәғни яҙма әҙәбиәт халыҡ ижады традицияларын яҙма килеш, таштა баҫтырылған рәүештә һаҡлап, мәңгелләштереүгә ирешә, үҙенә күрә һаҡлау функцияһын үтәй. Мәҫәлән, был бигерәк тә рус яҙыусылары ижадында көслөрәк төҫ

[7] *Арзамазов А.А.* Эволюция образной системы и лингвосемантические трансформации в удмуртской поэзии половины 1970-х – начала 2010-х гг.: автореф. дисс. ... д-ра фил. наук. – Ижевск, 2016. – 41 с.

[8] *Иткулова Л.А.* Нравственный выбор в башкирской сказке (Философско-мировоззренческий анализ). – Уфа: БашГУ, 2002. – 136 с.

ала: халҡыбыҙҙың «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының бер варианты тулыһынса XIX быуатта Т. Беляев әҫәрендә («Куз-курпяч, башкирская повесть, писанная на башкирском языке одним курайчем и переведенная на российский в долинах гор Рифейских, 1809 года» (Казань, 1812) ана шундай яңыса художестволы яҡтыртыу табып, фәндә «Беляев версияһы» тип аталып йәшәп килә йәки шул уҡ осорҙа В. Даль тарафынан шундай уҡ эшкәртелештәге «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосыбыҙҙың бер варианты «Башкирская русалка» исеме аҫтында ташҡа баҫтырылып, фәндә иһә «Даль версияһы» тип аталып йөрөй.

Уғаса шуны иҫкә төшөрөп китеү зарурҙыр. Әле үткән быуаттың 60–70-се йылдарында милли фольклористика өлкәһендә әүҙем эшләгән, башҡорт әҙәбиәте ғилеменә нигеҙ һалыусы күренекле ғалим Ким Әхмәтйәновтың «Поэтик образ һәм тарихи контекст» тигән мәҡәләһе беҙҙең өсөн ҡыҙыҡлы. Унда ул РСФСР яҙыусылар союзы Ойоштороу комитетының Икенсе (Өфө) пленумындағы Мостай Кәримдең сығышына һылтанып, егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа ижад иткән ҡайһы бер әҙиптәребеҙҙең (М. Ғафури, Д. Юлтый ишеләрҙең) синфи көрәште тасуирлаған тарихи осорҙо сағылдырғанда, мотлаҡ халыҡ ижады, мифологияһы традицияларына мөрәжәғәт итеүҙәрен билдәләгәйне. Йәғни синфи көрәште алып барыусылар тик изге зат булып әкиәт батырҙарын, инде дошмандары иһә – яуыз, кире көстәр лагерын тәшкил итеүсән. Быны ғалим һәм тәнҡитсе Ким Әхмәтйәнов бөтә әҙәби фекер һәм тормош законлыҡтарына таянып, «башҡорт халҡының эстетик аңының мифтан художестволы фекерләүгә күсеү» процесында ҡатмарлы юл үтеүе менән бәйләне. Һәм ошо процесс барышында боронғо мифик образдар менән заман геройы араһында бәйләнештең булыуын билдәләне. Дәүерҙәр артынан дәүерҙәр үҫешкән мәлдә заман талаптары ла үҙгәрә, «яңы закондар асылыу менән фән һәм техникалағы ҡараштар бик тиҙ иҫкерә һәм асылда йәшәүҙән туҡтай». Әҙәбиәттә, художестволы фекер киңлегендә иһә боронғо традицион образдар, тема һәм сюжеттар һаҡлана, йәки «иҫкергән тип иҫәпләнгән формалары бөгөн үҙаллы ла, һуңғы дәүерҙәрҙә яҙылған әҫәрҙәрҙең образдар системаһы эсендә бер аҙ үҙгәртелгән көйөнсә лә йәшәй»[9], тип дауам иткәйне фекерен. Икенсе төрлө

[9] *Әхмәтйәнов К.Ә.* Поэтик образлылыҡ. – Өфө, 1994. – 112-се б.

әйткәндә, ҡасандыр әйтелгән һүҙ, һүрәтләнгән образ йәки сюжет, ваҡыттың күпме үтеүенә ҡарамаҫтан, яңынан ҡабатлана, саҡ ҡына үҙгәреш кисерһә лә үҙен таныта, иҫкә төшөрә. Йәғни ғалим әйткән боронғо мифология поэтикаһы бөгөнгө әҙәбиәттә лә үҙен һиҙҙертә, художестволы һынланыш таба, йәғни, инде бөгөн фәннисә әйткәндә, интертекст бәйләнешен тыуҙыра. Ким Әхмәтйәнов, күрәһең, М.М. Бахтиндың хеҙмәттәре менән хәбәрҙар булған, сөнки тап текстар, фекерҙәр диалогы хаҡында әйткән кеүек. Алда барасаҡ һүҙ ҙә шул хаҡта.

Тормоштоң тиҙ үҫешкән, үҙгәрештәр, яңырыуҙар – модернизациялар кисергән бер мәлендә ниндәйҙер яңылыҡ, прогрессив алымдарҙы һынап ҡарағанда, ҡайһы саҡ, күптән булдырылған, әммә ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында онотолған ғилми асыштар, дөйөмләштереүҙәр ана шул «яңылыҡтың» булыу ихтималлығын асыҡлай. Филология фәнендә ҡасандыр асылып та онотолоуға дусар ителгән *интертекст* теорияһы билдәле. Был бөгөнгө ғалимдарҙың иркен фекер йөрөтөп, тикшеренеү эштәрендә төрлө методологик юлдарҙы самалап ҡарауҙары менән бәйлелер. Үҙ сиратында уны бер төрлө фекерләүҙән, ҡалыплашҡан ҡараштарҙан арыныуға ынтылыу менән дә аңлатып булалыр. Милли фәнгә килгәндә иһә әлегә традицион, ҡәҙимге ысулдарҙың ҡулланылыуы күҙәтелә. Әммә, быға саҡлы һалынған теоретик нигеҙҙәрҙе инҡар итмәйенсә, шуға таянып, яңыса фекерләүселәр ҙә юҡ түгел.

Ошо йүнәлештә тәҡдим ителгән әлеге китапта әҙәбиәттә теге йәки был кимәлдә сағылыш тапҡан фольклор традицияларының ҡулланыу механизмына төшөнөп, уларҙың әҫәрҙә ниндәй художестволы функция үтәп килеүен, семантикаһын асыҡлау, уның текст-ара бәйләнештәрен барлап, күрһәтеп үтеү ҡыҙыҡлы булыр ине. Быларҙың барыһын да башҡарыу маҡсатында, үрҙә телгә алынған, комплекслы һәм системалы, сағыштырма, тарихи-мәҙәни кеүек методологик алымдар менән бер рәттән күптән билдәле һәм герменевтиканың бер төрө булып та, совет фәнендә телдән төшөп ҡалған ерҙән бөгөнгө рәсәй ғилемендә тергеҙелгән *интертекст методына* айырыуса мөрәжәғәт итәбеҙ. Бының менән ниндәйҙер иҫ киткес асыш яһау артынан ҡыумайынса, донъя мәҙәниәтенең бер өлөшө булған башҡорт милли әҙәбиәтен дә ошо ысулдар ярҙамында тикшереп ҡарап, уны киңерәк даирәләргә сығарыу ниәте өҫтөнөрәк, тип табылды. Был йәһәттән беҙҙең өсөн әҙәби әҫәрҙә сағылыш тапҡан, файҙаланылған фольклор

традицияларын һанап ҡына үтмәйенсә, уларҙы тулайым художестволы-эстетик ҡараштан сығып асыҡлап, әҙәбиәт менән фольклор араһындағы бәйләнеште үҙһенеп, төрлө осорҙа ижад ителгән әҙәби әҫәрҙәр араһындағы интертексты өйрәнеү бигерәк ҡыҙыҡлы булыр ине.

*Герменевтика*, билдәле булыуынса, текст, һүҙ мәғәнәһенә төшөнөүҙе, интерпретациялауҙы аңлата. Әҙәби әҫәрҙә фольклор традицияларының сағылыш табыуы, әҫәргә ниндәйҙер кимәлдә художестволы һәм эстетик яҡтан тәьҫир итеүе, уның поэтик үҙенсәлектәрен арттырыуы яҡшы аңлашыла. Әҫәрҙә урын алған халыҡ ижады элементтарын һәр кем еңел генә күреп, атап сыға ала йәки фольклор сюжеты менән әҙәби әҫәр, йә булмаһа бер авторҙың әҫәре менән башҡа автор әҫәре араһындағы (йәки унда бирелгән герой образдары, мотивтары) оҡшашлыҡ, параллелдарҙы күреп, шуның менән интертекстуаль бәйләнеш хаҡында һүҙ йөрөтә ала. Әммә ысын мәғәнәһендәге ғилми тикшеренеү быныӊ менән генә сикләнмәй әле. Сөнки билдәле ғалим Б.В. Томашевский әйтеүенсә «…обнаруженные “параллели” будут носить характер мало значащего “сырого материала”, а “выискивание этих параллелей” вне уяснения их характера, сути, функции будет представлять собой что-то вроде «литературного коллекционирования»[10]. Беҙҙең осраҡта ла сағылыш тапҡан фольклор традицияларының семантик үҙенсәлектәрен өйрәнгәс, уларҙың әҫәрҙә үтәгән художестволы функцияһы, роле, тотҡан урыны, мәғәнәһе (йәғни теге йәки был фольклор күренешенең семантикаһы, тәбиғәте, идея-эстетик торошо) йәнә төрлө яҡлап асыҡлана һәм яҡтыртыла. Сөнки фольклор тәү ҡарашҡа ябай төшөнсә кеүек ҡабул ителһә лә, асылда, Р.Ә. Солтангәрәева дөрөҫ әйткәнсә, «в нем (в фольклоре. – *Н.Х.*) нет ничего случайного, бессвязно выдуманного из ничего и не имеющего когда-то практического применения… фольклорный жанр … сложный мировоззренческий код, полимерный тест-символ традиционной культуры… »[11]. Быныӊ менән, йәғни ошо үҙенсәлектәргә эйә булған халыҡ ижады традицияларын үҙһенгән әҙәби әҫәрҙең төп асылына, уның башҡа әҙәбиәт, рухи-мәҙәниәт, йәмғиәт күренештәренә (традицияларына) бәйле булыуына, авторҙың быныӊ менән нимә әйтергә теләүенә

[10] *Томашевский Б.В.* Пушкин и Франция. – Л., 1960. – С. 81–82.

[11] *Султангареева Р.А.* Башкирский фольклор: семантика, функции и традиции. – Уфа: Башк. энцикл., 2018. – С. 7.

тәрәнерәк төшөнөү мөмкинлеге тыуа. «Актуальные проблемы методологии литературной критики» тигән хеҙмәттә әйтелеүенсә, «…всякий текст при всей своей неповторимости является представителем некоей общности, … определенной культурной традиции, символ присутствия духовности. Интерпретация может быть направлена на выявление этой объективной духовности, которая имеет исторически меняющиеся формы, но имеет некую неизменную сущность, своим постоянством обеспечивающую непрерывность культурной традиции, отражающую единство исторического процесса»[12]. Башҡорт әҙәбиәтен ошо һәм интертекстуаллек күҙлегенән ҡарау уны мәҙәни, художестволы универсалий (культурные, художественные универсалии) фонында тикшереү, уның художестволы дөйөм һәм уртаҡ ерҙәрен байҡау, йәғни башҡорт художестволы һүҙ сәнғәтен бөтә донъя мәҙәниәте кимәлендә, уның бер өлөшө булыуын иҫбатлап тикшереү мөмкинлеген дә бирә.

Шул уҡ мәлдә әҫәрҙең поэтик үҙенсәлектәрен тикшереүҙән дә ситләшмәү мотлаҡ. Билдәле ки, поэтика әҫәрҙең жанрын тикшерә, персонаждар характерын асыҡлап анализлай; темаһын аныҡлай, йәғни символик формала ғына булһа ла, әҫәрҙе интерпретациялау мөмкинлеген биргән кодтарҙы (конвенция системаһы) билдәләүҙән ғибәрәт. Поэтиканың бурысы булып тик әҙәби әҫәрҙә художестволылыҡты тыуҙырған төрлө сараларҙы аңлатыу тора[13].

Интертекст менән поэтиканы айырып ҡарау үҙен аҡламаҫ төҫлө. Был бигерәк тә художестволы әҫәрҙең семантик структураһын ғына түгел, уның поэтик үҙенсәлектәрен дә мотлаҡ тикшергәндә мөһим. Был йәһәттән художестволы әҫәрҙең поэтикаһын махсус рәүештә төрлө яҡлап ҡараған Ә.Ш. Абдуллина дөрөҫ билдәләүенсә, «…интертекстуальность – это использование поэтики того или иного произведения в структуре другого произведения, присутствующее в открытом (эксплицитном) или завуалированном (имплицитном) виде и проявляющееся как перекодировка поэтики чужого произведения в собственных художественных целях»[14]. Яҙыусының был ижади

---

[12] Ҡара: *Сөләймәнов Ә.М., Хөббитдинова Н.Ә.* Әҙәби әҫәрҙе тикшереү юлдары. – 14-се б.

[13] Шунда уҡ. – 14–15-се бб.

[14] *Абдуллина А.Ш.* Поэтика современной башкирской прозы. – Уфа; ИИЯЛ, 2009. – С. 314.

эшмәкәрлеге аңлы һәм аңһыҙ, интуитив рәүештә башҡарылыуы ихтимал.

Художестволы әҙәбиәттә интертекстуаль бәйләнештәр нисегерәк сағыла икән? Ниндәй форма һәм төрҙәргә эйә?

Тәҡдим ителгән китапта был һәм башҡа һорауҙарға яуапты табырға тырышылды. Бында ҡаралған интертекст башҡорт әҙәбиәтен тағы ла төплөрәк, тәрәнерәк, күп яҡтан тикшереү ысулы, методы булараҡ тәҡдим ителә. Былар интертекстарҙың иң сағыу сағылыш тапҡан әҙәбиәтебеҙҙең төрлө осорҙарына ҡараған әҫәрҙәр, айырыуса, боронғо XIV б. һәм XX–XXI бб. әҙәбиәте миҫалында асыҡланды. Ә инде әҙәбиәтебеҙҙе мәҙәниәт дөйөмлөгөндә ҡарау иһә фольклор менән художестволы фекерҙең дөйөм һәм үҙенсәлекле айырмалыҡтарын йәнә сағыуыраҡ күрһәтеү мөмкинлеген тыуҙыра. Был йәһәттән, мәҫәлән, төрлө ҡәрҙәш халыҡтар әҙәбиәте менән башҡорт халыҡ ижадының интертекстуаль бәйләнешен күҙәтеү ҙә үҙен аҡлар кеүек.

Йәнә лә башҡорт әҙәбиәтендә башҡа милләт халыҡтары фольклоры традицияларының сағылыуы ихтимал. Һәм дә бер үк сюжеттың төрлө халыҡтар ауыҙ-тел ижады репертуарында осраған версияларын тарихи-генетик планда өйрәнеүҙе лә интертекст ысулы ярҙамында башҡарып, ҡыҙыҡлы һығымталарға килеү форсатын тыуҙыра. Улай ғына ла түгел, художестволы универсалийға ярашлы рәүештә, хатта ки милли әҙәби әҫәр менән башҡа милләт кинофильмы менән йәки һүҙ сәнғәте менән һынлы сәнғәт араһында интертекст бәйләнештәрен күҙәтеү мөмкинлеге лә бермә-бер арта. Былар башҡорт әҙәбиәтенең милли уҙаңын, поэтик нескәлеген һаҡлап, уға тоғро ҡалып та ошо универсалийҙар дөйөмлөгөндә уның бер бөтөн булыуы хаҡында һөйләй.

Хеҙмәтебеҙҙә яһаласаҡ һығымталарҙың һуңғы һәм тулы булыуына дәғүә ителмәй, әммә, ниндәйҙер кимәлдә, атҡарылған эшлекле тәжрибәнең һөҙөмтәле буласағына өмөт бар.

Китап ахырында бирелгән «Ҡушымта»ла иһә фәндәге ошо актуаль проблемаға арналып та, төрлө ғилми журналдарҙа, йыйынтыҡтарҙа баҫтырылып, апробация үткән мәҡәләләребеҙ килтерелде. Был инде әлеге хеҙмәткә тотоноуҙың мөһим, мәғәнәле сәбәптәрҙән ғибәрәт булыуын раҫлар кеүек.

## Беренсе бүлек

# ФӘНДӘ ИНТЕРТЕКСТ – ТЕКСТ БӘЙЛӘНЕШТӘРЕ ТЕОРИЯҺЫНЫҢ УРЫНЫ ҺӘМ УНЫ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕН ӨЙРӘНЕҮҘӘ МЕТОД БУЛАРАҠ ҠУЛЛАНЫУ

### *1.1. Башҡорт әҙәбиәтен тикшереүҙә яңы мөмкинлектәр*

Бөгөн тотош рәсәй һәм бөтә донъя филологияһы фәнендә йыш ҡына телгә алынған интертекстуаллек теорияһы асылда рус ғалимы М.М. Бахтиндың «Проблема содержания, материала и формы в словесном художественном творчестве» (1924) тигән хеҙмәтендә текстар «диалог»ы («диалогизм») төшөнсәһенә нигеҙләнә. Ошо текстар диалогизмын һуңынан 1967 йылда *интертекстуаллек теорияһы* тигән термин аҫтында француз ғалимәһе Юлия Кристева артабан үҫтереп камиллаштырҙы. Ғалимдарҙың фекеренсә, текстар араһында тура йәки күсмә, асыҡтан-асыҡ йәки йәшерен бәйләнештәр була, һәм улар ниндәйҙер ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, бербереһенә һылтаныусан. Интертекст, йәғни текстар бәйләнештәренең булыуы, иң әүәл художестволы әҙәбиәттә асыҡлана. Әммә уның мөмкинлектәре күпкә киңерәк. Мәҫәлән, текстар араһындағы бәйләнештәрҙе шулай уҡ һынлы сәнғәт, архитектура, музыка, театр, кино сәнғәттәре һ.б. өлкәләр араһында ла күҙәтергә мөмкин. Картина өҫтөндә эшләгән рәссам үҙенә тиклем ижад иткән рәссамдарҙың һүрәттәренә һылтана ала, ниндәйҙер айырым мотивтарын, сюжет һынланышын, деталдәрҙе файҙаланып, уның менән интертекст бәйләнешкә инә ала. Әҙәби ижадта ла оҡшаш күренеште күҙәтергә мөмкин. Сөнки М.М. Бахтин билдәләүенсә, «помимо данной художнику действительности он имеет дело также с предшествующей и современной ему литературой, с которой он находится в постоянном “диалоге”, понимаемом как борьба писателя с существующими литературными формами»[15]. «Даже прошлое, то есть ро-

[15] *Ильин И.* Интертекстуальность // Современное литературоведение (страны Западной Европы и США): концепции, школы, термины. Энциклопедический справочник. – М. 1999. – С. 204–205.

жденное в диалоге прошедших веков, смыслы никогда не могут быть стабильными (раз и навсегда завершенными, конечными) – они всегда будут меняться (обновляться) в процессе последующего, будущего развития диалога. В любой момент развития диалога существуют огромные, неограниченные массы забытых смыслов, но в определенные моменты дальнейшего развития диалога, по ходу его, они снова вспомнятся, оживут в обновленном (в новом контексте) виде»[16]. Борон әйтелгән фекер, тимәк, дәүерҙәр үткәс тә йәнә телгә алына, яңыһы әүәлгеһенә һылтанғандай итә һәм ул яңы күҙлектән яҡтыртыла ала.

Быға Ким Әхмәтйәнов та бит, башҡорт әҙәбиәте ғилемендә интертекст бәйләнештәре, тип асыҡ әйтмәһә лә, ҡасандыр әйтелгән фекерҙең художестволы аңда яңынан ҡабатланыуына, быуаттар үткәс йәнә үҙен һиҙҙертеүенә иғтибар иткәйне. «Фольклорҙағы классик поэмаларҙың күбеһе шул дәүерҙә ижад ителгән, ләкин һуңыраҡ сығарылған әҫәрҙәрҙә лә» ошо ҡасандыр ижад ителгән ҡомартҡыларҙың «рухы һәм образдар системаһы ныҡ ҡына һаҡланған»лығын таныны[17]. Ҡасандыр дәүерҙәр төпкөлөндә тыуҙырылған аҫыл эпик образлылыҡтар ваҡыт үтә килә, ижтимағи-социаль формациялар алмашынғанда, ысынбарлыҡты тыуҙырған әҙәби фекер менән тәбиғи гармониялы бәйләнешкә ингән. Был инде әҙәби «поэмаларҙың юғары йөкмәткеле, ауан образлы, халыҡсан йүнәлешле булыуына алып килгән» тип, дауам иткәйне фекерен ғалим. Был әле үткән быуаттың 20-се йылдарында М.М. Бахтин башлап ебәргән «текст-ара диалог» менән башҡорт әҙәбиәте ғилеме белгесе К. Әхмәтйәновтың фекере тап килеүе хаҡында һөйләй. Улар ниндәйҙер кимәлдә хатта бер-береһен тулыландырып, байытып тора. Һуңғыһы тәүгеһенең хеҙмәттәре менән хәбәрҙар булыуы ла ихтималдыр.

Тимәк, һәр осор сәнғәте, мәҙәниәте өсөн интертекст теорияһы тап килә, ҡасандыр ниндәйҙер оҫта ижадсы ауыҙынан сыҡҡан теге йәки был күренештәр, темалар, текстар, мотивтар һәм сюжеттар (беҙҙең осраҡта иһә фольклорҙың художестволы үҙенсәлектәре) һәр осорҙа ла ниндәйҙер әһәмиәткә эйә булып, төрлө замандарҙа ла актуаль булып сығыш яһай. Шуның менән фольклорҙан килгән образлы (фольклорса) фекерләү менән әҙәби ижад үҙ-ара уҡмашып, бер-береһен тулыландырып,

[16] *Бахтин М.М.* К методологии гуманитарных наук // М.М.Бахтин. Эстетика словесного творчества. – М. 1979. – С. 373.

[17] *Әхмәтйәнов К.Ә.* Поэтик образлылыҡ. – Өфө, 1994. – 100-сө б.

байытып килгән. Шуға ла халыҡ ижады ынйылары менән саҡ ҡына ла таныш булған һәр кем бөгөнгө әҙәбиәттә лә тәүгеһенең һыҙаттарын, образдарын, мотивтарын төҫмөрләү мөмкинлегенә эйә.

Әҙәбиәттә текст-ара бәйләнештәрен үҙләштереү, тема һәм сюжеттарҙың эшкәртелеше (переработка), эксплицив (туранан-тура, асыҡ) һәм имплицив (йәшерен, һиҙҙермәйенсә йәки ситләтеп) цитациялауҙар, тәржемәләр, плагиат, аллюзия, перефраз (әҫәрҙе үҙ һүҙҙәрең менән йәки ҡыҫҡартып һөйләү), пародия, эпиграфтар, экранлаштырыу кеүек һ.б. билдәле күренештәрҙе тәшкил итеүсән.

Ошонан сығып ҡарағанда, филология фәнендә актуаль проблемаларҙан һаналған фольклор-әҙәбиәт бәйләнештәрендә лә бындай интертекстуаллек әүҙемләшә. Художестволы әҙәбиәттә фольклорҙан алынған үҙләштереүҙәр түбәндәгесә булыуы ихтимал: сюжеттың үҙләштерелеп бирелеше (пересказ), структур яҡтан үҙләштереүҙәр, функциональ үҙләштереүҙәр, мотив һәм образдарҙың үҙләштерелеүе, фольклор әҫәрен цитациялау, фольклор тексын яңынан эшкәртеү (художестволы эшкәртелеш), троптарҙы, художестволы алымдарҙы заманса итеп үҙләштереү, пародиялау һ.б.[18] Был йәһәттән интертекст – текст-ара бәйләнеште булдырыуҙа аллюзия менән реминисценция мөһим роль үтәп килә.

*Аллюзия* тип стилистик алымды атайҙар; ул теге йәки был әҫәрҙә (художестволы әҙәбиәт, һынлы, театр сәнғәттәре һ.б.) һәр ваҡыт ҡулланыла торған әйтем тарихтағы йәки тормоштағы күптән таныш күренешкә ишара рәүешендә ҡулланыла. Ғәҙәттә ул имплицив, йәғни йәшерен формала сағылыусан. Әҙәбиәттә ошо алым функцияһын йышыраҡ йыр, мәҡәл, әйтем йәки табышмаҡ һүҙҙәр башҡарыусан.

*Реминисценция* тип иһә халыҡ ижадынан таныш һәм аныҡ үҙләштереүҙәрҙе (прецедентлы текст), уға ғына хас булған поэтик алымдары менән конкрет жанрға күрһәтеү атала[19]. Әҫәрҙә ул эксплицив рәүештә сағылыусан.

Реминисценция тип шулай уҡ «үҙе хеҙмәт иткән милли әҙәбиәттең, булмаһа бүтән әҙәбиәттәрҙең теге йәки был фактына күпмелер дәрәжәлә мөрәжәғәт итеүҙе» атайҙар, тип яҙа әҙәбиәт белгесе Зәйтүнә

---

[18] Ҡара: *Трыкова О.Ю.* Отечественная проза последней трети XX века: жанровое взаимодействие с фольклором: автореф. дисс… д-ра фил. наук. – МПРУ, 1999. – С. 3.

[19] *Медриш Д.Н.* Литература и фольклорная традиция. Вопросы поэтики. – Саратов, 1980. – С.163.

Шәрипова[20]. Һәм ул башҡорт әҙәбиәтендә был терминды «әҙәби алынма» тип атарға тәҡдим итә. Системалы тикшеренеү юлына ярашлы булғанса, әҙәбиәттә фольклорҙың урыны, сағылышы хаҡында һүҙ йөрөткәндә лә, беҙ әҙәби әҫәрҙәге теге йәки был күренештең, мотив йәки сюжеттың фольклорға ҡарата реминисценцияның йәки әҙәби алынманың тыуҙырылыуын күҙ уңында тотабыҙ.

Интертекст бәйләнеше тик форма, йәғни текст яғынан бәйләнеште тикшереүҙе күҙ уңында тота, поэтикаға иһә иғтибар аҙая, тип әйтеүселәр ҙә булыр. Әммә Юлия Кристева ошо бәйләнештәрҙе ҡарағанда, әҫәрҙең художестволылығына ла мөһим әһәмиәт бирә, уның семантикаһын (мәғәнәһен, тәбиғәтен) өйрәнә. Шулай уҡ әҫәрҙе ошо күҙлектән тикшергәндә, онтологик поэтиканы ҡулланырға ла тәҡдим ителә. Ул да герменевтикаға ҡарай, айырып әйткәндә, интертекст бәйләнештәрен поэтика аша тикшереүҙе хуп күрә: «Свою задачу мы (онтологик поэтиканы өйрәнеүселәр. – *Н.Х.*) видим в исследовании не столько семантического плана, сколько художественного, собственно поэтики, семантики ее составляющих, и во взаимосвязях, ведь поэтика нечто большее, чем простая сумма приемов, и это большее рождается от взаимодействия ее составляющих»[21]. Йәғни поэтик үҙенсәлектең семантикаһы, художестволылыҡ алғы планда тора. Әҙәбиәтте ошо йәһәттән сығып ҡарағанда, миф, фольклор, шулай уҡ символ, гротеск, аллегория, беҙ һөйләгән интертекстлыҡ, номинология, төҫ, нумерология, пейзаж, метафоризм һәм башҡа поэтик үҙенсәлекте күрһәтерлек, сағылдырырлыҡ шундайыраҡ төшөнсәләргә иғтибар итеү зарур. Әҫәрҙә, тимәк, мифик һәм метафоралы символдарҙы табып, уларҙың сюжет үҫешендә ниндәй идея-художестволы, идея-эстетик функция үтәүен, уларҙың семантик мәғәнәһен бөтә тулылығында асыҡлау мөмкинлеге тыуа. Әлбиттә, әҙәбиәттә бығаса ҡулланылып килгән традицион алым менән методтарҙан бер кем дә баш тартмай, улар әле лә файҙаланыла, әммә улар бөгөнгө көн талаптарына тап килгәнсә тулыландырылырға, байытылырға һәм үҫтерелергә тейеш, йәғни уларға инновациялы булыу зарур. Бындай юҫыҡта тикшерелгән әҫәрҙә асылда дөйөм мәҙәни универсалийҙар

[20] *Шәрипова З.Я.* Художестволы әҫәрҙә әҙәби алынмаларҙың функцияһы // «Ағиҙел». – 2008. – № 6. – 140-сы б.

[21] *Шогенцукова Н.А.* [Электронный ресурс]: http://www.litdic.ru/ontologicheskaya-poetika.

үҙенсәлектәренең дә сағылышын, мәҙәниәттең символик үҙәген (ядро) булдырыуын асыҡларға юл аса.

Башҡорт әҙәбиәте бөтә рәсәй һәм тотош донъя әҙәбиәтендә барған глобалләштереү осоронда юғалып ҡалмаһын өсөн, уның бөтә милли үҙенсәлектәрен тағы ла сағыуыраҡ күрһәтеү ниәтендә ошо инновациялаштырылған фәнни тикшереү методтарын да ҡоралға алырға кәрәк. Сөнки етеҙ үҫешкән бөгөнгө тормош милли әҙәбиәткә лә яңы концептуаль ҡараш аша культурология йәһәтенән мәҙәни, айырыуса художестволы универсалийҙар контексында тикшереүҙе талап итә. Милли үҙенсәлектәренә эйә булған башҡорт әҙәбиәте лә ғөмүми әҙәбиәт эстетикаһы ҡанундарына буйһона. Ул бөтә донъя әҙәбиәтенең бер өлөшө һанала, йәғни мәҙәни универсалийҙарына хас күренештәрҙе лә үҙһенә, унан һис тә ситтә ҡала алмай.

### *1.2. Милли әҙәби фекер мәҙәни универсалийҙар системаһында*

Мәҙәни универсалийҙар – ул мәҙәни тәжрибәләр менән эшмәкәрлекте сағылдырған төшөнсә. Һәр халыҡ мәҙәниәтендә тотош донъя халыҡтары мәҙәниәте, рухи ҡиммәттәре менән уртаҡ, дөйөм булған күренештәр ҙә урын алыуы ихтимал. Мәҫәлән, һәр халыҡтың, шул иҫәптән башҡорттарҙың да, мифологияһында утҡа, һыуға ҡарата мәжүси ҡарашы, ышаныу-инаныуы булыуы билдәле. Икенсе төрлө әйткәндә, мифологик символдар булып һаналған һыу, ер, һауа, ут, ағас ише төшөнсәләр төрлө халыҡтар мифтарында сағылып, үрҙә әйтелгәненсә, дөйөм кешелек «мәҙәниәттәре символик үҙәген (ядро)» хасил итә. Йәки мифо-эпик геройҙарҙың төп сифаты физик яҡтан көслө, ғәйрәтле, тыуған ил, кешелекте, тереклекте яҡлап, изгелек менән яҡшылыҡты раҫлауҙан ғибәрәт һ.б. Ошо дөйөм мәҙәни күренештәр, ғөмүмән, кешелектең тормошон, рухи донъяһын күрһәтеп, эске тәжрибәнең йыйылма аксиоматикаһын тыуҙыра[22]. Мәҙәни универсалийҙарҙың торошонда, үҫешендә ваҡыт-арауыҡ төшөнсәһе мөһим роль үтәй: билдәле бер поэтик образдар, деталдәр, мотив һәм образдар теге йәки был әҙәбиәттә, сәнғәт төрөндә (бәлки, башлыса фольклорҙа) тыуып, популярлыҡ яулап, киң әҙәби-мәҙәни әйләнешкә инеп китеүе, сит халыҡтар мәҙәниәтенә күсеүе, һуңынан ниндәйҙер осор, тарихи ваҡытта онотолоп тороп, ахырҙа, әҙәбиәттә яңы төҫ, яңы бағланыш

[22] Аксиоматика – аксиома һүҙенән алынған, иҫбатлауһыҙ ҡабул ителгән күплек теорияһы (теория множества). – *Н.Х.*

алып йәнә таралып китеүе ихтимал. Икенсе төрлө әйткәндә, ул бөтә халыҡтар өсөн дөйөм, уртаҡ күренеш булып күҙаллана башлай. Уны художестволы универсалийҙар тип атап була.

Билдәле булыуынса, европа әҙәбиәте Яңырыу – Возрождение, классицизм, барокко кеүек үҫеш юлдарын үтте. Ғалимдар билдәләгәнсә, «уже во второй половине XVIII в. литература предельно сближается с непосредственным и конкретным бытием человека, проникается его заботами, мыслями, чувствами, создается по его мерке и в этом отношении “антропологизируется”»[23]. Йәғни әҙәбиәт йөҙө менән кешегә, кеше мөхитенә борола һәм уның социаль хәле, йәшәйеше, күңел торошо менән ҡыҙыҡһына, художестволы әйләнешкә индерә. Был әҙәбиәттең үҫешеүе, камиллашыуы хаҡында һөйләй. Ул заман менән бергә атлай һәм уның менән бергә үҙгәрә.

Был йәһәттән ҡарағанда, йәмғиәттең спираль буйлап үҫешеүен иҫтә тотоп, тормошто бөтә ысынбарлығында сағылдырған әҙәбиәттең дә оҡшаш законлыҡтарына буйһоноуын иҫбатларға кәрәкмәйҙер. Европа әҙәбиәтенең яңырып, үҫешеү юлын (Француз революцияһы тыуҙырған Ф. Рабле, Мольер, Ж. Лафонтен, П. Беранже, А. Франс, Роллан һ.б. ише яҙыусылар ижады) алдынғы рус әҙәбиәте лә үтеүе (А.Н. Радищев, А.В. Кольцов, Н.И. Новиков, Н.М. Карамзин һ.б.), һуңғараҡ осор башҡорт художестволы фекеренең дә шул уҡ юҫыҡтан үҫешеүе бәхәсһеҙ (С. Юлаев, Ғ. Соҡорой, Ғ. Кейеков, Ф. Туйкин, С. Яҡшығолов, М. Аҡмулла, Р. Фәхретдинов, М. Өмөтбаев һ.б.).

Ошо һынылышлы, киҫкен осорҙа халыҡ араһында популяр булып киткән төрлө жанрҙа һәм яңы темалы әҫәрҙәр барлыҡҡа килә башлай. Францияла 1789 й. тоҡанған революция әҙәбиәт фекере үҫешенә әйтеп бөткөһөҙ ҙур этәргес көс бирҙе, заманса яңы үҙгәрештәр килтерҙе: тотороҡло классицизмды емереп, рухи азатлыҡты, яңыса фекерләү, ижад итеү идеологияһын яңы йәмғиәттә үҫтереү мөмкинлеге хасил булды. Революция әҙәбиәте яңы герой-революционер һәм патриоттың данлыҡлы образын тыуҙырҙы, ул намыҫсан һәм азатлыҡ өсөн көрәшкән яңы кешене һынландырҙы. Был дәүер әҙәбиәте тигеҙлек һәм туғанлыҡ (равенство и братство) тигән яңы лозунг-оранды байраҡ итеп сөйөп, иҫке тормошҡа, дини фанатизмға, аҙғын руханиҙар, дворяндарға ҡаршы көрәшкә өндәне, уларҙы иркенләп тәнҡитләне. 1789–1799 йй. элекке әҙәбиәттә ситләтелгән

[23] *Родионов В.Г.* Чувашское сравнительное литературоведение. Теория и практика. – Чебоксары, 2017. – С. 52.

фольклор һәм лубалы (лубные) жанрҙар популяр булып китә, улар төрлө йырҙарҙа, фарс һәм романдарҙа киң ҡулланылыш тапты[24]. Ошо мәлдә көньяҡ европа халыҡтарын берҙәмлеккә саҡырыусы ауыҙ-тел ижады мотивтары менән сюжеттарына нигеҙләнгән Роланд, Сид, Нибелунг хаҡында *махсус* йырҙар ижад ителде. Француз революцияһының социаль-иҡтисади идеялары мәҙәниәттә романтизм ағымын яралтып, күтәренке романтик рухтағы мәғрифәткә саҡырыусы әҫәрҙәр европа әҙәбиәтен яңырыу юлына баҫтырҙы. Был халыҡ йырҙары менән эпостарына мөрәжәғәт итеүгә килтерҙе, Париж урамдарында яңғыраған азатлыҡ өсөн өндәүҙәр, таратылған листовкаларҙа белдерелгән идеялар менән халыҡ балладалары, шансон йырҙары һуғарылды, һөҙөмтәлә, революция көрәшенә ябай халыҡ та йәлеп ителде.

Был революцияның идеялары, әйтелеүенсә, рәсәй мәҙәниәтенә лә оло йоғонто яһаны: тормош-көнкүрешкә күпләп француз теле, тәрбиәһе йәмғиәттең юғары ҡатламында һеңешә (мәҫәлән, Лев Толстойҙың «Һуғыш һәм солох» романының яртыһын тип әйтерлек француз телендә монологтар, диалогтар, ремаркалар тәшкил итә). Был йәһәттән рус әҙәбиәте лә, алдынғы демократик идеяларҙы үҙһенеп, рухи азатлыҡ юҫығында тәғәрәне, шунлыҡтан һуңғараҡ осор башҡорт художестволы фекеренең дә шул уҡ һуҡмаҡтан үтеүе бәхәсһеҙ. Мәҫәлән, Ғ.С. Ҡунафин дөрөҫ билдәләүенсә, көнбайыш һәм көнсығыш әҙәбиәттәрендә, Урал-Волга буйы төрки халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар, өсөн уртаҡ булған урта быуат әҙәбиәтендә мөхәббәткә үтә лә бирелгән, романтик тойғоло «тиле» мәжнүн образы киң таралған булған. Миҫал артынан алыҫ китмәйенсә, Низамиҙың мәшһүр «Ләйлә вә Мәжнүн» поэмаһы, Аристоның «Ярһыу Роланд» әҫәрен атап, уларҙа ла ошондай тиле геройҙың сағылыуын әйтеп үтә ғалим. Һәм ошо тенденцияны ул XX быуат башы башҡорт поэзияһында ла күҙәтә. «Яңы социаль-тарихи мөхиттә, бөтөнләй икенсе заманда ижад иткән башҡорт шағирҙарының мәктүбтәрендә (М. Ғафури, Ш. Бабич, К. Ҡәрипов, Д. Юлтый һ.б.) “мәжнүн” образының килеп инеүе бик ҡыҙыҡлы хәл»[25] тип, интуитив рәүештә әҙәби

---

[24] История зарубежной литературы: XVIII в. / В.П. Неустроева, Р.М. Самарина (ред.). – М.: МГУ, 1974. – С. 239.

[25] *Ҡунафин Ғ.С.* Замандарҙың рухи балҡышы. Әҙәбиәт теорияһы, тарихи поэтика мәсьәләләре, ижади портреттар, әҙәби тәнҡит мәсьәләләре. – Өфө: Китап, 1996. – 106–108-се бб.

традицияларҙың тарихи күсәгилешлегенә, интертекстлығына иғтибар иткәйне. Оҡшаш күренеш булған «мәжнүн» образының был юҫыҡта мәҙәни универсаллек һөҙөмтәһе булыуы менән аңлатырға мөмкин был «ҡыҙыҡлы хәлде». Жанр тәбиғәтен, эволюцияһын тикшергәндә лә Ғ.С. Ҡунафиндың көнсығыш йәки көнбайыш әҙәбиәттәренә мөрәжәғәт итеп, үҫештәрендә уртаҡлыҡтар табыуы ла тәбиғи, сөнки быларҙың барыһы ошо универсалийҙар законлығына ҡайтып ҡала.

Дәүерҙәр үтеү менән Француз революцияһы шауҡымында Рәсәйҙә таралған француз, европа мәҙәниәте йоғонтоһонда күренекле Аҡмулла ла мәғрифәтселек идеяһын таратҡанда, «Борадәләргә» тигән шиғырында йәш быуынды белемгә саҡырып, бушҡа ғына:

…Русса уҡып-яҙып ҡына түгел белмәк,
Хәл килһә, французса белгән яҡшы, –

тимәгәндер, моғайын. Бында сәсәндең әйткәндәре иң әүәл мәғрифәтселек ағымына юл ярыусы Француз революцияһының демократик идеяһы менән интертекст бәйләнеше тыуҙырыла, шуға интуитив һылтанма (отсылка) яһалыуы тойола.

Күреүебеҙсә, төрлө осорҙарҙа үҫешкән төрлө халыҡтар әҙәбиәттәренең асылда бер юлдан алға тәгәрәүен, һәр береһендә дөйөм күренештәрҙең күҙәтелеп тороуын тарих тағы берҙе раҫлай. Һәр ил, дәүләт, уның мәҙәниәте, теле, кемдер алдараҡ, кемдер һуңғараҡ, әммә оҡшаш үҫеш юлын үтә. Ана шул милли аң уянып, үҙ-үҙеңде этнос булараҡ таныу процесында, йәғни киҫкен бер мәлдә, боронғо йола, ауыҙ-тел ижадына мөрәжәғәт итергә ынтылыуҙар көсәйә. Мәҫәлән, тыуған ил, халыҡ ирке өсөн көрәшкән батырҙарҙы данлаған башҡорт ҡобайыры халыҡ яҙмышында барған хәл иткес, ҡырҡыу замандарҙа ижад ителгән. Башҡа халыҡтарҙа, мәҫәлән, шул уҡ Европала, был рол-де, авторҙар махсус рәүештә яҙған булһа ла, эпос, эпик йырҙар үтәгән.

Әҙәбиәттә лә оҡшаш күренеште күҙәтергә мөмкин. Ғ.С. Ҡунафин әйтеүенсә, «…һәр һынылышлы дәүерҙә … художестволы әҙәбиәттә, фольклорҙа кеүек үк, яңы әҫәрҙәр, тема менән жанрҙар барлыҡҡа килә»[26]. Ысынлап та, теге йәки был тарихи осорҙа, социаль-ижтимағи талаптарға, иҡтисади-сәйәси торошҡа ҡарап, ниндәйҙер жанрға

---

[26] *Кунафин Г.С.* И песней, и сатирой: Развитие жанровой системы башкирской литературы песенной и сатирической поэзии XIX – начала XX века. – Уфа: Китап, 1999. – С. 38.

нығыраҡ мохтажлыҡ тыуа башлай: XIX–XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә шағирҙар халыҡ йырҙары һәм ҡобайырҙары менән ҡыҙыҡһынып китә, уларҙың поэтик үҙенсәлектәрен, биҙәктәрен, көйөн оҫта ҡуллана. Быны ошо осорҙа «туған тел таҙалығы өсөн көрәш, милли үҙаңды билдәләү (самоопределение) кеүек хәрәкәттәрҙең алғы планға сығыуы»[27] менән бәйле булыуы билдәле. XX быуаттың 80-се йылдар аҙағы – 90-сы йылдар башында ла илебеҙҙә йәнә лә иҡтисади-сәйәси үҙгәрештәр барғанда, республикабыҙҙа милли үҙаң уянып, халыҡ күтәрелгәндә, республиканың үҙаллылығын яулаған бер осорҙа яҙыусыларыбыҙ тарихи документтарға мөрәжәғәт итеп, халҡыбыҙҙың ҡанлы үткәнен, батырҙары, шәхестәре яҙмышын тасуирлаған тарихи-героик романдар ижад итте, ҡобайырҙар сығарҙы (Р. Ғарипов, Б. Рафиҡов, Ғ. Хөсәйенов, Р. Түләк, Р. Бикбаев, Ҡ. Аралбаев, Р. Байымов, Ә. Таһирова, С. Әбүзәров һ.б.). Былар барыһы ла, ысынлап та, заман һәм заң, тарих талабы булды. Һәм, әйтелгәнсә, мәҙәниәтебеҙ заман, ваҡыт ҡуласаһы законлыҡтарына буйһоноп, әлеге лә баяғы художестволы мәҙәни универсалийҙары сиктәрендә үҫешә килде һәм үҫешәсәк тә. Был юҫыҡта милли йөҙөбөҙҙө, милли аңды, мәҙәни индивидуаллекте юғалтырға ярамай, әлбиттә.

Тимәк, башҡорт әҙәбиәтен дә ошо мәҙәни универсалийҙар системаһында ҡарағанда, унда ла шулай уҡ башҡа халыҡтар әҙәбиәтенең тарихынан билдәле булған дөйөм күренештәрҙе күҙәтергә мөмкин. Тормошто бөтә ысынбарлығында сағылдырған әҙәбиәттең дә билдәле законлыҡтарға буйһоноуын иҫбатларға кәрәкмәйҙер. Милли әҙәбиәтебеҙҙе лә ошо мәҙәни, художестволы универсалийҙар системаһында, комплекслы тикшереү юлына ярашлы культурология фәне методтарын да йәлеп итеп ҡарағанда, унда ла шулай уҡ башҡа халыҡтар әҙәбиәтенең дөйөм күренештәрен күҙәтеп, уртаҡлыҡтар һәм үҙенсәлекле айырмалыҡтарҙы ла асыҡларға мөмкин булыр ине.

Ниндәй генә әҙәбиәтте алмайыҡ, художестволы әҫәр ни тиклем феноменаль юғары кимәлдә яҙылмаһын, ул юҡ-юҡ та башҡа әҫәр менән интертекст бәйләнешенә инә ала. Дөйөм мәҙәниәт күҙлегенән ҡараған тикшеренеүсе ғалим да, тәжрибәле уҡыусы ла был әҫәр тексында интертекст бәйләнешен күрергә һәләтле, дөрөҫөрәге, ниндәйҙер һылтанманы

[27] *Хөббитдинова Н.Ә.* XIX быуат аҙағы – XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә фольклор традицияларының художестволы сағылышы. – Өфө: Ғилем, 2013. – 37–38-се бб.

интуитив рәүештә һиҙемләй, ҡасандыр ошоға оҡшаш күренеште күреүен, ишетеүен иҫләй. Символ рәүешендә, художестволы образлылыҡ булараҡ файҙаланылған әҫәр «прецедент» текст тип атала. Ул берәй художестволы әҫәр йәки халыҡ ижады әҫәре – миф, әкиәт, эпос, риүәйәт, легенда һ.б. булыуы ихтимал. Әлеге китапта ошо ике төрлө прецедентлы тексты – әҙәби әҫәр менән фольклор әҫәрен билдәләп үтеп, уларҙың башҡа әҫәрҙәр менән булған интертекстың урынын, художестволы, идея-эстетик функцияһын билдәләп, асыҡлап үтеү маҡсаты тора ла инде. Һуңғараҡ осорҙа ижад ителгән әҫәрҙә прецедентлы әҫәр тулайым булмаһа ла, уның сюжеты, мотивы, образдары кеүек художестволы элементтарының, поэтик үҙенсәлектәренең сағылыуы, әҫәр нигеҙендә ятыуы мөмкин (мәҫәлән, сәсәндәрҙең ҡобайырҙарында прецедент булған Урал батыр образы, «Урал» йыры поэтикаһы иҫкә төшә йәки урта быуаттарҙа ижад иткән әҙип Насретдин Рабғузиҙың «Ҡиссаи Лоҡман Хаким» тигән әҫәрендә прецедент ролен үтәгән «Ерәнсә сәсәндең килен эҙләгәне» тигән әкиәт сюжетын һиҙемләргә мөмкин).

Әҙәби әҫәрҙе дөйөм мәҙәниәт кимәлендә интертекст күҙлегенән сығып тикшереү бығаса таныш булған (уҡылған, ҡаралған) «сит һүҙҙе» («чужое слово») һиҙемләп, уның яңыса бирелешен, вариативлығын күҙәтергә мөмкин. Әҫәр интертекст тыуҙырып, шуның менән үҙенең ситтәрен киңәйтә, пратекст – олотекстың дауам ителеүенә, прецедент образының камиллашыуына килтерә. Мәҫәлән, башҡорт шағиры Әнғәм Атнабаевтың «Яҡут иле күстәнәсе» тигән шиғырҙар шәлкеменә ингән «Һабантуйҙан ҡайтып киләбеҙ» әҫәренең аталышы уҡ тәжрибәле уҡыусыла Мостай Кәримдең «Һабантуйҙан ҡайтып киләм» шиғырына интертекст тыуҙыра. Кәримдең шиғырынан өҙөк килтереп, эпиграф итеп алыныуы был тойғоно көсәйтә төшә. Мостай Кәрим шиғыры иһә:

*Һабантуйҙан ҡайтып киләм…*
*Көн эҫеһе инде баҫылған.*
*Бөтә нәмәм теүәл, тик нишләптер*
*Кәпәс төшөп ҡалған башымдан*[28], –

тип башланып китә. Ошо моментты (бигерәк тә кәпәс образын) шаяртыу-шаярыуға әүәҫ булған Ә. Атнабаев эләктереп алып (тик Кәримдең кәпәсе урынына бында эшләпә телгә алынған):

[28] *Кәрим М.* Һабантуйҙан ҡайтып киләм // Поэмалар, шиғырҙар. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1985. – 95-се б.

*...Берәү генә башын ҡашып йөрөй –*
*Эшләпәһен төшөрөп ҡалдырған.*
*...Әйҙә, киттек, туған, беҙҙең менән,*
*Эшләпәңде эҙләп интекмә!*
*Хатта Мостайҙың да кәпәсе юҡ,*
*Беҙҙең башта инде юҡ күптән, –*

тип, алдараҡ тыуҙырылған пратекст функцияһын үтәгән Мостай Кәримдең шиғыры менән прецедентлы һабантуй һәм кәпәс образдарына төрттөрөп кенә ҡалмайынса, хатта шул теманы дауамлағандай итә.

Йәки А.Т. Твардовскийҙың «Василий Теркин» (газета варианты 1941–1945 йй. баҫтырыла) менән М. Кәримдең «Үлмәҫбай» (1942–1944 йй.) поэмаһы араһында ла байтаҡ текст-ара диалогты, интертекст бәйләнешен күҙәтергә мөмкин. Мәҫәлән, ике яҙыусыла ла «туй» төшөнсәһе урын алған. Шуныһы ҡыҙыҡ, рус авторында башҡортҡа таныш Һабантуй байрамы телгә алына. Уның художестволы кинәйәлелеге дошман менән булған яу, алыш мәғәнәһен асыуҙан ғибәрәт:

*...А кому из вас известно,*
*Что такое сабантуй?*
*– Сабантуй – какой-то праздник*
*Или что там – сабантуй?*
*– Сабантуй бывает разный,*
*А не знаешь – не толкуй,*
*Вот под первою бомбежкой*
*Полежишь с охотой в лежку,*
*Жив остался – не горюй:*
*Это малый сабантуй.*
*...Хуже, брат, как минометный*
*Вдруг начнется сабантуй.*
*...Но имей в виду, голубчик,*
*Это – средний сабантуй.*
*Сабантуй – тебе наука,*
*Враг лютует – сам лютуй.*
*Но совсем иная штука*
*Этот – главный сабантуй*[29].

[29] *Твардовский А.* Василий Теркин [Электронный ресурс]: URL: http://rubook.org...

М. Кәримдә иһә ул һабантуй булмаһа ла, ошо һүҙҙең тамырын тәшкил итеүсе «туй» төшөнсәһе телгә алына, һәм ул, тәүге ҡарамаҡҡа, ысын байрам мәжлесе булып сыға: йәнәһе лә «…Мир башы ҡыҙы немецка … кейәүгә сыға». Әммә поэмала артабан һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙан аңлашылыуынса, Үлмәҫбай менән уның яуҙаштары шартлатҡыстарҙы туй бүләге итеп билдәләп, «Туй бүләге ҡуйындарҙа», ти. Һәм дә кәрәкле ауылға етеп, мәжлес ҡунаҡтарын шулай итеп «һыйлайҙар»:

*…Эскә инеп, шат табынды*
*Ҡуҙғатырға «ҡыйманыҡ».*
*Туй бүләге менән өйҙөң*
*Дүрт мөйөшөн һыйланыҡ.*
*…Бер мәлде дүрт епте тарттыҡ –*
*Көл булып осто табын.*
*Ошонан да мәрәкәрәк*
*Туй буламы һуң тағы?*

Шулай ҙа геройҙарҙың күңелендә «Ҡыҙып ташламаныҡмы», «…туй йолаһын, Боҙоп ташламаныҡмы?» тигәнерәк «шик-шөбһә» тыуа. Әммә Теребай үҙенсә «аҡланыу» таба:

*«…Алйот, – ти Теребай, – туйҙа*
*Мылтыҡтан атыу була,*
*Һауыт-һаба шалтыратыу*
*Борондан ҡалған йола…»*[30], имеш.

Шулай итеп, А. Твардовскийҙың поэмаһында һабантуй образлы ҡулланыш тапҡан кеүек, бында ла туй ситләтеп һүрәтләнә. Дөрөҫ, ул тәүҙә тура мәғәнәһендә һүрәтләнә, һуңынан иһә күсмә мәғәнәлә ҡулланыла: дошман менән булған бәрелеш мажаралары Һабантуй байрамы итеп һүрәтләү аша еткерелә.

Ә инде ике авторҙа ла төп герой булып сығыш яһаусы шаян, отҡор, һүҙгә маһир һәм, шул уҡ мәлдә, ғәйрәтле совет һалдаты һүрәтләнә – ябай урыҫ егете Василий Иванович Теркин, башҡорттоҡонда – шулай уҡ ябай башҡорт егете Үлмәҫбай – «Урал батыр тоҡомонан…, …Большевик затлы егет». Тыуасаҡ һорауҙы алдан иҫкәртеп, шуны ла әйтер инек. Ике әҫәр араһындағы интертекст бәйләнештәрҙе, әлбиттә, плагиат һөҙөмтәһе тип ҡарау яҙыҡ булыр

[30] *Кәрим М.* Әҫәрҙәр: Шиғырҙар һәм поэмалар. – Өфө: Китап, 1995. – Т. 1. – 331–332-се бб.

ине. Мостай Кәримдең Үлмәҫбайы башҡорттарға халыҡ ижадынан таныш булған үҙе йор, сәсән телле, үҙе отҡор, шаян һәм сос Хужа Насретдин, Ерәнсә сәсән йәки Алдарҙы хәтерләтә, һәм ул шул яғы менән халыҡ күңеленә яҡын. Беҙҙә ошондай ассоциация тыуа һәм халыҡ ижады менән интертекст бәйләнеше булдырыла. Рус әҫәре геройы булған Василий Теркин иһә рус уҡыусыһында үҙ милли фольклорынан таныш булған шулай уҡ отҡор «алйот» (асылда, әкиәттәрҙә ул иң аҡыллыһы булып сыға) Иван йәки рус мужигы – ябай крәҫтиән образы менән яҡын. Рус халыҡ ижадында беҙҙең һәм башҡа төрки халыҡтары өсөн уртаҡ булған телгә алынған сифаттарға эйә булған традицион герой күҙәтелмәй. Шуның өсөн дә М. Кәримдең үҙ милләте геройына мөрәжәғәт итеп, уның уртаҡ сифаттарын ябай башҡорт совет һалдатына яраҡлаштырып, тотош халыҡ образын тыуҙырыуы менән ҡиммәтле. Унан һуң һуғыштың әсеһен дә, сөсөһөн дә татып, үҙ елкәһендә кисергән ике милләт әҙиптәре әҫәрҙәрендә әйтелеүенсә, яу ҡырында үҙ теркиндары, үҙ үлмәҫбайҙарының булыуы яҡшы билдәле, һәм улар булһа, һуғышыуы ла еңелерәк кеүек тойолғандыр. Шуның өсөн дә ошо ике поэманы яҡынайтып, улар араһында диалог тыуҙырыусы интертекст бәйләнешенең булыуына ғәжәпләнерлек түгел.

Художестволы текста күҙәтелгән интертекст бәйләнештәрен, мәҙәни универсалийҙы башҡа сәнғәт өлкәһендә лә күҙәтергә мөмкин. Был осраҡта әҙәби әҫәргә булған реминисценция әҙәби һүҙ мәҙәниәте сигенән сығып, кино сәнғәтенә хәтлем барып бәйләнеүе ихтимал. Мәҫәлән, алда телгә алынасаҡ Һ. Дәүләтшинаның «Айбикә» әҫәренең сюжеты менән «Мәскәү күҙ йәшенә ышанмай» («Москва слезам не верит») тигән совет кинофильмы ла, нисек кенә ғәжәп булмаһын, реминисценция тыуҙыра. Башҡорт повесын уҡып белгән кеше аталған кинофильмды ҡарағанда, таныш геройҙарҙы, оҡшаш яҙмыштарҙы, сюжет һыҙығын күреп, интуитив рәүештә оҡшашлыҡтар табыу һәләтенә эйә. Шулай уҡ башҡорт рәссамдары әҫәрҙәрендә «Йәншишмә» тип атала икән, шунда уҡ хәтерҙә мәшһүр «Урал батыр» эпосы, унда сағылған Йәншишмә образы ҡалҡып сыға. Йәки рус шағиры А. Вознесенскийҙың «ҡара фигура» тигән һүҙ бәйләнеше шулай уҡ К. Малевичтың «Ҡара квадрат» һүрәте менән интертекст тыуҙыра һ.б.

Шулай итеп, тәүге осраҡта милли әҫәр менән кино сәнғәте иҫкә төшөрһә, икенсе осраҡта эпик ҡомартҡы һынлы сәнғәттә дауамын

тапһа, өсөнсөһөндә иһә һынлы сәнғәт емеше, киреһенсә, һүҙ сәнғәте – поэзияла үҫешә һ.б. Ә инде был оҡшашлыҡтар, хәтирәләр йәки реминисценциялар художестволылыҡ яғынан ниндәй кимәлдә, ни тиклем оҫта сағылдырылған – был инде башҡа мәсьәлә. Тимәк, башҡорт мәҙәниәте лә ошо мәҙәни универсалийҙарының бер өлөшө булараҡ сығыш яһай.

Шулай итеп, бөтә донъя әҙәбиәтен фәнни яҡтан тикшергән төрлө ысулдар менән бер рәттән шулай уҡ дөйөм һаналған интертекстуаллек теорияһы ярҙамында башҡорт әҙәбиәтен дә анализлап ҡарау үҙен аҡлай. Сөнки, әйтелеүенсә, милли әҙәбиәтебеҙ донъя әҙәбиәтенең бер сағыу өлөшө булараҡ кешелек һүҙ сәнғәтен үҫтереүҙә, баҙыҡландырыуында башҡорт художестволы фекеренең дә, фольклорының да роле әйтеп бөткөһөҙ оло. Быны республикабыҙҙа 2021 йылда үткәреләсәк «Бөтә донъя фольклориадаһы» тағы берҙе раҫлай кеүек. Сығанаҡ ҡайҙа, шишмә лә шунда, тигәндәй, халыҡ ижады ҡайҙа, художестволы һүҙ сәнғәте лә шунда. Фольклор поэтикаһын һаҡлауҙа роле байтаҡ булғанлыҡтан, тотош илебеҙ өсөн мөһим мәғәнәгә эйә булған был сара әҙәбиәт өсөн дә әһәмиәтле.

## Икенсе бүлек

# ХАЛЫҠ АУЫҘ-ТЕЛ ПОЭТИК ИЖАДЫ МЕНӘН ӘҘӘБИ ТЕКСТ БӘЙЛӘНЕШТӘРЕ: ХУДОЖЕСТВОЛЫЛЫҠ АСПЕКТЫ

Әҙәбиәттә фольклор традицияларының сағылыуын анализлау әҙәби әҫәрҙәрҙең художестволы үҙенсәлектәрен асыҡлау эшен бөгөн дауам итәбеҙ, был хаҡта монографиялар, төрлө йыйынтыҡтарҙа баҫтырылған мәҡәләләребеҙҙә яҡтырта килдек[31]. Әммә был бәйләнеште постмодернистик күҙлектән сығып, уның интертекст бәйләнештәрен байҡарға, ғөмүмән, милли әҙәбиәтте мәҙәни универсалийҙар фонында ҡарарға беренсе тапҡыр баҙнат ителде.

### 2.1. Урта быуат әҙәбиәте менән ауыҙ-тел ижады бәйләнештәрендә интертекстуаллек: художестволылыҡ аспекты (Й. Баласағунлы, С. Сараи әҫәрҙәре)

Төрки-башҡорт әҙәбиәтендә, ғөмүмән, дөйөм көнсығыш әҙәбиәтенә хас булғанса, халыҡ мәҡәлдәрен, тапҡыр һүҙен, әйтемдәрен хәтерләткән төрлө аҡыллы фәлсәфәүи сентенциялар, һүҙбәйләнештәр, йола булараҡ, поэтик алым, художестволы деталь рәүешендә файҙаланып килгән. Билдәле тюрколог А. фон Габен, боронғо төрки әҙәбиәте хаҡында һүҙ йөрөткәндә, «…Әгәр ҡульяҙмалағы берәй фекер дөйөм сентенция булараҡ килтерелә икән, тимәк, уның мәҡәл булыуы ихтимал», тигәйне[32].

Ошо фекерҙән сығып ҡарағанда, был әҙәби традиция Йософ Баласағунлының «Ҡутадғу билик» («Ҡот килтереүсе белем», XI б.)

---

[31] *Хөббитдинова Н.Ә.* Башҡорт әҙәбиәтендә фольклор (XIII–XIX бб.). – Өфө: Ғилем, 2005; *Шулай уҡ уныҡы.* XIX б. аҙағы – XX б. башы башҡорт әҙәбиәтендә фольклор традицияларының художестволы сағылышы (фольклор-әҙәби бәйләнештәр проблемаһына ҡарата). – Өфө: Ғилем, 2013.

[32] *Габен фон А.* Древнетюркская литература // Зарубежная тюркология / А.Н. Кононов (отв. ред.). – М.: Наука, 1986. – С.297–306.

ҡомартҡыһында уҡ сағылған. Унда осраған фәлсәфәүи, тәрән мәғәнәле фразалар – сентенциялар күпселек осраҡта шулай уҡ башҡорт халҡының мәҡәлдәрен дә хәтерләтә, йәғни уларға аллюзия йәки реминисценция тыуҙыра. Халыҡ афоризмдары әҙәби әҫәрҙә төрлөсә ҡулланылыусан. Улар әҫәргә йә туранан-тура инеп киткән, йә ситләтелеп, берәй фекер аша белгертелә, йәғни реминисценция булараҡ ҡабул ителә[33]. Быны Й.Баласағунлының телгә алынған әҫәрендә күрәбеҙ:

*...Белемһеҙ кешеләр – һуҡыр һаны,*
*Һуҡыр юлдан яҙһа, һүкмә уны!*

*Ятҡа изгелек ҡылһа, ялтырар ирҙең күҙе,*
*Ситкә изгелек ҡылһа, таралыр маҡтау һүҙе...*[34]

йәки

*Аҡыллы һүҙ төплө фекер булыр,*
*Ахмаҡ һүҙ – баштан яҙҙырыр.*

Был төплө фекерҙәр иһә беҙҙә «Абайламай һөйләгән – ауырымай үлгән», «Аҙ һүҙҙән мәғәнә сығыр, Күп һүҙҙән бәлә сығыр» йәки «Тел өсөн баш яуап бирер» кеүек мәҡәлдәрҙе иҫләтә, әҫәрҙә шуларға реминисценция тыуҙыра.

Туранан-тура мәҡәлдәргә һылтанғанда, Й. Баласағунлы «Халыҡта шундай мәҡәл бар», тип үҙ исеме менән әйтә. Быным менән ул теге йәки был аҡыллы фразаның, ысынлап та, халыҡ ижадынан алыныуын һыҙыҡ өҫтөнә алып билдәләгән[35]. Был осраҡта ла халыҡ мәҡәле йәки тапҡыр һүҙе әҫәрҙең художестволы туҡымаһына инеп китеп, уны фәлсәфә, тәрән мәғәнә яғынан байытҡан, тормошҡа яҡынайтҡан, шуның менән үҙендә һаҡлаған тәрбиәүи дидактиканы, әхлаҡи-этиканы тағы ла көсәйтеп ебәргән.

Халыҡ ижадынан туранан-тура килеп инеү менән ситләтелеп әйтелгән мәҡәл һәм әйтемдәргә реминисценцияны С. Сараиҙың телгә алынған «Гөлистан бит төрки» тигән хикәйәләр йыйынтығында ла

[33] *Медриш Д.Н.* Литература и фольклорная традиция. Вопросы поэтики. – Саратов, 1980. – С. 131.

[34] Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: ике томда: XIII–XVIII бб. – Өфө: Китап, 1999. Т. 1.– 18-се б.

[35] *Исламов Р.Ф.* Урта гасыр төрки шигърияте үсешендә Шәрифнең «Шаһнамә»се. – Казан: Фикер, 2001. – 150-нче б.

осратырға мөмкин. Ундағы хеҙмәтте һөйөү, һөнәргә өйрәнеү, белем эстәү, ғәҙел булыу кеүек тәрбиәүи-дидактикаға ҡоролған төрлө фәһемле хикәйәләрҙә шул уҡ мәғәнәләге, йүнәлештәге мәҡәл һәм тапҡыр һүҙҙәрҙе шәйләргә йәки туранан-тура күҙәтергә мөмкин. Уларҙа сюжетты тыуҙырыусы мотивтың теге йәки был мәҡәлгә, әйтем йәки тапҡыр һүҙгә һылтанма, реминисценция тыуҙырыуы күҙәтелә. Мәҫәлән, AT 654В тибындағы әкиәттәрҙең («Әминбәк», «Ҡарбуз», «Шакир» ише башҡорт йәки «Егеткә етмеш сәнғәт тә аҙ» тигән үзбәк әкиәттәре) сюжеты асылда башҡорт һәм башҡа халыҡтарға таныш булған «Егет кешегә етмеш ете төрлө һөнәр ҙә аҙ» тигән мәҡәлде хәтерләткән мотивҡа ҡоролған. Былдай әкиәттәрҙә, ғәҙәттә, герой үҙенең ϲослоғо һәм уңғанлығы арҡаһында төрлө һөнәргә эйә булып, аҙаҡ ана шул алған белеме уға төрлө сетерекле хәлдәрҙән имен-аман ҡотолорға ярҙам итә. Мәҡәлдең сәсмә фольклорҙа мотив ролен башҡарыуы хаҡында Ә.М. Сөләймәнов та билдәләгәйне. Быны ул «Ҡатыныңа ышанма, этеңә ышан» тигән мәҡәл миҫалында ҡарағайны. Ошо мәҡәл ғалим ҡараған новеллистик риүәйәт сюжетын тыуҙырыусы мотив функцияһын атҡара. Уның нигеҙендә ире өйҙә булмағанда, сит-ят баҫҡынсы яңғыҙ ҡалған бисәһен алып ҡасҡанда, ире быны белеп ҡалып, артынан баҫтырып барып, дошман менән алышҡанда, ҡатыны иһә бер ни ҙә ҡылмайынса ярҙам итмәйенсә (йәнәһе лә кем еңә – мин шуныҡы. – *Ә.С.*) ултырғанда, эте килеп хужаһына ярҙамға ташланып, ҡотҡарыуға ҡоролған нәсихәтле дидактик характерҙағы тормош-көнкүреш сюжетҡа ҡоролоусан. Ошо уҡ хәлде ғалим алтай халыҡ эпосы «Алтай-Буучай»ҙа ла күҙәтә. Тимәк, ҡайһы бер осраҡтарҙа мәҡәлдәр сюжетты ойоштороусы (сюжетообразующий) мотив функцияһын дә үтәүсән[36]. Былдай темаға ҡоролған әкиәттәр башҡа төрки халыҡтарында ла юҡ түгелдер, әммә нигеҙҙә ятҡан мәҡәл ошо халыҡтар мәҙәниәте универсалийын тәшкил итеүе бәхәсһеҙҙер.

Ошондай уҡ оҡшаш хәлде С. Сараиҙың хикәйәләрендә лә осратабыҙ. Мәҫәлән, уларҙың береһендә солтандың береһе оҙон, икенсеһе ҡыҫҡа буйлы ике улының булыуы хаҡында бәйән ителә. Кесе улының шулай бәләкәй буйына ҡарап, атаһының ризаһыҙлыҡ белдереүенә ул: «Эй ата, оҙон буйлы ахмаҡтан ҡыҫҡа буйлы ғаҡыл яхшыраҡ торор» тип, фәһемле фекерҙе еткерә. Малайҙың ауыҙынан сыҡҡаны «Шуныса

[36] *Сулейманов А.М.* Некоторые сходные и отличительные особенности башкирских и алтайских эпосов [Электронный ресурс]: URL: http://bash-portal.ru.

буй биргәнсе, аҡыл бирһәсе», «Буй менән түгел, уй менән», «Буйың менән маҡтанма, Аҡылың менән маҡтан» ише һ.б. мәҡәл һәм әйтемдәрҙе хәтерләтә, шулар менән интертекст бәйләнешкә инә. Тимәк, бында ла халыҡ мәҡәле әлеге хикәйәнең сюжетын тыуҙырыуҙа мотив функцияһын үтәп килә. Һәм Сараиҙың был хикәйәләр йыйынтығында быға миҫалды байтаҡ табырға мөмкин, сөнки әҫәрҙәрҙең үҙҙәре үк тәрән тәрбиәүи-дидактик, өгөт-нәсихәт идеяларына ҡоролоп, был өгөттәр «ғибрәтле хәл-ваҡиғаларҙы һәм фәһемле күренештәрҙе һүрәтләү аша атҡарылған»[37]. Авторҙың интуитив рәүештә шулай халыҡ ауыҙ-тел ижадының афористик жанрына мөрәжәғәт итеүе ихтимал.

Әйтергә кәрәк, халҡыбыҙҙың әйтемдәренә ҡарата тыуҙырылған аллюзия менән реминисценциялар һуңынан Ш. Зәки, Ғ. Соҡорой, М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев, Р. Фәхретдинов, С. Яҡшиғолов, М. Ғафури, Ш. Әминев-Тамъяни кеүек һәм башҡа әҙиптәребеҙ, сәсәндәребеҙ ижадында ла, унан һуң да байтаҡ файҙаланылыуы билдәле. Уларға авторҙар туранан-тура ла (аллюзия), ситләтеп (имплицив), образлы һылтанма аша ла мөрәжәғәт итте. Төрлө тарихи осорҙа, төрлө сәйәси-иҡтисади ҡоролоштарҙа ла был бәйләнештәр форма һәм идея-эстетик йөкмәтке, йүнәлеш яғынан үҙгәреп, яңыра, тулылана барҙы.

### 2.2. Тәүҙә Ҡөрьән сүрәһе – шунан әҙәби әҫәрме, әллә әкиәтме? (Насретдин Рабғузиҙың «Ҡиссас әл-әнбийа»һына ҡарата)

Урта быуат көнсығыш әҙәбиәтендә пәйғәмбәрҙәр, дин әһелдәре, изге әүлиәләр тураһындағы әҫәрҙәр шаҡтай күп ижад ителгән. Мәҫәлән, X–XI бб. ғәрәптәр араһында Мөхәммәт бине Жәрир әт-Табариҙың «Тарих әр-рәсүл вә әл-мөлөк» («Пәйғәмбәрҙәр һәм батшалар тарихы») тигән китабы киң таралған булған. Ислам дине киңерәк даирәләргә, илдәргә таралған һайын, бындай китаптар ҙа башҡа телдәргә, шул иҫәптән төрки теленә, тәржемә ителеп, шулар нигеҙендә ижад ителгән яңы төр әҫәрҙәр тыуҙырылып, таралған[38].

Революцияға тиклем башҡорт һәм татар халыҡтары араһында XIV б. әҙибе Насретдин Рабғузиҙың «Ҡиссас әл-әнбийа» («Пәйғәмбәрҙәр хаҡында ҡиссалар») йыйынтығы киң таралған булған.

[37] Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: XIII–XVIII бб. / Төҙ., баш һүҙ авт. Нәҙерғолов М.Х., Хөсәйенов Ғ.Б. – Өфө: Китап, 1999. – 148-се б.

[38] Шунда уҡ. – 54-се б.

Ғалимдарҙың дөрөҫ билдәләүенсә, «Ҡиссас әл-әнбийа»лә әҙәби традициялар ғына үҙләштерелеп ҡалмаған, үҙе лә әҙәбиәт менән ауыҙ-тел халыҡ ижадына йоғонто яһаған. «Ундағы сюжеттар һәм мотивтар унан һуң ижад ителгән күп әҫәрҙәрҙә лә урын ала»[39], йәғни үҙенән һуң барлыҡҡа килгән әҫәрҙәр, хатта ки халыҡ әкиәте менән интертекст бәйләнеш тыуҙыра.

Башҡорт халыҡ ижадында «Ерәнсә сәсәндең килен эҙләгәне» тигән новеллистик әкиәттең булыуы билдәле. Аталышынан уҡ күренеүенсә, унда һүҙ халыҡта үҙенең хәйләкәрлеге, аҡылы һәм йор, тос һүҙле булыуы менән киң таныулыҡ тапҡан әкиәт һәм көләмәстәр геройы Ерәнсә сәсәндең ауылдан-ауылға йөрөп, улына кәләш эҙләүе хаҡында бара. Кәләш йәшенә еткән ҡыҙ йәшәгән һәр йорт алдында улын туҡмай башлай икән. «Ни эшләп улыңды туҡмайың?», – тигән һорауға атай кеше: «Әйткәнде генә тыңлап эшләй», – тигән, ти. «Тыңлап эшләгән өсөн туҡмайҙармы ни?.. Тыңлаусан булғас, аҡыллы бит ул…», – тигән яуап ишетһә, был тирәнән китә һала икән. Шулай малайын туҡмап кәләш һайлай торғас, был ауылдан уңманыҡ, тип китеү яғына ыңғайлап, ситтәге бер өй алдына килеп етә. Унда ла йәш ҡыҙ бар икән. Һуңғы тапҡыр бәхет һынап ҡарайыҡ, тип, Ерәнсә йәнә улын туҡмай башлай. Баяғы һорауҙы ишетеп, әлеге яуабын әйткәс, тәҙрә аша ғына башын тығып ҡарап торған ҡыҙыҡай: «Туҡма, туҡма… егет булып еткән, һаман кеше ҡушҡанды эшләй, үҙ аҡылы менән эш итергә тейеш инде…», – тигән аҡыллы һүҙҙәрҙе ишеткән атай кеше, шунда уҡ ул ҡыҙҙы әйттереп ҡайтҡан, ти.

Ошо әкиәт сюжеты һүҙмә-һүҙ тиерлек Н.Б. Рабғузиҙың «Ҡиссас әл-әнбийа»һына ингән «Ҡиссаи Лоҡман Хаким» өлөшөндә ҡабатлана, тик төп герой Ерәнсә сәсән урынына изге Ҡөрьән-Кәримдә телгә алынған пәйғәмбәр Лоҡман Хаким хәрәкәт итә. Тик Ҡөрьән сүрәһендә күберәк тәрбиәүи-дидактик һыҙаттар өҫтөнлөк итһә, Рабғузиҙа иһә – новеллистик. Әҫәр шуның менән, әҙәби ижадҡа хас булғанса, художестволы үҙенсәлектәр менән байыҡтырылған. Тимәк, был әҫәрҙә халыҡ әкиәтенә ҡарата туранан-тура эксплицив реминисценция күҙәтелә. Ҡасандыр ижад ителгән халыҡ әкиәте хәҙер килеп әҙәби ижад емешенең нигеҙендә ятҡан кеүек күҙҙалана. Әммә бында бөтәһе лә шулай ябай ғына түгел әле, бында бер хикмәт бар.

[39] Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: XIII–XVIII бб. 148-се б.

Хикмәттең асылы шуларҙан ғибәрәттер. Бер яҡтан, Лоҡман Хаким изге пәйғәмбәр булһа, икенсе яҡтан, Ерәнсә сәсән ҡәҙимге кеше, өҫтәүенә тарихта билдәле шәхес. М. Буранғолов, Ғ.Б. Хөсәйенов, М.Х. Иҙелбаев Ерәнсә сәсәндең тап шулай тарихи шәхес булыуын танныйҙар һәм унын 1730 йылда Абулхаир хан хаким иткән осорҙа йәш егет булыуын билдәләйҙәр[40]. Ҡаҙаҡ ғалимы Е.Д. Торсоновтың фекеренсә, Ерәнсә сәсән – Жиренше шешен XV быуатта Йәнебәк хан йәшәгән осорҙа ғүмер һөргән тарихи шәхес[41]. Башҡорт экиәттәренең береһендә, ысынлап та, Ерәнсә сәсән Йәнебәк хан менән бергә телгә алына[42]. Ә башҡорттарҙың Юрматы ырыуы шәжәрәһе буйынса, Йәнебәк хан Аҡһаҡ Тимерҙең (1336–1405) замандашы булараҡ тасуирлана[43], ә «Тора хан, Йәнебәк хан менән Ерәнсә сәсән» башҡорт халыҡ новеллистик экиәтендә – Тора хандыҡы. Ул шулай уҡ башҡорт Ҡырағай-Ҡыпсаҡ ырыуының бабаһы ла. Р.Ғ. Күзеевтең «Тем не менее, он представляет немалый интерес с точки зрения изучения истории Башкирии XIV–XV вв.»[44] тигән фекере менән килешәбеҙ.

Тимәк, Р.Б. Рабғузи әҫәрендә сағылған сюжетта төп герой Лоҡман Хаким урынында Ерәнсә сәсән дә хәрәкәт итә алған. Билдәле сюжет әҙәбиәткә халыҡ ижадынан килеп ингәнме, әллә, киреһенсә, әҙәбиәттә Р.Б. Рабғузи әҫәренән халыҡ араһына төп геройы алмашынып таралғанмы, тигән һорау баяғы хикмәттең серен көсәйтә кеүек. Икенсе төрлө әйткәндә: текстарҙың (йәғни сюжеттың) ҡайһыһы ҡайһыһына һылтанып, асыҡ аллюзия тыуҙырған һуң?

Был һорауға яуап табыр өсөн, бәлки, Лоҡман Хакимдың үҙенә мөрәжәғәт итергә кәрәктер?

Лоҡман Хаким боронғо ғәрәп экиәттәре, легенда һәм латифаларында үлемһеҙ аҡыл эйәһе булараҡ төҫмөрләнә. Һуңғараҡ,

---

[40] *Буранғолов М.* Сәсән аманаты / Төҙ., баш һүҙ авт. Б. Байымов. – Өфө: Китап, 1995. – 244-се б.; *Хөсәйенов Ғ.Б.* Заман, әҙәбиәт, әҙиб. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1978. – 53-сө б.; *Иҙелбаев М.Х.* Боронғонан аманат. – Өфө: Китап, 2007. – 244-се б.

[41] *Турсунов Е.Д.* Генезис казахской бытовой сказки. – Алма-Ата: Наука, 1973. – С. 188.

[42] Башҡорт халыҡ ижады; Новеллистик экиәттәр / Төҙ., баш һүҙ, комм. авт. Ә.М. Сөләймәнов. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1981. – Т. 4.

[43] Башкирские шежере / Сост., пер. текстов, введен. и коммент. Р.Г. Кузеева. – Уфа: Башкнигоиздат, 1960. – С. 31, 53, 180, 200.

[44] Там же. – С. 199.

ти, ғалим М.Б. Пиотровский, ул Ҡөрьәндәге изгеләр рәтенә индерелгән[45].

Тимәк, Р.Б. Рабғузиҙың «Ҡиссас әл-әнбийа» әҫәренә ингән «Ҡиссаи Лоҡман Хаким» сюжеты боронғораҡ булыуы ихтимал. Ваҡыт үтә килә, Башҡортостан ерлегендә ереккән дини әһелле сюжет тора-бара, төрлө ижтимағи-сәйәси үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә шулай уҡ үҙгәреш, яңыса уҡылышын (новое прочтение) кисергән. Изге затты хәҙер (заман башҡа заң башҡа, тигәндәй) үҙенең аҡылы, ғәҙеллеге, ярлы-ябаға яҡлы булыуы менән халыҡта дан ҡаҙанған, йәғни халыҡ күңеленә, рухына яҡыныраҡ булған шәхес Ерәнсә сәсән алыштырған. Шулай итеп, билдәле легендар шәхес тора-бара үҙе халыҡ рухы емешенә әйләнеп, ауыҙ-тел поэтик ижадына, дөрөҫөрәге, новеллистик әкиәттәрендә һәм тормош-көнкүреш көләмәстәрендә герой булып кәүҙәләндерелә. Шуның менән халыҡтың мәҙәни антропологикаһы образына яраҡлаштырыла. Тимәк, нисек кенә булмаһын,улына кәләш эҙләүсе герой хаҡындағы сюжет барыбер башлыса халыҡ ижады емеше булып сыға.

Тик шуныһын да оноторға ярамай. Новеллистик әкиәттәр үҙҙәре үк килеп сығышы менән тарих төпкөлөнә барып тоташа. Тормош-көнкүреш әкиәттәре жанрының бер төрө булараҡ, новеллистик әкиәттәр, ғалимдар фекеренсә, әле боронғо Мысырҙа (б.э.т. V б.) билдәле булған, сюжеттары боронғо һинд әҫәре «Махабхарата»ға ингән (б. э. т. VI–V бб.), уларҙың типологик оҡшашлыҡтарын башҡорт халыҡ әкиәттәрендә лә күҙәтергә мөмкин[46].

Әйтергә кәрәк, Лоҡман Хаким образы үҙе лә башҡорт халыҡ ижадында сағылған герой. Уның хаҡында шулай уҡ «Лоҡман Хаким» тигән новеллистик әкиәттең дә булыуы билдәле. Рабғузиҙың әлеге әҫәрҙәре араһында ошо әкиәттең сюжеты эксплицив интертекст бәйләнешкә ингән һәм әҙәби әҫәрҙә художестволы эшкәртелеп, төп герой функцияһын үҙе атҡарған.

Бында, шулай итеп, әҙәбиәттә фольклорға, Ҡөрьәнгә һылтаныуҙың, тура реминисценцияның урын алыуы күҙәтелә. Быға фольк-

[45] *Пиотровский М.Б.* Коранические сказания. – М.: Наука, 1991. – С. 150.

[46] Башҡорт халыҡ ижады: Бытовые сказки / Сост. А.Сулейманов, авт. коммент. Л.Бараг и А.Сулейманов. – Уфа: Башкнигоиздат, 1990. – Т.5.– С. 5–13; *Соловьев Н.А.* «Человек чувства» или Макензи против Стерна // Вестник Московского университета. Филология.– 2004. – № 1. – С. 7–18.

лор традициялары ла, яҙыусынаң ижади һәләте лә, Ҡөрьән тәфсирҙәре лә булышлыҡ иткәндер. Был осраҡта билдәле сюжет тәү осраҡта фольклор емеше, һуңынан әҙәби фекер кимәлендә художестволы эшкәртелгән, йәки, киреһенсә булған, тип өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын. Сөнки бында өсөнсө яҡ – Ҡөрьән-Кәрим менән урта быуаттарҙа таралған пәйғәмбәрҙәр хаҡындағы әҙәби традицияларҙың тороуын да онотоорға ярамай. Был осраҡта изге китапҡа ла һылтанма тыуа. Насретдин Рабғузиҙың әҫәре башҡорт әҙәбиәтендә ошо халыҡ әкиәте һәм Ҡөрьән менән интертекст бәйләнешенә инеп, шуның ярҙамында образдың семантикаһына асыҡ индерелеүе менән ҡыҙыҡлы.

Башҡорт әҙәбиәтендә халыҡ ижады традициялары менән интертекст бәйләнештәре әҙәбиәтебеҙҙә артабанғы йылдарҙа, быуаттарҙа ла күҙәтелә.

### 2.3. XIX быуат аҙағы – XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә интертекстың урын алыуы

XIX б. аҙағы – XX б. башында милли уҙаң, фекер көсәйеп, тыуған тел сафлығы өсөн ынтылыш һәм көрәш барған бер мәлдә, башҡорт әҙәбиәтендә «реалистик ижад принциптары нығына башлап», уның «идея-художество йөҙөн билдәләр төп ижад методына әүерелгәндә»[47], ысынбарлыҡты художестволы яҡтыртҡанда, шағирҙар халыҡ ижадына мөрәжәғәт итеүен дауам итте. Әҫәрҙәрендә улар фольклор традицияларын туранан-тура, ап-асыҡ эксплицив һәм йәшерен, күсмә, имплицив формала ҡулланды. Быға тик ана шул халыҡ ижады менән таныш булған кеше генә төшөнә ала, әлбиттә. Күпселеге ауылдан, крәҫтиән ғаиләһенән сыҡҡан яҙыусылар халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады өлгөләре – әкиәт, көләмәс, легенда һәм риүәйәт, йыр-моң, ҡобайырҙы сәңгелдәктән ишетеп, әсә һөтө менән һеңдергәнгә күрә, фольклор традицияларын интуитив кимәлдә тәбиғи художестволы ҡулланған, шуның менән, фән теле менән әйткәндә, фольклор менән әҙәби фекер араһында интертекст бәйләнешен нығытҡан.

Ҡаралған осор әҙәбиәтендә уңышлы яҙышҡан һәм «бөтә Урал-Волга буйҙары төрки поэзияһының ниндәй ҡатмарлы юлдар менән үҫеүен, үҙенең ҡаршылыҡлы тәбиғәтен шаҡтай асыҡ күҙ алдына баҫтырыуға булышлыҡ иткән сағыу ижад өлгөләренең береһе

---

[47] *Кунафин Ғ.С.* XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең идея-художество үҙенсәлектәре. – Өфө: Ғилем, 2016. – 5-се б.

булған» Һибәтулла Салиховтың да (1794–1857) әҫәрҙәрендә фольклор, дөрөҫөрәге, әкиәт менән интертекст бәйләнешенең өлгөһө күҙгә салына[48].

Башҡорт халыҡ ижады, билдәле булыуынса, әкиәт мираҫына бик бай. Уның хайуандар, батырҙар тураһында, тылсымлы, тормош-көнкүреш әкиәттәре менән бер рәттән иҫәрҙәр, диуаналар хаҡындағы юмористик әкиәттәре үтә лә ҡыҙыҡлы. Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәрен төплө тикшергән ғалим Ә.М. Сөләймәнов билдәләүенсә, «…иҫәрҙәр тураһындағы әкиәттәр менән таныша башлаһаң, иң элек шул күҙгә ташлана: уларҙың геройы, кеше булараҡ, изге ниәтле, яҡшы күңелле кеше. Үтенгәнде, мөрәжәғәт иткәнде көтөп тормаҫ, үҙе белеп ярҙамға килер ундайҙар»[49]. Шулай уҡ, үтә ныҡ ахмаҡлығы арҡаһында кеше ышанмаҫлыҡ көлкөлө хәлдәргә тарый: ул йәнһеҙ әйберҙе йәнле итеп, йә кеше, йә башҡа зат итеп ҡабул итә («Йорттотмаҫ кейәү»); бер осраҡта тәғәйен кәңәште бөтөнләй икенсе осраҡта ҡуллана («Бер туған өс иҫәр»); ҡушылған эште гел киреһенсә эшләй («Алйот ағайҙар») һ.б.[50]

«Бер туған өс иҫәр» тигән әкиәт, мәҫәлән, төрлө сюжет мотивтарына, йәғни сюжеттар контаминацияһына ҡоролған. Шулар араһында беҙҙе ҡыҙыҡһындырғаны – (АТ 163 А) «Маңлайға ҡунған күгәүенде таш менән бәреп үлтереү» тибындағы мотивҡа нигеҙләнгән сюжетлыһы. Ә.М. Сөләймәнов, бындай төр әкиәттәрен тикшергәндән һуң, уларға: «…тыныс торған әйберҙәр – уның (иҫәр) өсөн ҡәрҙәш… (мәҫәлән, «Йөҙөүсе таҙ», «Баҙарсы таҙ»), ә хәрәкәттәгеләре – дошман, ят бауыр булып тойола (мәҫәлән, «Йорттотмаҫ кейәү»). Шунан сығып тәүгеләренә булыша, икенселәре менән сайма-сай алыша» ише үҙенсәлектәр хас, тигәйне[51]. Шулар араһында һуңғы төркөмгә үрҙә телгә алған «Маңлайға ҡунған күгәүенде таш менән бәреп үлтереү» мотивына ҡоролған сюжетлы әкиәтте лә индерергә мөмкин. Унда һүҙ өс ағалы-ҡустылының ҡылған ахмаҡлыҡтары хаҡында бара: урманда утын ҡырҡып йөрөгәндә,

[48] *Ҡунафин Ғ.С.* Замандарҙың рухи балҡышы. Әҙәбиәт теорияһы, тарихи поэтика… (с. 127). – Өфө: Китап, 1996.

[49] *Сөләймәнов Ә.М.* Әкиәттә хәҡиҡәт: Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәренең жанр составы, сюжет төрлөлөгө, тормош ерлеге. – Өфө: Китап, 1997. – 294-се б.

[50] Шунда уҡ.

[51] Шунда уҡ. – 295-се б.

уларҙы ҡош булып күренгән күгәүен һырып ала. Иң кеселәре был хәлдән былай итеп сыға. Ул өйгә ҡайта һалып атаһына: «Урманға ҙур-ҙур ҡоштар килгән. Улар утын әҙерләтмәй, килә лә суҡыйҙар, килә лә суҡыйҙар. Мин шулар менән һуғышам», – тип, суҡмарын алып китә. Йәғни маҙаға тейеп һырып талаған күгәүендәр ат башындай ҡош булып төҫмөрләнә, тимәк, улар зыян ҡыла, шуға ла уларҙы юҡ итергә кәрәк булып сыға.

Урманға килгәс, ағаларының маңлайҙарына ҡунған күгәүендәрҙе бер-бер артлы суҡмары менән һуғып, туғандарын үлтереп бөтә[52].

Ошо комик ситуация, дөрөҫөрәге, «Маңлайға ҡунған күгәүенде таш менән бәреп үлтереү» мотивы Һ. Салиховтың «Мәжмәғәл-әдәп» исемле әҫәрендә лә осрай, йәки, икенсе төрлө әйткәндә, экиәт сюжеты менән интертекст бәйләнеш тыуҙырылған, экиәт тексы бында прецедентлы текст функцияһын да атҡара. Яҙыусы әҫәренән мәғлүм булыуынса, сәфәргә сыҡҡан ике юлсы ял итергә туҡтай. Береһе йоҡоға тала, икенсеһе иһә уның йоҡоһон һаҡлап ултыра. Шул саҡ йылан килеп сыға. Әммә һаҡта тороусы уға тейергә ҡурҡа һәм: «Саҡһа, үлтерермен, саҡмаһа, үлтермәҫмен, үҙ юлында булыр», – тип, тик ултырыуын белә. Йылан саҡмай, артабан китеп бара. Бына йоҡлап ятҡан юлдашының маңлайын себен баҫа. Был юлы иһә юлсы юғалып ҡалмай:

*«Ғәжәп дошман, имеш, – дир, – бу кешегә».*
*Ҡулымда булмады ғөрзөм (суҡмар), буңа кәш (үкенес),*
*Тороп әленә алды бер олуғ таш.*
*Килүбән орды туғры ул күҙенә –*
*Күҙе бәс әйләнеп чыҡты йөҙөнә*[53].

Йәғни, экиәттәгесә, юлдашының маңлайын һырып алған себенде үлтерәйем тип, уның күҙен сығарып ҡуя:

*Ғобар (туҙан) күрсә, хисап идәр зөбабә (себен),*
*Зөбабә исә сайырлар бер ғиҡабә (ҡарағош), –*

тип, экиәт ахмағының күгәүенде ҡоштай күргән кеүек, бында ла иҫәргә себен ҡарағоштай күренеүе хаҡында һүҙ йөрөтә автор.

---

[52] Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр / төҙ. Ә.М. Сөләймәнов. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1983. 5-се кит. – 10-сы б.

[53] *Салихов Һ.* Ике ахмаҡ // Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: XIX б. / Төҙ. Ғ. Хөсәйенов, М. Нәҙерғолов, З. Шәрипова. – Өфө: Китап, 2007. 2-се том. – 188–291-се бб.

Артабан был юлдаштар үҙ-ара низағлашып, бер-береһенең ғәйебен табыр өсөн, дөрөҫлөк эҙләп сығып китә һ.б.

Тимәк, идея-тематик мөһимлеге йәһәтенән әкиәттә борондан йәшәп килгән әхлаҡи-этик проблема һәр заманда ла актуаль булып, XIX быуатта ижад иткән Һ. Салиховтың әҫәрендә лә көнүҙәк булараҡ яңғыраған «Маңлайға ҡунған күгәүенде таш менән бәреп үлтереү» мотивы тәрбиәүи идея-эстетик функция үтәп килеп, сюжетты мауыҡтырғыс үҫтереүгә лә ярҙам иткән. Икенсе яҡтан, әйтелгән мотив тибына ҡоролған әкиәт шулай уҡ ҡаралған осор әҙәби әҫәре менән интертекст бәйләнешенә инеп, эксплицив реминисценцияны тыуҙырған. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, боронғо традицияларҙан, халыҡ ижады хазинаһынан йәм һәм тәм алған әҫәрҙең төп мәғәнәһе, структураһының тәбиғәте, поэтик асылы асыҡлана.

Билдәле булыуынса, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадына кинәйәлек, образлы фекерләү һәм һүрәтләү кеүек художестволы үҙенсәлектәр хас. Уларҙа тәрән мәғәнәле мәҡәл һәм әйтемдәр кеүек тапҡыр һүҙҙәр ярылып ята. Һәм улар «изге һүҙ, ҡиммәтле аманат булып, быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргәсә килеп еткән». Ауыҙ-тел ижадында тапҡыр һүҙҙәр, иң әүәл, «теге йәки был фекерҙе көсәйтеү, раҫлау йә булмаһа кире ҡағыу» ролен башҡара, тип билдәләп үткәйне Ф.А. Нәҙершина[54]. Әҙәбиәттә лә халыҡ ижадының был үҙенсәлекле афористик жанры билдәле бер мөһим художестволы вазифа атҡарып, ошо функцияларына тоғро ҡалған, шуға ла автор ижадында урын алған тапҡыр һүҙҙәр һәм афористик һүҙбәйләнештәр ана шул халыҡ мәҡәл һәм әйтемдәре менән ауаздашлыҡты, интертекст бәйләнеште булдырған. Был йәһәттән тел һәм һүрәтләү сараларына бай йөкмәтке, мәғәнә һәм идея яғынан тәрән һәм киң ҡоласлы булған М. Аҡмулла (1831–1895) шиғырҙарында ла ошо күренештәрҙе күҙәтергә мөмкин:

*Яҡшы әҙәмдә ҡон булмаҫ,*
*Яман әҙәмдә моң булмаҫ.*

йәки

*«Беләм» – мең һүҙ, «белмәйем» – бер һүҙ, –*

тип, ябай ғына һүҙҙәр менән тәрән мәғәнәле фекерҙе кинәйәле итеп оҫта биреүгә өлгәшә ул[55].

---

[54] *Нәҙершина Ф.А.* Халыҡ хәтере. Өфө: Ғилем, 2006. – 5-се б.

[55] *Аҡмулла.* Шиғырҙар / Төҙ., баш һүҙ авт. Ә.Х. Вилданов. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1981. – 69-сы б.

Аҡмулланың «Урыным – зиндан» тигән шиғыры үҙендә халҡыбыҙҙың әлеге афористик жанрҙарын, шағирҙың үҙ тормошонда туплаған тәжрибәләрҙән сығып әйтелгән фәлсәфәүи фекерҙәрҙе тәшкил итә. Хат формаһында яҙылған был шиғыр композицион төҙөлөшө яғынан да үҙенсәлекле. Уның тәүге өлөшө лирик геройҙың зинданда ауыр шарттарҙа яфа сигеп ултырыуы, шул йәһәттән тыуған хистойғолары тасуирлана:

*Ҡатыҡһыҙ ҡара өйрә – эскән ашы,*
*Эскәндә тамсылай күҙҙең йәше ...*

Артабан шағир ҡайғы-хәсрәткә бирелеп, ғәйепһеҙҙән нахаҡҡа рәнйетелгән милләттең аҫыл заттары – шәхестәренең һәләк булыуы хаҡында әсенә:

*Һәр кемгә бер сәбәптән афәт булған,*
*Яҡшыға булһа тағы – нахаҡ булған:*
*Ҡарышҡан бер солтанға ҡаршы кешең,*
*Хибестә (зиндан) Имам әғзәм вафат булған*
(«Урыным – зиндан»)

Поэтиклаштырылған ошо фекерҙәрен сәсән телле шағир «Алтынға тут ҡунмаҫ, яҡшылыҡ онотолмаҫ», «Ғәҙеллек менән золом бер ерҙә йәшәмәҫ», «Дуңғыҙ дуңғыҙ булып ҡала, ҡондоҙ була алмай» кеүек мәҡәлдәр менән ауаздаш сентенциялар ярҙамында дөйөмләштергәндәй итә:

*...Яҡшыны, һүккән менән, аты китмәҫ,*
*Яман һүҙҙең күңелдән таты китмәҫ.*
*Саф алтынды нәжескә буяу менән,*
*Нәжес китәр, алтындың заты китмәҫ.*
*Ҡыйыш уҡ, атҡан менән, тура китмәҫ,*
*Күңелдән яман һүҙҙең ҡуры китмәҫ.*
*Ҡоторған эт һауаға ҡарап өргән менән,*
*Асманда торған айҙың нуры китмәҫ.*

Шулай яҡшылыҡ – яманлыҡ, «изге һүҙ» – «зәһәр һүҙ» кеүек ҡапма-ҡаршы төшөнсәләрҙе, яҡшыны нисек кенә бысраҡ менән буямаһындар, яҡшы гел яҡшы булып ҡала, тигән тормошсан әхлаҡи күренештәрҙе шағир фольклорҙағыса образлы итеп күрһәткән[56]. Йәғни тормошта төрлө осраҡта була торған хәлдәрҙе оҫта телле сәсән

[56] *Аҡмулла*. Шунда уҡ. – 70-се б.

һәм шағир халыҡ ижадының традицияһына эйәреп, уны үҙенсәлекле тапҡыр һүҙ итеп поэтиклаштыра, шуның менән асылда халыҡ ижады менән аллюзиялы бәйләнеш тыуҙырҙы. Әҫәренең ахырында автор хатта уҡыусыларға, киләсәк быуын вәкилдәренә нәсихәт әйтеп ҡалдыра:

*Яҡшы һүҙ тыңламаҡҡа хуп, мөбәрәк,*
*Яҡшыға хоҙа – мәдәд [ярҙам], аҡыл – сәбәп.*
*Был һүҙем улаң түгел – бер нәсихәт ...*
*Яҙғаны – булмағаны фарсы, ғәрәп*[57].

Халыҡ ижадынан билдәле булыуынса, әкиәт, ҡобайыр һәм тапҡыр һүҙҙәр хас булған кинәйәлек Аҡмулланың ижадына ла хас, унда ла тәрән образлылыҡты күҙәтергә мөмкин:

*Яу ҡайтып, баш асылыр был ҡайғынан,*
*Шоңҡарҙан күҙен асҡан томананан.*
*Тотҡон булып, гәүһәрем юғалмаған:*
*Ул гәүһәр – бер аллаһы-тәғәләнән*[58].

Күреүебеҙсә, шағир әйтер һүҙен сурытып-нитеп тормайынса, уны кинәйәле образлылыҡҡа сорнап, ауыр хәле, ҡайғылы кисереш-тәренең ҡасан да тамамланасағына өмөттәр бағлай.

Ғөмүмән, революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәтендә фольк-лорға ҡарата интуитив (ә, бәлки, махсустыр ҙа) яһалған реминисцен-цияларҙы йыш осратырға була. Ул асыҡтан-асыҡ эксплицив рәүешендә сығыш яһай. Мәҫәлән, борондан алып башҡортта кеше ғүмере миҙгелдәре тураһында төшөнсә йәшәп килгән. Оло быуын, ата-олатайҙар тормошо тәжрибәһенә таянып, улар ғүмер ҡанундарын иҫтә тотоп, кешенең тыуған мәленән йәки иҫ белгән бала сағынан алып олоғайған осорона тиклем, хатта уның гүр эйәһе булғанғаса ваҡыт арауығын, йәш-дәүерен күҙаллаған. Уны шиғри юлға һалып, поэтиклаштырып, һамаҡлап башҡарғандар булһа кәрәк. Һәр хәлдә унда 12–13 ижекле строфаларҙың аралашып килеп, аҙағында «ти» ҡылымы ҡабатланғанлыҡтан, үҙенә күрә өләң кеүек итеп рифма-ритм барлыҡҡа килтереүе лә, шуның менән белгән кешеләргә (йәғни тәжрибәгә) һылтанып, ышандырырға ынтылыуы ла шул хаҡта һөйләй кеүек. Йола күренешенең быңдай төрҙәге өгөт әйтеүҙең (ул хатта бер ни тиклем мөнәжәттәргә лә тартым) йөкмәткеһен, ғәҙәттә,

---

[57] *Аҡмулла*. Шиғырҙар. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1981. – 70-се б.
[58] Шунда уҡ. – 76-сы б.

идея-тематик йүнәлешен өгөт-нәсихәт, тормош һабағын биреү, хикмәт алыу маҡсаты тәшкил иткән. Бындай әҫәр – өләңдәрҙә йәш быуынды тәрбиәгә саҡырып, белемгә тартылыуҙы өндәү ҙә, ғүмерҙе заяға үткәрмәйенсә эш-шөғөл, хеҙмәт менән үткәрергә өгөтләүҙәр ҙә яңғырамай. Унда тәрбиә эше «улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла» принцибында ситләтелгән, кинәйәле, йәшертен (подтекст) алымы файҙаланылған:

*Бер йәшемдә бер нәмә лә белмәнем, ти,*
*Ун йәшемдә, уйнап, уйынға туйманым, ти,*
*Егермелә егет ҡорона керермен, ти...*
*...Туҡһан йәштә бар эштән дә туҡтармын, ти,*
*Йөҙ йәшемдә ҡояш йөҙлө булырмын, ти*[59]

йәки

*Берҙә – бер ни белмәнем,*
*Күҙемә лә элмәнем,*
*Имеремде эҙләнем,*
*Унда – уңдым,*
*Ғилемгә сумдым...*
*Иллелә – ил ағаһы булдым,*
*Алтмышта – ала төлкө...*
*Әжәлемде һөйҙөм,*
*Тормаҫ булдым – зөңкәйҙем –*
*Гүр кейемен мин кейҙем*[60].

Халҡыбыҙҙың ошо йола күренешенең үҙенсәлекле сағылышын йәки шуға булған ишараны (намек), интертекст бәйләнешен билдәле башҡорт яҙыусыһы Ғәли Соҡройҙон улы, әҙип, публицист Ғарифулла Кейековтың (1816–1918) «Кеше ғүмере хаҡында» (1899) тигән шиғырында төҫмөрләргә мөмкин. Уның был әҫәренең исеме асылда есеменә тура килә һәм үҙенә күрә өләң поэтикаһы менән тәжрибә атҡара:

*Өч йәшендә йүгерә, өйләрә (өйҙәргә) сыймаз,*
*Биш йәшендә сәхрәдән, бакчалардан туймаз,*
*Алты йәшендә майданлар вә урмандарны ҡуймаз,*
*Ете йәшендә укый башлар «Әлифба»ны «Ҡөрьән» гүйә...*

[59] Башҡорт халыҡ ижады: Йола фольклоры. – Өфө: Китап, 1995. – 186–187-се бб.
[60] Шунда уҡ. – 186-сы б.

*Туҡсанында туктап калыр һәр эшедин,*
*Туҡсан бишендә шыуышыр ул түшедин,*
*Йөз йәшендә бу заманда ҡалмады һич кешедин,*
*«Йөз бишләр бар», – диләр, инде ул ялған гүйә...*[61]

Әгәр ҙә халыҡ ижады өлгөләрендә был нәсихәт, һабаҡ һуңында әҫәрҙең хикмәтен билдәләгән, асылын дөйөмләштереп торған ахырҙағы өлөшө килтерелмәһә, Ғ. Кейековтың әлеге шиғырында быңдай йола шиғырҙары, индивидуаль ижадҡа хас булғанса яңғырай:

*...Язғандар язсын иде, язмасындар ғәйепне,*
*Ҡазғандар ҡазсын иде чишмәләрдән хикмәтне,*
*Үз базыға (баҙына) үҙе төшөп, чикмәсендәр зәхмәте,*
*Ғарифулла язды моны күпләр үтенгән гүйә...*

Бында автор халыҡ ижадына хас булған кинәйәлекте, ситләтеүҙе, ахырҙа, образлы фекерләүҙе ситкә ҡуйып, әҙип буларак эш итә. Шуға ла әйткәненә лә аңлатма биреүҙе, әҫәренең хикмәтен белдереүҙе хуп күргән.

Тимәк, Ғ. Кейеков асылда халҡыбыҙҙың йола фольклорының үҙенсәлекле поэтиклаштырылған аҫыл төрҙәренең береһе өләңгә мөрәжәғәт итеп, үҙенең шиғырында ижади файҙаланған, шуның менән фольклор традициялары менән реминисценциялы бәйләнеш тыуҙырған. Әммә үҙенең идея-эстетик ҡарашынан сығып, кеше ғүмере миҙгелдәрен сағылдырғанда, йәште тулыраҡ, асыҡлап бирергә тырышҡан («ун», «ун ике», «ун өс», «ун дүрт», «туҡһан», «туҡһан биш» һ.б.). Халыҡ эстетикаһына иһә быңдай аныҡлыҡтар мөһим булмаған, күрәһең, унда иң әүәл ишаралы өгөт-нәсихәт аша һабаҡ биреү беренсе планға ҡуйылған, артабанын тыңлаусы былай ҙа аңлар, тип белгәндер. Шул уҡ мәлдә халыҡтың һамаҡлы өгөтө менән уның әҙәбиләштерелгән өлгөһөн уртаҡ идея ишараты берләштерә: кешегә үҫеп-етеп, аҡыл ултырғандан алып белемгә эйә булып, эш-һөнәр үҙләштереп, донъя көтөү осороноң ҡыҫҡа булыуы, алтмышҡа етеп, ҡартайып, эштән ҡалып көсһөҙләнеүе, артабан гүр эйәһе булыуға ла алыҫ түгеллеген, йәғни асылда ғүмерҙең ҡыҫҡа булыуы. Шул ишараны зирәктәр генә аңлар, тигән уйҙа ҡала халыҡ менән бергә Ғ.Кейеков та. Бында асылда фольклор тексы менән әҙәби текст

[61] Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: XIX б. / Төҙ., баш һүҙ авт. Ғ.Б. Хөсәйенов, М.Х. Нәҙерғолов, З.Я. Шәрипова. – Өфө: Китап, 2007. – Т. 2. – 252–253-сө бб.

араһында бәйләнеште, туранан-тура эксплицив аныҡлыҡты күҙәтһәк тә, унда авторҙың бай зиһенле, үҙ заманы өсөн белемле, фәлсәфәле тәрән фекергә эйә булыуын һәм өгөтләп тәрбиә бирерлек тормош тәжрибәһенең байлығын күрергә мөмкин. Бер яҡтан, ул индивидуаль ижад һәләтенә эйә булһа, икенсе яҡтан иһә уның ҡанына халҡының ауыҙ-тел поэтик ижады, сәсәнлек традицияһы һеңгән, һәм ул милли мәҙәниәт башланғысын йөрөтөүсе булараҡ күҙаллана. Шуның өсөн дә уның әҫәрендә фольклор традициялары менән аллюзия тыуҙырылыуына ғәжәпләнерлек түгел.

Был осор әҙәбиәтенә күҙ һалғанда, йәнә шул асыҡлана. Әҙәби әҫәрҙәрҙә йыш ҡына халыҡ әкиәттәре менән генә түгел, шулай уҡ эпосына һылтанмаларҙы күҙәтергә мөмкин. Бындай күренеш яҙыусының үҙ милли мәҙәниәтенән ярылып, шул мәҙәниәт мөхитендә йәшәп, интуитив рәүештә рухи мираҫына мөрәжәғәт итеүе ихтимал. Бындай аңһыҙ йәки интуитив ижади үҙләштереүҙәрҙә һүҙ барған интертекстлы бәйләнештәр йыш осрай ҙа инде. Мәҫәлән, халҡыбыҙҙа үрҙә телгә алынған «Ерәнсә сәсәндең килен эҙләгәне» новеллистик әкиәте сюжетының тағы бер әҙәби уҡылышын (прочтение) йәки халыҡ әкиәте менән әҙәби әҫәрҙең реминисценциялы интертексын йәнә лә берҙе күҙәтергә мөмкин. Фольклор менән башҡорт әҙәбиәте араһындағы бындай интертекст бәйләнештәренең сағыу миҫалын Фазыл Туйкиндың (1887–1938) «Иҙелбай» (1927) поэмаһында күрә алабыҙ. Уның тәүге өлөшө айырыуса ҡыҙыҡһыныу уята:

*... Күп һыу аҡҡан илдән, күп ел иҫкән,*
*Ул мәлдәрҙе белгән ҡарт бөткән.*
*Былай түгел тормош әле ул саҡта,*
*Ут ҡуйыусы һирәк усаҡҡа... –*

тип һүрәтләнеүе менән «Урал-батыр» ҡобайырында бәйән ителгән Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең – кешелектең тәүтормош осоро менән ауаздаш булыуына һылтанма яһағандай итә:

*...Донъя-маҙар йыймаған,*
*Ҡашыҡ-аяҡ тотмаған,*
*Ҡаҙан аҫып, ут яғып,*
*Алар донъя күрмәгән...*
(«Урал батыр»).

Тирә-яғы үтмәҫлек ҡара урман, тау-таш уратып алынған бер ерҙә эшһөйәр, уңған Уралбай исемле ирҙең тормош көтөп ятыуы

һүрәтләнә. Һәм ана шул тормошон нисек итеп көтөүенең тәфсирләп бирелеше лә ҡобайырға һылтанғандай итә:

*Бына шулай саҡтарҙа Уралбай ҡарт*
*Аҡ тирмәләр ҡороп йәйләгән,*
*Заманында емереп йәшәй белгән,*
*Теҙеп-теҙеп бейә бәйләгән...*
*Билен быуған, еңен һыҙғанған да*
*Түккән көсөн тағы ил өсөн...*
*Йәнлектәргә ҡаршы көрәш асҡан,*
*Шоңҡар, тойғон тотоп уйнатҡан.*
*Аҡбуҙатҡа менгән, һаҙаҡ кейгән,*
*Көндәр буйы бер ҙә тынмаған...*

(«Иҙелбай»).

Халҡыбыҙҙың «Урал батыр» ҡобайырында ла Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡтың уландары менән көткән тормошо, көнкүрештәре тулы ғына итеп һүрәтләнгән:

*...Һунарҙа ат менмәгән,*
*Ҡулға һаҙаҡ тотмаған;*
*Менеренә – арыҫланды,*
*Балығына – суртанды,*
*Ҡошҡа сөйгән шоңҡарҙы,*
*Эте тотҡан йәнлекте,*
*Ҡан һурырға һөлөктө,*
*Үҙ иштәре яһаған...*

(«Урал батыр»).

Поэма геройының исеме лә Уралбай тип аталыуы (әйтергә кәрәк, Урал исеме менән тауҙың түгел, ә кешенең – геройҙың аталыуы әҙәбиәттә ят күренеш ине әле. – *Н.Х.*), унының Иҙелбай исемле улының булыуы ла, тирә-яҡ мөхитте ҡара көстәр ҡиәфәтендә төрлө йыртҡыс хайуандарҙың уратып алыуы ла, асылда, архаик ҡобайыр менән булған ауаздашлыҡты, оҡшашлыҡты көсәйтеп, реминисценция тыуҙыра.

Артабан һүҙ бала-сағаларға күсә. Был Ф. Туйкиндың әҫәрендә лә, халыҡ ҡобайырында ла күҙәтелә:

*Айҙар үткән шулай, йылдар үткән,*
*Иҙелбайы үҫкән, ир булған.*
*Улҡайына тормош бирер өсөн*
*Уралбайға бөйөк уй ҡунған*

(«Иҙелбай»).

һәм:

*Ай үҫәһен көн үҫеп,*
*Балалары иҫ белеп,*
*Шүлгәнгә ун ике,*
*Уралына ун тулып... ...*
*Маҙаһына тейгән һуң,*
*Икеһен дә саҡырып,*
*Былай тиеп әйткән, ти...*[*] һ.б.
(«Урал батыр»).

Күреүебеҙсә, әҙәби әҫәр сюжетының башланышы һүҙмә-һүҙ булмаһа ла, йәшерен генә рәүештә (имплицив), «Урал батыр» ҡобайырының башланышын хәтерләтеп, күҙ алдына билдәле картинаны һынландыра. Тимәк, бында интертекст бәйләнешен күҙәтәбеҙ.

Ҡобайырҙа, билдәле булыуынса, Шүлгән менән Уралдың киләсәк яҙмышы хәл итеңә, уларға тормош юлдарында төрлө ҡаршылыҡтар аша үтеп, нығынырға, сынығырға тура килә һ.б. Тыуған йорттан, илдән сығып китеүҙең төп маҡсаты булып, асылда, эпос законлыҡтарына буйһоноп, тормош иптәшен, һөйгән йәрен табыу тора. Фазыл Туйкиндың поэмаһы сюжетының артабанғы үҫеше лә ошо принципҡа ҡоролған: ата менән ул мөһим эш менән өйҙән сығып китәләр – Иҙелбайға кәләш эҙләү ниәте менән. Бына ошо әкиәттән билдәле «килен эҙләү» мотивы иһә автор әҫәрендә инде эксплицив төҫ алып китә, сөнки әкиәттән алыу бында йәшеренһеҙ-ниһеҙ, асыҡтан-асыҡ сағылыш тапҡан.

Поэманың халыҡсанлыҡ сифатын тағы ла көсәйткән күренештәрҙең береһе – халыҡ йырының поэтиклаштырылыуы, йәғни «Ағын һыу» тигән йырҙың автор вариантында сағылдырылыуы, әҙәби интерпретацияланыуы. Бының менән шағир ир-атҡа халыҡ биргән ысын батыр исеменә лайыҡ булыуы тураһындағы борондан килгән йолаға ишара иткәндәй тойола: уҡ-һаҙаҡтан мәргән атҡан, ат сабышында ла, яу ҡырында ла, һунарҙа ла үҙен һынатмаған, көрәштә лә ал бирмәгән батыр ир-егет шулай уҡ йыр-моңға ла әүәҫ булып, ҡурай тартып, йыр йырлаған. Сура батыр ҙа, Салауат батыр ҙа, Ҡаһым түрә лә ана шундайҙарҙан булған. Поэмалағы Уралбай батыр ҙа шундай сифаттарға эйә.

[*] Курсив беҙҙеке. – *Н.Х.*

*Аҡбуҙатҡа менгән, һаҙаҡ кейгән,*
*Көндәр буйы бер ҙә тынмаған,*
*Кистәрендә һуҙып ҡурай тартҡан,*
*Моңло йырға шулай йырлаған:*
*Ағиҙелкәйҙәрҙең шаулап ағыуын*
*Баҫып ҡарайым бейек ярҙарға*
*Ҡайҙарға ла барһаң, дуҫ-иш кәрәк*
*Ҡаршы сығып килгән яуҙарға...*
(«Иҙелбай»).

Ижад процесында Ф. Туйкиндың фольклорға мөрәжәғәт итеүе көсәйгәндән-көсәйә бара. Артабанғы сюжет үҫешендә поэмала Уралбайҙың Иҙелбай атлы улына кәләш эҙләгән билдәле әкиәт картинаһы һүрәтләнә. Әҫәрҙең был ере, ғалим М.Х. Нәҙерғоловтың дөрөҫ күрһәтеүенсә, тулыһынса тип әйтерлек «Ерәнсә сәсәндең килен эҙләгәне» тигән башҡорт халыҡ новеллистик әкиәтенең сюжеты менән һүҙмәһүҙ тап килә: унда геройҙың нисек итеп улына аҡыллы һәм зирәк кәләш эҙләүе, быны өсөн ниндәй ысулды ҡулланыуы, ахырҙа килендe ниһайәт табыуы хаҡында ҡыҫҡа ғына итеп бәйән ителә. Нигеҙендә фәһемле идея ятҡан ошо әкиәт сюжетын Ф. Туйкин «тура-нан-тура шиғри юлдарға күсергән булыуы ихтимал», – тигән һығымта яһай М.Х. Нәҙерғолов[62]. Икенсе төрлө әйткәндә, бында М.М. Бахтин билдәләгән «текстар араһындағы диалог», шуның нигеҙендә Ю. Кристева тарафынан раҫланған текстар араһындағы бәйләнеш – интертекст барлыҡҡа килгән. Бында шулай уҡ халыҡ ижадынан ғына түгел, үрҙә ҡаралған боронғо әҙәбиәттәге Р.Б. Рабғузиҙың «Ҡиссас әл-әнбийа» әҫәренә ингән шулай уҡ «Ерәнсә сәсәндең килен эҙләгәне» әкиәте сюжетына ҡоролған «Ҡиссаи Лоҡман Хаким»ы менән дә интертекст бәйләнеше күҙәтелә. Йәғни ошо әҫәрҙәрҙе үҙ-ара бәйләүсе прецедентлы текст булған халыҡ әкиәтенең тороуы, уның художестволы универсалийҙарҙың бер матур күренеше булыуы хаҡында һөйләй.

Урал батыр образына мөрәжәғәт итеү хаҡында һүҙ сыҡҡас, шуны ла әйтмәү мөмкин түгел. Ф. Туйкиндан башҡа уны башҡорт әҙәби фекерендә халыҡ шағиры Мостай Кәрим дә файҙаланғайны. Быны шағирҙың үрҙә телгә алынған «Үлмәҫбай» поэмаһында күрергә мөмкин:

[62] *Нәҙерғолов М.Х.* Мул емешле ижад (баш һүҙ) // Ф. Туйкин. Ватан ҡаһармандары. – 15-се б.

*...Урал батыр тоҡомонан*
*Үлмәҫбай атлы егет.*
*Совет Ватанында үҫкән*
*Большевик затлы егет, –*

тип таныштыра ул төп геройын. Әйтергә кәрәк, «Урал батыр» эпосы менән киң йәмәғәтселек XX быуаттың 60–70 йй. саҡ танышһа, унан күпкә алданыраҡ ижад иткән Ф. Туйкиндың әҫәрендә Урал, Иҙел исемдәре менән эпос сюжетының имплицив сағылышына ғәжәпләнһәк, бында ла Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында яҙылған поэмала унын телгә алыныуына шулай уҡ ғәжәпләнеү кисерәбеҙ. М. Кәримдең тотош халыҡ эпосының төп геройы булған Урал батырҙы телгә алыуы хаҡында Ә.М. Сөләймәнов былай тип әйтеп үткәйне: «Үлемһеҙ “Үлмәҫбай”ын, халыҡ шағиры үҙе әйтеүенсә, 1942 йылда госпиталдә дауаланып ятҡанда яҙған. Тимәк, уның (йәғни Урал батыр. – *Н.Х.*) менән һуғышҡа тиклем үк осрашҡан булған…»[63]. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғалим, халыҡ шағиры менән хәбәрҙар булһа ла, үҙенән был мәсьәләгә асыҡлыҡ индереп өлгөрмәгән. Нисек кенә булмаһын, ике төрлө осорҙа йәшәп ижад иткән шағирҙарҙың әҫәрҙәрендә Урал батырҙың исеме урын алыуы, беренсенән, улар араһында боронғо эпос менән интертекст бәйләнешен булдырһа, икенсенән, ошо әҙәби әҫәрҙәр бер-береһенә эксплицив һылтанма яһай, һәм эпос менән зыялы заттарыбыҙҙың элек-электән бик яҡшы таныш булыуы хаҡында һөйләй. Күрәһең, «Урал батыр» эпосының тулайым уҡ булмаһа ла, уның ярсыҡтары (башҡа ҡобайыр сюжеттарында, мәҫәлән, «Аҡбуҙат», «Минәй батыр менән Шүлгән батша»), әкиәт формаһында бәйән ителгән варианттары сала-сарпы булһа ла халыҡҡа таныш булыуы ихтимал. Әммә сакраль текст булараҡ, «Урал батыр»ҙың үҙе әллә ни киң таралмаған, тик айырым заттар ғына уның хаҡында хәбәрҙар булғандыр. Был тәңгәлдә уйланаһы, фекер йөрөтәһе бар әле, әлбиттә.

Тимәк, Ф. Туйкин әлеге поэмаһын яҙғанда, фольклор традицияларына туранан-тура мөрәжәғәт итеп, әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһен, идея-художестволылығын тәрәнәйтеүгә, төрлөләндереүгә ирешкән. …

Шағирҙарҙың әленән-әле халыҡ ижадына, мифына мөрәжәғәт итеп, уның поэтик үҙенсәлектәрен әҫәрҙәрендә художестволы

[63] *Сөләймәнов Ә.М.* Өс мөғжизә. – Өфө: Китап, 2009. – 258-се б.

сағылдырып эш итеүҙәре хаҡында Б. Мирзановтың «Ен туйы» шиғыры ла асыҡ миҫал булып тора ала. Унда тормоштоң аяныслы, үкенесле һәм ғибрәтле яҡтары сағыу буяуҙарҙа ярым әкиәт, ярым мистика фонында һүрәтләнә. Шуның менән ул халыҡ әкиәте, ғөрөф-ғәҙәте күренештәре менән ауаздаш булып, текст-ара бәйләнешен тыуҙырыусан. Поэмала лирик герой төнгө йоҡоһон йоҡлай алмайынса интегеп ята торғас, ахырҙа, ҡул эше менән булышып, һаман да йоҡларға ятмаған атаһынан башынан үткәндәрен һөйләүен үтенеп һорай. Атай кеше улының үтенесен йыҡмай, үҙе менән булған бер хәлде бәйән итә. Шул ерҙән поэманың төп өлөшө асылып китә, йәғни сюжет төйөнләнә башлай.

Халыҡтың боронғо инаныһынан, мәжүси ышаныуҙарынан билдәле булыуынса, кире мифик, демонистик заттар – йылан, Аждаһа, Дейеү һ.б. – ер аҫты мөхитендә «көн итеүсән». Тылсымлы әкиәт геройы унда, ғәҙәттә, тау, ҡая-таш, ер тишеге, ҡоҙоҡ аша эләгә («Быжыр мәргән», «Серле йөҙөк», «Умыс» һ.б.).

Ҡаралған әлеге шиғырҙа герой ен туйында ҡунаҡ була: буранлы ҡышҡы төндә ендәр уны һауа буйлап осороп алып китә лә, «ҡыуыш тауҙың» итәгендәге «кап-ҡараңғы бер тишеккә» индерә. Ә ер аҫты мөхите әкиәттәгесә ер өҫтөндәге донъя кеүек: унда матур итеп йыһазландырылған һарай тора, уның эсендәге шишмәләре сылтырап аға, күлдәре, урман-ҡырҙары йәйелеп ята, ҡош-ҡорто һайрай, тирә-яҡта йәшел үлән һ.б.

*...Нәк һарайҙың эстәренән шишмәләр шаулап ағып,*
*Күлдәренән тамсылап ергә төшә нурҙар тамып.*

*...Ул һарай тулған хисапһыҙ сәскә, япраҡлы ағас...*
*Ул илаһи йәм түгеп, ен баҡсаһында сәскәләр.*
*...Күл ситендә ялтырап алтын ҡамыштар баш эйә,*
*Ел бәрә, ул баш эйә – нәк тәңрегә ҡоллоҡ һөйә!..*

тип, әкиәти ер аҫты донъяһы бөтә хозурлығында, гүзәллегендә сағыу буяуҙарҙа һүрәтләнә («Ен туйы»)[64].

Әҫәргә әкиәт эстетикаһы хас булһа ла, әкиәт мотивы етешмәй тороп ҡала. Автор уны кәрәк тип тапмаған, күрәһең. Был шунан ғибәрәт. Әкиәттәрҙә иң йыш осраған мотивтарҙың береһе булып

[64] Башҡорт әҙәбиәте: ХХ б. башы. Поэзия / Төҙ. В. Әхмәҙиев, И. Буләков һәм Ғ. Хөсәйенов. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1983. 2-се китап. – 323-сө б.

«яҡшыға – яҡшылыҡ менән яуап биреү» мотивы торалыр. Был мотивҡа ярашлы герой, ғәҙәттә, икенсе бер затҡа ярҙам ҡулы һуҙа йәки изгелек ҡыла, һөҙөмтәлә, үҙе затлы бүләк менән бүләкләнә. Мәҫәлән, ошо мотивты үҙһенгән «Йәшмәташ», «Быжыр мәргән» кеүек башҡорт халыҡ әкиәттәрендә герой йыланды үлемдән ҡотҡара. Һөҙөмтәлә, рәхмәт йөҙөнән егет тылсымлы бүләккә эйә була.

Әлеге «Ен туйы» поэмаһында иһә әкиәткә хас булған был эстетик законлыҡ бойомға ашмай, дөрөҫөрәге, ошо мотивты мотив иткән сәбәп урын алмай, йәғни мотивтың тәүге өлөшө бойомға ашмаһа ла, икенсеһе уны сәбәпһеҙ атҡарып ҡуя: ендәр туйына килеп эләккән герой уларға бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтмәй, ул мәжлестә ят ҡунаҡ булараҡ ситтән күҙәтеүсе ролен ғына башҡара. Әммә туй ахырында әҙәм затынан булған ҡунаҡты ендәр (тота килеп) бер тоҡ алтын биреп, пар ат егелгән шәп санаға ултыртып алып кире илтеп ҡуя. Быйаса ярлы ғына көн итеп ятҡан герой ана шул алтындан байып китеп, хәлле генә тормош көтә башлай. Тик әкиәт эстетикаһына ярашлы үҫешергә тейеш булған поэма сюжеты көтөлгәнсә үҫешмәй һәм әкиәткә хас булғанса сиселмәй ҡала. Был әҙиптең ижади кимәленән, бәлки, поэтика законлыҡтарына буйһоноп бөтмәүенән йәки фольклор менән эш итеүҙе бөтөнләй маҡсат итеп ҡуймауынан киләлер. Әммә әкиәт сюжетына шулай ҙа имплицив һылтанманың тыуҙырылыуы яҙыусының образлы фекерләүенән килеүе ихтимал.

Поэмала шулай уҡ әкиәттәргә хас булған дөйөм географик атама – Ҡаф тауы телгә алына. Был да үҙенә күрә әкиәт традицияһының сағылышы. Әммә ул араауыҡты асыҡлап тороусы һүрәтләү биҙәге генә булып сығыш яһай.

Башҡорт халҡының легендаларынан билдәле булыуынса, халыҡ үҙен уратҡан тәбиғәтте һәм уның айырым күренештәрен йәнләндереп кенә ҡалмаған, һәр күренештең үҙ «хужаһы», «эйәһе» бар тип белгән[65]. «Йөгәмеш тау» тигән легендала, мәҫәлән, һүҙ бер кем дә менеп етә алмаған бер бейек тау башындағы күлдә күгәл ҡиәфәтендәге инә өйрәк менән ата өйрәк төҫөндәге тау эйәләренең йөҙөп йөрөүе хаҡында бара. Һәм шул өйрәктәрҙе бер кем дә атып ала алмаған йәки атырға баҙнат итмәгән. Бер егет сәмләнеп китеп, тау башына менеп, уларҙы атып алыуы була, тау сүгә башлай, ә күл

[65] *Нәҙершина Ф.А.* Халыҡ хәтере. – Өфө: Ғилем, 2006. – 169-сы б.

ҡорой. Йәғни йәненән яҙған ер юҡҡа сыға[66]. «Эйәле күл» тигән икенсе бер легендала кешеләрҙең ҡыҙ ҡиәфәтендәге күл эйәһен тыныс-һыҙландырып ыҙалатыуҙары була, ул да асыуланып һыуҙы ташлап китә, һөҙөмтәлә, күл ҡорой. «Тәбиғәттә була торған күлдәр ҡороу, тауҙар убылыу кеүек күренештәр, шулай итеп, боронғо кешеләр аңында “эйәләрҙең асыуы” рәүешендә күҙ алдына килтерелгән» булһа кәрәк[67].

Б. Мирзановтың ҡаралған «Ен туйы» поэмаһында ендәр биргән байлыҡҡа тәүҙә герой мандып йәшәп китһә лә, аҙаҡ ул бәхетһеҙлеккә тарый: бер күсерҙең уның ҡара атының ялын яҙып тарауы була, мал күп тә тормай йән бирә. Шул мәлдән алып геройҙың донъяһы ла бөлә, үҙе лә фәҡирләнә: «Шул ҡара ат үлгән, ялын һүткән көндән бире Китте байлыҡ һыу кеүек, һәр көн һайын эштәр кире!..». Был күңелһеҙ хәлде автор текстың аҫтында шундай иҫкәрмә менән аңлата: «Беҙҙең Өфө яғындағы ҡара халыҡ телендә, әгәр ҙә аттың сейәлгән ялын берәү тарап ҡуйһа, ат эйәһе, асыуланып, бер минут та тормай ҡаса, имеш тә, шул көндән һуң ат хужаһының бәхете китә, фәҡирләнә»[68].

Бында шуны ла әйтеп үтеү зарур. Фольклорсыларҙың билдәләүенсә, һәр ерҙең үҙ «эйәһе» булған кеүек, аҙбарҙың да «хужаһы» булған. Таң атыуға ат ялының таралып, үрелеп ҡуйылыуы хаҡындағы хөрәфәти хәтирәләрҙең һаҡланыуы шулай уҡ билдәле. Әммә ялдың яҙып таралыуынан малдың үлеүе һәм хужаһының фәҡирләнеүе хаҡында әлегә мәғлүмәттең осрамауы асыҡланды.

Б. Мирзанов башҡорт халҡының хөрәфәти ҡараштарына бәйле булған ышаныу-инаныстарҙы бер ни тиклем бутауы ихтимал. Нисек кенә булмаһын, һөҙөмтәнең фаталь булыуына ҡарамаҫтан, авторҙың башҡорт йола фольклорының бер күренешен поэтиклаштырып биреүе, «эйә» образы менән бәйле булған мотивты художестволы файҙаланыуы күҙәтелә. Был иһә әҫәрҙе художестволы-эстетик яҡтан байытыуға килтергән.

Ғөмүмән, Б. Мирзанов үҙ заманы өсөн мөһим булған социаль-иҡтисади идеяларҙы үткәреү ниәте менән фольклорға, айырып әйткән-

---

[66] Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр. Легендалар / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатма авт. Ф.А. Нәҙершина. – Өфө: Китап, 1997. – Т. 2. – 51-се б.

[67] Шунда уҡ. – 170-се б.

[68] Башҡорт әҙәбиәте: XX б. башы. Поэзия. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1983. 2-се китап. – 329-сы б.

дә, әкиәткә, халыҡтың хөрәфәти ҡараштарына мөрәжәғәт иткән, шуның менән әҫәрендә уның яңы художестволы бағланышына ирешкән. Ғалим Ғ.С. Ҡунафин билдәләүенсә, «Ен туйы» шиғырында әкиәтте ысынбарлыҡ тормошҡа ҡапма-ҡаршы ҡуйып ҡарауы менән шағир кешелек донъяһындағы үҙ осороноң мәрхәмәтһеҙ йәмғиәт тороошон, законын һәм морален ҡырҡа тәнҡитләп фаш итә[69]. Бер яҡтан ер аҫтында йәшәгән ен-пәрейҙәрҙең утопик бай, етеш, тыныс тормошо, икенсе яҡтан иһә үҙ заманының михнәтле, ҡайғы-хәсрәтле, мәрхәмәтһеҙ ысынбарлығы:

*...Бында иркенлек, азатлыҡ –*
*юҡ күңелдәр тарһыныу,*
*Тарһыныу юҡ һис ваҡыт*
*ялған ҡанунға буйһоноу.*
*Бында юҡ, бер тин өсөн*
*юҡ ҡан эсеү, инсан талау,*
*Бай янында ас хәрифтәр[*],*
*юҡ тағы ҡорһаҡ ялау.*
*Беҙҙәге төҫлө хәсис бысраҡ,*
*ҡарайған йән менән*
*Йөрмөмәйҙәр, ендәр торалар*
*паҡ намыҫ, выждан менән*
(«Ен туйы»).

Донъя әҙәбиәтенән билдәле булыуынса, иҡтисади, сәйәси үҙгәрештәр алдында торған түбәнһетелгән ябай халыҡтың социаль хәле хөртәйеп, йәмғиәт көрсөккә тәгәрәгән бер осорҙа прогрессив ҡарашлы яҙыусылар тормошто нисек тә яҡшыртыу сараһын төрлөсә күҙаллай: ҡыйыу ҡарашлылары революцион күтәрелешкә саҡыра, икенселәре мәғрифәтселек юлында күрә, ә бәғзеләре хыялға сумып, утопик йәмғиәтте тыуҙыра башлай. Һуңғылары бигерәк тә тәбиғәттә булмаған ниндәйҙер фантастик донъяны һүрәтләүҙе үҙһенә. «В процессе развития утопическая литература, уходящая корнями в фольклор, выработала ряд устойчивых сюжетных “ходов” (сны, видения, путешествия и т.д.)»[70]. Ә XIX–XX бб. капиталистик донъяның хәле

[69] *Кунафин Г.С.* Башкирская поэзия XIX – нач. XX в. Вопросы жанровых и идейно-художественных особенностей. – Уфа: Гилем, 2011. – С. 390.

[*] хәриф – түбән, ҡәҙерһеҙ кеше.

[70] Краткая литературная энциклопедия. – М., 1975. – Т. 8. – 853–854-се бб.

ҡырҡыулашып, социал-демократик хәрәкәт киң йәйелдерелгән осорҙа әлеге утопияға нигеҙләнгән художестволы фекер ысынбарлыҡты аңларға, уны теория яғынан танып белергә ярҙам итте [Э. Золяның «Дүрт Евангелия» («Четыре Евангелия», 1899–1903), А. Франстың «Аҡ таш өҫтөндә» («На белом камне», 1905), Г. Уэллстың «Бөгөнгө утопия» («Современная утопия», 1905), А. Богдановтың «Ҡыҙыл йондоҙ» («Красная звезда», 1908) һ.б. әҫәрҙәр шуға асыҡ миҫал]. Күрәһең, донъя әҙәбиәтендәге утопия ағымы башҡорт әҙәбиәтенә лә тәьҫир итмәй ҡалмаған. Быға асыҡ миҫал булып Б. Мирзановтың ижады, айырыуса «Ен туйы» шиғыры тора ала. Сөнки унда ла авторҙың яҡты тормошто нисек булдырыу юлын яҡшы күҙ алдына килтерә алмауы, әммә хыялда булһа ла, халыҡ ижады традицияларына таянып, уны художестволы яҡтыртып ҡарарға ынтылыуы күренә. Әҫәрен «Шиғыр хыялый» тип билдәләүе лә шул хаҡта һөйләйҙер.

Утопиялы әҫәрҙәргә шулай уҡ бер яҡлы риторик диалогҡа ҡоролған композиция хас. Йәғни бер герой икенсеһен башынан үткәндәрен һөйләп бирергә үтенә. Һуңғыһы йә башынан үткәндәрҙе, йә башҡа берәй хәл-ваҡиғаны бәйән итә. Асылда тормошта булмаған, бөтә яҡтан да идеаль булған, үҙенең эсендә генә бикләнгән, тимәк, сикләнгән ниндәйҙер мөғжизәүи мөхит хаҡында хикәйәләнә. Герой иһә үҙе ваҡиғалар ағымында ҡатнашмайынса ситтән тороп күҙәтеүсе ролен башҡара. Ул, үҙенә күрә, ике донъяны – ысынбарлыҡ һәм идеаль, уйҙырма – араһында тороусы «медиатор» функцияһын үтәй[71].

Утопиялы әҙәбиәткә хас булған былдай күренештәр Б. Мирзановтың «Ен туйы» шиғырында ла күҙәтелә. Әҫәрҙән билдәле булыуынса, лирик герой атаһынан берәй ғибрәтле хәлде һөйләүен үтенә. Атаһы иһә мифҡа ҡоролған тылсымлы әкиәт йомғағын һүтә башлай. Әлбиттә, уны ул әкиәт тип тә билдәләмәй, ә уның менән ысын булған хәл-ваҡиға кеүек ышандырғыс итеп тасуирлап һөйләй, әйтерһең дә, ул, ысынлап та, ендәр менән осрашҡан. Әммә утопиялы әҫәрҙәргә хас булғанса, ул ендәр туйында бер нисек тә ҡатнашмай, ә ситтән тороп күҙәтеүсе ролен башҡара.

Ғөмүмән, әҫәрҙә, бер яҡтан, мифик сюжет тыуҙырыла, икенсе яҡтан, уға башлыса тылсымлы әкиәт эстетикаһы хас булыуына ҡара-

[71] *Гончаров С.А.* Мифологическая образность литературной утопии // Литература и фольклор. Вопросы поэтики. – Волгоград, 1990. – С. 41.

маҫтан, автор уға аҙаҡҡаса «тоғро» булып ҡалмай: шиғырҙың тамамланышы әкиәттәгесә түгел. Был иң әүәл унда «ярҙамға – ярҙам» тигән мотивтың бойомға ашмауында күренә: ендәр геройға затлы бүләкте уның ниндәйҙер изгелеге, ярҙамы арҡаһында түгел, ә буштан-бушҡа бирә. Ә буштан-бушҡа килеп ингән байлыҡтың, ғәҙәттә, бәрәкәте булмай. Һөҙөмтәлә, автор халыҡтың хөрәфәти ҡарашына, инанысына нигеҙләнеп ат эйәһенең «асыуланыуы», шул сәбәпле малҡайҙың үлеп китеүе, уның артынан байлыҡтың туҙҙырылыуы, етеш тормоштоң бөлөүе хаҡында әйтелә. Бының менән яҙыусы бер юлы «ике ҡуянды ата»: беренсенән, әҫәрен әкиәт традицияһына хас булмағанса тамамлап, лирик герой атаһының ысынбарлыҡта фәҡир тормош һөрөүенең сәбәбен шулай ситләтеп метафора, аллегория, миф ярҙамында «аңлата» һәм, икенсенән, фәҡир тормошҡа ҡапма-ҡаршы булған бай, етеш тормоштоң да булыуы, уларҙы үҙ-ара сағыштырыу аша күрһәтә, әммә уның хыялда булыуына ишаралай. Шул уҡ мәлдә, йәнә халыҡтың хөрәфәти инанысын (йорт-ҡура, йорт хайуандарының «эйәләре» булыуына ышаныу. – *Н.Х.*) художестволы яҡтыртыуға ирешә. Һөҙөмтәлә, Б. Мирзанов «Ен туйы» шиғыры менән үҙ заманында донъя кимәлендә киң танылыу тапҡан, фольклорға нигеҙләнеп үҫешкән утопиялы әҙәбиәттең романтик традицияларына эйәреп, башҡорт әҙәбиәтендә новаторҙарса асыш яһаны. Был уны үҙ заманы ҡәләмдәштәренән шаҡтай тип әйтерлек айырып торҙо.

Башҡорт халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың революцияға тиклемге прозаһы ла фольклор традицияларына бай булды. Унда тылсымлы һәм тормош-көнкүреш әкиәттәре, мәҡәл һәм тапҡыр һүҙҙәр өсөн хас булған айырым мотивтарҙы, образдарҙы юҡ-юҡ та осратырға һәм уларҙың автор тарафынан бик ваҡытлы һәм урынлы оҫта ҡулланылыуын күҙәтергә мөмкин. Халыҡ ижадының поэтикаһын, традицияларын үҙһенеүе яҙыусыны ысын мәғәнәһендә халыҡсан итә; ябай кешеләрҙең көндәлек проблемалары менән тулы булған тормошон реалистик планда художестволы яҡтыртҡан әҫәрҙәре халыҡҡа яҡын һәм аңлайышлы булыуы менән әһәмиәтле булды[72].

М. Ғафури ижадында ла фольклор традициялары художестволы сағылыш табыуы менән бер рәттән халыҡ ауыҙ-тел ижады менән

[72] *Хөббитдинова Н.Ә.* XIX быуат аҙағы – XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә фольклор традицияларының художестволы сағылышы. – Өфө: Ғилем, 2013. – 96-сы б.

интертекст бәйләнешкә инеүе күҙәтелә. Быға әҙиптең «Ағиҙел буйында» (1914) тигән хикәйәһе асыҡ миҫал булып тора ала. Әҫәрҙең сюжеты асылда халыҡ легендаһы менән эксплицив бәйләнешкә инеп, хатта ки уның бер ярсығы булыуы ихтималлығын көсәйтә.

Асылда әҫәр тартмалы сюжет композицияһына ҡоролған һәм тар экспозициялы киңәйтәлгән сюжет рәүешенә килтерелгән. Әҫәрҙең экспозицияһында иһә йәмле йәй көндәрендә малайҙарҙың Ағиҙелгә төшөп, балыҡ ҡармаҡларға әүәҫләнеүе хаҡындағы хәл һүрәтләнә. Шул йылға буйында көн иткән балыҡсы бабай уларға ҡаршы ярҙағы Аҡташ тауына ҡарап, бер легенда бәйән итә. Тыңлап ултырған малайҙарҙың береһенең Иҙелдең аръяғына сығып, шул тау башына менеп төшөү тураһындағы теләген белдереүҙән башлана. Бабайҙың: «Сығырһың унда, атаң башы! Бар әле, сығып ҡара, үҙеңде ендәр ботарлап ташламаһындар!» – тип тыйыуы әҫәрҙең төйөнләнеүенә килтерә. Әлеге тыйыуҙың сәбәптәрен асыҡлаусы, асылда төйөндө һүтеүсе ролен хан ҡыҙы Алтынсәс тураһындағы легенда сюжеты башҡара. Ә легенда буйынса, борон әлеге Аҡташ тауы аръяғындағы яланда тыныс ҡына йәшәп ятҡан бер ханды баҫҡынсылар баҫып ала. Хан еңелә башлағас, булған байлығын тауҙың мәмерйәһенә күмә, Алтынсәс тә шунда йәшенә, имеш. Әллә күпме ваҡыт үткәс, мәмерйәнән сығып, оҙаҡ ҡына моңайып ултырған ҡыҙ һынын күреүселәр ҙә булғылаған, бабай әйтеүенсә. Һәм «беҙҙең ҡарт атай кис менән бында ҡунған ваҡытта үҙенең Алтынсәсте күргәнен, матурлығына иҫе китеп ҡарап торғанын һөйләй торған ине», тип әлеге легендаға ышанырға мәжбүр итә.

Күптәрҙе ҡыҙыҡһындырған хазинаға килгәндә иһә оҙаҡ ваҡыт шунда ятыу сәбәпле, уларға ен эйәләгән, имеш. Хан хазинаһын алырға теләүселәр, йәнәһе, ана шул ендәр тарафынан һәләк ителгән. Улар, легенда буйынса, «мылтыҡлы һалдаттар» кеүек «ҡарауылда тора», «алырға теләгән кешеләрҙе яҡын да ебәрмәйҙәр».

Күреүебеҙсә, бында нигеҙҙә халыҡтың инанысына (поверье) нигеҙләнгән тыйыу йолаһына ҡоролған легенда сағылыш тапҡан. Хөрәфәти тыйыуға иһә әҫәрҙә мөһим художестволы вазифа йөкмәтелә: беренсенән, ул сюжеттың төйөнләнеүенә сәбәпсе булһа, икенсенән, тыңлаусы иғтибарын йәлеп итеп, ҡыҙыҡһыныуы уята, легенданың башынан аҙағынаса шул иғтибарҙың үҙгенән ысҡынырға форсат бирмәй. Бында, икенсе яҡтан, ниндәйҙер кимәлдә тәрбиәүи ниәттең дә урын алыуы күҙәтелә. Йәғни балаларҙың текә ҡая башы-

на менеп, йәрәхәтләнеү мөмкинлеген алдан кисектереү, әшкәртеү роленең үтәлеше тип тә ҡабул итергә мөмкин.

М. Ғафуриҙың «Ағиҙел буйында» хикәйәһендә һынландырылған ҡыҙ-батыр образы халыҡ эпосы, әкиәттәренән таныш булған ҡыҙ батырҙы иҫкә төшөрә. Әҫәрҙә бәйән ителгән легенда буйынса, хандың ғәскәре баҫҡынсыларҙан еңелә башлағас, «бик шәп ҡара юрғаға атланып, ҡулына уҡ һәм һөңгө алып, яуға ҡаршы сыҡҡан. Алтынсәс яу менән бик ныҡ һуғыша ла, уң ҡулы йәрәхәтләнеү сәбәпле, кире ҡайтҡан», – тиелә әҫәрҙә[73]. Күреүебеҙсә, әҫәрҙә ир-егеттәр менән бергә һунарға йөрөгән, яу сапҡан эпик ҡыҙ-батыр образы менән интертекст бәйләнешкә инә. Быға ғәжәпләнерлек түгел, сөнки эпик образ менән легенда сюжеты ҡасандыр ишетелгән, билдәле булған эпик әҫәрҙе иҫкә төшөрә кеүек. М. Ғафури халыҡ араһында таралған билдәле легенданы яҙып алып, айырым әҫәре эсендә биреүе менән фольклористика өсөн файҙа килтергән: легенда сюжеты әлегәсә ғалимдарыбыҙ иғтибарына юлыҡҡаны юҡ, тине Ә.М. Сөләймәнов. Асылда, тип билдәләй ғалим, һүҙ барған хикәйәлә һүрәтләнгән ваҡиғалар ҡасандыр «М. Өмөтбаев бәйән иткән “Аҡташ хан” дастанында телгә алынған Аҡташ тигән ерҙә бара. Ихтимал, ҡасандыр был әҫәр, “Урал батыр”, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” һымаҡ уҡ, тик ҡобайырҙан йә, “Заятүләк менән Һыуһылыу”, “Аҡһаҡ кола”, “Ҡара юрға” иртәктәре кеүек, сәсмәүер менән ҡобайыр теҙмәләренең аралашып килеүе рәүешендә мәғлүм булғандыр һәм күләмле генә ҡобайыр рәүешендә йәшәгәндер”[74]. Әммә, ҡыҙғаныс ҡа ҡаршы, Ғафури ул хаҡта иҫкәрмә бирмәгән. Сюжеттың ырыуҙашы булған М. Өмөтбаевтың яҙып алған «Аҡташ хан» дастаны менән бер бөтөн булыуы ихтимал, тигән фекергә урын бар. Быны бер-бер артлы иҫкә килеп төшкән боронғо дастан йәки легенда эпизодтары, образдары ла раҫлай кеүек.

Шулай итеп, М. Ғафури халыҡ ижады өлгөләрен художестволы яҡтан әшкәртеп, оҫта итеп ҡулланып ҡына ҡалмаған, уларҙы бөртөкләп йыйып, туплап кире халыҡҡа еткергән, онотолғандарын иҫкә төшөргән, шуның менән фольклор традицияларына интертекст һылтаныу тыуҙырыуы айырылып торҙо.

---

[73] *Ғафури М.* Һайланма әҫәрҙәр: дүрт томда. Проза / Төҙ., аңлатма бир. Ғ. Рамазанов, М. Хәмиҙуллина. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1978. Т. 2. – 318-се б.

[74] *Сөләймәнов Ә.М.* Мәжит Ғафуриҙың башҡорт халыҡ ижады хаҡында борсолғаны // «Ватандаш». 2010. – № 7. – 181-се б.

### 2.4. М. Ғафуриҙың замандашы, теләктәше һәм кәләмдәше булған Ғ. Туҡайҙың Шүрәлеһе, Таҙы менән Һыу инәһе һәм башҡорт халыҡ ижады: мәҙәни универсаллек һәм интертекст күҙлегенән

Үрҙә телгә алынған Һ. Салихов, Ф. Туйкин, Б. Мирзанов кеүек әҙиптәр менән бер осорҙараҡ ижад иткән татар шағиры Ғабдулла Туҡайҙың (1886–1913) әҫәрҙәрендә шул халыҡ, йәғни татар фольклоры традицияларының художестволы сағылыуы менән бергә унда башҡорт халыҡ ижады менән дә интертекст бәйләнешен күҙәтергә мөмкин. Бында ике ҡәрҙәш халыҡтың поэтик үҙенсәлектәре оҡшашлығын, бер яҡтан, генетик оҡшашлыҡ тип тапһаҡ, икенсе яҡтан, уларҙы мәҙәни универсалийҙың бер өлөшө итеп ҡарау ҙа ҡыҙыҡлы.

Ғөмүмән, мәҙәни йәки художестволы универсалий тигәндә, әлбиттә, оҡшаш тарихи осор, тотош Рәсәйҙә барған билдәле ижтимағи-сәйәси үҙгәрештәр туғандаш әҙәбиәтенә лә бер үк юҫыҡтан үҫешергә юл асты. Татар әҙиптәре лә тел сафлығы, милли аңдың уяныуы өсөн хәрәкәтте шулай уҡ әүҙем алып барҙы (Ғ. Туҡай, Дәрдмән, Ғ. Камал, Ф. Әмирханов, Ш. Камал, Ғ. Ибраһимов һ.б.). Матбуғат биттәрендә лә улар үҙҙәре ишетеп белгән йәки үҙҙәре йыйған халыҡ ижады өлгөләре хаҡында ялҡынлы мәҡәләләре менән милли уҙаңды уятырға, зиһендәрен рухи ҡиммәттәр менән байытырға тырышты [Мәҡсүтовтың «Татар йырҙары хаҡында», Ә. Вәлидиҙең «Йырҙарыбыҙ хаҡында», Ғ. Юлдаштың «Ил йырҙары» (бөтәһе лә – Шура, 1911) һ.б.][75].

Ошо милли аңдың уяныП, үҙ-үҙен этнос итеп таныған бер мәлендә халыҡтың мифологик ҡарашына, ишаныу-инаныуына, ауыҙ-тел ижадына нигеҙләнеп яҙылған поэтик әҫәрҙәрендә Ғ. Туҡай башҡортҡа яҡын булған үҙ халҡының бай рухи донъяһын тасуирлауға иреште. Мәҫәлән, ул халыҡ хөрәфәтен яҡшы белеп, боронғо ҡарашҡа ярашлы булған, үрҙә телгә алынған һәр ер-һыу, тау-таш, өй-ҡура эйәһе менән хужаһы образдарына мөрәжәғәт итте. Ә мифик заттарҙың «…күптәрен антропоморф зат тип иҫәпләнгән. Бәрейҙәр (биреләр), мәҫәлән, әҙәм кеүек үк, туй үткәреп, ирле-ҡатынлы, бала-сағалы була, йәйләүгә күсә. … (шулай ҙа) уларҙың берәүҙәре (албаҫты, убыр, шүрәле) ҡатын-ҡыҙ

---

[75] *Миннуллин К.М.* Һәр чорның үз жыры. – Казан: Магариф, 2003. – 28-нче б.

затлы ғына» һ.б.[76] Пермдәге ғәйнә башҡорттарының «Толбуйҙар» исемле мифик легендаһында бындай зат «ар» тип аталып, шулай уҡ албаҫтыны хәтерләткән ҡатын-ҡыҙ образында билдәле.

Ошондай мифик заттан булған шүрәлегә тап була Ғ. Туҡайҙың «Шүрәле» (1907) тигән шиғырындағы герой:

*... Нимә был? Ҡасҡынмы, енме!*
*Йә өрәкме, нимә был?*
*Ҡот осорлоҡ, бик килешһеҙ,*
*Әллә ниндәй нәмә был!*
*Мороно кәп-кәкре бөгөлгәндер,*
*Тамам ҡармаҡ кеүек.*
*Ялтырай, ялт-йолт киләлер*
*Эскә батҡан күҙҙәре...*
*Урта бармаҡ буйлығы бар*
*Маңлайында мөгөҙө.*
*Кәкре түгелдер бының бармаҡтары,*
*Бик төҙ-төҙөн,*
*Тик килешһеҙ, һәр бере лә*
*Ярты аршиндан оҙон...–*

тип һүрәтләнә ул әҫәрҙә.

Шағирҙың шүрәленең нисек кешеләрҙе ҡытыҡлап үлтереүе хаҡындағы «мәғлүмәттә» яҡшы хәбәрҙар икәнлеге күренә. Башҡорт хөрәфәттәренән билдәле булыуынса, ул, ғәҙәттә, «һалбыр имсәкле, һап-һары йөнтәҫ бисә ҡиәфәтендә була, ти. Кешене әүрәтеп, ҡытыҡлап үлтерә, ти.» “Шүрәленең ҡултыҡ аҫты ҡыуыш була, аяғы артҡа ҡарап тора, йөрәге күренеп тора. Бер-бер тап булып, ҡытыҡлай башлаһа, тәгәрәп киткән ыңғайға ҡултығының аҫтына аяғыңды тығаһың”, – тип һөйләй торғайнылар. Шулай итһәң, шүрәле үлә лә ҡуя, ти» тип, яҙып алынған халыҡ ауыҙынан[77]. Татар халыҡ ижадында ла ул шулайыраҡ тасуирлана: ир затынан булған шүрәле мөгөҙлө, ә ҡатыны – шулай уҡ «һалбыр имсәкле». Ике заттың да оҙон тырнаҡтары була, имеш. Башҡорт һәм татар демонологик образдарға

[76] *Сөләймәнов Ә.М., Солтангәрәева Р.Ә.* Башҡорт халҡының йола фольклоры // Башҡорт халыҡ ижады: йола фольклоры / төҙ., баш һүҙ авт. Сөләймәнов Ә.М., Солтангәрәева Р.Ә. – Өфө: Китап, 1995. – Т. 1. – 12-се б.

[77] Башҡорт халыҡ ижады: йола фольклоры / төҙ., баш һүҙ авт. Сөләймәнов Ә.М., Солтангәрәева Р.Ә. – Өфө: Китап, 1995. – Т. 1. – 55-се б.

урыҫ халҡынан шулай уҡ билдәле булған леший һымаҡ сыуаштарҙағы арсураға, удмурттарҙағы арыға яҡыныраҡ торалыр.

Ғ. Туҡай шиғырында герой улай-былай итеп тормай, әлбиттә. Унның уйында был заттан ҡотолоуҙың башҡа ысулы була. Шүрәленең:

*...Тик ҡытыҡларға яралғандыр*
*Минең бармаҡтарым,*
*Булғылайҙыр, көлдөрөп,*
*Әҙәм үлтергән саҡтарым.*
*Кил әле һин дә бер аҙ*
*Бармаҡтарыңды һелкет, эй,*
*Йәш егет! Килсе икәү*
*Уйнайыҡ бер аҙ кети-кети, –*

тиеүенә егет үҙ хәйләһен ҡороп, түбәндәгесә шарт ҡуя:

*... Һөйләйем шартымды һиңә,*
*Яҡшы тыңлап тор, ана.*
*Шунда бар бит бик оҙон һәм*
*Бик йыуан бер бүрәнә...*
*Бүрәнәнең бер осонда*
*Бар асылған ярығы,*
*Шул еренән ныҡ ҡына һин тот,*
*Эй урман һарығы! –*

тип, ағас ярығына оҙон бармаҡтарын тығырға тәҡдим итә. Бер ҡатлы зихмәтле йән бармаҡтарын ярыҡҡа тыҡҡан арала, егет ярыҡты киреп тотоп торған шына–сөйҙө балтаһы менән һуғып сығарыуы була, енден бармаҡтары ҡыҫылып тора ла ҡала.

Егеттең урман эйәһен шулай хәйлә ҡороп алдап ҡотолоу мотивы «Алдар» тигән башҡорт халыҡ әкиәтенә эксплицив һылтанма яһап, шағир әҫәре менән әкиәт тексы араһында интертекст бәйләнешен хасил итә. Ысынлап та, «әкиәт хәйләкәре … теләһә ниндәй ҡыйынлыҡтар алдында ла юғалып ҡалмай …, үҙенең үткерлеге, етеҙлеге, тапҡырлығы менән балҡып китеүсән»[78]. Телгә алған «Алдар» тибындағы хәйләкәрҙәр тураһындағы әкиәттәрҙең үҙәгендә лә тап ошондай зирәк һәм отҡор герой тора. Әкиәттән иһә билдәле булыу-

[78] *Сөләймәнов Ә.М.* Әкиәттә хәҡиҡәт: Башҡорт тормош-көнкүреше әкиәттәренең жанр составы, сюжет төрлөлөгө, тормош ерлеге. – Өфө: Китап, 1997. – 171-се б.

ынса, шулай уҡ утынға тип урманға барған Әбйәлил исемле егет әлеге шүрәлене хәтерләткән ен-шайтан менән осраша. Бында ла герой алданып барыусан хәйләһеҙ урман эйәһен төрлө шарттар ҡуйып йөҙәтеп, алдап китеп ҡотола[79].

Шулай башҡорт һәм татар халыҡтарына әкиәт һәм хөрәфәттәрҙән билдәле булған шүрәле йәки ен образын Ғ. Туҡай ярым юмор, ярым ирония аша йылы поэтиклаштырған да инде.

Әйткәс, әйтәйек. Шүрәле йәки ен-шайтандың бер ҡатлы ябай зат булыуы хаҡында башҡорт халыҡ легендаларында ла сағылған. Уларҙан ҡотолоуы ла ҡыйын түгел, имеш, тик зирәк һәм отҡор ғына булырға кәрәк. Башҡорт йола фольклорынан билдәле булыуынса, унан төрлөсә ҡотолоп була икән. Мәҫәлән, Башҡортостандың Баймаҡ районы Фәйзулла ауылында Мәғирә Хәлитова (1910 й. тыуған) һөйләүе буйынса, Бөйөк Ватан һуғышы алдынан бесән сапҡанда, шүрәлегә тап булған. Унан ҡасып бара торғас, йылғаны аша сығыуы була, шүрәле шунда уҡ артта ҡала. Бактиһән, шүрәләләр һыуҙан ҡурҡа икән.

Урман эйәһенең шулай бер ҡатлы булыуы хаҡында Ғ. Туҡайҙың геройы ла яҡшы хәбәрҙар булғанға оҡшай. Ул да хәйлә менән эш итә. Уның бармаҡтарын, бая әйткәнсә, ағас ярығына ҡыҫтыра ла, үҙенең исемен «Былтыр» тип әйтеп китә. Ошо ерҙә шулай уҡ башҡорт халыҡ ижады менән аллюзия тыуа. Ул да булһа, исеменән үк аңлашылып тороуынса, – шайтан тиклем шайтанды, шүрәле тиклем шүрәлене төп башына ултыртҡан Алдар егет. Ул да үҙен урманда ҡытыҡлап үлтерергә ниәтләнгән шүрәлене оҡшаш ысул менән «эшкәртеп», үҙенең исемен «Былтыр» тип атап, алдап китә. Егет, шулай итеп, халҡыбыҙҙың боронғо ышаныу-инаныуына таянып, үҙенең зирәклеген эшкә егеп, аҡылға еңелерәк бер ҡатлы урман эйәһенән ҡотола.

Күреүебеҙсә, Ғ. Туҡайҙың, ғалимдар әйткәнсә, *татар* халыҡ мифологияһына нигеҙләнеп яҙылған «Шүрәле» әҫәрендә сағылыш тапҡан мифик заттың да, шиғыр ҡоролған сюжеттың да асылда башҡорт халыҡ ижадына эксплицив аллюзия – һылтаныуҙың барлығы, шуның менән интертекст бәйләнештең булдырылыуы күҙәтелә. Ике ҡәрҙәш халыҡтарҙың мифологияһынан билдәле булған был персонаж әҫәрҙә мәҙәни антропология (культурная антропология) образы булып

[79] Башҡорт халыҡ ижады: Шаян әкиәттәр һәм көләмәстәр / Төҙ. Ә.М. Сөләймәнов, баш һүҙ авт. Л.Г. Бараг менән Ә.М. Сөләймәнов. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1992. – 28–30-сы бб.

күҙаллана. Йәғни халыҡтарҙың боронғо мәҙәниәтендә һаҡланған уртаҡ образдың тулы һынын поэтиклаштырылып мәңгеләштереүе менән был шиғыр ҡиммәтле.

Сюжет уртаҡлығы, тулылығы булған хәлдә лә, мифик заттың бер айырмалы ағзаһының булыуы асыҡлана: ул да булһа маңлайында һерәйеп торған бер бөртөк мөгөҙ.

Әлегәсә ҡаралған «Башҡорт халыҡ ижады» академбаҫмаға ингән «Йола фольклоры» томында шүрәленең мөгөҙлө булыуы хаҡында мәғлүмәт бирелмәгән. Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә лә был хәл күҙәтелмәй. Әммә бының хаҡында ремарка рәүешендә генә ситләтеп шуны әйтеп булыр ине.

Татар халыҡ ижадында «татар» шүрәлеһе – урман эйәһе, ысынлап та, мөгөҙлө булыуы хаҡында билдәле[80]. Тимәк, Ғ. Туҡай Шүрәлеһенең дә мөгөҙө булыуына ғәжәпләнерлек түгел, һәм был хаҡта һүҙ сурытып тороу ҙа файҙаһыҙ кеүек. Әммә, ғөмүмән, мифик кире заттың мөгөҙлө булыу ихтималлығын беҙҙең ерлектә шулай ҙа күҙәтергә мөмкин. Мәҫәлән, был үҙенсәлекле мөгөҙлө образ башҡорт халҡының «Ҡурай тураһында легенда» йәки «Ҡурай тураһында әкиәт» тигән әҫәрҙәрендәге мөгөҙлө хан образына имплицив аллюзия тыуҙырғандай. Әкиәттән мәғлүм булыуынса, урманда йәшәгән бер хан тирә-яҡ ауыл егеттәрен үҙенә хеҙмәткә алдырта ла, кире ҡайтармай икән. Улар киткән еренән ғәйеп була, имеш. Баҡтиһәң, хандың мөгөҙөн ҡырыр өсөн алыналар икән. Был хәл оло сер булғанлыҡтан, эште башҡарған һәр егет үлтерелгән, ти. Ул мөгөҙ иһә осло шешек кеүек һерәйеп торған йәки хандың маңлайында тәкәнең мөгөҙөләй мөгөҙ булған, имеш, тип әйтелә әкиәттә[81]. Мөгөҙлө хан хаҡындағы әкиәт асылда мөгөҙлө Искәндәр йәки Александр Македонский хаҡындағы әкиәт һәм легендалар сюжеты тибына ҡараған сюжеттар менән уртаҡлыҡ тыуҙыра – интуитив рәүештә сала-сарпы булһа ла иҫкә төшөрә. Әммә нисек кенә булмаһын, Туҡайҙың мөгөҙлө Шүрәлеһе башҡорт һәм татар халыҡтары мифик аңының реминисценцияһы (З. Шәриповаса, алынмаһы) тип танырға мөмкин. Йәғни поэмала уртаҡ мәҙәни универсалийҙы тәшкил иткән мифик образдың һынландырылыуы шикһеҙ.

---

[80] Татар мифологиясы. Энциклопедик сүзлек / Төз., баш сүз, аңлатма авт. Ф. Урманче. – Ҡазан: Магариф, 2008. 1-нче т. – 25-нче б.

[81] Башҡорт халыҡ әкиәттәре / Төҙ. А. Усманов. – Өфө, 1952. – 68-се б.; Башҡорт халыҡ әкиәттәре /Төҙ. Ғ. Ишбулатов. – Өфө, 1956. – 194-се б.

Ғ. Туҡай төрки һәм башҡа халыҡтарының боронғо хөрәфәттәрендә, ышаныуҙарында һаҡланған йәнә бер мифик зат – һыу инәһе образына ла мөрәжәғәт итте. Бәлки, ысынлап та, «Һыу инәһе» (1908) поэмаһының исемендә билдәләнеүенсә, шағирға был хәлде «бер малай ауыҙынан» ишетергә насип булғандыр. Һәр хәлдә әҫәрҙең сюжеты кемдеңделер, йәғни малайҙың башынан үткән хәл-ваҡиғаға ҡоролғандай итеп ҡабул ителә. Асылда шағирҙың маҡсаты ла шунан ғибәрәт.

Был әҫәрҙә һүрәтләнгән һыу инәһе кеүек мифик образы шулай уҡ ҡыҙыҡлы. Унда һүҙ, билдәле булыуынса, бер малайҙың һыу инеп йөрөгәндә оҙон сәсен алтын тараҡ менән тарап ултырған бер әҙәми булмаған, әммә ҡатын-ҡыҙ затынан булған бер йәнде – Һыу инәһен күреүе, уның алтын тарағын ҡулына төшөрөп алып ҡасыуы һ.б. хаҡында һүрәтләнә:

*Йәй көнө эҫе һауала мин һыуҙа ҡойонам, йөҙәм;*
*Сәсрәтәп, уйнайым, сумам, баш менән һыуҙа йөҙәм…*
*Бер ваҡыт, китәм тигәндә, төштө күҙем баҫмаға,*
*Ҡараһам, бер ҡурҡыныс ҡатын ултырған баҫмала.*
*Көнгә ҡаршы ялтырай ҡулындағы алтын тараҡ,*
*Шул тараҡ менән ултыра туҙынған сәсен тарап һ.б.*[82] …

Әйтергә кәрәк, Һыу инәһе образы татар ғына түгел, шулай уҡ башҡорт, сыуаш, мари һ.б. халыҡтарҙың хөрәфәти ҡараштарына нигеҙләнгән мифтарында осратырға мөмкин. Мәҫәлән, сыуаш һәм фин-уғыр халыҡтары мифологияһындағы Һыу инәһе – Су анасы, Су бабасы йәки Һыуһылыу – Су-сылу киң таралған герой. Сыуаштарҙа ул – Шыв амашы. Йән эргәһенә йәм, тигәндәй, был халыҡта Һыу атаһы ла бар, имеш. Ул да булһа – Шыв ашше. Шулай уҡ мифологик ышаныуҙарында һыу башлығы – шывхуси, шулай уҡ шыври – водяной мәғәнәһендә лә йөрөй. Йәғни һыу эйәһенең төрлө «вазифаһы» булған, тип белгәндәр. Ғалим С.Г. Кляшторный әйтеүенсә, фин уғырҙарҙан уларға күскән Шывриҙың ҡыҙы – Вуташының булыуы ла ихтимал[83]. Һәм дә Вуташ, беҙҙәгесә, һылыу ҡыҙ төҫөндә оҙон сәстәрен

[82] *Туҡай Ғ.* Шиғырҙар. Әкиәттәр. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1977. – 111–112-се бб.

[83] См.: *Кляшторный С.Г.* Летопись трех тысячелетий [Электронный ресурс]: http: //www. tatforum.info.

алтын тараҡ менән тарап ултырған, имеш[84]. Мариҙарҙа һыу инәһе – Вюд тип атала һәм ул йә һылыу ҡатын-ҡыҙ, йә ҡарсыҡ төҫөндә күҙгә салынған. Мари мифологияһы буйынса уның тараҡ менән тараған оҙон сәсле булыуы ла билдәле һ.б.[85]

Башҡорт халыҡ ижадына ла был персонаж таныш һәм эпостарыбыҙҙа Һыуһылыу образында һынландырылған: Мәҫәлән, «Аҡбуҙат» эпосында Нәркәс, «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙа – Һыуһылыу булараҡ билдәле. Бында иһә һылыу бер ҙә кешеләрҙең башына етер яуыз мәкерле заттан түгел, ә егеттәрҙе үҙенә ғашиҡ иттерерлек сибәр һәм яғымлы йәш ҡыҙ булараҡ тасуирлана. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында ул ғәҙәттә «...күлдең ситендә генә яҫы таш өҫтөндә толомдарын тағатып» тарап ултырған килеш һүрәтләнә. Бына шул толомдарынан егет килеп тотоп ала ла инде. Әммә Ғ. Туҡай шиғырында телгә алынған Һыу инәһе оҙон сәсен тарап ултырған алтын тараҡ иһә башҡорт ерлегендә сағылыш тапмаған тиерлек. Эпостың 1964 йылда Башҡортостандың Әлшәй районы Мәкәш ауылында Биктимер Вәлиуллиндан Мөхтәр Сәғитов яҙып алған сағыштырмаса тулыраҡ варианты иҫәпләнгән бер тексы менән «Башкирская русалка» исеме аҫтында 1843 й. «Москвитянин» тигән журналда рус лексикографы һәм яҙыусыһы Владимир Даль тарафынан руссаға тәржемә ителеп, бер ни тиклем тулыландырылған версияһында ғына Һыуһылыуҙың ана шул алтын тараҡ менән сәсен тарауы хаҡында әйтелә[86]. Эпостың башҡа варианттарында иһә алтын тараҡ телгә алынмай, ҡыҙҙың сәс тарап йәки үреп, йә иһә бармаҡтары менән яҙып ултырыуы хаҡында ғына әйтелә. Башҡа варианттарҙа хатта ҡыҙҙың оҙон сәсе ылымыҡ кеүек һыуҙа уралып ятҡан, тиелгән.

Эпоста алтын тараҡтың телгә алынмауын халыҡтың уға әллә ни әһәмиәт бирмәүе, шунлыҡтан хәтерҙән төшөп ҡалыуы менән аңлатып булалыр. Һыуһылыуҙың, әҙәми зат кеүек, сәсен тарап йәки яҙып,

---

[84] Ҡара: Мифологический словарь / гл. ред. Е.М. Мелетинский. – М.: Советская энциклопедия, 1990 г. [Электронный ресурс]: http://www.twirpx.com/file...

[85] *Иликаев А.С.* Мифы народов Башкирии. Боги и герои. – Уфа: Вагант, 2012. – С. 28 (221 с.)

[86] Башҡорт халыҡ ижады: Эпос / Төҙ. Ә. Сөләймәнов, инеш мәҡәлә М. Сәғитов, һүҙ ахыры Ә. Сөләймәнов; аңлатма М. Сәғитов менән Ә. Сөләймәнов. – Өфө: Китап, 1998. – Т. 3. – 180-се б.; *Даль В.* Башкирская русалка // Башкирия в русской литературе. – Уфа: Башк. кн. изд-во, 1989. – С. 182.

үреп ултырыуы ҡыҙығыраҡ һәм тормошҡа яҡыныраҡ булып тойолғандыр булһа кәрәк. Эпик әҫәрҙең XIX быуат урталарында уҡ теркәлеп донъяға сығарылған рус версияһында алтын тараҡ образының телгә алыныуы, был эпос тексының боронғораҡ булыуы хаҡында һөйләүе ихтимал. Шулай булғас, тимәк, 1964 йылғы Әлшәй вариантының да ошо боронғо традицияны һаҡлауын раҫлай. Һуңынан был образдың халыҡ хәтерендә һаҡланмайынса (бәлки, башҡорттоң эстетик зауығына күберәк көмөш, ынйы кеүек затлы биҙәгестәр яҡыныраҡ булғанлыҡтан алтынға әллә ни иҫ китмәүе, шунлыҡтан ваҡ деталь кеүек ҡабул ителеүе мөмкин) телдән төшөп ҡалыуы ихтимал.

Ғ. Туҡай поэмаһындағы алтын тараҡ та, тимәк, боронғораҡ сакраль ҡарашҡа нигеҙләнгән. Тик әҫәрҙә ул, башҡорт эпосындағы Һыуһылыуҙан («Заятүләк менән Һыуһылыу») йәки Нәркәстән («Аҡбуҙат») айырмалы рәүештә, уҫал характерлы зат итеп һүрәтләнә. Был да халыҡ хәтеренән килгән күренеш. Боронғо мәжүси ҡараш буйынса, үрҙә һанап үтелгән мифик заттар – урман-тау, һыу-күл, йорт-ҡаралты, мал эйәләре, ен-бәрей, мәскәй, убыр һ.б. изге заттан булып, донъяны һаҡлаусы ярҙамсылар булған. Йәғни эпостарыбыҙҙа был сит мөхит заттарынан булған һыу һылыуҙарының ыңғай геройҙар рәтенә инеүе эпик әҫәрҙәренең күпкә боронғораҡ архаик ҡомартҡы булыуы менән бәйле. Ә инде Ислам дине тарала башлағас, Х.Г. Ҡороғлы әйтеүенсә, уларға уҫал төҫ бирелеп, сир-зәхмәттәр таратыусы яуыз көстәр – кире аллаһтар пантеоны рәтенә индерелгән[87]. Убырлы ҡарсыҡ миҫалында татар ғалимдары, В.Я. Пропптың «Исторические корни волшебных сказок» (1946) тигән китабына һылтанып, шулай уҡ билдәләүенсә, боронғо ышаныуҙар нигеҙендә ул, мәҫәлән, йәш егеттәрҙе бәлиғлек (инициация) йолаһын атҡарыусы зат булараҡ изгеләштергән. Ә инде яңы дин таралып, иҫке тәртиптәр бөтөрөлгәс, мифик ҡарсыҡ кире типтар рәтенә индерелә: уның ҡылған барлыҡ эш-хәрәкәттәре яуыз, кире эш тип беленгән[88]. Шул замандан алып төрки халыҡтарының рухи донъяһында мифик заттар демонистик төҫ алған. Сөнки Ислам күп аллалыҡты тыя һәм бер Аллаға табыныуҙы, уға ғына ғибәҙәттәр атҡарыуҙы яҡлай һ.б. Күпселек

[87] Ҡара: *Короглы Х.Г.* Взаимосвязи эпоса народов Азии, Ирана и Азербайджана. – М.: Наука, 1983.

[88] Татар халыҡ ижады: Әкиәтләр / Төз., искәртмә авт. Гатина Х.Х., Яхин Х.Х. – Ҡазан: Тат-н кит. нәшриәте, 1978. 2-нче китап. – 11-нче б.

халыҡтар аңында барлыҡҡа килгән был үҙгәрештәрҙең оҡшаш рәүештә атҡарылыуы ла әлеге мәҙәни универсалийҙар күренеше булыуы менән бәйле.

Тимәк, Ғ. Туҡайҙың «Һыу инәһе» поэмаһында боронғо мифик зат күҙ алдына исламлаштырылған демонистик зат булараҡ килеп баҫа. Икенсе төрлө әйткәндә, был осраҡта боронғо мәжүси ҡарашлы мәҙәниәт икенсе йәки яңы мәҙәни ҡатлам – заман кешеһенә таныш һәм яҡын булған, уның донъяға ҡарашы менән тап килгән ислам традицияһының бер аҫыл күренеше булараҡ баҙыҡландырылған. Башҡорт яҙыусыһы Имай Насыриҙың (1898–1942) «Еңелгән ятыу» повесында (1837) һыу инәһе шулай уҡ уҫал холҡло итеп һүрәтләнә һәм уның ҡулында шулай уҡ алтын тараҡтың булыуы әйтелә: «Әлмәт ауылының халҡы телендә әкиәттәр һөйләнгән. Ауылдан өс саҡрым алыҫлыҡта булған Ҡара ятыуҙа Һыу инәһен тыуҙырғандар. Ул айлы матур төндәрҙә яр башына сығып ултырып, ай яҡтыһында ялтырата-ялтырата алтын тарағы менән сәс тарай торған булған. Яҡын барған балаларҙы һыу төбөнә алып төшөп киткән», – тиелгән[89]. «Населенные пункты Башкортостана. Уфимская губерния. 1877 г.» тигән хеҙмәттә әлеге Әлмәт ауылы ла күрһәтелгән[90]. Йәғни ул заманда был ауыл тарихи Башҡортостан биләмәһенә ингән булған. Тимәк, телгә алынған һыу инәһе лә башҡорт халыҡ ижады емеше булып күҙаллана. И. Насыри әҫәрендә һүрәтләнгән Әлмәт ауылы эргәһендәге Ҡара ятыуҙағы һыу инәһе сәсен баяғы алтын тараҡ менән тарауы иһә был хөрәфәти хикәйәләге эпос менән уртаҡ булған сюжеттың боронғолоғо хаҡында һөйләй булһа кәрәк. Уҫал итеп сағылдырылыуы иһә – халыҡ хәтеренән уның тәбиғәттәге боронғо роленең, уға ҡарата мәжүси ҡараштың Ислам дине арҡаһында онотолоуы сәбәпсе. Тимәк, Ғ. Туҡай ҙа үҙенең Һыу инәһен асылда башҡорт халыҡ ижадынан «бурысҡа алып тороуы» ихтимал. Быға ғәжәпләнергә лә түгелдер, шағир күңелендә әсә теле, әсә һөтө менән һеңдерелгән рухи ҡиммәттәр, халҡы ижады поэзияһы үҙенекен иткән булһа кәрәк. Һуңынан шағир хәтерендә улар тулайым бер мифик образ булараҡ тыуып, шиғырында йылы поэтиклаштырылған.

---

[89] *Насыри И.* Әҫәрҙәр: ике томда / Төҙ., баҫтыр. әҙер. Кирәй Мәргән. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1957. – 296-сы б.

[90] Населенные пункты Башкортостана. Уфимская губерния / Бурангулов Б.В. (отв. ред.). – Уфа: Китап, 2002. – Ч. 1. – С. 292.

Ә Һыу инәһенең яман холҡло булып, асыуланыусан бер зат булыуы шунан ғибәрәт. Поэманан билдәле булыуынса, Һыу инәһе сәсен тарағандан һуң баҫмала алтын тарағын онотоп, һыуға төшөп китә. Шуны күреп ҡалған малай:

*... Инде мин аҡрын ғына килдем дә мендем баҫмаға,*
*Ен онотҡан, ахыры, ҡалған тарағы баҫмала.*
*Яҡ-яғымда һис кеше лә юҡлығын белдем дә мин,*
*Саптым ауылға, тараҡты тиҙ генә алдым да мин...*

Шулай йүгереп ҡайтып бара торғас, ул артына боролоп ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, артынан теге Һыу инәһе баҫтырып килә, имеш:

*...Ҡысҡыра ул: «Ҡасма! Ҡасма! Туҡта! Туҡта, эй, ҡараҡ,*
*Ниңә алдың һин уны, ул бит минең алтын тараҡ!»*
(«Һыу инәһе», 1977, 112-се б.)

Бында Һыу инәһе затлы әйберенә ҡул һуҙғанға көйөп, нисек тә уны кире ҡайтарып алырға һәләтле булыуы хаҡында халыҡтың борондан ышаныу-инаныуынан билдәле. Беренсенән, халыҡ, ғөмүмән алғанда, төрлө сир-зәхмәт, бәлә-ҡазанан һаҡланып, кире көс, мифик заттан булған ен кеүек төрлө эйәләрҙең шәхси әйберҙәренә тейеүҙе тыйған; икенсенән, һыу өҫтөндә аҡҡан томбойоҡтар Һыу инәһенең әйберҙәре тип һаналған һәм, әлбиттә, уларҙы өҙөү мотлаҡ тыйылған. Юғиһә үс алыуҙары йәки төрлө сир-зәхмәт таратыуҙары ихтимал, тип белгәндәр[91]. Шуның өсөн дә Туҡайҙа герой алтын тараҡты кемдән сәлдереүен әйткәс, әсәһе ҡурҡыуға төшә һәм әҫәрҙә, уның «эсенән уйға ҡалды», тиелә. Ә инде Һыу инәһе, ҡуймайынса, төн уртаһында килеп:

*...Һис өҙлөкһөҙ «шыҡ» та «шыҡ!» беҙҙең тәҙрәне ҡаға*
*Ул ҡот осҡос сәстәренән, шишмә төҫлө, һыу аға! –*
(«Һыу инәһе», 113-сө б.)

тип тәҙрә шаҡый. Донъя тәжрибәһен татыған әсәһе «алтын тараҡты тиҙ генә эҙләп табып, Атты ла тышҡа, тиҙ үк ҡуйҙы тәҙрәне ябып», тип ҡотола унан. Әсә кешенең үҙе һәм улы өсөн ҡурҡыуының сәбәбе лә ана шул кире заттарға зыян итеүҙең һөҙөмтәһен яҡшы аңлауында, тыйыуҙы боҙоу сәбәпле, язаһын алыу мөмкинлеге хаҡында хәбәрҙар булыуындалыр. Ә инде геройҙың шулай арт

[91] Башҡорт халыҡ ижады: йола фольклоры / төҙ., баш һүҙ авт. Сөләймәнов Ә.М., Солтангәрәева Р.Ә. – Өфө: Китап, 1995. – Т. 1. – 58-се б.

һабағы уҡытылғас, «Мин дә шунан бирле ундай эшкә ҡыймай башланым, “Йә, эйәһе юҡ!” – тип, әйберҙәргә теймәй башланым», тигән ҡарарға килеүе лә ана шул ышаныуҙар һәм ҡурҡыу-тыйылыуҙар һөҙөмтәһе. Ике донъя – кеше һәм башҡа тылсым, мифик, демонистик заттар – араһында тигеҙлек (равновесие) боҙолмаһын өсөн дә кәрәк тип табылғандыр был боронғо ышаныуҙар, тыйыу һәм тыйылыуҙар. Бында шулай уҡ тирә-яҡ мөхиткә, тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡарау, уның гармонияһын боҙмау кеүек этнопедагогик тәрбиәүи төшөнсәләрҙең дә ятыуы көн кеүек асыҡ. И. Насыри әҫәрендәге «исламлаштырылған» Һыу инәһенең «…Яҡын барған балаларҙы һыу төбөнә алып төшөп киткән»леген дә ошонан сығып аңлатырға булалыр.

Ғөмүмән, күпселек халыҡтар мифологияһында һыу инәһе персонажы йыш осраған образдарҙың береһе, һәм «мифологик фекерләү һөҙөмтәһендә, хыялда тыуған (ошо) сихри заттарҙы бабаларыбыҙ йәнле итеп күҙаллаған … тоторо҅клo һыҙаттар менән ҡылыҡһырлаған»[92]. Һөҙөмтәлә, ошо хыял һәм ҡараштар нигеҙендә кеше аңында төрлө легендалар, хөрәфәти хикәйәләр тыуған. Үҙе һәм ижады этнокультурология объекты булараҡ өйрәнелеүгә хаҡлы булған Ғ. Туҡай ана шундайҙарҙың береһен әлеге поэмаһында художестволы һүрәтләгән дә инде. Халыҡтың мәҙәни антропологияһы (культурная антропология) образдары булған ошо демонистик персонаждарҙы йылы поэтиклаштырыуы менән шағир һанап үтелгән мәжүси ҡараштары, ышаныуҙар теле, мәҙәниәте оҡшаш халыҡтарҙың хөрәфәти ҡараштарын тулыландырып, гармониялаштыра, рухи донъя картинаһының бөтөнлөгөн, тулылығын хасил итергә мөмкинлек бирә, мәҙәни универсалийҙарҙы байыта.

Ғабдулла Туҡайҙың халыҡ әкиәттәренә реминисценция тыуҙырған «Таҙ» (1908) тип аталған тағы бер шиғыры ҡыҙыҡлы. Тәү ҡарамаҡҡа был йәнә лә «Бер ауыл малайы ауыҙынан» тип, шиғыр шәкерттәрҙең еңел булмаған тормошон бөтә ысынбарлығында һүрәтләүгә арналыуына ҡарамаҫтан, интуитив рәүештә унда ла халыҡ әкиәте эстетикаһын һиҙемләп ҡалырға мөмкин. Уның фабулаһы түбәндәгесә: шәкерттәр араһында шаянлығы һәм отҡорлоғо менән айырылып торған бер таҙ малайҙың башҡа һабаҡташтарына баш бу-

[92] Башҡорт халыҡ ижады: йола фольклоры / төҙ., баш һүҙ авт. Сөләймәнов Ә.М., Солтангәрәева Р.Ә. – Өфө: Китап, 1995. – Т. 1. – 13-сө б.

лып уйнатыуын күреп ҡалған ҡазый, уны сыбыҡ менән сыбыҡларға тип, үҙ янына саҡыртып ала:

*...Ят! Һуҙыл! Эй таҙ пәрей!*
*Тал сыбыҡтан һеҙ ҡотолалмаҫһығыҙ әле, –*

тип ҡысҡыра был барыһын шелтәләп. Таҙ буйһоноп килә янына, баш өҫтөндә сыбыҡ шыжлай, тик «Бер-ике һуҡты ҡазый, был ниндәй эш! Бер саж-сож итмәйҙер һуҡҡан тауыш», ти, ҡаты тауыштың ғына сығыуы ишетелә, имеш. Бында ниндәйҙер ғилләнең барлығын бөтәһе лә аңлап ҡалып, таҙ малайҙың камзулын күтәреп ҡараһалар:

*...Хәйлә иткән бында ла ул таҙ яуыз,*
*Белмәгә мөмкин, һүрәткә баҡһағыҙ!*[93]

Йәғни зирәк малай сыбыҡ менән һыҙырыласағын алдан яҡшы белгәнлектән, үҙенең хәлен көн элгәре хәстәрләп үк ҡуя: арҡаһына ҡаты нәмә бәйләп ала. Шунлыҡтан баяғы сыбыҡ та ғәҙәттәге «саж-сож»ды түгел, ә «ҡаты тауыш» ҡына сығарған. Был «ҡыҙыҡ эште» күргән ҡазыйҙың да «ғәйрәте һүнеп», уҫаллығы юҡҡа сығып, «шарҡылдап көлөүҙән» башҡа хәле булмай. Ошо ҡыҙыҡ һәм, шул уҡ мәлдә, аяныс хәл арҡаһында башҡа шәкерттәр ҙә язанан ҡотола.

Бында авторҙың уйы буйынса, һабаҡташтарын язанан ҡотҡарған отҡор һәм зирәк малайҙың «таҙ малай» тип аталыуы ихтибарға лайыҡ һәм холоҡ-фиғеле менән халыҡ әкиәттәре араһында Таҙ тураһындағыларын хәтерләтеп, интертекст бәйләнешен тыуҙыра. Әйтергә кәрәк, таҙ образы мәҙәни универсалийҙар йәһәтенән байтаҡ халыҡтар ижады өсөн дөйөм типик герой образы. Айырыуса, уның хаҡында әкиәттәр башҡорт, татар, ҡаҙаҡ халыҡтарында киң таралған. Уларҙың сюжет нигеҙе лә Таҙҙың зирәклеге, отҡор һәм намыҫсан булыуы арҡаһында ағаларының да бәхеткә ирешеүенә ҡоролған. Ул башҡорт халыҡ әкиәттәренең саф тылсымлы, батырҙар тураһындағы, тормош-көнкүреш сюжетлыларынан да, көләмәстәренән дә киң билдәле[94]. Әгәр тылсымлы әкиәттәрҙә төрлө сетерекле хәлдәрҙән ул тәбиғи зирәклегенән башҡа тылсымлы әйберҙәр ярҙамында еңеп сыҡһа, тормош-көнкүрештәргә ҡарағандарында иһә уға тик үҙ аҡылы һәм отҡорлоғона таянырға тура килә («Бай ҡыҙы менән Таҙ», «Таҙ менән

---

[93] *Туҡай Ғ.* Таҙ // Шиғырҙар һәм поэмалар. – 101–102-се бб.

[94] Башҡорт халыҡ ижады: Тылсымлы героик әкиәттәр / Төҙ. Минһажетдинов М., Харисов Ә., аңлатма авт. Бараг Л., Минһажетдинов М. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1976. 2-се кит. – 6–16-сы бб.

убырлы һеңлеһе», «Таҙ», «Таҙ батыр», «Бәхет күле» һ.б.). Татар халыҡ әкиәттәрендә лә Таҙ яҡшы билдәле образ, унда ла ул үҙенең аҡыл таһыллығы, зирәклеге арҡаһында (тылсымлы әкиәттәрҙә тылсым көсө ярҙамында) уңыштарға өлгәшеп, сетерекле хәлдәрҙән иҫән-һау ғына түгел, хатта байып, батша йәки хан ҡыҙын кәләш итеп алыуға, улай ғына түгел ағайҙарын да онотмайынса, уларҙы ла бәхетле итеүгә ирешә («Өс ул», «Таҙ – батша кейәүе»). Был ерҙә шуның хаҡында ла әйтмәү мөмкин түгел. Ни өсөн юмористик тормош-көнкүреш әкиәттәрендә Таҙ иҫәр, алйот кеүек сифаттар менән дә ҡылыҡһырланған икән? Тәбиғи рәүештә килеп тыуған был һорауға башҡорт халыҡ әкиәттәренең ошо жанр төрҙәрен бөтә тулылығында тикшергән Ә.М. Сөләймәнов Таҙ менән ахмаҡтарҙы айырып ҡарай. Сөнки тормошта «таҙ» тип күберәк башы ҡутырлап, сәсһеҙ ҡалған кешеләрҙе атағандар (быға фавус, псориаз, дерматит кеүек ҡысытма тире сирҙәре сәбәпсе булғылай). Ундай кешеләрҙән күберәк үсекләп көлгәндәр *(Мәҫәлән, «Таҙ килә күперҙән, Таҙҙың башы күпергән!», «Таҙ, Таҙ, таҙыған, Таҙ ҡаҡ башын тыҙыған. Тыҙымаҫ ине башын, Тәҡәт итмәй ҡысыған...» һ.б.*). Күреүебеҙсә, бында Таҙҙан уның ярым аҡыл булыуынан түгел, ә физик етешһеҙлеген мәрәкәләп көлгәндәр.

Шуның өсөн дә Әхмәт Сөләймәнов был хаҡта шулай тип дөрөҫ билдәләп үтә: «әкиәттә “иҫәр” менән “таҙ” “диуана”, “ахмаҡ”тар менән бергә синоним рәтен хасил итешһә лә, тормошта иҫәр (диуана, иҫәүән, ахмаҡ, һәтәү һ.б.) – үҙ урынында, таҙ – үҙ урынында. Тормошта таҙҙан көлөү этикаға ҡарай, әкиәттәгеһе – эстетикаға». Һуңғыһына ҡарата ғалим «...асылда, таҙҙан, иҫәрҙән көлмәй әкиәт (йәғни халыҡ. – *Н.Х.*), ә уларҙың ҡыланышы аша, тормоштағы иҫле иҫәрҙе, һәтәүҙәрҙе, бер ҡатлыларҙы, бешмәгәндәрҙе һ.б. пародиялай» тип, өҫтәп, айырым-асыҡ күрһәтеп үткәйне[95]. Үҙебеҙҙән был фекерҙең икенсе осрағының булыуы ихтималлығын белдереп, шуны ла өҫтәр инек: ул тәбиғәт биргән отҡорлоғо һәм зирәклеге арҡаһында үҙен йәберләгәнде төп башына ултыртып, сетерекле осраҡтарҙан сығыу һәләтенә эйә. Был ситуациянан үҙе генә ҡотолоп ҡалмай (йәғни ул эгоист түгел, ә – альтруист), башҡаларҙы ла ҡотҡара, ағаларын бай йәки батша ҡыҙҙарына өйләндереп, башлы-күҙле итә һ.б.

[95] *Сөләймәнов Ә.М.* Әкиәттә хәҡиҡәт: Башҡорт тормош-көнкүреше әкиәттәренең жанр составы, сюжет төрлөлөгө, тормош ерлеге. – Өфө: Китап, 1997. – 312-се б.

Ғ. Туҡайҙың әлеге әҫәрендә лә шаян, шуҡ малай «Таҙ» тип атала бит һәм үҙенең тик ошо тәбиғи зирәклеге һәм отҡорлоғо ярҙамында язанан үҙен генә түгел, тотош синыфташтарын да азат итеп алып ҡала. Уның ҡылығын күргән ҡазыйҙың ябай ғына көлмәүе, ә «шарҡылдап», йәғни, ҡыҙыҡ күренешкә сыҙамайынса, бар көсөнә рәхәтләнеп көлөүе киҫкенләшеп китеп барған ситуацияны көтмәгәндә юҡҡа сығарыуы шуға булышлыҡ иткән дә инде. Ул шулай альтруист, йәғни башҡаларҙы ла ҡайғыртҡан кешелекле кеше, образы булараҡ та төҫмөрләнә. Тимәк, Ғ. Туҡай был осраҡта ла халыҡ әкиәттәре, көләмәстәренән билдәле булған зирәк Таҙ образын ижади үҙләштереп, шуның менән әҫәрендә фольклор традицияһы менән интертекст бәйләнешен булдырған. Был бәйләнеште интуитив рәүештә башҡорт уҡыусыһы ла төҫмөрләй ала, сөнки был герой халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадында ла билдәле образ. Әҫәрен дә автор бушҡа ғына «Таҙ» тип атамағандыр. Әгәр был хәл («Бер ауыл малайы ауыҙынан» тип нарыҡлана), ысынлап та, тормошта булған хәл булып та, отҡор шәкерттең исеме Ғабдулла, Мәжит, Ғайфулла кеүек һәм башҡа булыуы ла мөмкин бит әле. Тик шағирҙың ижади маһирлығы, фольклор менән яҡшы хәбәрҙар булыуы, эрудицияһы үҙенекен итә, һәм әҫәренең үҙәгендә үҙенең аҫыл һәм башҡаларҙан айырылып торған әкиәт эстетикаһын үҙһенгән сифаттары менән даны таралған Таҙ образын художестволы һүрәтләй. Һөҙөмтәлә, был ябай герой халыҡта ҡыҙыҡһыныуы уятып, әҫәргә популярлыҡ яулауға ирешкән.

***

Шулай итеп, XIX–XX быуат башы әҙәбиәте яңы әҙәби фекер булараҡ формалашҡан осорҙа халыҡ ижады традицияларын үҙләштереп, уны шулай уҡ художестволы сағылдырыуын дауам итте. Был осор әҙиптәре тормош ысынбарлығын художестволы сағылдырғанда, интуитив, аңһыҙ рәүештә, әкиәт, эпос сюжеттарына, образдарына, легенда һәм риүәйәттәренә, йырҙарына мөрәжәғәт итеп, ижади үҙләштерҙе. Уларҙың күптәрен бөгөнгө көндә эксплицив йәки имплицив аллюзия йәки реминисценция тыуҙырыуҙарын асыҡлау мөмкинлеге барлыҡҡа килде. Был йәһәттән бигерәк тә Һ. Салихов, Ф. Туйкин, Б. Мирзанов кеүек яҙыусыларҙың ижады айырыуса сағыу миҫал булып торалыр. Был, бер яҡтан, әҫәрҙәренең идея-эстетик һәм идея-художестволы үҙенсәлектәре хаҡында һөйләһә, икенсе яҡтан, мөһим һәм актуаль проблема аспекты булараҡ, халыҡ ижады менән тығыҙ

бәйләнешкә инеп, мәҙәниәттәр (фольклор менән әҙәбиәт) бәйләнешен дә хасил итте. Ә инде үрҙә һанап, барлап үтелгән мотив һәм сюжеттарҙың байтаҡ төрки халыҡтары менән бәйләнештә булыуын, хатта ҡайһы бер европа халыҡтары әкиәттәрендә лә сағылыш табыуын иҫтә тотҡанда, башҡорт әҙәбиәтенең мәҙәниәттәр универсалийының бер өлөшө булып, уның баҙыҡ бер өлгөһө булараҡ күҙалланыуы көн кеүек асыҡ.

Милли ерлектә мәҙәниәт универсалийын булдырыуҙа татар шағиры, татар поэзияһы классигы Ғ. Туҡайҙың да роле ҙур. Татар шағирының ижадында башҡорт фольклорынан тыш башҡа халыҡтарға ла таныш булған традицияларҙың күҙәтелеүе, уларҙың күпселек осраҡта уртаҡ икәнлеге, шуның менән эксплицив һәм имплицив интертекст бәйләнештәрҙең булдырылыуы ошо универсалийлыҡты көсәйтә һәм уның әһәмиәтен арттыра. Сөнки шағирҙың шиғырҙарында бер халыҡтың поэтиклаштырылған рухи донъяһы башҡа ҡәрҙәш, шул иҫәптән башҡорттоң да, рухи донъя картинаһы менән оҡшаш, уртаҡ булыуы дөйөм төрки халыҡтарының мәҙәниәте универсалийын тәшкил итә.

Киңерәк һәм күберәк материал йәлеп итеп, мәҫәлән, башҡорт, татар әҙәбиәттәре менән бер рәттән, сыуаш йәки ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, ҡарасай һ.б. халыҡтарҙың кеүек һүҙ сәнғәтен компаративистик планда ҡарау, уларҙың рухи донъя картинаһы үҙенсәлектәрен өйрәнеү перспективалы тема.

## Өсөнсө бүлек

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ ФОЛЬКЛОР ИНТЕРТЕКСЫ КҮРЕНЕШЕ

ХХ б. аҙағы – ХХІ б. башы башҡорт әҙәбиәте ғилеме, ғөмүмән, бөтә гуманитар фәндәр кеүек үк, байтаҡ үҙгәрештәргә, күтәрелеш һәм көрсөккә тәгәрәүгә дусар ителде. Яңы теориялар тыуа торҙо, иҫкеләре онотолдо, шул уҡ мәлдә, консерватив тикшеренеү ысулдары ла тотороҡло һаҡлана килде. Шулар араһында, үрҙә телгә алынғанса, М.М. Бахтиндың эҙләнеүҙәренә нигеҙләнеп, үткән быуаттың икенсе яртыһында лингвистик һәм философик мәктәптәрендә, тикшеренеүҙәрҙә формалашҡан интертекст теорияһы шундайҙарҙан.

Фольклор менән әҙәбиәт тә асылда мәҙәниәттең бер өлөшө булараҡ, философия менән һуғарылыусан сифаттарға эйә булыуы менән интертекст теорияһы нигеҙендә өйрәнелә ала. Сөнки был ике һүҙ сәнғәте төрҙәре, нисек кенә булмаһын, текст менән эш итә. Шул текстарҙың формалашыуында, әлбиттә, фекер, идея мөһим роль уйнай. Ҡасандыр халыҡ ижадында телдән әйтелгән фекер, уй, поэтик алымдар, художестволы образ, клишеға әүерелгән строфалар әҙәби текстҡа килеп инә: яҙыусы халыҡ араһынан сыҡҡанлыҡтан йыр, әкиәт, легенда, риүәйәт, эпос менән таныш булыуы, әсә һөтө менән һеңеүе, йә булмаһа, фольклорҙы махсус өйрәнеп, яҙып алып, оҫталар, сәсәндәр ауыҙынан да ишетеп үҙләштереүе мөмкин. Һөҙөмтә булараҡ, йә аңлы, йә аңһыҙ рәүештә был поэтик хазинаны шәхси ижадында оҫта ҡуллана. Мәҫәлән, киләсәктә билдәле ғалим, тюрколог исеменә лайыҡ булған Фәткелҡадир Сөләймәновтың эшмәкәрлеге һәм ижады шуға миҫал булып тора ала. Халыҡ йырҙарын өйрәнеп, аңына һеңдереп, ул ана шул йырҙарҙы әҫәрҙәренә оҫта индереп, художестволы үреп ебәргән[96].

[96] *Хөббитдинова Н.Ә.* ХІХ б. аҙағы – ХХ б. башы башҡорт әҙәбиәтендә фольклор традицияларының художестволы сағылышы. – Өфө: Ғилем, 2013. – 63–64-се бб.

Әҙәбиәттә интертекст, беҙҙенсә, ике төрлө булыуы мөмкин: беренсенән, фольклор традициялары, текстарының әҙәби текста һиҙелеүе, реминисценция йәки аллюзия тыуҙырылыуы; икенсенән, бер әҙәби текстың йәки традицияның һуңынан тыуған башҡа автор тексында, сюжетында һиҙемләнеүе, реминисценция булдырылыуы. Ошо икенсе осраҡты бүлектең түбәндәге өлөшөндә төрлө осор әҙиптәре ижады өлгөләрендә күҙалларға була.

### 3.1. Башҡорт әҙәбиәтендә халыҡ ижады менән Ҡол Ғәлиҙең «Йософ ҡиссаһы» поэмаһы интертекстары (Баһауи, Ғ. Хоҙаяров, Б. Мирзанов, Я. Йомаев ижады)

Башҡорт әҙәбиәте, билдәле булыуынса, борон көнсығыш әҙәбиәте һәм фольклорынан килеп ингән әҫәрҙәр менән ныҡ байый, был жанр төрлөлөгөн, поэтик үҙенсәлектәрен күсәйтә. Ғалим Әхмәт Сөләймәнов дөрөҫ билдәләгәнсә, ошо әҙәби әҫәрҙәр иҫәбенә ингән «Йософ вә Зөләйха», «Таһир вә Зөһрә», «Ләйлә вә Мәжнүн»ише «… яҙма китаби әҫәрҙәр өсөн ярым әҙәби, ярым фольклор сифаттарҙың берләшеп китеүе хас»[97]. Улар шулай уҡ көнсығыш әҙәбиәте традицияһына ярашлы нәзирәлек алымында яҙылғанлыҡтан, «төп сюжеттан ситкә сығып китергә, үтә иркенәйеүгә лә ирек ҡуймай. Уның ҡанундары ҡаты: төп сюжетты, лейтмотивты тот, поэтик дастан икән, хатта шиғыр үлсәмдәрен, строфа, рифма ҡалыптарын һаҡла; берҙәй образ, тасуири алымдар менән эш ит; әммә үҙ шиғри оҫталығыңды, фараз маһирлығыңды күрһәт – шунда хикмәт», тип тә өҫтәгәйне[98]. Уларҙың көнсығыш легенда, мифик ҡараштарға нигеҙләнеүенә ҡарамаҫтан, фольклор традицияларының башҡорт ерле традициялары менән уртаҡ килеп, шуның менән интертекст бәйләнештең тыуҙырылыуына килтерә. Асылда телгә алынған нәзирә алымы ла тәбиғәте менән көнсығыш, төрки һәм, һис шикһеҙ, башҡорт әҙәбиәттәре өсөн уртаҡ художестволы универсалий күренеше булып сығыш яһай. Ә художестволы йәки мәҙәни универсалийҙың төп алымдарының береһе булып интертекстуаллек теорияһы тороуы билдәле.

[97] *Хөсәйенов Ғ.Б., Сөләймәнов Ә.М., Нәҙерголов М.Х.* Яҙма дастандар. – Өфө: Ғилем, 2006. – 51-се б.

[98] Шунда уҡ. 17-се б.

Әҙәби әҫәрҙә бер үк ваҡытта һылтанмалар, реминисценциялар фольклорға ла, алдан сығарылған әҙәби әҫәргә лә булыуы ихтимал. Бының миҫалы булып 1842 й. Баһауи – Баһауитдиндың Өфөлә фольклор һәм ҡулъяҙма варианттары нигеҙендә яҙылған «Буҙйегет» ҡиссаһы тора. Унда халыҡ ауыҙ-тел ижадынан билдәле булған «Бойомға ашыр төш күреү», «Төшөндә ғашиҡ булған – өнөндә өйләнгән», «Мөхәббәт өсмөйөшө» кеүек мотивтарҙың, халыҡ йолалары, әкиәт, эпос традицияһының художестволы сағылышының тулы картинаһы күҙаллана.

Дөйөм алғанда, ҡиссаның сюжеты бәхетһеҙ мөхәббәт мотивына ҡоролоп, «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» кеүек эпостарҙың сюжетын үҙһенгән. Йәғни оҙаҡ ваҡыт бергә булып, бәхет хистәрен кисереүҙән ваз кискән ике йәш йөрәк бер-бер артлы яҡты донъя менән хушлаша: тәүҙә яуыз ҡулдан драматик рәүештә үлтерелгән егеттең үлем түшәген унының һөйгәне, үҙ-үҙенә ҡул һалып, уртаҡлаша.

Әҫәрҙә төрлө төрҙәге әҫәрҙәргә һылтаныуҙарҙы, аллюзия менән реминисценцияларҙы күҙәтергә мөмкин: боронғо грек мифологияһынан алып, башҡорт эпосы һәм Ҡол Ғәлиҙең мәшһүр «Йософ ҡиссаһы» поэмаһына тиклем. Улар асылда Баһауи әҫәрен художестволы яҡтан байытыуға, фәлсәфәүи идея-тематик йөкмәткеһен тәрәнәйтеүгә булышлыҡ иткән.

Мәҫәлән, Баһауиҙың ҡиссаһында сысҡан образы ҡыҙыҡлы. Сысҡан персонажына бында ҡаты яраланған геройға сетерекле ситуациянан сығыу ысулын, өлгөһөн күрһәтеү функцияһы йөкмәтелә. Ни өсөн сысҡан быны башҡара икән һуң? Персонаждың һәм унының функцияһының семантикаһына төшөнөү ниәте менән боронғо классик грек мифына мөрәжәғәт итеү ихтыяжы тыуа. Сөнки ниндәй ҙә булһа йәнлек, бөжәк өлгөһөндә геройҙың һауығыу, хатта ки үлгән ерҙән терелеү мотивы боронғо мифологияла типологик оҡшашлыҡтарҙың булыуы билдәле. Мәҫәлән, шуларҙың береһендә Полиидты* Криттағы Минос улы Главктың мәйете менән бергә зиндаға бикләйҙәр. Полиид үлекте нисек тә терелтергә тейеш. Шул саҡ көтмәгәндә, ҡайҙандыр зинданға шыуышып килеп ингән бер йыланды ҡурҡышынан үлтерә. Артынан эйәреп килеп ингән икенсе йылан, иптәшенең үлек кәүҙәһен

* Полиид – хайуандар телен аңлаған Меламбод жрецының ейәне

күреп, сығып китә. Әммә шунда уҡ кире шыуышып килә лә, үҙе менән алып килгән төрлө шифалы үлән ярҙамында, үлекте терелтә. Йыландар икәүләп сығып китә. Был хәлде аптырап күҙәтеп ултырған Полиид, шунда уҡ эшкә тотона: йыландарҙан ҡалған дауалы үләндәрҙе Главктың үлемесле яраһына һала, һөҙөмтәлә, һуңғыһы терелә[99]. Күреүебеҙсә, боронғо грек мифында йылан үлекте терелтеү сараһына эйә зат булараҡ һынландырыла.

«Буҙйегет» ҡиссаһында иһә был ролде… сысҡан башҡара. Шул уҡ боронғо грек мәжүси ҡараштарҙан, мифтарҙан билдәле булыуынса, сысҡан – изге йән эйәһе. Уға, ғәҙәттә, әлеге сирҙән һауыҡтырыусы, үлемдән терелтеүсе функцияһы йөкмәтелә[100]. Был беҙҙең осраҡтағы әҫәрҙәге сысҡандың эшмәкәрлегенең мәғәнәһенә, семантикаһына бер ни тиклем асыҡлыҡ индерә. Ҡиссала бәләгә тарып, ҡаты яраланған Буҙйегет Аллаға зарланып, ялбарып, ярҙам һорай:

*…Олугларның олуғы – ходайым сән,*
*Килеп торам алдыңда гидайың мән,*
*Үзең ярдам ҡыласың без, ҡолға,*
*Ялғызлыҡҡа төшөпмән нитәйен мән.*
*Уйлайым да жаным мында ҡалырмы, дип,*
*Моңло башым был ердә ҡалырмы, дип,*
*Кем үлмәй ҡалыр мында яра алған суң?..*

Шулай ҡайғыра, зарығып ултыра торғас, ҡаршыһына ҡара сысҡан килеп сыға:

*…Бичара наләш** әйтеп утыра ирде,*
*Ҡара тычкан алына ҡаршы килде…*[101]

Әҫәрҙә сысҡандың дарыу-дарман файҙаланыуының боронғо йола булыуын автор үҙе үк, сысҡанға яра һалынғас, «…Боронғодан ишеткән сүз бар икән, Дәрденә был тычканны дәргәр ҡылды», тип әйтә. Бында «дәргәр» шифаны, дарыуҙы аңлата. Һәм дә яраланған сысҡан төрлө ерҙән шифалы «сүпте», йәғни үләнде йыйып, яраһына

[99] Мифологическая библиотека. Аполлодор / пер. с древнегреч. В.Т. Боруховича. – М.: Астрель, 2004. – С. 76.

[100] Был хаҡта тулыраҡ ҡара: Античность. Мышь [Электронный ресурс]: http:/www.symbolarium.ru

** Наләш – зар

[101] Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: XIX быуат / Төҙ. Ғ. Хөсәйенов, М. Нәҙерғолов, З. Шәрипова. – Өфө: Китап, 2007. – Т. 2. – 80, 81-се бб.

һала, яра уңала. Сысҡан өлгөһөндә Буҙйегет тә шул үләндәрҙе файҙалана һәм һауыға.

Тимәк, халыҡта әүәле сысҡан шифаға файҙаланылған. Әммә, шулай булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт халыҡ әкиәттәрендә сысҡан үҙе сирҙән, үлемдән ҡотолоусы ярҙамсы ролен атҡармай, унда йышыраҡ тере һәм үле һыу, дарыу-дарман, алма, сихыр һүҙ һ.б. образдары осрай. Шул уҡ мәлдә сысҡан хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә йыш осраусан йәнлек. Бында тик Баһауиҙың ҡасандыр борондан билдәле булған күренеште, бәлки, грек мифологияһын белгән уҡымышлы кеше булып, шул белемен әлеге әҫәрендә ҡулланыуы ихтимал, тип әйтергә мөмкиндер. Һәр хәлдә, сысҡан – сысҡан инде: тормошта ул төрлө яман сир ташыусы йәнлек булғанлыҡтан, уға ерәнеү тойғоһонан башҡа хистәр кисермәгән кешегә уны тота килеп йәлләмәйенсә яралау бер нәмә лә түгелдер. Нисек кенә булмаһын, сысҡан персонажы, уға йөкмәтелгән художестволы функция семантик нигеҙе менән боронғо грек мифологияһына һәм, нисек кенә булмаһын, башҡорт халыҡ ижадына аллюзиялы һылтаныу тыуҙыра. Бында күҙәтелгән интертекст, тимәк, семантик дискурстың урын алыуын билдәләп тора.

Ҡаралған әҫәрҙә шулай уҡ халыҡ эпосын хәтерләткән, шуға шулай уҡ аллюзиялы һылтаныу тыуҙырған йәнә бер күренеш сағылыш тапҡан. Ул да булһа – Буҙйегеттең башына етә алған (башҡа төрлө язаға ул бирешмәгән, имеш) алты ҡатҡа бөкләнгән алмаз ҡылыс (халыҡта телдән таралған версия варианттарында иһә ул ете ҡатҡа бөкләнеүсән. – *Н.Х.*). Әйтеүебеҙсә, бындай төрҙәге алмаз йәки булат ҡылыс эпик геройҙың мөһим атрибуты булып күҙаллана. Мәҫәлән, «Алпамыша» эпосында герой шундай ғәйрәтле көскә эйә була, уны алты көн, алты төн йоҡлаған сағында дошмандары ҡорос сынйыр менән бығаулап, зинданға ташлай. Ә был сынйырҙы, үҙ сиратында, тик алмас ҡылыс ҡына сабып өҙә ала, имеш[102]. Ә инде баһадир йоҡлаһа (әйтелгәненсә, алты көн, алты төн дауамында), уны бер ни ҙә уята алмай, тик «йоҡа еренән хәнйәр менән ергә ҡуша сәнсеп» кенә торғоҙоп була икән[103].

[102] Башҡорт халыҡ ижады: Эпос / Төҙ., аңлатма авт. М. Сәғитов, Б. Байымов; инеш мәҡәлә авт. М. Сәғитов, Б. Байымов, С. Галин. – Өфө: Китап, 1999. – Т. 4. – 43-сө б.

[103] Шунда уҡ. – 58-се б.

Ошо йәһәттән ҡарағанда, Буҙйегет тә, асылда, эпик геройы Алпамыша кеүек ғәйрәтле, батыр булып кәүҙәләндерелә, фәнни әйткәндә, ике образ араһында интертекст бәйләнеш тыуҙырыла. Был бәйләнеште икеләтә көсәйтеүсе атрибуттар булып алмаз йәки булат ҡылыс тора. Хан ҡулына эләгеп, язаға тарттырылған Буҙйегеттең йәнен алам, тип, уны ҡоро ыҙалатып, язалап ҡына бөтөрәләр. Шул саҡ егет:

*– Вай, ғәскәр, безгә яман сөйләмәңез,*
*Ҡылыч итем кисер, дип, уйламағыз.*
*Табанымның астында алмас ҡылыч,*
*Алып чабың, жанымны ҡыйнамаңыз… – ти*[104].

Ысынлап та, әйтелгәнсә, ҡылысты табып, тик шуның менән генә геройҙың йәнен алыуға ирешә язалаусылар.

Ә уға тиклем Буҙйегетте ҡулға төшөрөү эпизоды ла фольклор менән ауаздашлыҡ тыуҙыра, бында ла интертекст бәйләнеше үҙен һиҙҙертә. Мәҫәлән, башҡорт халыҡ әкиәтенең образдар системаһын хасил иткән яуыз персонаждар араһында туғанының серен тыңлап тороп, аҙаҡ уға зыян итеүсе зат (яуыз еңгә, үгәй әсәй, үгәй һеңле) ҡыҙыҡлы. Мәҫәлән, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» башҡорт һәм ҡаҙаҡ халҡы варианты һәм версияларында, ғәҙәттә, яуыз еңгә ана шундайҙарҙан.

Әкиәттә генә түгел, хатта ки тормошта осрап торған бындай хәл әҙәбиәткә лә үтеп ингән, әлбиттә. Мәҫәлән, урта быуатта уҡ ижад ителгән Ҡол Ғәлиҙең «Йософ ҡиссаһы»нда ла яуыз зат персонажы телгә алына. Йософтоң күргән төшөн сер итеп кенә һөйләгәнен Яҡуп пәйғәмбәрҙең үгәй ҡыҙы Динә ишетеп ҡала ла, тиҙерәк башҡа ағаларына еткерә һала:

*…Бар ине Яҡуптың бер үгәй ҡыҙы.*
*Ул ишетте, тыңлап тороп, ошо һүҙҙе.*
*(Ошаҡсынан һаҡлай күрһен хоҙай беҙҙе!)*
*Барыһын кәрҙәштәренә һөйләр имде…*[105]

Ошо хәлдән һуң Йософтоң тормошо ҡырҡа үҙгәрә, сюжет үҫеше лә үҙенсәлекле, мажаралы һәм шул уҡ мәлдә драматик төҫ алып китә. Тимәк, бында ла яуыз зат образына мөһим, хәл иткес художестволы-

[104] Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: XIX быуат. 2-се том. – 89-сы б.

[105] *Ғәли Ҡол.* Йософ ҡиссаһы / төркиҙән З. Шәрипова ҡайтармаһында. – Өфө: Китап, 1993. – 21-се б.

эстетик функция йөкмәтелә: шул моменттан алып әҫәр сюжетының үҫешендә хәл иткес үҙгәрештәр булып үтә.

Баһауиҙың «Буҙйегет» ҡиссаһында ла быңдай яуыз зат шулай уҡ үҙенең ҡара эшен атҡара. Буҙйегет менән Ҡарасәс осрашып, төштәге танышыуҙарын бойомға ашырып, туй йолаһының бер өлөшө булған «Яр, яр» – «Йәр, йәр» әйтеү күренешен атҡарып ятҡанын шымсы күреп, ханға шулай тип еткерә:

*...– Тәксир, хан, ҡызыңызга барып килдем,*
*Бер шомлоҡ бар икән – тыңлап белдем.*
*Ҡырыҡ ҡыз йәр-йәр әйтеп ятыр икән,*
*Ишеткән яманлыҡты әйтә килдем.*
*...Күп ҡызлар бер туй ҡылып ятыр икән,*
*Ике егет эчендә – аны күрдем һ.б.*

Бынан һуң, ҡауышырға тип ниәтләнгән геройҙарҙың тормошонда ҡырҡа үҙгәрештәр башлана, әҫәр сюжеты үҫеше лә ҡырҡа үҙгәрә. Бер яҡтан, халыҡ әкиәтенә хас булған, икенсе яҡтан, Ҡол Ғәлиҙең милли әҙәбиәтебеҙҙең аҫыл ҡашы булған «Йософ ҡиссаһы» традицияһының художестволы сағылышын күҙәтәбеҙ. Йософ Буҙйегеткә интертекст булараҡ йоғонто яһай, ул да шундай уҡ илаһи сибәрлеккә эйә булараҡ һүрәтләнә. Уның сибәрлеген ҡаплап торған пәрҙә лә телгә алына. Был хаҡта бигерәк тә Йософты баҙарға һатырға тип алып килеп, бөтә ғәм алдында баҫтырып күрһәтеп, һатыулашҡан эпизодта шулай тиелә:

*...Өндәүселәр баҙар эсендә йүгереште,*
*«Был угланды кем һатып ала? – тиеште,*
*Гүзәл йөҙөнән пәрҙәһен күтәреште,*
*Йөҙ нуры көн яҡтыһын ҡаплар имде...»*[106]

Буҙйегеттең дә илаһи сибәрлеге бөтә ғәм алдында, шулай уҡ баҙар уртаһына килтереп ҡуйылғас асыла.

*...Битенән ҡыл пәрҙәһен һуйып алды,*
*Ялангас муйынына ҡылыс һалды,*
*Башында алтын айҙар томомо бар,*
*Күргән әҙәм быларға таңға ҡалды...*[107]

---

[106] *Ғәли Ҡол.* Йософ ҡиссаһы / төркиҙән З. Шәрипова ҡайтармаһында. – Өфө: Китап, 1993. – 104-се б.

[107] Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. – Өфө: Китап, 2007. – 2-се том. – 88-се б.

Тимәк, «Буҙйегет» ҡиссаһы унан күпкә боронғораҡ замanda ижад ителгән «Йософ ҡиссаһы» менән текст ара бәйләнешкә инеп, уға ҡарата аллюзиялы һылтаныуҙы булдырған. Быны Баһауиҙың матур әҙәбиәт, поэзияһы өлгөһө булған Ҡол Ғәли ҡиссаһын аңлы рәүештә ижади өлгө итеп алып, уның ҡайһы бер моменттарын халыҡ ижады традициялары менән уҡмаштырып, үҙенсәлекле поэтик әҫәр тыуҙырырға тырышыуы менән аңлатып булалыр. Ғөмүмән алғанда, бындай интертекстар ҡиссаның поэтик камиллығын арттырған. «Йософ ҡиссаһы» поэтикаһына һылтаныу традицияһының художестволы сағылышы, уның менән интертекст бәйләнештәргә инеүе башҡорт әҙәбиәтенең һуңғараҡ осорҙарында ла күҙәтелә.

***

XX б. башы башҡорт поэзияһына, бер яҡтан, халыҡ ижады традицияларының хас булыуы күҙәтелә, икенсе яҡтан, уға боронғо төрки шиғриәтенең поэтик үҙенсәлектәренең тәбиғи һаҡланыуын, интертекслы бәйләнештең осрауын да инҡар итеп булмай. Мәҫәлән, «Әсә ҡәбере янында» мотивын төрлө осор шағирҙары үҙһенгән, һәм ул һәр төрлө замандарҙа уртаҡ тема булараҡ поэтиклаштырылһа ла, идея-эстетик әһәмиәте, йөкмәткеһе яғынан төрлөсә яңғырай.

Ғәлә Хоҙаяровтың (1891–1966) «Ҡәберлектә (әсәйем ҡәберенә ҡарап)», Ямалетдин Йомаевтың (1892–?) «Әсәйем ҡәбере янында», Бәхтиәр Мирзановтың (1892–1941) «Әсәйем ҡәбере янында» кеүек шиғырҙарҙың аталышынан уҡ күренеп тороуынса, әлеге мотивҡа ҡоролған. Был осор әҙәбиәтен өйрәнеүсе ғалимдарыбыҙ бындай темаға яҙылған әҫәрҙәрҙең сәбәбен тормоштоң ауыр булыуында, шунлыҡтан шағирҙарҙың төшөнкөллөккә бирелеп, «донъянан биҙеп, үлемде һағыныуы, ҡәбер тыныслығын идеаллаштырыу»ында күрҙе[108].

Ҡәбер, үлем, теге донъя, фәҡирлек кеүек мотивтар башҡа халыҡтар әҙәбиәтендә лә яңғырай. Мәҫәлән, улар XIX б. икенсе яртыһында рус әҙәбиәтендә ярлы крәҫтиән мөхитенән сыҡҡан шағирҙар («суриковсылар»[*]) ижадына хас күренеш ине. Улар ауыл-

[108] Башҡорт әҙәбиәте. XX быуат башы / Төҙ. В. Әхмәҙиев, И. Бүләков, Ғ. Хөсәйенов. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1983. – 176-сы б.

[*]әҙәбиәт йүнәлешенең аталышы үҙе фәҡир крәҫтиән ғаиләһенән сығып, тормошонда күп михнәттәр кисергән һәм ошо йүнәлештең башында торған рәссам Ив. З. Суриковтың исеменән алынған. – *Н.Х.*

дан ҡала мөхитенә күсеп килеп, ауырлыҡтар менән тормош һөрөп, ҡала шарттарында бәхет, шатлыҡты аҙ кисереп (эшселәрҙең фәҡирлектәге тормошо уларҙы бигерәк тә борсой) йәшәү һөҙөмтәһендә төшөнкөллөккә бирелеп, йәшәүҙә мәғәнә күрмәй, теге донъя, үлем, ҡәбер темаһына мөрәжәғәт итте (З. Суриков, Н. Некрасов, А. Кольцов, Т. Шевченко һ.б.).

Ошо уҡ традиция XX быуаттың беренсе яртыһы башҡорт әҙәбиәтендә лә күҙәтелде. Октябрь революцияһына тиклем үк ябай крәҫтиән ғаиләһендә тыуып үҫкән шағирҙарҙың яҙмышы еңел булмаған, уларға төрлө михнәттәр күреп йәшәргә тура килгән. Был быуын әҙиптәре революцион күтәрелештәр, һуғыш осоронда яу-көрәш юлдарында булды, сығарған шиғырҙарында, дөйөм алғанда, «демократик идеялар, милли һәм социаль азатлыҡ өсөн көрәш мәсьәләләре» үҫтерелде. Шулай ҙа шиғырҙарында юҡ-юҡ та нескә күңелле шағир йөрәгендә төшөнкөлөккә бирелеү, донъянан ваз кисеү кеүек хис-тойғолар сағылып ҡала. Әммә килеп тыуған мәсьәләне хәл итеү мөмкинлеге булмаған бер мәлдә шағирҙарҙың әҫәрҙәренә килеп ингән ҡәбер, гүр эйәһе, үлем кеүек образдар рус шиғриәтенән бигерәк, боронғо төрки-башҡорт әҙәбиәтенә һылтаныуҙы (реминисценция) тыуҙыра, сала-арпы ғына (имплицив) булһа ла шул уҡ художестволы элементтарҙы иҫкә төшөрә, күңелдә уның менән параллелдәр тыуҙыра. Ул да булһа – XIII быуат башында Урал-Волга буйы Болғар дәүләтселегендә ижад ителгән, шул ерҙә көн иткән төрки халыҡтар өсөн уртаҡ булған Ҡол Ғәлиҙең «Йософ ҡиссаһы» поэмаһы.

Ҡиссанан мәғлүм булыуынса, ағаларының йәбер-золомо һөҙөмтәһендә, Йософ Мәлик Дағыр тигән ҡафыр сауҙагәргә ҡоллоҡҡа һатыла һәм каруаны менән Мысырға оҙатыла. Юл ыңғайында зыярат эргәһенән үтеп барғанда, Йософ әсәһенең ҡәбере янында төшөп ҡала ла (әҫәрҙә был хаҡта асыҡ ҡына әйтелмәй, уның шулай булыуын шәйләргә генә ҡала. – *Н.Х.*), илай-илай шулай тип мөрәжәғәт итә:

*... Рәхилә анам,*
*Ниндәйерәк хәлгә төштөм, күҙеңде һал!*
*Ҡәрҙәштәрем һатты мине, һин белеп ҡал,*
*Азат инем, бәндәлеккә төштөм имде.*
*Хөсөт ҡылып, атамдан да айырҙылар,*
*Ғазаптарҙа бәғеремде яндырҙылар.*

*Мәхлүк тунын иңдәремә кейҙерҙеләр,*
*Ҡул-аяғым сынйыр менән бәйле имде...*
*Эй дәриға! Ғәзиз анам, ятаһыңмы?*
*Минең хәлем нисек – беләһеңме?*
*Миңә ҡарап хәлдәремде күрәһеңме:*
*Ҡул-аяғым сынйыр менән бәйле имде!*
(«Йософ ҡиссаһы»)[109].

Шулай башынан үткән михнәттәрен, ҡайғы-хәсрәттәрен һөйләй Йософ. Ул да көтмәгәндә осраған бәләне ауыр кисереп, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән, ахыр сиктә күптән гүр эйәһе булған әсәһенә ярҙам, кәңәш һорап, мөрәжәғәт итә. Тик, башҡорт шағирҙарының лирик геройҙарынан айырмалы рәүештә, бында Йософҡа әсәһенең ауазы ишетелә, улының шундай хәлгә ҡалыуына ҡайғырыуын, борсолоуын белдерә, Хоҙайға өндәшеп, улына ярҙам итеүен һорай:

*«...Эй хоҙайым! Был хәжәтем һиңә мәғлүм,*
*Һәр ваҡытта өмөт тотор барса мәзлүм.*
*Залимдарға һатылған бит минең уғлым –*
*Ҡөҙрәт менән уға шәфҡәт күрһәт имде...»*

Унең был үтенесе киләсәктә, ысынлап та, Хоҙай тарафынан бойомға аша, Йософҡа күрһәткән ҡөҙрәте сикһеҙ була[110].

Үрҙә һүҙ барған башҡорт шағирҙарының ижадында «Әсә ҡәбере янында» мотивына ҡоролған һәм, асылда, шул уҡ исем менән аталған шиғырҙары, әлбиттә, дини мистика идеяны үткәргән боронғо төрки ҡисса менән нигеҙҙә ауаздаш булһа ла, идея-эстетик яғынан унан айырылып тора. Я. Йомаевтың шиғырында әсәһе ҡәберенә килгән лирик герой ауыр тормошона зарланып «иңрәмәй», әсәһенең ҡәберҙә тыныс ятыуын теләй һәм, унан Рәхиләнең улына әйткән йәлләү һүҙҙәрен әйттерергә теләгәндәй:

*«...Тик янында иңрәп торған етем улыңды күр!*
*Күр ҙә әйт: “Мин донъянан киткәнмен, мең шөкөр».*

---

[109] *Ғәли Ҡол*. Йософ ҡиссаһы / Төркиҙән З. Шәрипова ҡайтармаһында. – Өфө: Китап, 1993. – 67-се б.

[110] *Ғәли Ҡол*. Шунда уҡ. – 67-се б.

*Әйт: «Был көндәр донъяла булһа минең торған сағым,*
*Ҡыҙғанып улымды мин илар инем күргән һайын», –*
тип өндәшә («Әсәйем ҡәбере янында»)[111].

Б. Мирзановтың Йомаев менән ауаздаш булған шиғырында иһә беҙҙең алда йәнә бер лирик герой пәйҙә була. Ул тормош ауырлыҡтарына, етемлектә үҫкәнлегенә ғазаплана, хатта ки әсәһенә уны иртә ташлап киткәне өсөн үпкәһен дә белдерә:

*«...Ник килтерҙең, әсәй, ҡара көнгә,*
*Был ҡәһәрле донъя йортона?!*
*Әллә мәңге рәхәт күрмәһен тип,*
*Ташланыңмы дарья утына?*

*Үкһеҙ күрҙе тәҡдир, ҡаҡты баштан,*
*Етем ҡалғас улың-бәбкәйең,*
*Бөтәйемме, бәхет көтәйемме?*
*Бер яуап бир, әйтсе, әсәйем?..»*

(«Әсәйем ҡәбере янында»)[112].

Ҡиссалағы мистиканан айырмалы рәүештә, бында геройҙың һорауҙары риторик һорау рәүешендә яңғырай. Лирик герой әсәһенә биргән һорауҙарға яуап көтмәй, күңелендә тулышҡан хис-тойғоларҙан, тәрән кисерештәрҙән сыҙай алмайынса шулай өндәшеп, үҙ рухына тыныслыҡ эҙләй. Бында киҫкен ысынбарлыҡтың бер кемде лә аямаясағына, әсәнең ауазы сыҡмаясағына ышанырға тура килә.

Ғ. Хоҙаяровтың «Ҡәберлектә» шиғыры йөкмәткеһе менән үрҙә ҡаралған шағирҙарҙың әҫәрҙәренән айырылып тора. Дөрөҫ, темаһы ла шул уҡ – әсә ҡәбере янына килгән лирик геройҙың уй-кисерештәре сағылдырыла. Әммә унда һыҡраныу-зарланыу ишетелмәй, килеүсе мәрхүмә әсәһенә йылы һүҙҙәр яуҙыра, уны юҡһынып, һағыныуын белдерә, ҡәберлекте уратып алған тирә-яҡ мөхиттең – тәбиғәттең ҡайғырыуын, хатта себендең дә «зарланып илауын» еткерә. Зарығыуҙың сәбәбе иһә әлеге тормоштоң, ысынбарлыҡтың ауыр һәм киҫкен булыуында, әсәйһеҙ донъяның йәме китеүендә.

*«...Ҡәбереңә барһам зыяратҡа һиҙәмен шәфҡәт елен,*
*Ипле, йомшаҡ тейә биткә, гүйә әсәйем һөйә.*

---

[111] Башҡорт әҙәбиәте: XX б. башы: Поэзия. – 183-сө б.

[112] Шунда уҡ. – 171-се б.

*...Ҡәбереңә үҫкән үләндең өҫтөнә ҡунған себен*
*Донъяла шәфҡәт бөтөүҙән зарланып илай һиңә».*

(«Ҡәберлектә»)[113].

Б. Мирзанов менән Я. Йомаевтың лирик геройынан айырмалы рәүештә, Хоҙаяровтың шиғырында инде мәрхүм булған әсәһенә үпкәле һүҙҙәр әйтмәй, уға ҡарата уның ихтирамлы, итәғәтле булыуы асыҡлана, уны һаман юҡһынып үрһәләнеүе аңлашыла. Ауыл мөхитенән сығып, иртә етем ҡалған шағир әсәһе янына килеп, күңелен бушата, солғап алған пессимистик тойғоларҙан арыныу юлын шулай эҙләй.

Шиғырҙары телгә алынған һәр шағир үҙен күп михнәттәр кисергән, зан-интизар килгән Йософҡа оҡшата, үҙ ҡайғы-хәсрәттәрен уның хәленә тиңләгән кеүек. Тормоштарында, Йософтай булып, килеп тыуған ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар алдында үҙҙәрен көсһөҙ тойоп, шунлыҡтан төшөнкөлөккә бирелеп йәки баштарына төшкән бәләнән арыныу юлын эҙләп, донъяла иң ҡәҙерле зат, хәҙер инде мәрхүм булған әсә ҡәберенә килеп, уға баш эйеүҙән башҡа сара тапмаған, тимәк. Шағирҙар бала саҡтан халыҡ араһында киң таралған Йософ китабын уҡып йәки ишетеп үҫкәнлектән, ауыр тормош һынауҙары алдында торған киҫкен бер мәлдә, үҙҙәрен изге герой хәлендә хис иткән, күрәһең. Шиғырҙарында шул мәшһүр ҡомартҡыға аңлы рәүештә (сознательно) йәшерен, һиҙелмәҫлек итеп, имплицив йәки, киреһенсә, ҡисса сюжетын аңһыҙ (бессознательно) рәүештә иҫкә төшөрөп, уға мөрәжәғәт итеүҙәре ихтимал. Нисек кенә булмаһын, Б. Мирзановтың «Әсәйем ҡәбере янында», Ғ. Хоҙаяровтың «Ҡәберлектә (әсәйем ҡәберенә ҡарап)», Я. Йомаевтың «Әсәйем ҡәбере янында» шиғырҙары менән «Йософ ҡиссаһы» араһындағы идея һәм теманың, мотивтың оҡшашлығы уларҙы текст-ара (интертекстуаль) бәйләнешкә инеүгә килтергән.

Ғөмүмән, халыҡ ижадын художестволы сағылдырыу башҡорт яҙыусылары араһында киң таралған традициялылыҡҡа әүерелде. XX быуат башы әҙәбиәтендә ысынбарлыҡты реализм, тәнҡитле реализм күҙлегенән сығып һүрәтләгәндә лә, күңел төшөнкөлөгөнә, пессимистик, хатта мистик рухҡа бирелеүсәнлек күҙәтелһә лә, шағирҙар үҙҙәрендә романтик һыҙаттарын да юғалтманы. Ижадтарында уры-

[113] *Мирзанов Б.* Әсәйем ҡәбере янында; *Хоҙаяров Ғ.* Ҡәберлектә (әсәйем ҡәберенә ҡарап); *Йомаев Я.* Әсәйем ҡәбере янында // Башҡорт әҙәбиәте: XX б. башы / төҙ. В.Әхмәҙиев, И. Бүләков, Ғ. Хөсәйенов. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1983. – 171–314-се бб.

ны менән ерле халыҡ ижады традицияларына, милли поэтик биҙәктәренә мөрәжәғәт итеп, әҫәрҙәренең идея-эстетик әһәмиәтен тәрәнәйтеп, идея-тематик йөкмәткеһен тулыландырып, уларҙы тағы ла художестволы сағыуыраҡ итеүгә өлгәште.

### 3.2. Хәҙерге осор әҙәбиәтендә реминисценциялар (алынмалар) (Һ. Дәүләтшина, Мостай Кәрим, Ә. Атнабаев, Ә. Әминев, Г. Яҡупова әҫәрҙәре)

Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә шулай уҡ текст-ара бәйләнештәрҙе, реминисценцияны күҙәтергә мөмкин. Мәҫәлән, башҡорт поэзияһының аҫыл йөҙөк ҡашы булған халыҡ шағиры Мостай Кәримдең шиғырҙарында һылтаныуҙы, реминисценция йәки алынмаларҙы байтаҡ ҡына табырға мөмкин. Шағирҙарҙың әҫәрҙәрендә күҙәтелгән алынмалар үҙҙәре матур поэтик күренеш булып сағылыш таба. Йә М. Кәрим ҡәләмдәштәренең шиғырҙарына яуап йәки нәзирә кеүегерәк шиғырҙарын сығара, йә башҡалар уның әҫәрҙәренә эксплицив рәүештә мөрәжәғәт итеп, алынмаларына таяна. Ә. Сөләймәнов Мостай Кәрим ижадына бағышланған хеҙмәттәрендә ошо моменттарҙы тотоп алып, фәнни яҡтан тулы һәм эҙмә-эҙлекле тикшергәйне («Өс мөғжизә»). Мәҫәлән, уның тарафынан М. Кәримдең «Әл дә гармунсы түгелмен» шиғыры менән Н. Нәжмиҙең «Гармун» шиғырҙарының үҙ-ара ауаздашлығы, әйтеш, нәзирә формаһындағыраҡ үҙ-ара «әңгәмә»ләренең йәки реминисценцияның булыуын оҫта тотоп алып ҡарағайны.

Быларҙан башҡа ошо ике шағирыбыҙҙың әйтелгән үҙенсәлектәргә эйә булған йәнә көҙгө усаҡ темаһына яҙылған шиғырҙары шулай уҡ ҡыҙыҡлы. Н. Нәжмиҙең 1970-се йылда яҙылған «Усаҡ» тигән ике дүртюллыҡтан торған шиғыры былай яңғырай:

*Көҙгө көн. Ямғыр һибәләй –*
*Көҙ өсөн ғәжәпме ни?! –*
*Усаҡ яҡтыҡ... Өшөмәһәң,*
*Усаҡ бик хәжәтме ни?*

*Ә беҙ яҡтыҡ... Бер кем уға*
*Килмәй ҙә, йылынмай ҙа.*
*Ул, талантһыҙ шағир кеүек,*
*Һүнмәй ҙә, ҡабынмай ҙа.*

М. Кәрим был әйтелгәндәрҙе тәрән фәлсәфәүи дауам итә кеүек:

*Зая үткәндә, түлһеҙ хыялдарҙы*
*«Төтөн» тибеҙ, тимәк, буш тибеҙ.*

*Көҙгө урманда бына усаҡ яҡтым,*
*Усағыма рәхим итегеҙ... –*

тип башлап ебәрә һүҙен шағир. Ул усаҡ йылыһын, яҡтыһын барыһы менән бүлешә. Һәм ялҡындың йырлауына, төтөндөң «һулҡылдап» илауына ҡолаҡ һалырға саҡыра. Ахырҙа иһә, тик Мостай Кәримгә генә хас булғанса тәрән фәлсәфә менән:

*...Күрҙем, ялҡын – яныу ҡыуанысы.*
*Белдем, төтөн – яныу ғазабы, –*

тип әйтеп бөтөрә (1978). Н. Нәжмиҙең лирик геройы еүеш ерҙә һулҡылдап, яныр-янмаç быçҡыған йәки дөрләп яныу һәләтенә эйә булмаған көҙгө усаҡты «талантһыҙ шағир»ға тиңләгән. М. Кәримдә иһә усаҡҡа шулай ҙа башҡараҡ һәм төплөрәк мәғәнә һалынған. Бындағы лирик герой ғүмерен заяға үткәрмәгән, шиғриәт утында ла, тормош ялҡынында ла янған да, ҡыуаныс тойғоларын да кисергән. Көҙгө уттың «талантһыҙ шағир кеүек...» түгел, ә, киреһенсә, поэтик һүҙҙең ысын оçтаһы булыуын белдереп, киңерәк ассоциацияға тиң итеп күрһәтелгән. Бында ике шағирҙың – шиғриәтебеҙ алыптарының бәхәсе, шул мәлдәге, шәл осорҙағы күңел торошоноң, хис-тойғоларҙың сағылышына шаһитбыҙ. Йәки бер үк объект төрлө лирика оçтаһында төрлө осраҡта төрлөсә ассоциация тыуҙырыуы мөмкиндер. Бында, ысынлап та, талант та, оçталыҡ та, образлы ҡараш, фекер тәрәнлеге лә ҙур роль уйнайҙыр.

Шиғриәттә реминисценцияның М. Кәримдең үҙенә ҡарата ла булыуы ихтимал. Мәçәлән, шағир Ә. Атнабаевтың «Яҡут иле күстәнәсе» шәлкеменә ингән шиғырҙар темаһы эске аһәңлеге менән Мостай Кәримдең әçәрҙәренә ауаздаш, уларға ҡарата реминисценция тыуҙыра. Мәçәлән, «Һабантуйҙан ҡайтып киләбеҙ» шиғыры, исеменән үк күренеүенсә, М. Кәримдең «Һабантуйҙан ҡайтып киләм» шиғырынан эпиграф итеп алынған өҙөккә ишаралай. Улай ғына ла түгел, хатта ки юғалған кәпәс образы аша уға туранан-тура һылтана. Мостай Кәрим шиғыры:

*Һабантуйҙан ҡайтып киләм...*
*Көн эçеһе инде баçылған.*
*Бөтә нәмәм теүәл, тик нишләптер*
*Кәпәс төшөп ҡалған башымдан*[114], *–*

[114] *Кәрим М.* Һабантуйҙан ҡайтып киләм // Поэмалар, шиғырҙар. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1985. – 95-се б.

тип башланып китә, тимәк, лирик геройҙың байрамда ҡатнашып, халыҡ араһында йөрөп тамаша ҡылып, күңеле иләҫ-миләҫ булып шатланып ҡайтып килеүе, тик башындағы кәпәсе әллә ҡайҙа төшөп ҡалыуы хаҡында беләбеҙ. Ошо моментты шаярыу-шаяртыуға әүәҫ булған Ә.Атнабаев эләктереп алып:

*...Берәү генә башын ҡашып йөрөй –*
*Эшләпәһен төшөрөп ҡалдырған.*
*...Әйҙә, киттек, туған, беҙҙең менән,*
*Эшләпәңде эҙләп интекмә!*
*Хатта Мостайҙың да кәпәсе юҡ,*
*Беҙҙең башта инде юҡ күптән, –*

тип тора ла, Мостай Кәримдең үҙенә төрттөрөп, артабан уның шиғырын дауам итеп ҡуйғандай итә. М. Кәримдең әлеге шиғыры иһә былай тип тамамлана:

*...Ҡайтып киләм. Башта кәпәсем юҡ,*
*Баш һау булһа, кәпәс табылыр...*
*Арғымаҡты менеп, һабантуйға*
*Мин барырмын әле тағы ла!*

Ә. Атнабаев шағирҙың был фекерен шулай итеп дауам итә:

*...Аҡыллы баш кәпәс эҙләп йөрөмәй,*
*Башты кәпәс үҙе эҙләһен!*

*Ҡай берәүҙәр, башы булмаһа ла,*
*Башлымын, тип кәпәс кейәләр,*
*Башлы ғына әҙәмдәр ҙә ҡай саҡ*
*Шул кәпәскә башын эйәләр...*

Тимәк, Мостай Кәрим шиғырында әйтеп еткермәгәнде, әммә ишаралағанды, Ә. Атнабаев ысынға ҡатыш шаярыу менән дауам итеп, дөйөмләштереп ҡуйғандай итә. Ике шағирҙың бындай ауаздашлығы – көнсығыш һәм урта быуат төрки әҙәбиәттәренән килгән нәзирә традицияһына эйәреүҙең бер матур тәжрибәһе тип ҡабул итергә мөмкин. Быны фән юҫығында шулай уҡ интертекст – текстар бәйләнешенең алымы булған реминисценцияның матур бер өлгөһө тип тә табырға була.

Шулай итеп, шиғриәтебеҙҙә Мостай Кәримдәге алынмаларҙың булыуы Н. Нәжми менән Ә. Атнабаев ише шағирҙарҙың әҫәрҙәре миҫалында ҡаралды. Уларҙың бындай поэтик, идея-йөкмәтке яғынан булған ауаздашлыҡ – көнсығыш әҙәбиәтенән килгән нәзирә

традицияһына эйәреүҙең, икенсе төрлө әйткәндә, интертекст бәйләнешен хасил иткән алынмаларҙың бер матур тәжрибәһе, тип ҡабул итергә мөмкин.

Үткән быуат башҡорт әҙәбиәтендә шулай уҡ имплицив аллюзияны ла күҙәтергә мөмкин. Йәғни теге йәки был текст, әйтелгән фекер йәшерен рәүештә икенсе бер текста сағылыуы ихтимал. Хатта бер үк яҙыусы йәки шағирҙың ижадында ғына үҙ-үҙенә аллюзиялы һылтанмаһын күҙәтергә була. Бындай күренеште ҡыҫҡа ғүмерле, әммә оло мираҫлы шиғриәтен ҡалдырған күренекле шағирыбыҙ Рәми Ғариповтың ижадында ла осратырға мөмкин. Әйтергә кәрәк, Р. Ғарипов һәр башҡорт өсөн ғәзиз булған тыуған ер – Башҡортостандың синонимына әүерелгән Урал тау хаҡында йөрәкһеп яҙҙы. Тыуған ер, ил, халҡы хаҡында яҙғанда, уның гүзәл тәбиғәте менән һоҡланып ҡына ҡалмайынса, хәҡиҡәткә тоғро ҡалып, уның ҡанлы, ғәрәсәтле тарихын да байҡаны, батырҙарын иҫләне, шулай «сал тарихын ҡайтып ураны». Шундайыраҡ рухта төрлө йылдарҙа ижад ителгән, беҙҙең проблемаға яҡын торған «Дан һиңә, дан, Башҡортостан» (1957) менән «Урал йөрәге» (1958) ише шиғырҙары иғтибарға лайыҡ. Тәүгеһендә төп Башҡортостан образы шулай һүрәтләнә: «Күк Уралдың иркен күкрәгендә Азат шоңҡар ғорур осҡанын Ҡарайым мин сикһеҙ шатлыҡ менән…», йәғни Урал тауының иркен күкрәгендәге иркле, азат шоңҡар образы аҫтында, әлбиттә, Башҡортостан ере төҫмөрләнә. Уҡыусы аңында уянған ошо ассоциатив образ шағирҙың һуңғараҡ яҙылған һәм үрҙә телгә алынған икенсе шиғырында (ул хикәйәт тип билдәләнгән) төплөрәк һәм тулыраҡ асылған: «Урал күкрәгендә йөрәк кеүек Башҡортостан – тыуған илкәйем Шул йөрәктең ҡан тамыры булып, күкһелләнә Ағиҙелкәйем һ.б.…». Артабан төп идея киңерәк эпик форматта үҫтерелеп, ысынлап та, поэтик хикәйәт кимәлендә асыла. Рәми Ғариповтың ижадын ятаҡан һәр әҙерлекле уҡыусы күңелендә ошо ике әҫәр араһында интертекст бәйләнешен интуитив рәүештә һиҙемләй алалыр. Ҡаралған ғилми проблема сиктәрендә шағирҙың ижады хаҡында һүҙ йөрөтөп тағы бер нисә шиғырына туҡтағы килә. Уның 1967-се йылда яҙған «Алырымҡош менән Бирмәмҡош» шиғырының:

*Бала саҡтан сәмле уйыны*
*Асмаһа ла инде ҡуйынын,*
*Ғүмер буйы сәмле шул уйын*
*Туйлап килә миңә үҙ уйын…*

тигән юлдары 1968-се йылға ҡараған икенсе бер шиғырында:

*Алырымҡош менән Бирмәмҡош*
*Икән дәһә, ай-һай, был тормош:*
*Бала саҡтың сәмле уйыны*
*Оҙатып килә ғүмер буйына, –*

тигәне менән эксплицив реминисценция тыуҙыра. Йәғни бында ла бер йыл элек ижад иткән тәүге шиғырындағы тормоштоң төрлө яҡлы булыуына инаныуы хаҡындағы идея киләһе йылғы ижадында яңыраҡ һәм йәнә тулыраҡ яңғыралыш биргән. Ә фекер, идея – бер үк. Йәки унан бер нисә йыл алдараҡ шағирҙың «Туй һүҙе» тигән шиғыры һүҙмә-һүҙ тиерлек һуңғараҡ сығарған «Туй йыры»н ҡабатлай, шул рәүешле үҙ-үҙе менән интертекст бәйләнешен тыуҙырған.

Һуңғыһына ҡарата йәнә шуны әйтеүе лә мөмкин. Ысынлап та, яҙыусы ижады менән яҡшы хәбәрҙар булған һәр әҙерлекле уҡыусы, ғалим интуитив рәүештә бер үк әҙиптең шиғыры менән проза әҫәрҙәрендә лә үҙ-үҙенә интертекст бәйләнешен тыуҙырыуын һиҙемләүе мөмкин. Мәҫәлән, һүҙ сәнғәтенең ике формаһы – проза менән поэзияһында бер тигеҙ һәм уңышлы ижад иткән әҙибә Гөлнур Яҡупованың «Һөйҙөргөс» тигән шиғырында һүҙ яратып йөрөгән йәргә эсерер өсөн һөйҙөрә торған үлән төнәтмәһен әҙерләү хаҡында бара. Уны эсеү менән, ул йәр йәнәһе һине нығ яратасаҡ, имеш. Тик ул хистәр алдаҡ булмаһын ине, ти, шағирә:

*...Илай алһаң*
*Мөхәббәттән,*
*Сихыр – ысын...*

Ошо һөйҙөргөс образын йәки сихыр юлы менән яраттырыу мотивын Г. Яҡупова һуңынан «Ҡатындар» трилогияһында йәнә файҙалана. Тик, шул үлән төнәтмәһен генә эсеп тә бәхетле булһа икән кеше! Ул мөхәббәт бит ике яҡлы ла, саф та булырға тейеш. Юғиһә һөйҙөрәм тигән йәрең илай алырмы икән мөхәббәттән, тигән һорау ҡуя автор. Ҡулланылған һөйҙөрә торған үлән төнәтмәһе, шулай итеп, ике осраҡта ла ҡабатланып, әҫәрҙәрҙә бер үк художестволы функция үтәй, оҡшаш идея-эстетик мәғәнә һалына. Интертекст бәйләнеше күҙлегенән иһә эксплицив аллюзия тыуҙырған.

Хәҙергә әҙәбиәттә интертекст, текст бәйләнештәре хаҡында һүҙ йөрөткәндә, уларҙың бер үк милләт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә генә күҙәтелмәүе лә мөмкин. Хатта улар төрлө тарихи осорҙарға ла ҡарауы ихтимал. Был йәһәттән бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә әүҙем

ижад иткән Әмир Әминевтең прозаһы ҡыҙыҡлы. Уның «Ҡытай-город»* (2003) повесындағы тәүге эпизодында XIX быуат рус әҙәбиәтенә аллюзия, интертекст үҙен һиҙҙертә. Быны шағир Салауат Әбүҙәров интуитив рәүештә булһа ла, әммә дөрөҫ төҫмөрләгән[115]. Баҡтиһәң, әҫәрҙең башланышы рус классигы Н.В. Гоголдең «Ревизор» әҫәрен хәтерләтә. Билдәле булыуынса, әҫәр городничийҙың «Я пригласил вас, господа, с тем, чтобы сообщить вам пренеприятное известие … … К нам едет ревизор!..», – тигән фразаһы менән башлана. «Ҡытайгород» повесында «Алға» колхозы рәйесе: «Мин һеҙҙе бигүк ғәҙәти булмаған хәбәр әйтер өсөн саҡырҙым… … Иртәгә беҙгә район Хакимиәте башлығы килә!», – ти. Гоголдәге баяғы городничий йәнә: «Смотрите, по своей части я кое-какие распоряжения сделал, советую и вам. Без сомнения проезжающий чиновник захочет прежде всего осмотреть подведомственные вам богоугодные заведения – и потому вы сделайте так, чтобы все было прилично», – ти. Ә. Әминев әҫәрендәге колхоз рәйесе лә: «…эшегеҙ буйынса ҡулығыҙҙа бар мәғлүмәт булһын. Әллә нимәләр менән ҡыҙыҡһынырҙар әле. Тегене-быны һораһалар, яуап бирерлек булһын…», – тип киҫәтә. Бынан бигерәк, район Хакимиәте башлығының телмәре Гоголдеке менән реминисценция тыуҙыра: «…Ауыл урамдарын тәртипкә килтерегеҙ, сүп-сар, бүрәнә, утын-фәлән ятмаһын. Ҡоймаларҙы буяғыҙ, иҫкеләрен алмаштырығыҙ, ҡыҙыл туҡымаға аҡ буяуҙар менән “Хуш килдегеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар!” тип яҙып элегеҙ ҡапҡа башына…». Һөҙөмтәлә, Һыбай ауылы кешеләре бойороҡто бойомға ашырырға дәррәү тотона. Бының менән автор, ысынлап та, «күңел йөҙөбөҙгә кейелгән битлек» хаҡында һүҙ йөрөтөп, ғөмүмән, Рәсәй халыҡтары өсөн хас был ғәҙәттең быуаттар аша ла онотолмауына ишаралағандай итә[116]. Фән күҙлегенән ҡарағанда, идея-эстетика һәм йөкмәткеһе яғынан да, художестволылыҡ йәһәтенән дә төрлө осорҙа башҡа милләт яҙыусылар тарафынан ижад ителгән әҫәрҙәрҙә, уйлауыбыҙса, аңлы рәүештә параллелдәр, йәғни интертекст бәйләнештәре урын алған. «Аңлы рәүештә», тигәнебеҙ, әлбиттә, Н.В. Гоголдән күпкә һуңғараҡ ижад иткән Ә. Әминев әҫәре күҙ уңында тотола. Һәм икенсеһе тәүгеһенең ижады менән бик таныш булыуы бер ҙә шик тыуҙырмай.

---

[115] *Әбүҙәров С.* Талант «Ҡапҡа»һы // Башҡортостан. 2012. 6 декабрь.

[116] *Әбүҙәров С.* Шунда уҡ.

Әммә башҡорт әҙибе был осраҡта илебеҙҙәге социаль хәлдең бер нисек тә үҙгәрмәүен, заманаларҙың бер үк, оҡшаш булыуын сатира аша үткәреп, был юлға аңлы рәүештә барыуы ла шик тыуҙырмай. Үҙенә күрә ижади тәжрибә үткәрә, булһа кәрәк.

Шулай уҡ билдәле бер художестволы әҫәр менән кинофильм сюжеты араһында ла интуитив рәүештә оҡшашлыҡты, һылтаныуҙы табырға мөмкин. Беренсенән, кинофильм нигеҙендә ошо әҫәр сюжеты ятыуы ихтимал (кинофильм фәлән-фәлән художестволы әҫәр мотивы буйынса төшөрөлдө, тип әйтәләр), икенсенән, бер халыҡ әҙәби әҫәре менән башҡа милләт халыҡ кинофильмы араһында, сала-сарпы булһа ла, йәғни, имплицив интертекстың бәйләнешен һиҙемләргә була. Һуңғыһына миҫал итеп, мәҫәлән, XX быуаттың утыҙ беренсе йылында башҡорт әҙибе Һәҙиә Дәүләтшина ижад иткән «Айбикә» повесының сюжеты менән 1980 йылда киң совет экрандарына сыҡҡан «Мәскәү күҙ йәшенә ышанмай» (реж. Владимир Меньшов, «Москва слезам не верит») тигән кинофильмдың В. Черных хикәйәһенә нигеҙләнгән сюжеты менән имплицив бәйләнешкә ингән. «Айбикә» повесынан мәғлүм булыуынса, революцияға тиклем иҙелеп йәшәп, иртә кейәүгә бирелеп тә, иренән иртә яҙған ябай ауыл ҡыҙы Айбикә революциянан һуң яңы тормош төҙөлөшөнөң алдынғы аң-белемле ударлы колхозсыһы булып китә. Алдынғы тракторсы ҡатын булараҡ ҡалаға колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар кәңәшмәһенә делегат булып һайланып килә. Шунда ун бер йыл күрмәгән, көтөп тә, ҡалала яңы ҡатын алыуын ишеткәс кенә көтөүҙән төңөлгән Айбикә үҙенең ире – тәүге мөхәббәте Юлдыбайҙы осрата. Күрешеп һөйләшкәндә лә, Айбикә элекке кеүек тартынып, оялып, баҫылып бармайынса, тыныс тауыш менән өндәшеүендә уның тамам үҙгәреүе һиҙелә. Юлдыбайҙың: «Айбикә, һин бик күп үҙгәргәнһең», – тигәненә ҡатын көлөмһөрәп кенә: «Тормош үҙгәрә лә, үҙгәртә лә инде…» – тип яуаплай. Бында әҫәрҙең тәүге бүлектәрендә һүрәтләнгән героиня менән ахырындағыһы ныҡ айырыла: әлбиттә, ул аң һәм зиһен яғынан дә, төҫө менән дә, холҡо йәһәтенән дә бик ныҡ үҫешкән, үҙгәргән шәхес булараҡ күҙ алдына килеп баҫа.

Владимир Меньшов кинофильмындағы төп героиня Екатерина Тихомирова ла, билдәле булыуынса, тәүҙә төпкөлдән килеп, дөйөм ятаҡта йәшәгән ябай эшсән һәм баҫалҡы ҡыҙыҡай булараҡ һүрәтләнә. Отпуск ваҡытында фатирҙы ҡарап торорға тип уны бер ағаһы – профессор Тихомиров тигән кеше өйөнә йәшәп торорға саҡыра. Әхирәте

Людмиланың ҡотортоуы буйынса, егеттәргә үҙҙәрен ошо атаҡлы профессорҙың ҡыҙҙары итеп таныта. Шулар араһындағы телевидениела кино операторы булып эшләгән Рудик уға тик ошо атаҡлы исем арҡаһында ғына ғашиҡ булып, үҙенә ҡарата. Әммә, һәр нәмәнең аҙағы тамам була, тигәндәй, ҡыҙҙар профессор фатирынан кире ятаҡҡа ҡайтырға мәжбүр була, әмәлгә ҡалғандай, Екатерина ауырлы икәнен белә. Тик һәр сентименталь романдарҙағыса, һөйгән йәре уны ташлай, сөнки ҡыҙҙың ябай эшсән булыуы хаҡындағы сере асыла. Айбикә һөйгән йәре менән ун бер йылдан һуң ғына күрешһә, Екатерина иһә егерме йыл үткәс элекке мөхәббәте – ҡыҙының атаһы менән осраша. Әммә Екатерина, башҡорт ҡыҙы Айбикә кеүек үк, элекке Катя булмай инде. Ул инде хәҙер – бер эре завод директоры.

Дөйөм алғанда, төрлө яҙмышлы башҡа мөхит һәм осор героиняларын ваҡыт үҙгәртә, батыр, ҡыйыу холоҡло булып киткән үҙаллы шәхес булараҡ күҙ алдына килеп баҫа. Дөйөм алғанда уларҙың яҙмыштарының бер береһенә имплицив һылтанма булған осраҡта ла, оҡшашлыҡ тойғоһон бигерәк тә ир кеше менән ҡатын-ҡыҙҙың осрашыу ваҡыты тыуҙыра: ике осраҡта ла ҡыҙҙар үҙгәргән, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татып, сыныҡҡан һәм нығынған. Әгәр ҡасандыр тома наҙан булған Айбикә хәҙер инде яңы тормошто символлаштырған тракторға атланып, депутат кимәленә күтәрелһә, Екатерина иһә юғары белем алып, мастерҙан завод директорына тиклем үрләп, шулай уҡ депутат (Моссовет депутаты) вазифаһын үтәгән, үҙе шулай уҡ заманына күрә зиннәтле техника – «Жигули» автомобилен йөрөткән эмансипациялы заман ҡатыны булып күҙаллана. Рудиктың «…Ә һин, Катерина, үҙгәргәнһең», тигәненә, ул да: «Эйе… уҡытыусылар яҡшы булды», – тип яуаплай. Был асылда Айбикәнең «Тормош үҙгәрә лә, үҙгәртә лә инде…» тигән яуабы менән ауаздаш, шуның менән интертекст бәйләнеше йәнә көсәйә. Бында ла героиняның шәхес булараҡ формалашып үҫешеүе шулай уҡ художестволы һүрәтләнгән.

Тимәк, ысынлап та, художестволы әҫәр менән кинофильмдың сюжеты – ике төрлө сәнғәт өлкәһе араһында ла интертекст бәйләнештәрҙең булыуы ихтимал. Художестволы әҫәр уҡығанда, таныш сюжет һыҙығы йәки мотивы, «келт» итеп, таныш бер күренеш кеүек, хәтергә төшә икән, тимәк, ҡасандыр әйтелгән фекер, идея йәнә килеп яңы әҫәрҙә урын алып, үҫтерелеүе ихтимал. Был художестволы фекерҙең законлыҡтарының бер күренешелер, тип танырға мөмкин.

### 3.3. Гендер прозаһы һәм поэзияһы мәсьәләһенә ҡарата йәки хәҙерге башҡорт ҡатын-ҡыҙ ижадында интертекстуаллек

Ҡатын-ҡыҙ прозаһы йәки поэзияһы Рәсәй әҙәбиәте киңлегендә 1980-се йй. аҙағы – 90-сы йй. баштарында иркенләп үҫеште, ә инде 90-сы йй. урталарынан уны фәнни күҙлектән өйрәнеү башланды, һәм был әҙәби күренеште билдәләү өсөн беренсе тапҡыр «гендер» термины ҡулланылды. «Гендер» тигән төшөнсә иң элек ир менән ҡатын араһындағы енси, биологик, психолог айырманың булыуын аңлата. И.Г. Зумбулидзе был яңы ғилми төшөнсә тураһында «…Употребление этого понятия переносило акцент на взаимодействия между полами с учетом всей сложности их биологических, психологических, социальных и культурных особенностей», тигәйне Т. Мелешконың «Современная отечественная женская проза: проблемы поэтики в гендерном аспекте» тигән китабына һылтанып[117].

Бөгөн ҡатын-ҡыҙ прозаһы менән поэзияһын айырып ҡарауҙың сәбәптәре шундай факторҙарға ҡайтып ҡала: беренсенән, авторҙың мотлаҡ ҡатын-ҡыҙ булыуы, икенсенән, әҫәрҙең үҙәгендә төп герой булып ҡатын-ҡыҙҙың тороуы, өсөнсөнән, проблемаһы ҡатын-ҡыҙ тормошо һәм яҙмышы тирәһендә үҫешеүе. Шулай уҡ бындай әҫәрҙәрҙә тирә-яҡ мөхитте танып белеүҙә ҡатын-ҡыҙ хис-тойғоларының үҙенсәлекле бирелеше лә мөһим.

Фәндә ҡатын-ҡыҙ прозаһы йәки поэзияһы «феномен» тип ҡаралып өйрәнелә, төрлө ҡараштар, мөнәсәбәттәр белдерелә, дискуссиялар үткәрелә, әммә уны ниндәйҙер иҫ киткес башҡа, сит күренеш тип түгел, бәлки, әҙәби фекерҙең яңы күренеше, художестволы мөмкинлектең инновациялы ысулы тип ҡабул итергә кәрәктер. Ҡатын-ҡыҙ ижадының әһәмиәте һәм мөһимлеге хаҡында интертекстуаллек теорияһына нигеҙ һалған Юлия Кристева ла билдәләп үткәйне. Ул, социаль нормалар менән ҡаршылашҡан ҡатын-ҡыҙ әҙәбиәте художестволы фекерҙең матур бер күренеше булыу мөһимлеге менән айырылып тора, тигәйне. Сөнки әҙәбиәттең был төрө әйләнешкә инмәгән (әле ҡулланылып өлгөрмәгән) төшөнсәләр тураһында әйтелмәгәнде өҫкә сығара,

[117] *Зумбулидзе И.Г.* «Женская проза» в контексте современной литературы // Современная филология: материалы Международной научной конференции (г. Уфа, апрель 2011 г.). – Уфа, 2011. – С. 21.

йәмғиәтебеҙҙе һығылмалыраҡ һәм иркенерәк булған дискурс менән байыта, тип дауам иткәйне фекерен[118].

Йәғни бер үк тормош күренешенә ҡарата ир-зат яҙыусылары менән әҙибәләрҙең тик үҙ енесенә хас булған башҡараҡ психологияһы, уй-кисерештәре, ҡараштары белдерелә. Был юҫыҡта, әлбиттә, гүзәл зат яҙыусыларының йәмғиәткә ҡарата үҙ ҡарашы, хистәре, позицияһының булыуы ихтимал. Был да әҙәбиәттең, сәнғәттең художестволы байлығын, киңлеген һәм үҙенсәлектәрен сағылдырған матур бер күренеш тип ҡабул итергә кәрәктер. Бөгөнгө рус әҙәбиәтендә ҡатын-ҡыҙ прозаһына нигеҙ һалыусылар тип Людмила Петрушевская, Татьяна Толстая, Людмила Улицкая, Виктория Токарева ише әҙибәләр һанала. Улар төрлө йүнәлешле төрлө жанрҙарҙа ижад итә: социаль-психологик, сентименталь роман, тормошто бәйән иткән роман (роман-жизнеописание) йәки хикәйә, повесть, эссе. Бындай әҫәрҙәрҙең төп темалары булып ғаилә, мөхәббәт, бәхет, тормош, ир менән ҡатын-ҡыҙ мөнәсәбәттәре, бала-сағалар, ейән-ейәнсәрҙәр, йорт-ҡура, шәхес, быуындар бәйләнеше йәки ҡапма-ҡаршылыҡтары кеүек һ.б. шундай интим, ят заттар күҙенә салынып бармаған, әммә тормошта, йәмғиәттә мөһим урын алған күренештәр тора[119].

Әҙәбиәт ғилеме фәнендә ҡатын-ҡыҙ әҙибәләренең ижады дүрт төркөмгә бүлеп ҡаралыусан:

– ҡатын-ҡыҙ әҙәбиәте (баҫым автор енесенә яһала);
– ҡатын-ҡыҙ уҡыуы (баҫым уҡыусы енесенә яһала);
– ҡатын-ҡыҙ яҙыуы (баҫым текст стиленә яһала);
– ҡатын-ҡыҙ автобиографияһы (баҫым текст йөкмәткеһенә яһала)[120].

Башҡорт әҙәбиәтенә килгәндә, был төркөмдәр араһынан беренсеһе яҡыныраҡ, сөнки беҙҙең ерлектә лә ҡатын-ҡыҙ прозаһы йәки поэзияһы күптән тамыр йәйгән бер сағыу ваҡиға булараҡ үҙен та-

[118] *Кристева Ю.* Изоляция, идентичность, опасность, культура… // Вестник Европы. – № 15. 2005. – С.140.

[119] *Зумбулидзе И.Г.* «Женская проза» в контексте современной литературы // Современная филология: материалы Международной научной конференции (г. Уфа, апрель 2011 г.). – Уфа, 2011. – С. 22.

[120] *Жеребкина И.* «Прочти мое желание…». Постмодернизм. Психоанализ. Феминизм. – М.: Идея-Пресс, 2000. – С. 138.

нытты. Әле 1930-80-се йылдарҙа ижад иткән Һәҙиә Дәүләтшина менән Зәйнәп Биишеваның сәсмә әҫәрҙәре ана шундайҙарҙан ине. Тик, шуныһы: Һ. Дәүләтшинаның, мәҫәлән, «Айбикә» повесы, «Һырға һабағы» хикәйәһе кеүек әҫәрҙәренең үҙәгендә башҡорт ҡатын-ҡыҙ яҙмышы торһа, «Ырғыҙ» романында иһә хәл-ваҡиға Айбулат Айҙаров исемле ир-егет тирәһендә үҫешә. Һуңғыһы гендер прозаһының төп критерийына тура килмәһә лә, унда сағылған башҡа героиняларҙың характерҙары галереяһының оҫта бирелеше ҡатын-ҡыҙ прозаһы исемен аҡлай. Бында, әлбиттә, сәйәсәт тә үҙ ролен үтәгәндер. Төп геройҙың ир-ат булыу сәбәбе әҫәрҙең синфи ҡаршылыҡтарҙа иреклек өсөн барған көрәште, революцияны тасуирлап күрһәтеү кеүек төп идеяға ҡайтып ҡалалыр. Совет осоро идеологияһына ярашлы рәүештә ысын көрәшсе революционер булып ҡатын-ҡыҙ героиняһы түгел, мотлаҡ ир-ат тороу талап ителгәндер. З. Биишеваның «Яҡтыға» трилогияһы идея-темаһы, образдар системаһы яғынан гендер прозаһы аталышына лайыҡ.

Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтенең айырыуса прозаһында был йәһәттән уңышлы эшләп килгән һәм уҡыусылар араһында киң таныулыҡ тапҡан ҡатын-ҡыҙ яҙыусыларынан Таңсулпан Ғарипова, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Гөлнур Яҡупова ише әҙибәләрҙең ижады, сәсмә әҫәрҙәре ҡаралған гендер йүнәлешен тәшкил итеп, ошо әҙәби йүнәлештең сағыу өлгөһө булып тора. Тик үткән быуат әҙибәләренең ижады менән бөгөнгөләренеке араһында айырма бар: тәүгеләренең әҫәрҙәрендә, заманына хас булғанса, социаль көрәш, синыф-ара бәрелештәр, шул шарттарҙағы хоҡуҡһыҙ ҡатын-ҡыҙ хәле, уның аң йәһәтенән үҫеше, шәхес булараҡ формалашыу процесы һ.б. һүрәтләнә; бөгөнгө ҡатын-ҡыҙ яҙыусылар прозаһында тәрән психоаналитикаға ҡоролоп, ҡатындарҙы ир-ат заттарынан өҫтөнөрәк, юғарыраҡ итеп, йәғни феминистик рухҡа һуғарып күрһәтелеүсән. Йәғни ҡатындар – ул ир ҡатыны ла, әсә кеше лә, донъя көтөүсе лә, балаға туған телде биреүсе лә, тәрбиәләүсе лә һ.б. Ирҙәр иһә бындай мөмкинлектән мәхрүм, әлбиттә (тормошта һирәк осраған ҡайһы бер күренештәрҙән, мәҫәлән, яңғыҙ атайҙарҙың балаларын үҫтереүселәрҙән башҡа). Һис шикһеҙ, бындай әҫәрҙәрҙә хәл-ваҡиғалар ҡатын-ҡыҙ героиняһы тирәһендә үҫешә, бөтә уратып алған мөхит, тормош героиня күҙлегенән сығып баһалана, роман тиклем роман жанрындағы әҫәрҙәрҙә иһә, уның тәбиғәте һәм закондарына ярашлы рәүештә, тарихи ысынбарлыҡҡа ҡарап, бер нисә быуын ҡатын-ҡыҙ яҙмышы һүрәтләнеүсән.

Гендер прозаһында ижад ителгән әҫәрҙәр шулай уҡ фольклор традицияларын үҙенсәлекле итеп художестволы сағылдырыуы менән шаҡтай айырылып тора. Бәлки, улар ир-ат яҙыусыларынан айырмалы рәүештә, халыҡ ижадынан файҙаланған күренештәргә күпкә нескәрәк һәм тәрәнерәк мәғәнә һалыуы, уларҙы тик ҡатындарға ғына хас ҡараш, логика аша үткәреп бағыуы менән дә улар бер башҡалыр.

Был йәһәттән ҡарағанда, фольклор традициялары әҙәби әҫәрҙә художестволы-эстетик яҡтан ғына сағылып ҡалмайынса, ошо ике эстетик формала яҙылған художестволы текстар араһында эксплицив йәки имплицив аллюзияларҙың интуитив рәүештәге бәйләнешен дә күҙәтергә мөмкин. Ижад иткән автор үҙе билдәле мөхиттән сығып, шул мөхиттең, халҡының, ырыу-ғаиләһенең этник традицияларын – мәҙәниәтен (йола-фиғелен, ғәҙәттәрен, телдең диалект үҙенсәлектәрен һ.б.) – интуитив, тәбиғи әҫәренә индереп ебәрә, әҙерлекле уҡыусы иһә шул традицияларҙы йәнә интуитив рәүештә ҡасандыр ишеткән-белгән, уҡыған кеүек итеп, иҫенә төшөрөп ҡабул итә һәм оҡшашлыҡтарҙы, фәннисә әйткәндә, интертекст бәйләнештәрен табыуға ирешә. Хатта ки дежавю тойғоһон да кисереүе ихтимал.

Миҫал итеп Гөлнур Яҡупованың ижадын килтерергә мөмкин.

Нескә күңелле ҡатын-ҡыҙ буларaҡ, ижадта беренсе аҙымын шиғырҙары менән яһаған әҙибәнең ижады бик үҙенсәлекле. Уның шиғырҙарының, ғөмүмән, ижадының төп лейтмотивы булып «Был – мин – ҡатын!» тигән билдәләмә торғандай. Уның 1982, 1984-се йылдарҙа «Йәш көстәр» альманахына ингән шиғырҙарында уҡ был, бәлки, ныҡ уҡ яңғырамаһа ла, ауазы булды. Уның шиғырҙарына ҡатын-ҡыҙ нәзәкәтлелеге, күңел нескәлеге, эске йылылыҡ хас. Г. Яҡупованың лирик героиняһының йөрәге заман менән бер тигеҙ тибә, һулышын һиҙә, уның менән гармонияла йәшәй.

«Биҙәктәр» (1989), «Автограф» (1992) китаптарына ингән шиғырҙарында хис-тойғолар ҡайнай, бәхет, изгелек, яҡшылыҡ кеүек һәр кемгә таныш һәм билдәле төшөнсәләргә тәрән мәғәнә һалына.

Г. Яҡупованың шиғырҙарында ассоциативлыҡ алымы көслө булыуы әҙәби тәжрибәләрҙе үткәрергә мөмкинлек биреп, улар араһында интертекст бәйләнешенең аллюзияһын тыуҙырҙы. Тормош көнкүрешендә ябай ғына әйбер рухи метаморфоза кисереп, мөһим күңел кисерешенә әүерелеп, шуның менән ассоциалаша. Мәҫәлән, «Тиҫбе» тигән шиғырындағы тиҫбе ябай ғына тиҫбе булып сыҡмай. Сөнки ул мәрйендән түгел, йәш ынйыларынан теҙелгән икән. Күҙ йәштәрен

ынйыға тиңләү, шуға оҡшатыу уҡыусыла әкиәттән билдәле образлы сағыштырыу менән интертекст булдыра: ундағы һылыу илағанда, күҙҙәренән йәш урынына ынйы бөртөктәре һибелә, ти. Художестволы күҙлектән ҡарағанда, әкиәт ҡыҙы менән шулай ассоциалаша лирик героиня. Ә мәҙәниәт универсалийы ҡарашынан ҡарағанда, ул бөтә донъя халыҡтары әкиәттәрендәге һылыу ҡыҙ образына тартым: ынйылар гүзәл зат балауыҙ һыҡҡанда күҙҙәренән, ә көлгәндә ауыҙынан ҡойолоуы уртаҡ тылсымлы күренеш.

Шағирә ошо образды оҫта ҡулланып, уны ижады маҡсатынан сығып үҙенсәлекле файҙалана. Тик, мөхәббәтемә тоғро булам, тип, һағышҡа һалып, гел генә илатҡан ул тойғоға мәңге балауыҙ һығып ултырмаҫ:

*...Тарта-тарта ул тиҫбене,*
*Ҡабатларһың: һөйәм һине...*
*Устарыңа ынйы гелән*
*Һибелмәҫ, бел, йәше, йәме!*[121]

Шағирә лирик героиняһының хистәрен, кисерештәрен үҙенсәлекле сағылдырыу өсөн, «төрлө мәғәнәле һүҙҙәрҙе көтөлмәгәнсә сиратлашыуға ҡора» (фәндә бындай осраҡты «каламбурлы рифма» тип йөрөтәләр)[122], шунлыҡтан еңелсә юмор ҙа хасил була кеүек. Строфа аҙағында килгән «йәме» тигән һүҙҙе раҫлаусы киҫәксә итеп тә, тиҫбенең йәмле «төҫө» итеп тә аңлап була. Был урында шағирә, әйтерһең дә, уҡыусы алдында һайлау хоҡуғы бирә, нисек күңеленә хуш килә, шулай аңла. Икенсе яҡтан иһә һөйгән йәренең үҙенә ҡуйыла был мәсьәлә: әйҙә баш ват, йәнәһе.

Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ шиғриәте, йәғни фәндә күптән билдәле булған, гендер поэзияһына лирик героиняның нескә, йомшаҡ күңеленең торошон сағылдырғанда, шағирәләр күҙ йәш түгеүҙәрен, йәғни эмоциональ физик торошон белдереүсән. Был хаҡта, мәҫәлән:

*Был кис ҡалып килде илағым,*
*Бер илағым килде туйғансы.*
*Күңелдәге бөтә әрнеүҙәрҙе*
*Күҙ йәштәрем менән йыуғансы*[123]... –

---

[121] *Яҡупова Г.* Мөхәббәткә мәдхиә. – 8-се б.

[122] *Әхмәтйәнов К.Ә.* Әҙәбиәт теорияһы: өсөнсө баҫма. – Өфө: Китап, 2004. – 220-се б.

[123] *Ильясова Й.* Һарғайма, йәй!: Шиғырҙар. – Өфө: Китап, 22–23-сө бб.

ти «Мин иланым тағы бәхетемдән» тигән шиғырында билдәле шағирә Й. Ильясова. Бында лирик героиня тормошоноң төрлө осорҙары – бәхет-шатлыҡ, ҡайғы-үкенестәрен иҫкә төшөрөп, күҙ йәштәре менән йыуыуына өмөтләнә. Йәки:

*Күкрәгеңә тамды күҙ йәштәрем,*
*Ниңә шулай ҡапыл тертләнең?*
*Яндырамы әллә күҙ йәштәрем,*
*Ҡалҡандай ҙа һинең күкрәгең*[124], –

ти Ф. Туғыҙбаева үҙенең исемһеҙ бер шиғырында. Шиғырҙа ике йәш йөрәктең хәҙер айырыласағын, шунлыҡтан лирик героиняның күңеленең болоҡһорланыуы поэтиклаштырылған.

Әйтергә кәрәк, ошо илаү кеүек физик тороштоң поэзияла поэтиклаштырылыуына тәүгеләрҙән булып Ким Әхмәтйәнов иғтибар иткәйне. Ул поэзияла кешенең ошо хәлен һүрәтләү оҫталығын С. Ҡудаш, Ғ. Сәләм һәм М. Кәрим әҫәрҙәрен анализлап күрһәткәйне. Мәҫәлән, әгәр С. Ҡудаш менән Ғ. Сәләм шиғырҙарында кешенең был эмоциональ кисереше шул хәлдең үҙ исеме менән («…Илай икән шуға ысынлап», «…Күҙҙәреңдән йәшең түгелде» һ.б.) аталһа, Мостай Кәримдә иһә был хәл башҡа образдар аша нескәрәк итеп сағылдырылды. Уның «Ҡара һыуҙар» поэмаһы героиняһының әлеге торошо «…Ҡара шәле суҡтарынан Сөбөрҙәп һыу ағып тора», тигән нисектер йәшерен образлы сағыштырыу аша күрһәтелде. К. Әхмәтйәнов был поэманы тикшергәндә, «Шәл суҡтарынан һыу ағып тороу күренеше менән һыҡтау араһында бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ кеүек. Ләкин әҫәрҙең поэтик контекстында был ике күренеш араһындағы бәйләнешептәре бында тағы ла нәҙегерәк, тимәк, поэмалағы шиғриәт тә юғарыраҡ һәм нескәрәк», тигәйне. Артабан ғалим «хәрәкәттең… үҙ исеме менән атап бирмәйенсә, уҡыусыға башҡа берәй образдар аша еткереү – шиғриәт теленең үҙе тап бына шул була ла инде», тип өҫтәгәйне[125].

Төрлө осор әҙиптәренең поэтик оҫталығы кимәлен ғалим башҡорт шиғриәтенең үҫешеүе, йылдар үтеүе менән шағирҙар ҙа йышылып, поэтик нескәлектәрҙе үҙһенеүҙәре менән аңлатҡайны.

---

[124] *Туғыҙбаева Ф.* Фатихамды бирәм: Шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: Китап, 1994. – 167-се б.

[125] *Әхмәтйәнов К.* Матурлыҡ. Батырлыҡ. Шиғриәт. – Өфө: Баш. кит. нәшриәте, 1982. – 224–225-се бб.

Ошондай уҡ – бер хәрәкәтте, хәлде, хис-тойғо, яратыу, күңел төшөү кеүек эмоциональ кисерештәрҙең башҡа образдар аша биреләүен Г. Яҡупованың шиғырҙарында ла күҙәтергә мөмкин. «Яҡты күҙҙә…» шиғырында «башҡа образ» булып әлеге лә баяғы ынйы образы һүрәтләнә. Ул илау сигенә етһә лә, илайым, тип асыҡтан-асыҡ әйтмәйенсә:

*...Өҙөлә лә күңел ебе,*
*Ынйылары*
*Һибешеп ята...*
*Кем теҙер был мунсаҡты*
*Яҡты күҙҙә,*
*Ынйы теүәл саҡта? –*

тигән риторик һорау бирә. Ваҡытлыса үпкәләшкән бер мәлдә өҙөлгән ынйы мунсағын, әлбиттә, һөйгәне менән бергәләп ялғаясаҡ, сөнки мөхәббәт һәр нәмәнән көслөрәк. Бында автор лирик героиняһының эмоциональ торошоноң физик хәлен туранан-тура исеме менән атамайынса, уҡыусының күңел һиҙгерлегенә, зиһененә ышана. Ул бының менән «күңел ебенә» теҙелгән ынйыларҙың хәҙер һибелеп ятыуы, тигәндә, тулышҡан күңелдең һытылырға ғына торған хәл-торошон художестволы һүрәтләп, кемдеңдер шул күңелде тынысландырасағына өмөт бағлай. Әлбиттә, әкиәт эстетикаһы хаҡында хәбәрҙар булған уҡыусы бында йәнә ана шул халыҡ ижады менән һиҙелмәҫ оҡшашлыҡтың булыуына төшөнә, фәннисә әйткәндә, уның менән интертекст бәйләнешенең булдырылыуына төшөнә ала. Был шағирәнең аһәңле һүҙгә маһир булып, халыҡ ижадына хас образлы фекерләүгә эйә икәнлеге хаҡында һөйләй. Ошо оҫталығын йәки художестволы алымын ул һуңынан прозаһында ла киң файҙаланды.

Әммә был донъяла, ғашиҡ булған осраҡта ла, барыһы ла ал да гөл булмай икән шул. Мөхәббәт утын көсәйтеп, уға йыш ҡына йән өрөп торорға кәрәк, имеш. Г. Яҡупованың әлеге «Мөхәббәткә мәдхиә» йыйынтығына ингән «Йөрәгеңә һинең ут ҡабыҙҙым…» тигән шиғыры тап шул хаҡта. Һөйгәненең йөрәгендә ут ҡабыҙып, һөйөп, һөйөлөп кинәнеүе тураһында яҙа ла:

*...Һөйөү ҡуҙым һүнеп ҡалһа кинәт,*
*Туңасаҡһың, тимәк, ул саҡта –*
*(Яғылмаған мейес кеүек...)*
*Тәңрем һине, ахыры, ысынлап та,*
*Ятҡанмы әллә балсыҡтан!? –*

тип мөхәббәт утын үҙе ҡыҙыуландырасағын белдерә. Ысынлап та, һөйгәнен, тәү ир заты Әҙәм кеүек, балсыҡтан яралып та, уны, мейес кеүек, һыуынып китмәһен өсөн ҡыҙҙырып торорға кәрәкме икән? Ауыл мейесен күҙ алдына килтереү һәләтенә эйә булған һәр кем үҙенә был һорауҙы бирә ала, әлбиттә. Сөнки ауыл өйөндә мейес нисек донъя йәме, йәне булып, йылылыҡ биреп тора, мөхәббәт тә шулай йәнле, ҡыҙыу, теремек булырға тейеш. Юғиһә, мөхәббәт уты һүрелә, һүнеп һыуына...

*Һыуыҡ мейескә мин тәрәлгәнмен,*
*Йылыһы юҡ, беләм, нишләйем?..*
*Ҡайнар уты өйҙө күркәм иткән,*
*Өшөтмәгән сағын иҫләйем, –*

тип был фекерҙе иҫбатлағандай итә, мәҫәлән, Й. Ильясова үҙенең «Мейес» тигән шиғыры менән.

Бында иһә халыҡ хәтерендә, аңында һаҡланып (шулай тибеҙ, сөнки республикабыҙҙың күпселек ауылдарында хәҙер газ үткәрелгәс, мейес әҫәрен тапмаҫһың, яңы быуын балалары уны бөтөнләй тик һүрәттәрҙән, музейҙарҙа күрә ала), мәҙәниәтендә һәм тормош-көнкүрешендә мөһим роль үтәгән мейес антропологик культурология мираҫы күренеше булараҡ күҙаллана башлай. Уның ап-аҡ төҫтә булып, өйҙө йәмләп, йылытып тороу функцияһы, шулай итеп, шағирәләр күңелендә тыуған хистәр менән имплицив интертекст бәйләнешенә ингән. Ә инде образлы функцияһы яғынан ҡарағанда, өй хужалығында хеҙмәт иткән мейес уларҙа күңел һәм мөхәббәт уты менән ассоциалаша, поэтик сағыштырыла.

Ат, йылҡы образдары халыҡ ҡарашын художестволы сағылдырған ауыҙ-тел поэтик ижадында ир-ат юлдашы булараҡ һүрәтләнеүсән, «ҡайҙа булмай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы», тип тә йырлана. Халҡыбыҙҙың мәшһүр «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» кеүек һәм башҡа эпостар, легенда һәм риүәйәттәрендә, мәҡәл һәм әйтемдәрендә, йырҙарында һәм йомаҡтарында сағыу художестволы сағылыш тапҡан.

Әгәр халыҡ ижадында йылҡы, ат ир-егеттең ялҡынлы тоғро дуҫы һәм юлдашы, яуҙа – яуҙашы булып һүрәтләнһә, әҙәбиәттә иһә уға төрлө образлы төшөнсә бирелеүсән. Рәми Ғариповтың «Башҡортостан» тигән шиғырында:

*...Уйнаҡлашып саба, ана, тайҙар...*
*Уйға килә яугир олатайҙар –*

*Илен улар тиккә һөймәгән,*
*Илем, тиеп тиккә көймәгән, –*

тип сабып барған тайҙар лирик герой күңелендә илебеҙ тарихынан, халҡыбыҙҙың рухи мираҫынан билдәле образдарҙы тыуҙыра[126]. Ысынлап та, үткән данлы сал тарихыбыҙ менән үрҙә һанап үткән эпик һәм легендар яу аты йәки эпик Аҡбуҙат һыны һынландырылған кеүек, шуның менән шиғырҙа билдәле аллюзия тыуҙырыла ла инде.

Мостай Кәрим ижадында ла ат, дөрөҫөрәге, Аҡбуҙат образы хыял, өмөт, ижад менән ассоциалашып һүрәтләнә. Аталышы менән үк ул беҙҙе халыҡ ижадынан, бигерәк тә, мәшһүр «Урал батыр» йәки «Аҡбуҙат» эпостарынан билдәле булған геройҙары менән аллюзиялы һылтанманы булдыра. Мәҫәлән, шағирҙың госпиталдә дауаланып ятҡанда яҙған «Минең атым» (1942) шиғырында Аҡбуҙат өн аралаш төш фантазияһы рәүешендә генә һынландырыла:

*Аҡбуҙатымды мин төшөмдә күрҙем:*
*Тарһынып ул ҡырҙар киңлеген,*
*Ярһынып ул, башын сайҡай-сайҡай,*
*Асып инде бүлмәм ишеген*[127]*, –*

тиелә лә, артабан бына өс ай инде (тимәк, шағир шунса ваҡыт дауалана) ат эйәһенә тоғро булып («…Бер үҙеңә генә тоғро атмын, Башҡаларҙы шуға ят иттем»), дуҫһыҙ ауыр булыуына зарланып, эйәһе булған лирик геройҙың йәһәтерәк һауығыуын теләй. Бында, һис шикһеҙ, эпик батырҙарға ғына тоғро булырлыҡ, тик улар ғына үҙҙәрен ауыҙлarлыҡ эпостан килгән Аҡбуҙат образы һүрәтләнә, уның менән эксплицивлы реминисценция тыуҙырыла. Әлбиттә, бында һүҙ фронтта яраланып, ижад итеү мөмкинлегенән яҙған шағир менән уның илһам аты ҡанатлы Парнастың ише Аҡбуҙат һынында ижад итеү теләгенең булыуы хаҡында ла барыуы ихтимал. Ләкин уға ниндәй генә мәғәнә һалынмаһын, уның тик ана шул Аҡбуҙат тип аталыуы үҙе үк эпик атты хәтергә төшөрөүе бәхәсһеҙ.

Әлбиттә, аттар, йылҡы малы батырлыҡ, яу, тоғролоҡ, егетлек кеүек төшөнсәләрҙе генә үҙһенеп ҡалмаған. Был хаҡта Р.Т. Бикбаев дөрөҫ билдәләп үтеүенсә, бынан башҡа ул шулай уҡ «йәшәү сығанағы ла,

---

[126] *Ғарипов Р.* Алырым ҡош менән Бирмәм ҡош. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1992. – 211-се б.

[127] *Кәрим М.* Әҫәрҙәр: биш томда. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1971. – 64–65-се бб.

тормошто алға алып барыусы ҙур көс тә… Йырҙарҙа батырлыҡҡа ғына түгел, көн итеүгә, ғәҙәти көнкүрешкә бәйле ҡыҙыҡлы миҫалдар бар»[128]. Ғалим был һүҙҙәрен «Әпәт» (йәғни «тағы ла» тигән русса «опять» һүҙенең транслитерацияһы) тигән йырынан миҫалға килтерә:

*…Ерән бейә менән туры бейә һауған һайын икешәр эйә.*
*Хайран малдарымдың иткәйен әллә ниндәй дошмандар ейә…*

Аттан ниндәйҙер матди табыш алыуҙан башҡа (ит, ҡымыҙ, ҡаҙы), ул шулай уҡ тормош-көнкүрештә алмаштырғыһыҙ көс ярҙамсыһы ла булараҡ билдәле. Әммә ат образы башҡа мөхиттә, шағир күңелендә башҡасараҡ төшөнсәгә лә эйә булыуы ихтимал. Был гендер мәсьәләһенә бәйле, үрҙә әйтелгәнсә, шул йүнәлештәге ижад талаптарына буйһона. Сөнки бер үк образға ҡарата ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ әҙибәләренең мөнәсәбәте лә башҡа булыуы ихтимал.

Ҡатын-ҡыҙ поэзияһына килгәндә иһә, шағирәләрҙе ир-ат, яу аты, батыр эйәрләгән ат кеүек образдар әллә ни ҡыҙыҡһындырмай тиерлек. Был дөрөҫ тә, сөнки улар – ҡатын-ҡыҙ!

*Мин – ҡатын-ҡыҙ. Хафаларға ҡалам:*
*Күпме яуҙар уҙған ер йөҙөнән…*
*Һоҡландырмай мине ҡылыс сыңы,*
*Батырҙарҙың түккән йөрәк ҡаны,*
*Бөйөк ҡыйралыштар, оло еңеү,*
*Ҡолдар йәки ҡорбандарҙың һаны.*
*Мин – ҡатын-ҡыҙ*[129]… –

тип бөтә донъяға үҙ позицияһын белдерҙе Йомабикә Ильясова.

Быны, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙ поэзияһының нескәрәк, тынысыраҡ, наҙлыраҡ хистәрҙе үҙһенеүе менән аңлатып булыр ине. Шул иҫәптән поэзияла йышыраҡ яу, батырлыҡ менән ассоциалашҡан ат образы ла ана шундайҙарҙан. Гендер поэзияһында ат күберәк реаль тормош-көнкүрешенә яҡыныраҡ итеп образлы сағылдырылыуы мөмкин. Донъя тотҡаһы булған ҡатындар өсөн был яҡыныраҡ һәм тәбиғирәктер. Ат бында тормош йөгөн тартҡан хайуан булараҡ һүрәтләнә. Ҡатын-ҡыҙ халыҡ аңында йылҡының хужалыҡта байрам аты рәүешендә лә һынландырылыуын, иң оло ярҙамсы мал, йөк аты булып та һаналыуын иҫтә тота. Ошо йәһәттән ҡарағанда, Г. Яҡупованың

[128] *Бикбаев Р.Т.* «Атлы азамат» (башҡорт халыҡ ижадында йылҡы малын изгеләштереү) // Шәрҡиәт мәсьәләләре. – № 2 (72). – 57-се б.

[129] *Ильясова Й.* Һарғайма, йәй! – Өфө: Китап, 1994. – 33–34-се бб.

«Асылаһы серҙәр» тигән шиғырында ла ат образы тәрән ассоциатив мәғәнәгә эйә.

*Туй аттары күптән туғарылды,*
*Тәртәлә беҙ икәү артабан,*
*Ә йөгөбөҙ – уртаҡ яҙмышыбыҙ,*
*Тартып ҡара, әгәр тарталһаң,*

ти ул. Ҡыңғыраулы дуғалар менән биҙәкләнгән туй экипажын байрам шау-шыуы үтеп китеп тымғас, лирик героиня менән уның һөйгән йәренең артабан донъя йөгөн тартыу бурысын шулай тәртәгә ат урынына егелеү менән образлы сағыштыра. Ләкин нескә күңелле, поэзия йәнле йәш ҡатынға был тәртәләр иркен ижади һулыш алырға тар булып, ҡамасау итә башлай. Был, әлбиттә, уны нығ үрһәләндерә, тынысһыҙландыра, күңелендә ауыр хистәр яралта. Әммә ул үҙенә ышана: нисек кенә булмаһын, улар икәү бит әле, тартасаҡ йөк тә шуға еңелерәк тойола, үрҙәргә артылғанда, ҡапыл түбәнгә тәгәрәр сиккә етһәләр ҙә, бергә булырҙар.

*...Еңелен дә икәү тартырбыҙ ул,*
*Шундалыр ҙа тормош асылы?*
*Йә, күҙ күрер әле. Алда – үрҙәр,*
*Асылаһы серҙәр асылыр, –*

тип киләсәккә өмөт менән баға.

Г. Яҡупованың быуаса ғүмеренең төрлө миҙгелдәрен сағылдырып килгән шиғырҙар йыйынтыҡтары араһында «Йөрәк хаты» (1998) тип аталғанында ғүмеренең алтын уртаһының тупһаһына еткән бер мәлендә сығарған шиғырҙары тупланған: унда тормош фәлсәфәһе лә, мөхәббәт тә, тыуған ергә, илгә һөйөү тойғолары ла («Ил балаһы», «Тыуған телгә табыныу», «Башҡортостан–Ғафури», «Һинең башҡортоң», «Сәйетбабаға ҡайтҡанда», «Сараһыҙлыҡ», «Ҡыҙым сирләгәндә», «Бишек йыры», «Ҡыңғырау», «Ҡышҡы урман», «Ағиҙелемә», «Умырзая», «Әсәй менән киләм», «Изгелек» һ.б.) үҙ-ара тигеҙ үсешеүендә, йәшәүендә сағылдырылған. Унда шағирәне ураткан мәшәҡәтле, ығы-зығылы донъя бер төйөнгә төйнәлгән, бер үҙәк тирәһендә ҡорола бара. Ул үҙәк иһә – автор үҙе, дөрөҫөрәге – ҡатын-ҡыҙ йөрәге: тәүҙә ул әсәнең наҙлы ҡыҙы, өләсәһенең иркә ейәнсәре, һуңынан һөйөклө ҡатын, ахырҙа үҙе ҡәҙерле әсә һәм өләсәй. Был үҙәк, Оло Йыһандай, Г. Яҡупованың ижадында әленән-әле урын биләп тора.

Ошондай быуындар күсәгилешлеген, бәйләнешен бер төйөнгә төйнәү алымын шағирәнең билдәле бер дөйөмләштереүҙәр яһалған

«Әҙәм вә Һауа» китабында ла ҡулланды. Әммә бында инде барыһы ла күпкә мөһимерәк, дәүерәк кимәлдә һүрәтләнә. Әйтерһең дә, автор билдәле бер юғарылыҡҡа етеп, олпатланып тирә-яғын байҡай, үткәндәргә күҙ һала, киләсәге хаҡында уйлана, уй-фекерен, зиһенен туплай кеүек, уҡыусылары алдында яуап тотҡандай хис итә. Шуға ла шиғырҙары аҡыл һәм лиризм менән һуғарылған, нәфислеккә, эстетик аһәңгә, фәлсәфәүи тәрәнлеккә эйә.

Г. Яҡупованың шиғырҙарында, тимәк, ассоциативлыҡ көслө. Тормош көнкүрешендә ябай ғына әйбер рухи метаморфоза кисереп, мөһим күңел кисерешенә әүерелә, шунының менән ассоциалаша.

***

Ҡатын-ҡыҙ поэзияһында һүрәтләнгән нескә хис-тойғолар, шатлыҡ менән ҡайғы-хәсрәттәре, күңел торошо, донъяға ҡарашы кеүек тәбиғи төшөнсәләр менән йорт, ғаилә, бала-саға, ир һәм ҡатын мөнәсәбәттәре темалары башҡорт гендер прозаһында ла, әлбиттә, сағыу сағылыш тапты. XX быуат аҙаҡтары – XXI быуаттың тәүге егерме йыллығында ижад ителеп, уҡыусылар һөйөүен яулап өлгөргән Г. Ғиззатуллиның «Күңел йорто» повесы, Т. Ғарипованың «Бөйрәкәй» романы, Г. Яҡупованың «Ҡатындар» трилогияһы ана шундайҙарҙан булды.

Гендер прозаһының үрҙә һанап үткән мөһим критерийҙарына хас булғанса, был әҫәрҙәрҙә лә һүҙ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының яҙмышын һүрәтләү тирәһендә бара. Телгә алған романдарҙа иһә, әйтеүебеҙсә, уларҙың бер нисә быуын тормошо тарихы сағылдырыла. Ошоларҙың барыһын да художестволы күрһәтеүҙә фольклор традицияларының роле лә шаҡтай ҙур, һәм улар сюжет үҫешендә мөһим идея-художестволы функция үтәп килә.

Гөлсирә Ғиззәтуллинаның әҫәрҙәрендә, мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙарҙың тәрән күңел анатомияһы һүрәтләнә: унын героиняһы билдәле бер асышҡа, хәҡиҡәткә тәрән психологик кисерештәр, эҙләнеүҙәр, табыштар һәм юғалтыуҙар аша килә. Ә ул асыш артынан әллә ни алыҫ йөрөргә лә кәрәкмгән, тик тирә-яғына иғтибарлыбыраҡ күҙ һалыу ҙа еткән булып сыға. Барыһы ла шунда уҡ асыҡлана. Әгәр “Күңел йорто” повесында Ася – Асия мөхәббәтте, бәхетте оҙайлы эҙләүҙәр, ҡайғы-хәсрәттәр аша үткәс кенә (бәлки, билдәле бер инициация йолаһын атҡарғас) татый, хикәйәләрҙә иһә героинялар әллә ҡайҙа ымһынып эҙләгән бәхетен эргәһендә генә таба: «Күк умырзая»лағы Айгөл менән Сафура ла, «Әбейҙәр сыуағы»ндағы Менәүерә

лә, «Беренсе мөхәббәт»тәге Гөлдәр ҙә, «Илаҡ ҡая»лағы Зәлифә лә ана шундайҙарҙан.

Башҡорт яҙыусыларының психологик оҫталығы хаҡында фәнни күҙлектән махсус тикшергән Г.Н. Гәрәева Гөлсирә Ғиззәтуллинаның ижадына бушҡа ғына иғтибар итмәй ҡалмағандыр. Уның фекеренсә, әҙибәнең «ҡыҫҡа ғына күләмле хикәйәләрендә кешеләр тормошондағы ғибрәтле, фәһемле ваҡиға психологик яҡтан оҫта асып һалына»[130]. Бындай нескә күҙәтеүҙәр, кеше күҙенә күренеп бармаған күренеш, һыҙаттарҙы оҫта тотоп алыуҙар тик ҡатын-ҡыҙ ижады өсөн хастыр, тик улар һәләтенә эйәләр. Геройҙарының психологик характерҙағы портретын төшөрөүҙә авторға халҡыбыҙҙың һутлы теле, бай һүрәтләү саралары, образлы сағыштырыуҙары, поэтик деталдәре ярҙам иткән. Улар, әйтеүебеҙсә, әҫәрҙәрҙә оҫта һәм урынлы файҙаланылған, шунлыҡтан художестволы яҡтан бай, мәғәнә йәһәтенән тәрән фәлсәфәгә эйә: «сабырлыҡтың мөлдөрәмә тулған улағына тамған һуңғы тамсы», «төҫһөҙ генә зәңгәр күҙҙәренән инабат нуры бөркөп тора», «асыуыңды тотма, күккә осор… рәнйешенде йыйыу – гонаһ», «һәр кешегә пәйғәмбәр күҙе менән ҡарау», «әллә нишләп бәйеле артты ла китте уның… ҡул күтәрә башланы», «күҙҙән күк китмәне», «уттың аҡылы буламы?.. Ялҡын – ялҡын инде» (мөхәббәт тураһында. – *Н.Х.*), «һөйөү ҡото осоп китә», «бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп», «бер кискә, бер мейескә», «ғазабы ҡаты – бәхете татлы», «матур матур түгел – һөйгән матур» һ.б.

Г. Ғиззәтуллина ижадының үҙенсәлекле бер кимәлен билдәләп тороусы күренеш булып уның «Күңел йорто» повесы тора. Унда төп героиня Асяның бала саҡтан татымаған (әсәһе тыуғас та вокзалда ташлап киткәс, уны балалар йортона тапшыралар, шунда уға Ася Найденова тигән исем дә бирелгән) бәхетле булырға, һөйөргә өйрәнеү процесы, күңел анатомияһы төрлө яҡлап һүрәтләнә.

Ася үҙен иҫ белгәндән донъяла артыҡ йән итеп хис итә, йәшәгәне өсөн үҙ-үҙен хатта ғәйепләй. Ул нисектер өйһөҙ, ышыҡһыҙ, таянысһыҙ: балалар йортонда йәшәгәндә, аҫырауға алынып та, кире ҡайтарылған, үҫкәс-ниткәс, кейәүгә лә сыға, тик үҙ өйөм, донъям тип ылыҡҡан иренең өйө уның өсөн тамуҡ менән бәрәбәр булып сыға, инде үҙе ике бала әсәһе булып, был ерҙә толҡа тапмай, үҙ йүнен үҙе

---

[130] *Гәрәева Р.Н.* Заман көҙгөһө: геройҙың рухи донъяһы. – Өфө, 2003. – 115-се б.

күреп, ил гиҙеп сығып китә. Юлға сығыуының да сәбәбе әлеге үҙ мөйөшөн, бәхетен – күңел тыныслығын, күңел йортон табыу ине.

Автор героиняһының яҙмышын бөтә аяныслығында, мәрхәмәтһеҙлегендә асып һала ла, үҙе уйға бата: кеше гел генә шулай бәхетһеҙ, бахыр залим булып йәшәргә, дөрөҫөрәге, көн итергә тейеш түгел дә инде. Кеше донъяға бәхетле булыр өсөн килә бит. Ошо тезисҡа буйһоноп, әҙибә Асяның ҡарағусҡыл тормошона сағыу, яҡты буяуҙарҙы, бәхет тамсыларындай, тамыҙып-тамыҙып ала. Әммә уға әлегә бормалы-бормалы юлдар үтергә кәрәк. Әле кескәй генә сағында уҡ вокзалдан башланған тормош ғазаптары артабан уны ана шул юлдар сатына йәнә илтә. Хәҙер инде ул бәхет юллап китә шул уҡ вокзалдан. Тимәк, вокзал әҫәрҙә юлдар йүнәлештәрен, юл сатын, йәғни тормош юл сатын, киҫелештәрен символлаштырып торған мөһим бер идея-художестволы функцияға эйә. Сөнки ул героиняның тормошонда хәл иткес роль уйнай. Был образ халыҡ әкиәте, эпосындағы юл сатын, ә героиня шунда торған батырҙы хәтерләтеп, унен менән имплицив бәйләнеште тыуҙыра. Мәшһүр «Урал батыр» эпосында Урал да Шүлгән менән ошондай уҡ юл сатына килеп баҫа һәм, оҙаҡ уйлап тормай, ағайын күңелле, бәхетле көн иткән яҡҡа ебәреп, үҙе иң ҡатмарлы – үлем, золом, аһ-зар тулы ҡайғылы яҡҡа юллана. Уға бик ауыр һәм ҡаршылыҡлы хәлдәр, ер-һыуҙар аша үтергә тура килә, шулай ҙа моратына ирешә.

Шуның кеүек әлеге повестағы Ася–Асия ла алда үҙен нимә көткәнен дә белмәгән көйөнә, байтаҡ ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығып, шулай уҡ үҙ теләгән бойомға аштыра – күңел тыныслығы биргән Башҡортостан еренә барып етә. Баҡтиһәң, ул күңеленең төпкөл бер мөйөшөндә ойоған «тыуған ер, тыуған яҡ» тигән мәғәнәле төшөнсәләрҙе һиҙемләгән. Йән тартмаһа ла, ҡан тарта, тигәндәй, ул үҙенең асылына, бәлки, ҡасандыр әсәһенең дә, үҙенең дә кендек ҡаны тамған ергә барып етеү хыялы йәнен йылыта.

Эйе, Күңел йортоноң асылы Башҡортостан ере менән бәйле булып сыға. Ошо ер Ася өсөн иң ғәзиз, ҡәҙерле ергә әйләнә, шунда аяҡ баҫҡандан алып, уның тормошо икегә ярала: сәфәргә сыҡҡанға тиклемгеһе менән унан һуңғыһы, йәғни үткәне ҡараға һәм әлегеһе аҡҡа. Әммә уға әле бәхетле булырға, һөйөргә һәм һөйөлөргә өйрәнергә кәрәк әле, әкиәт эстетикаһына хас булғансы, юлында осраған изге күңелле кешеләр Буранбай, Мәхмүҙә инәйҙәрҙең рухи сафлығын һәм йылылығын, эскерһеҙ теләктәшлек тойғоларын аңлап, зиһене

менән ҡабул итергә өйрәнергә тейеш. Ә былар – үҙҙәре үк тиҙ генә хәл ителә торған әйбер түгел. Быға ваҡыт та, рухи көс, теләк тә кәрәк. Һәм Ася–Асия бөтә булмышы менән шуға ынтыла, уның хаталар, ҡаршылыҡтар (Вениамин менән үткәргән көндәр), ниәт менән мөмкинлектәр аша шуға өлгәшәсәгенә шик юҡ. Сөнки, Мәхмүзә инәй әйтмешләй, «ҡатын-ҡыҙға Хоҙай бөтә донъяны кинәндерерлек наҙ һалған, уртаҡлашыр кешеһе булмаһа, шул наҙ тирә-яҡты ағыулай. Шуның өсөн ҡатын-ҡыҙ яңғыҙ булырға тейеш түгел». Повеста ошо хәҡиҡәткә билдәле бер художестволы функция йөкмәтелә һәм, асылда, ул үҙенә күрә мотивты ла хасил итә. Асия тағы ла яңылышыуҙан, хаталаныуҙан ҡурҡып, нисек кенә шул наҙҙан ҡасырға теләмәһен, тик ошо хәҡиҡәт уны хәрәкәткә, артабан юлын дауам итеүгә этәрә, ахырҙа уға өлгәшеүенә лә килтерә.

Әҫәрҙең сюжеты, гендер прозаһына хас булғанса, Асяның эске күңел донъяһының эволюцияһын, камиллашыу процесын бермә-бер асыуға ҡоролған. Унда бөгөнгөһөнә үткәндәр асыҡлыҡ индерә килгән төрлө сюжет һыҙыҡтары үҫтерелә, төрлө кешеләр яҙмыштары – ире Сергей менән уның әсәһе, шунан һуң Мәхмүзә инәй, Буранбай, Ғаяз, Фатима, Вениамин – бөтәһе лә төп героиняның тормошо менән бәйле, уның тирәләй хәрәкәт итә. Ошо сюжеттар коллизияһын тағы ла ҡатмарлаштырған художестволы элемент булып, фольклорҙан билдәле булған «мөхәббәт өсмөйөшө» кеүек традицион мотив тора: Буранбай – Фатима – Ғаяз араһындағы мөхәббәт. Шунда йәнә бер сағыу фигура хасил була – ул да булһа, Буранбай исемле ир. Кисәге алабарман ауыл егете Афған һуғышы аша үтеп, уның бөтә ҡот осҡос фажиғәһенә шаһит булып, үлгән ерҙән терелеп (сүллектә үлем сигендә ятҡан килеш уны бер дәрүиш табып, йәшәү дәртен һеңдерә), икенсе төрлө әйткәндә, яңынан тыуып, ауылына ҡайтҡан ир-егет. Әммә унда уны шәхси тормош ғазаптары көтә – йән дуҫы менән кәләшенең хыянаты. Тик Афған һуғышы тиклем тамуҡты кисергән иргә тыныс тормоштоң күңел ғазаптары, үрһәләнеүҙәре аша үтеүе бик үк еңел булмаһа ла, үлемесле түгел ине инде уның өсөн. Ул быныһын да әҙәмсә кисерә. Был ерҙә йәнә Асяның кеше гел генә бәхетһеҙ булырға тейеш түгел бит, тигән ҡарашы иҫкә килеп төшә: Ул мотлаҡ бәхетле, өлөшлө, наҙлы булырға тейеш. Буранбай ҙа, Ася–Асия кеүек үк, өлөшһөҙ ҡалмаҫ.

Ғөмүмән алғанда, Г. Ғиззәтуллинаның «Күңел йорто» повесы асылда тормош-көнкүреш новеллистик халыҡ әкиәте сюжетына

ҡоролған кеүек, һәр хәлдә уның менән интертекст бәйләнешен дә тыуҙыра. Әкиәттәгесә ярлылыҡта, михнәттә көн иткән етем ҡалған герой (беҙҙең осраҡта – героиня) бәхет эҙләп ситкә сығып китә, юлында кире көстәрҙе лә, ыңғай, изге күңеллеләрен дә осрата, һуңғылары уға ярҙам итеп ебәрә, шунлыҡтан ул моратына ирешеп – нимә менәндер ҙә бүләкләнеп, байып китә, хатта батша булып китә һ.б. Ася–Асия иһә матди яҡтан түгел, ә күңел, рухи йәһәттән байып, ниндәйҙер йән рәхәтен табып кинәнә, үҙ яҙмышына үҙе хужа, үҙенә үҙе батша. Әҙәмдең был донъяға бәхетле булыр өсөн килеүенә ышана кеүек.

Гөлсирә Ғиззәтуллина «Өмөтөмдө ҡалдыр» (1993), «Йөҙ ҙә бер ғүмерем» (1997), «Күңел утрауы» (2003) тигән һ.б. хикәйәләр йыйынтыҡтары, балалар өсөн яҙылған «Юл япрағы менән тамсы» (1994) китабы авторы. Әҫәрҙәрендә әҙибә күптән таныш булған хәл-ваҡиғаларҙы, хис-тойғоларҙы, типиклашҡан образдарҙы яңы күҙлектән, сағыу буяуҙарҙа тасуирлауға ирешә, ирекле, иркен фекер йөрөттө. Шуғалыр ҙа уның әҫәрҙәре менән танышҡан һәр ҡатын-ҡыҙ ундағы героиняларҙа үҙҙәрен танып, үҙ яҙмыштары менән әҫәрҙә үҫешкән хәл-ваҡиғалар араһында параллелдәр табып, бәйләнештәрҙе күҙәтәләр. «Был оригиналь, ирекле, иркен фекер йөрөтөү ҡәҙимге тормошта йәшәүсе геройҙарҙың эш-ҡылығын һүрәтләүҙә лә, рухи донъяларын, эске булмышын, “күңел йортон” асыуҙа ла сағыла», тигәйне Г.Н. Гәрәева яҙыусының әҫәрҙәре хаҡында[131]. Был әҫәрҙәрҙең дә идея-эстетик маҡсаты, философик асылы, нигеҙҙә, халҡыбыҙҙың новеллистик әкиәттәре сюжеттары менән ауаздашлыҡ тойғоһон тыуҙыра, улар араһында интертекст бәйләнешен дә төҫмөрләтә.

Шулай ҙа Г. Ғиззәтуллинаның хикәйәләре тигеҙ генә уй тыуҙырмай, бер төрлө генә тәьҫир ҡалдырмай, бер яҡлы ғына мәғәнәгә эйә түгел. Уларға ҡарата ҡараш гел ике төрлө, бәлки, ҡапма-ҡаршылыҡлы булыусан. Әммә гендер прозаһына хас булғанса, әҫәрҙәрҙең үҙәгендә тик ҡатын-ҡыҙ тороусан, хәл-ваҡиғалар ҙа тик уның тирәләй үҫешә, тик ул ғына күпселек осраҡта ҡырыҫ тормошҡа яңғыҙы ғына баҡҡан героиня образы хасил итә.

Тормошта ҡара – ҡара, аҡ – аҡ ҡына булып ҡабул ителмәй икән. Тәү ҡарамаҡҡа татыу ғына донъя көтөп ятҡан ғаиләлә баҡтиһәң,

[131] *Гәрәева Р.Н.* Заман көҙгөһө: геройҙың рухи донъяһы. – Өфө, 2003. – 109-сы б.

асылда бөтәһе лә ал да гөл булмай сыға («Ә скрипка аңлай», «Әбейҙәр сыуағы», «Туғыҙынсы рәттәге урын», «Беренсе мөхәббәт», «Һалҡында һүнгән усаҡ» һ.б.), геройҙарҙың ҡәҙимгесә ғүмер һөрөп ятҡан еренән йәки күңелле генә һүрәтләнә башлаған тормоштары күренештәренең һөҙөмтәһе көтөлмәгәндә ҡапма-ҡаршылыҡлы төҫ алып китә («Күк умырзая», «Илаҡ ҡая», «Ҡәҙерһеҙ», «Иң зәңгәр диңгеҙ»).

Әҙибәнең бөтә әҫәрҙәрендә тиерлек ҡатын-ҡыҙ яҙмышы һүрәтләнә (бер-икәүенән башҡа). Күпселек осраҡта улар – бәхетһеҙ. Берәүҙәре бәхетте әллә ҡайҙан эҙләп интегә, ә бәхете янында ғына булып сыға (мәҫәлән, «Беренсе мөхәббәт», «Ҡайт, ҡотом, ҡайт…», «Әбейҙәр сыуағы»), бәғзеләре тиран, эскесе ир менән йәшәп, ситтән ҡарамаҡҡа бәхетһеҙ була, әммә бәхетһеҙ булыуы хаҡында башына ла инеп сыҡмай, шуға күнеп йәшәй (мәҫәлән, «Күңел йорто» повесы, «Кактус сәскә атҡан», «Көйгән ағас серемәй», «Ҡәҙерле бала», «Ҡорбан килтереү»), кемделер һайлау мөмкинлеге булыуы бәхетһеҙ иткән («Һөйөүем доғаһы», «Күк умырзая»). Был хаҡта шағир һәм тәнҡитсе Азамат Юлдашбаев бик тулы итеп «Ирекһеҙ темаға инша» тигән мәҡәләһендә яҙғайны («Ағиҙел», № 8, 2003).

А. Юлдашбаевтың шулай уҡ билдәләүенсә, Г. Ғиззәтуллинаның кеше кисерештәрен һүрәтләү оҫталығы, һүҙгә маһирлығы хаҡында, ысынлап та, айырым әйтеп үтергә кәрәктер. «Гүзәл июнь таңында йоҡонан торған Бибинурҙың дәү кәүҙәһен йөҙҙөрөп атлап ҡына сығыуына һарыҡтары быҡырҙаша, дебет кәзәләре мекерҙәй… ире Тимербулат та йоҡо ҡапсығы түгел икән. Тынғыһыҙ йәндең шығыр-шығыр иткән ишек күгәнен майлап бөтөүенә ҡойма аша күрше бабайы сәләм бирҙе …» һ.б. Ауыл ерендә иртәнге көн шулай һәүетемсә генә үҙ рәт-сиратында эш артынан эш үрелеп башланып та китә. Донъялары ла шулай һил генә бара, тигән фекергә тамам ышанып бөтәһең. Әммә әҫәрҙең аҙағы аяныслы, хатта трагик рәүештә буласағын – ире Тимербулаттың үҙ-үҙенә ҡул һаласағын – һис тә күҙ алдына килтерерлек түгел. «Күк умырзая» әҫәрендә иһә бала саҡтан бер-береһен белеп бөткән Айһылыу менән Айбулат, үҫеп еткәс, араларында оялаған мөхәббәттең ҡәҙимге, өйрәнелгән күренешкә әүерелеүен, наҙланыу, иркәләү тойғоһоноң да күптән төҫһөҙләнә башлауын аңлайҙар. Гәзиттә Сафура исемле ҡатындың мөхәббәт хаҡындағы хатын баҫтыра Айһылыу. Ҡатындың үҙе менән барып танышҡас, ул ысын мөхәббәттең мәғәнәһенә төшөнә. Әҫәр башында

апрель айының ҡар ҡатыш ямғыр яуып торған шөкәтһеҙ көнө һүрәтләнә. Ул тулыһынса йәш ҡатындың күңел торошон сағылдырыусы художестволы деталь функцияһын үтәй. Ә инде ауылға барып, Сафура менән төнө буйына һөйләшеп ултырғандан һуң, тормошҡа ул башҡасараҡ баға. Героиняһының күңелендә барған үҙгәрештәрҙе сағылдырыу ниәте менән автор йәнә тәбиғәткә мөрәжәғәт итә: икенсе көндөң иртәһе салт аяҙ була, ҡар ҡалдыҡтары, сүп-сар түгелгән тау итәгендә күк умырзая сәскәһен күреп хайран ҡала ҡыҙыҡай. Сәскә шөкәтһеҙ тирә-яғына иғтибар итмәй, «нәфис таждарын ҡыйыу асып, аҡ донъяға баҡҡайны». Был сәскә асылда Сафураны иҫкә төшөрә: юҡ, мөхәббәт яңырыуға һәләтле, мәңгелек ул, һөйөү ҡошо ла осмаған, ул һайрай. Быны иҫбатлағандай, болот араһынан ҡояш килеп сыға. Быларҙың барыһы ла Айһылыуҙың үҙе өсөн дә мөһим ине. Ул Сафураның «һөйөү ҡошо осоп китә» тигәнен үҙенә лә ҡағылыуына инанғайны бит. Әммә икенсе көндө ошо күк умырзая менән болот араһынан йылмайған ҡояш уға башҡаса тәьҫир итә. Уның барыһына ла төшөнөп, билдәле бер ҡарашҡа килеүендә шик юҡ.

Эйе, Г. Ғиззәтуллинаның ҡатын-ҡыҙҙары төрлөһө төрлөсә бәхетле һәм бәхетһеҙ. Нисек кенә булмаһын, улар наҙ, күңел йылылығы, аңлайышлы мөнәсәбәт, ихтирам эҙләй, шуларға мохтаж. Шуға ла берәүҙәре был донъянан китергә ҡарар итә («Партбилет», «Ҡорбан килтереү», «Һалҡында һүнгән усаҡ»), бәғзеләре һөйөү һәм һөйөлөү юлын һайлай («Күк умырзая», «Ҡәҙерле бала»), уларҙың да һөҙөмтәһе бер иш түгел: бәхетте табып юғалтыусылар ҙа була («Йәшлектән килгән сәләм»), көрсөккә килеп терәлеүселәр ҙә осрай («Түлһеҙ») һ.б. Ғөмүмән, әҙибә героиняларын төрлө тормош һынауҙарына дусар итә, төрлө социаль ҡатламдан булһалар ҙа, улар автор ниәте, маҡсаты, әҫәрҙә иһә тормош ҡанундары алдында бер тигеҙ. Был һынауҙарҙа улар тәрән рухи кисерештәр аша үтеп, таҙарыныуға, сафланыуға хаҡлы.

Әҫәрҙәрҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙың тәрән күңел анатомияһы һүрәтләнә: билдәле бер ҡарашҡа тәрән психологик кисерештәр аша килә. Ә ул асыш артынан әллә ни алыҫ йөрөргә лә кәрәкмәй икән, тик тирә-яғыңа иғтибарлабыраҡ күҙ һалыу ҙа етә. Барыһы ла шунда уҡ асыҡлана. Әгәр «Күңел йорто» повесында Ася – Асия мөхәббәтте, бәхетте оҙайлы эҙләнеүҙәр, ҡайғы-хәсрәттәр аша үткәс кенә (бәлки, билдәле бер инициация үткәс) татый, хикәйәләрҙә иһә героинялар әллә ҡайҙа ымһынып эҙләгән бәхетен эргәһендә генә таба: «Күк

умырзая»лағы Айгөл менән Сафура, «Әбейҙәр сыуағы»ндағы Менәүерә лә, «Беренсе мөхәббәт»тәге Гөлдәр ҙә, «Илаҡ ҡая»лағы Зәлифә лә һ.б.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙ романы гүзәл заттың һиҙгер күңел тәбиғәтен, рухи байлығын ғына күрһәтеп ҡалмай. Ниндәйҙер күҙгә әллә ни ташланып бармаған бер художестволы ысул ярҙамында әҫәрҙәрҙә ҡатын-ҡыҙҙың ир-аттарҙан өҫтөнөрәк, юғарыраҡ булыуы раҫлана. Юҡ, бында ҡатын-ҡыҙ тәкәбберлек, ниндәйҙер яһиллыҡ күрһәтә тигәнде аңлатмай, ә һүҙ рухи юғарылыҡ, күңел байлығы һәм дә тәбиғәт биргән һәләткә – бала табып, әсә булып, күкрәк һөтөн имеҙеп бала үҫтереүгә эйә булыуы хаҡында бара. Фәннисә әйткәндә, был әҫәрҙәрҙә феминистик ҡараштың – уның иң яҡшы мәғәнәһендә – сағылыуы күҙәтелә. Быны, бигерәк тә, Т. Ғарипованың «Бөйрәкәй» менән Г. Яҡупованың «Ҡатындар» романдарында асыҡ күрергә мөмкин.

Таңсулпан Ғарипова үҙенә ихтибарҙы күп яҡлы ижады булыуы менән йәлеп итә. Ул проза һәм драматургия өлкәһендә әүҙем эшләгән әҙибәләрҙең береһе («Ҡояш менән Ай бер генә» хикәйәләр йыйынтығы, «Ғилмияза», «Урал менән Шүлгән» кеүек һ.б. пьесалары). Әммә ижадының иң уңышлы ҡаҙаныштарының береһе булып «Бөйрәкәй» (1997–2004) исемле роман-эпопеяһы торалыр. Ысын мәғәнәһендә гендер прозаһының бөтә билдәләрен, сифаттарын тәбиғи рәүештә үҙ эсенә алған был әҫәр үҙенең күләме һәм масштаблылығы менән һоҡландыра һәм тетрәндерә. Һоҡландыра, сөнки ҡатын-ҡыҙҙың эске донъяһын асып, хис-тойғоларын ярып һалыуы менән (яҡшыларын да, ямандарын да) уның күңел анатомияһын күрһәтә, шуның менән ҡыҙсыҡ, ҡатын, әсәй, өләсәй, инәй кеүек тормоштағы һәр статусына һәйкәл ҡуя. Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы менән бәйле булған бер ырыу-ара, ғаиләнең бер нисә быуын тарихын бер полотнола һүрәтләп, художестволы монументаль әҫәр тыуҙырыуы менән тетрәндерә. Герой менән персонаждарҙың үҙ-ара нәҫел-нәсәп ептәре, ҡан-ҡәрҙәшлек менән тығыҙ бәйләнештә булған кеүек, бер-береһен тулыландырып килгән сюжет һыҙыҡтары ла үҙ-ара сыуалып үҫешә. Ошо сыуалыш кем кемгә кем булыуын да күҙ уңынан ысҡындырырға ҡамасауламай, киреһенсә, хәл-ваҡиғаны киҫкенләштереп ебәреүгә ярҙам итә. Геройҙар ҡайнашҡан ошо хәл-ваҡиғалар ҡуласаһында ҡатын-ҡыҙҙың феминистик рухы формалашып, бермә-бер нығына һәм көсәйә. Әҫәр ҡатын-ҡыҙ енесе һәм рухы менән һуғарылған.

Романға исем биргән, тимәк, мөһим мәғәнәгә эйә булған Бөйрәкәй ҙә үгеҙ түгел, ә – һыйыр, йәғни донъяға нәҫелен дауам итеп ҡалдырыусы инә зат.

Был юҫыҡта ла халыҡ ижады традицияларының, ышаныу-инаныуҙарҙың роле ҙур әһәмиәткә эйә. Әҙерлекле уҡыусы уларҙы апасыҡ һиҙемләүгә һәләтле. Әҫәрҙә әлеге һыйыр боронғо нәҫел-нәсәптең, ырыу-араның ырыҫын һаҡлаған изге тотем малы булып күҙаллана. Ә тотем малын рәнйетергә, йәнен алырға тыйыла. Юғиһә уның ҡарғышы үлтереүсе башына төшә, тип тә белгәндәр (мәҫәлән, аҡҡошто атырға ярамай, рәнйеше төшә тигән ышаныуҙың булыуы билдәле). Әҫәрҙә иһә Исханбай-Ишмөхәмәт Бөйрәкәйҙе тотоп сала. Һөҙөмтәлә, изге малдың ҡоһоро башына төшә: ул ҡот осҡос шарттарҙа йән бирә. Үлгәс тә йәне тынғы тапмай ыҙалай.

Әҫәрҙә ырыу тотемы итеп һыйыр һүрәтләнһә лә, күпселек халыҡтарҙа иһә күберәк үгеҙ мифик символ рәүешендә сығыш яһай. Шулай булһа ла, кейәүгә сыҡҡан ҡыҙ нәҫелле башмаҡ йәки һыйыр менән оҙатыла. Был йола нигеҙендә йәш ғаиләгә ырыҫ, байлыҡ-муллыҡ юлдаш булһын тигән теләк ятҡан. Һәм дә был ерҙә «Ҡуңырбуға» тигән башҡорт халыҡ эпосы «келт» итеп иҫкә төшә. Унда ла, билдәле булыуынса, Таңдысаға Ҡуңырбуға атлы тоҡомло һыйыр бирнә булып төшә һәм йәш хужабикәһе артынан сит яҡҡа сығып китә. Әкиәттәрҙән билдәле булыуынса, ҡыҙҙың әсәһе үлгәс, уның төҫөн һыйыр һаҡлай, ә етемкәй уны үҙ әсәһеләй күрә («Ҡара һыйыр»). Яуыз үгәй әсәһе был хәлде белеп ҡалғас, сирләгән булып түшәккә ауа ла, дауа итеп ашатырға ошо һыйырҙың итен һорай. Һөҙөмтәлә, ҡыҙҙың таянысы, ярҙамсыһы, әсәһе йөҙө булған малкайҙы салалар. Әммә етемгә һыйырҙың өйрәтеүе буйынса ергә күмелгән һөйәктәрҙән үҫкән ағас ярҙам итә. Йәғни әсәһенең ярҙамы үҙе баҡый донъяға күскәс тә дауам итә кеүек.

Т. Ғарипованың әҫәрендә сағылыш тапҡан Бөйрәкәй образы нигеҙҙә, үҙенең онтологик мәғәнәһе йәһәтенән, асылда ошондайыраҡ юҫыҡта (Барсындан ҡыҙы Гөлбаныуға тапшырылған аманат булыуы) мифик һыйыр кимәленә күтәрелһә, әҫәр өсөн күпкә отошлораҡ булыр ине. Әммә һыйыр тураһында артабан нәҫелен дауам итеүсе быҙауының ябай мал булып колхоз фермаһында үҫеүе, шунда көн итеүе хаҡында ғына мәғлүмәт биреү менән сикләнгән. Шулай ҙа ул малҡай героиня өсөн ябай быҙау булмай. Ул уның өсөн барыбер әсә йөҙө, наҙы булып ҡала. Быҙау үҫеп, тана йәшенә етеп, үҙе быҙауларға

йыйынғанда, Мәҙинә уны әҙәми заттай күреп ҡурсалай, уның өсөн борсола. Ә инде ит буйынса планды үтәү ниәте менән уның инде һөттө иң күп биргән һыйырын бысаҡ аҫтына һалыу ҡурҡынысы янағас, йәш ҡатын быға юл ҡуймай. Бында күңел күҙе менән күреүселәр, әлбиттә, етем ҡыҙ менән үгәй әсә әкиәтенән баяғы ҡара һыйырҙы иҫкә төшөрөр: изге затлы малды үлем көтә. Тик беҙҙең осраҡта бөтәһе лә яҡшы тамамлана, һәм Бөйрәкәй тоҡомонан булған малҡай киләсәктә тоғро хужабикәһенең артабанғы тормошоноң шаһиты булып ҡына ҡала.

Шул уҡ мәлдә әҫәрҙә ундай мифик нигеҙле, мифик символға ярашлы үткер образ шулай ҙа юҡ түгел. Ул да булһа – бүре, дөрөҫөрәге, инә бүре – Күкбүре – шулай уҡ инә затынан. Авторҙың тормошҡа феминистик ҡарашы бында ла үҙен һиҙҙертә.

Әҫәрҙән мәғлүм ки, был йыртҡыс йән кеше йорт-ҡураһында бәйлән-гән килеш торһа ла, тоҡомон дауам итеп, көсөкләп, нәҫелен һаҡлайым тип, көсөктәре өсөн йән атып тора. Сөнки әҫәрҙә үҫешкән хәл-ваҡиға-лар ошо инә бүре күҙлеге аша ла үткәрелгән кеүек, ул да ырыу-ырыҫын, тыныслығын һаҡлаған, уға ҡот килтергән тотем – мифик символ функ-цияһын атҡара. Кешеләр быуынына тура килеп, параллель рәүештә, нәҫеле арта, кеше менән йыртҡыс заттарының юлдары ла юҡ-юҡ та киҫешә: йә улар әҙәмдәрҙән үс ала, йә ситтән генә уларҙы күҙәтә.

Әйтергә кәрәк, башҡорттар өсөн яҡын булған был тотем рәүешле мифик йыртҡыс байтаҡ төрки халыҡтары өсөн дә – изге зат. Ғәҙәттә, ул йә ырыу башлығы, мәҫәлән, башҡорт халҡына исем биргән, йә берәй ырыуҙың тәүинәһе функцияһын арҡарған, ҡайһы бер төрөк ырыуҙарын йәки тотош халыҡты һәләкәттән ҡотҡарған һ.б. Мәҫәлән, Үҫәргән ырыуының «Бүреләр тоҡомо» тигән бер легендаһында һүҙ ошо нәҫелдең барлыҡҡа килеүе хаҡында бәйән ителә[132]. Һәм үҙ тоҡо-мон бүре менән бәйләүсе башҡа төбәк башҡорттарында ла легенда-лар бар (Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районының Бишбүре, Баш-ҡортостандың Хәйбулла районы Һаҡмар бүреһе, Башбүре, Бүребай ише һәм башҡа ауылдарҙа йәшәүселәр)[133]. VII быуатҡа ҡараған

[132] Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр һәм легендалар / Төҙ., инеш һүҙ һәм аңлатма авторы Ф.А. Нәҙершина, яуаплы мөх. К. Мәргән, Ә.М. Сөләйманов. – Өфө: Китап, 1997. – 106–107-се бб.

[133] *Илимбетова А.Ф., Илимбетов Ф.Ф.* Культ животных в мифоритуальной тра-диции башкир. – Уфа: Гилем, 2012. – С. 45.

ҡытай йылъяҙмаларында әйтелеүенсә, төрөк халҡы әлеге бүренән барлыҡҡа килгән. Легендаға әүерелгән хикәйәттә бәйән ителеүенсә, бер ҡырылған ырыуҙың етем ҡалған малайы ана шул бүре арҡаһында ғына иҫән ҡала: инә бүре уға ит ташып, үлемдән ҡотҡара. Малай үҫеп буй еткәс, инә бүре, йәнәһе лә, унан ун ир бала таба. Улар киләсәктә төрөк ырыуҙарына нигеҙ һалыусылар булып китә һ.б.[134]

Бүрене Күкбүре итеп күк йөҙө төҫөндә һүрәтләү (Небесный волк) иһә шул йыһанға, бейеклеккә тиңләү менән бәйле булған, тип ышанғандар. Мәҫәлән, боронғо монгол легендаларынан билдәле булыуынса, бөйөк Сыңғыҙхан ырыуының тәүбабаһы булып Бүртә-сина (Борте-чино) – «Зәңгәр бүре» менән Хо Марал – «Ҡола марал» булған, тип белгәндәр. Беҙгә яҡынырак булған 1822 йылда Ҡазанда Ибраһим Халфин тарафынан баҫтырылған «Әхүәли Чынгыз хан вә Аксак тимер тәуарихы…» китабына ингән «Сыңғыҙнамә» әҫәрендә лә бүре телгә алына. Унда Дуйын Баяндан ҡалған тол ҡатыны Аланғу ҡояш нурынан ғоманлы була: сатырға сихри нур «тәүҙә көн булып янына инә лә һуңынан йылҡы яллы бүре булып "Сыңғыҙ! Сыңғыҙ!", тип һөрән һалып сығып ҡаса», тиелә[135]. Халыҡтың боронғо мәжүси ҡарашына нигеҙләнгән йола фольклоры буйынса әсә булыу бәхетенән мәхрүм булған ҡатын-ҡыҙҙарҙы имләү өсөн бүре менән бәйле ритуалдарҙы атҡарыуҙарын иҫкә төшөргәндә, бында «йылҡы яллы бүре»нең телгә алыныуы үҙен аҡлай. Шулай итеп, бүре тотем булараҡ та, йола-фиғел өлкәһендә лә, легендаларында ла халыҡ хәтерендә яҡшы һаҡланған изге мифик зат булараҡ күҙаллана.

Ошонан сығып ҡарағанда, Т. Ғарипованың «Бөйрәкәй» романында һүрәтләнгән бүре образы тәрән мәғәнәгә эйә. Уның был мәғәнәһен, әлбиттә, әҙерлекле уҡыусы ғына аңлап, уның тәрән семантикаһына төшөнә алалыр. Әлбиттә, бер яҡтан, үҙе шундай белемгә эйә булған әҙибәгә, ниндәйҙер кимәлдә, уҡыусыларҙың тотем мәғәнәһенә төшөнмәү, шул арҡала аңламау ҡурҡынысы янауы ихтимал. Икенсе яҡтан, изге тотемға бәйле романдың донъя күреүе мәҙәниәтебеҙҙең байлығы һәм боронлоғо хаҡында һөйләй. Шундай тәрән фәлсәфәле һәм киң диапазонлы, эстетик зауыҡты байытыусы әҫәрҙәрҙең ижад

134 *Илимбетова А.Ф., Илимбетов Ф.Ф.* Культ животных в мифоритуальной традиции башкир. – Уфа: Гилем, 2012. – С. 47.

135 *Хөббитдинова Н.Ә.* Башҡорт әҙәбиәтендә фольклор (XIII–XIX бб.). – Өфө: Ғилем, 2004. – 53-сө б.

ителеүе ҡыуандыра. Ә инде ҡатын-ҡыҙ яҙыусыһының шундай оло образға мөрәжәғәт итеп, уның бөтә үҙенсәлеген, тәбиғәтен, художестволы семантикаһын сағылдырып күрһәтә алыуы ҙур оҫталыҡ һәм таһыллыҡ талап иткәндер. Әйтелгәнсә, боронғо ҡараштарға хас булғанса, изге бүренең ҡатын-ҡыҙҙарҙы һаҡлаусы һәм ҡурсалаусы көс сифатын үҙһенеүе авторға яҡын булып, уны ҡыҙыҡһындырыуы мөмкин. Быны ул йә аңлы рәүештә, йә интуитив кимәлдә уға мөрәжәғәт итеүе ихтимал. Һәр хәлдә романда сағылған Күкбүре образының бирелеүе нигеҙҙә халҡыбыҙҙың боронғо мифопоэтикаһы, мәжүси ышаныу-инаныуы менән интертекстуаль бәйләнешкә инеүе көн кеүек асыҡ.

Тимәк, Т. Ғарипованың «Бөйрәкәй» романында бүре, үгеҙ-һыйыр ише тотем хайуандарының семантикаһы булып дөйөм төрки халыҡтары мәҙәниәте өсөн уртаҡ мифик символдар тора. Улар онтологик поэтика тәбиғәте буйынса, һис шикһеҙ, халыҡ ижады, халҡыбыҙҙың боронғо мәжүси ҡараштары, ышаныу-инаныуҙары менән реминисценциялы бәйләнеш тыуҙыра. Күкбүре һәм уның нәҫеле, ҡырағай йыртҡыстарға хас булғанса, шул нәҫелен дауам итер өсөн әҙәм баштарына етә. Бөйрәкәй иһә тыныс йорт хайуаны, ҡыҙға әсәнән ҡалған мираҫ. Был күренеш тә, әйтеүебеҙсә, халыҡ әкиәтенә һылтаныу – реминисценцияны тыуҙыра.

Халыҡ ижады традициялары тигәндә, йәнә әкиәттәргә мөрәжәғәт итергә тура килә. Сөнки унда иң әүәл халҡыбыҙҙың донъяға ҡарашы, әхлаҡи-этик принциптары, этник тәрбиәүи идеялары ярылып ята. Әкиәттәрҙең нәсихәтле новеллистик жанр төрө ана шундайҙарҙан. «Әсә күңеле балала, бала күңеле – далала» тигәндәй, бөтә күңелен, булмышын балаһы өсөн фиҙакәр ҡылған әсә һәм уның ошо тырышлығын, хатта ҡорбандарын һанламаған бала хаҡында барыуы тураһында һөйләй. Мәҫәлән, «Әсә ғазабы», «Әсә йөрәге» кеүек фантастика менән һуғарылған әкиәттәрҙә һүҙ тап шундай әсә һәм шундай бала хаҡында бара. Бөркөттө яралаған егет, уны дауа урынына ашатыр өсөн, батшаға әсәһенең йөрәген илтеп бирергә тейеш була. Л.Ә. Итҡолованың күҙаллауынса, егеттең былдай ҡырағайҙарса ҡыланышы бөркөттөң ырыу табынған, һаҡлаған тотем ҡошо сифатында һаналыуы менән бәйле булыуы мөмкин[136]. Әммә бында беҙҙе

[136] *Иткулова Л.А.* Нравственный выбор в башкирской сказке. – Уфа: РИО БашГУ, 2002. – С. 45.

башҡа әйбер ҡыҙыҡһындыра. Әсәһенең йөрәген тотоп барған егет, эләгеп китеп, йығыла. Шул саҡ әсәһенең: «Берәй ерең ауыртманымы, улым? Тиҙ генә тора һал, һуңлаһаң, үҙеңде үлтерерҙәр. Һин йәшәргә тейеш, улым», тигән тауышын ишетә[137]. Күренеүенсә, әсә кеше улына ҡарата үпкәһен белдермәй, киреһенсә, уның ғүмере хаҡында борсола, хатта фатихаһын бирә. Тимәк, бында халыҡ өсөн ырыуҙың тотем ҡошоноң яраланыуы мөһимерәк, һәм әкиәт әхлаҡи нормаларҙан шуны өҫтөнөрәк күрә. Шулай ҙа егет, һуңлап булһа ла, яман эш башҡарыуын – изге ҡошто йәрәхәтләүенән бигерәк үҙ әсәһенең йәнен алып хаталаныуын аңлап, үкһеп илай. Әлбиттә, әкиәт булғас, герой батша ҡыҙына өйләнеп, бәхетле тормош көтөүгә ирешә. Әммә был ниндәй хаҡ менән башҡарылыуы әкиәт эстетикаһына мөһим түгел, сөнки иң әүәл ырыу ҡошо иҫән-һау ҡала.

Тимәк, бөгөнгө әхлаҡи-этик, тәрбиәүи нормаларға ярашлы әсәнең улын яуызлыҡтары өсөн шелтәләмәүе, әлбиттә, ҡолаҡҡа ятышһыҙ күренеш. Әммә балаһына ғүмер биргән әсәнең уның хаҡында хәстәрлек күреүе тетрәндерә. Әкиәттәге ошо әхлаҡи ҡараштан сығып, балаһына ҡарата наҙ тулы әсә йөрәгенең шулай тасуирланыуы Т. Ғарипованың «Бөйрәкәй» романындағы әсә менән улдың – Фәүзиә–Барсынбикә менән Ихсанбайҙың – мөнәсәбәтен хәтерләтә. Һуңғыһы нормаль әҙәм башына, әхлаҡи нормалар сиктәренә һыймаған ниндәй генә эштәр ҡылмаһын, әсә кеше уны гел кисерә, уның яуызлыҡтарының сәбәбен үҙҙәренең ҡатмарлы яҙмыштарынан күрә, аҡларлыҡ сәбәп таба. Уны ҡурсалап бөтәһен дә башҡара: «Һинең бәхетең.. именлегең хаҡына… мин бөтәһен дә эшләнем, Ихсанбай», – ти ул. Ә инде бағымсы Мөғлифә әбей мәрхүмдең рухы – әруах улы хаҡында «Аттың ялы аҡ та, саңы ҡара» тигәндәй, «…Ихсанбай яҡшы тоҡомдан, ләкин эшләгән эштәре, ҡылған ҡылыҡтары ҡара» булыуын әсә зиһене менән таныһа ла, йөрәге менән ҡабул итмәй. «Их, Ихсанбай… Изге ниәттәремде аңламаның, әйткәнемде алманың», тип улына үпкәһен белдерһә лә, «Дөрөҫ әйтәһең дә бит, әруах, ләкин мин әсә! Миңә нишләргә?!», тип әсенеп һорай[138].

Эйе, үҙе ғүмер биргән, күкрәк һөтөн имеҙгән балаһына әсәнең хөкөм сығарырға көсө етмәй. Әкиәттәгесә бында ла ул әхлаҡи

[137] Башкирское народное творчество: Бытовые сказки / Н.Т. Зарипов (гл. ред.), Л.Г. Бараг, С.А. Галин и др. – Уфа: Башк. кн. издат-во, 1990. Т. 5. – С. 314.

[138] *Ғарипова Т.* Бөйрәкәй: роман-эпопея. – Өфө: Китап, 2006. – 402–403-сө бб.

ныҡлылыҡ, тоғролоҡ өлгөһө булып, берҙән-бер бөртөк улына ҡарата мөхәббәттең юғары эталоны булып сығыш яһай[139]. Фәүзиә–Барсынбикә улының шундай кәкере юлдан китеүендә, яман, гонаһлы эштәр башҡарыуында үҙен дә ғәйепле тоя. Сөнки тейешле тәрбиә бирә алманы, хаҡты әйтергә мөмкин булманы, ғүмере буйы сит-ят ерҙәрҙә йөрөүҙәр, кешеләр араһында дөрөҫөн әйтә алмауҙар алдаҡ артынан алдаҡ арттырҙы, битлек кейеп, ят исемдәр аҫтында йәшәргә тура килде уларға һ.б. Халыҡ әкиәтендә лә, бәлки, әсә кешенең улына тейешле тәрбиә бирмәгәнлектән, аҡты ҡаранан айырырға өйрәтмәүенән үҙенә ҡарата тейешле мөнәсәбәттең булмауына килтергәндер. Әммә әкиәттә – хәҡиҡәт, аңлағанға – ишара, тип әйтер ине ошо ерҙә ғалим Ә.М. Сөләймәнов. Нисек кенә булмаһын, әсә кеше улына ҡарата барыбер миһырбанлы һәм мәрхәмәтле булып ҡала. Т. Ғарипованың романындағы Фәүзиә–Барсынбикәнең ҡыланышы ла ошо боронғо әкиәт эстетикаһына хас күренеште хәтерләтеп, эксплицив интертекст бәйләнеште хасил итә.

Романда ошондай уҡ бәйләнеште халыҡ йола поэзияһының сағылышында ла күрергә мөмкин. Йола фольклорынан билдәле булыуынса, һәр миҙгелгә бәйле хеҙмәт-кәсепкә бағышланған байрамдар үткәрелгән, уйындар атҡарылған, һәм улар мотлаҡ рәүештә төрлө поэтик һамаҡтар менән һуғарыла килгән, һәр ҡыланыш йырмоң, таҡмаҡ менән оҙатылыр булған (фольклор этнографиянан шул яғы менән айырыла ла инде). Шундай йәмле байрамдарҙың береһе булып Ҡарға буткаһы һаналған. Уны үткәрергә тип ауылда өй һайын йөрөп, ҡарға кеүек, ҡарҡылдап саҡырышҡандар. Бында, һис шикһеҙ, үрҙәге әкиәттә бөркөт булған кеүек, халыҡтың ҡарға культына инаныу кеүек ғәҙәт сағылған. Нисек кенә булмаһын, «байрамға барыу шартын әйтеү» мөһим роль үтәгән. «Ҡарға буткаһына саҡырғанда, ул шарт ҡарға исеменән еткерелгән:

*– Ҡарға әйтә: «Ҡар, ҡар,*
*Туйым етте, – бар, бар!*
*Ярма, күкәй алып бар,*
*Һөт, майыңды алып бар!»*

Әммә байрамға барыу шарты аҙыҡ-түлек менән генә сикләнмәй. Түшәк-яҫтыҡ тотоп барыу ҙа, ҡупшы кейенеү ҙә, бала-сағаны эйәртеү

[139] *Иткулова Л.А.* Нравственный выбор в башкирской сказке. – Уфа: РИО БашГУ, 2002. – С. 113.

ҙә шарт» булған (мәҫәлән, «…Йылы түшәк ҡыҫтырып, үҙең ҡупшы кейенеп, Бала-саға эйәртеп…»)[140].

Шул уҡ ваҡытта изге байрамға саҡырылып та бармаусылар булғылағандыр, күрәһең. Халыҡта бындай холоҡло кешеләр һаранлыҡта ғәйепләнгән, күңел тарлығы билдәһе тип баһаланған. Ҡарға бутҡаһы байрамына саҡырғанда, тап шуға күрә:

*–Ҡарғатуйға бар, бар!*
*Ҡарғатуйға бармағандың*
*Күңеле булыр тар, тар, –*

тип тә өҫтәр булған саҡырыусылар[141].

Ошо Ҡарғатуй байрамы күренеше ҡаралған «Бөйрәкәй» романында ла һүрәтләнә, унда һамаҡланған теләктәр халыҡ йола поэзияһы менән асыҡ интертекст бәйләнешкә инә:

*Ҡар-р-р, ҡар-р-р…*
*Буҡкалары бар, бар-р-р*
*Бутҡа ашарға килмәгәндең*
*Күңеле булыр тар-р, тар-р, –*

тиелә, мәҫәлән.

Ошо ерҙә шуныһы иғтибарға лайыҡ: Ҡарға буҡкаһы байрамында бер нисә көн элгәре саҡырыу итеп башҡарған был поэтик юлдарҙы автор байрамдың үҙендә, уның ҡыҙып барған осорҙа килтереүе сәйер, әлбиттә. Халыҡ йола фольклоры менән яҡшы таныш булғандар, һис шикһеҙ, бында исеме есеменә тура килмәгән моментты күрә алыр ине: саҡырыуҙың байрам барышында әйтелеүе урынһыҙ булыуы аңлашыла. Сөнки байрамға саҡырылып та килмәгән кешеләр былай ҙа юҡ бит инде, уларҙы «Күңеле булыр тар-р, тар-р…» тип, шелтәләү үҙен бер нисек тә аҡламай. Шулай ҙа романда һүрәтләнгән әлеге байрам барышында ямғыр теләүҙең бирелеше иһә халыҡ йолаһына, байрам ғәҙәтенә тап килә һәм уның матур поэтик үрнәге булып тора:

*Яу-яу, ямғырым,*
*Кәзә-тәкә һуйырмын,*
*Урамдағы балаларға*
*Баш-тояғын бирермен.*
*Урмандары ҡарғаларға*
*Туҡ эсәген элермен.*

---

[140] Башҡорт халыҡ ижады: йола фольклоры. – Өфө: Китап, 1995. – 1-се том. – 19-сы б.

[141] Шунда уҡ. – 20, 109-сы бб.

Был һәм ҡайһы бер йомшаҡлыҡтар романдың дөйөм уңышлы һәм юғары кимәлдә яҙылыуына бер нисек тә хилаф килтермәгән. Уның художестволы-эстетик үҙенсәлектәре, образдар системаһы байлығы, тел маһирлығы, онтологик поэтик алымдарының оҫталығы менән милли романистика фонында сағыу күренеш булыуында шик юҡ. Ә инде ҡатын-ҡыҙ – гендер романы йәһәтенән ҡарағанда, уны феминистик рух менән һуғарылған айырым әҙәби асыш тип тә баһаларға мөмкин.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙ әҙиптәре араһында роман яҙыу өлкәһендә уңышҡа өлгәшкән йәнә бер яҙыусы Гөлнур Яҡупованың ижады ҡаралған проблемалар йәһәтенән шулай уҡ ҡыҙыҡлы. Уның ижады төрлөлөгө, байлығы һәм киңлеге «Ҡатындар» тигән роман-трилогияһын яҙыуы менән билдәләнде (2013). Трилогия билдәле бер логик бәйләнешкә ҡоролған композициянан ғибәрәт: героиняның бала сағын һүрәтләгәне «Ҡыҙ бала» тип аталған, йәшлек мәлен – «Бер һөйгәнем өсөн…» һәм олпатлы йәшкә етеү ваҡытын – «Кесе йыһан – Оло йыһан». Йәғни трилогияның һәр өлөшө үҙ эсенә бер кеше ғүмере миҙгелдәрен алған. Романдағы хәл-ваҡиғалар Нурия исемле ҡыҙыҡай тирәләй үҫешә, ойоша, бәйән итеү беренсе заттан алып барылыуы иһә әҫәрҙең автобиографик һыҙаттарын арттырған. Иғтибарҙы тик ҡатындар затына ғына хас тәбиғи, физик мөмкинлектәргә йүнәлтеүе менән был әҫәргә лә әлеге феминистик рух ят түгел. Сөнки Аллаһы Тәғәлә тик Һауа затынан булған гүзәл енескә генә әсә булыу бәхетен татытҡан.

Әйтелгәндәр трилогияның тәүге өлөшөндә үк үҙенсәлекле итеп раҫлана ла инде. Шуныһы ҡыҙыҡ: романдың башында уҡ героиняһының донъяға әлегә тыумағанлығы хаҡында белгертелә. Ул Кесе Йыһан тип аталған әсә ҡарынында йөҙә бирә әле. Шулай ҙа тирәяғында барған хәл-ваҡиғаларға ул инде күҙ-ҡолаҡ булып өлгөргән, һәммәһен дә ишетеп, тойоп тора. Әле генә яралырға торған бәпес күңеле тәүге бәләнең янауын да һиҙә: имеш, әсәһе уны төшөртөргә итә, шуға уға ҡыйын һәм ҡурҡыныс. Героиняһының эске-хис тойғоларының, донъяһының, зиһененең, ҡараштарының формалашыу процесы шулай әҙмә-эҙлекле һәм мауыҡтырғыс тасуирлана.

Ҡатын-ҡыҙ прозаһы законлыҡтарына буйһонған трилогияның һәр өлөшө, әйтеүебеҙсә, ҡыҙ-ҡырҡын Нурияның ғүмере миҙгелдәрен һүрәтләүгә бағышланған. Шул уҡ мәлдә роман тиклем роман булғас, унда төрлө башҡа сюжет тармаҡтарының да һуҙылыуы, үҫешеүе

күҙәтелә. Нурияның үҙ ғүмерендә осраған төрлө кешеләрҙең, эргәһендә көнө-төнө ураланған яҡындарының тормошо айырым хикәйәләүҙәргә ҡоролған. Улар илебеҙҙә булып үткән тарихи ваҡиғалар менән тығыҙ бәйләнештә бирелә. Сөнки романда бер нисә быуын вәкиле ғүмер һөргән ваҡыт арауығы һүрәтләнә. Мәҫәлән, Сталиндың үлеүе тураһындағы хәбәрҙең таралыуына бәйле бер хикәйә килтерелә. Үҙе кескәй генә булһа ла, әле Кесе йыһанда уҡ яралған күңел һиҙгерлеге Нурияны шундай күренеш аптырауға һала: берәүҙәре Сталиндың үлеүенә ҡайғыра, икенселәре шатлыҡтарын йәшерә алмай, ә өсөнсөләре бер ни ҙә өндәшмәй. Ауылдаштарының был ҡайғылы хәбәргә төрлө мөнәсәбәттә булыуының сәбәбен ул Гөлбикә апайҙың башынан үткән хәсрәттәренән аңлай. Баҡтиһәң, ана шул заманда ырҙындан итек ҡуңысына бойҙай һалып алып ҡайтҡан йөклө Гөлбикәне, хәленә лә ҡарамайынса, һөргөнгә ебәрәләр. Автор уның күргән михнәттәрен, ҡайғы-хәсрәттәрен тасуирлауҙы бер сюжет һыҙығына ҡороп, әҫәр эсендә әҫәрҙе – тартмалы композицияны хасил итеп күрһәтә. Ғөмүмән, трилогияла ошоноң кеүек, мәленә тап килтереп, төрлө сюжеттарға ҡоролған хикәйәләр бихисап: «Абрахман менән Зөләйха ҡиссаһы», «Аҡбуҙат», «Ҡуңыр буға» кеүек халыҡ эпосы сюжеттарының да килеп инеүе, эпик ижадҡа хас төш күреү мотивына ҡоролған сюжет һыҙығы ла һ.б. ана шундайҙарҙан. Икенсе төрлө әйткәндә, бындай осраҡтар эксплицив интертекст бәйләнештәрен тыуҙыра. Әҫәрҙә һүрәтләнгән сюжет һыҙығы менән параллель рәүештә эпик ҡомартҡылар сюжетын тасуирлап, улар араһында текст-ара бәйләнеште нығытыу ысулы әҫәрҙең поэтик аһәңен көсәйтә һәм камиллаштыра.

Г. Яҡупова бала күңеленең торошон оҫта тотоп алған. Ул, балалар өсөн яҙыусы булараҡ, уларҙың психологияһын да, холоҡ-фиғелен да бик йәтеш кенә художестволы һүрәтләүгә ирешкән. Мәҫәлән, әсәһе менән ҡартәсәһенең (ә ҡыҙыҡай өлкәндәрҙең һөйләшкәнен бик ихтибар менән тыңларға ярата) «тауыҡ баш Сәғүрә» тип һөйләшеүҙәрен ишетеп, аптырап бер була: ауылда, баҡтиһәң, биш Сәғүрә бар икән, ҡайһыныҡының башы тауыҡтыҡына оҡшаған икән, тигән һорау уға тынғылыҡ бирмәй башлай. Ауыл буйлап йөрөп сыҡҡандан һуң да, был һорауына яуап таба алмай. Һуңынан ғына «тауыҡ баш» тигәндең «мейеһе бәләкәс», тимәк, «аҡылы аҙ» тигәнде аңлатыуын төшөнә. Бала донъяһына бәйле ошондай эскерһеҙ һәм мауыҡтырғыс күренештәрҙе халыҡсан телдә, ябайса һөйләү стилендә, ярым юмор

менән бәйән итә әҙибә. Шуның менән бала психологияһын уңышлы асып биреүгә ирешә. Был иһә, үҙ сиратында, тик ҡатын-ҡыҙ яҙыусылары башҡара торған нескәлектер, оҫталыҡтыр.

Г. Яҡупованың трилогияһына ингән романдары халыҡ ижады традицияларына ла бай. «Бер һөйгәнем өсөн» тигән өлөшөндә Фәтих менән Нурияның туйҙары әле халыҡ хәтерендә һаҡланған йола буйынса эҙмә-эҙлекле һүрәтләнә, әҫәрҙә тасуирланған килен төшөрөү, килен һөйөү кеүек йола күренештәре уны художестволы яҡтан биҙәп тора, халыҡ туй йолаһы менән реминисценциялы бәйләнеште булдыра. Кейәү йортона килгәс, Нурияға танаға менеп төшөргә ҡушыла. Ул һыпырылып төшкән арала:

*Тура төштө – тура килен,*
*Етеҙ төштө – етеҙ килен,*
*Төбәп төштө – төплө килен,*
*Уңдан төштө – уңған килеп, –*

тип, һамаҡлап та ебәрәләр. Автор әйтеүенсә, ул һамаҡтың тырантастан килендең ни рәүешле килеп төшөүенә ҡарап, башҡасараҡ һамағы ла бар икән:

*Ҡаты төштө – ҡаты килен,*
*Текә төштө – етеҙ килен,*
*Ҡырын төштө – ҡырын килен… һ.б.*

Трилогияның беренсе өлөшөндә шулай уҡ йылан арбау күренеше лә һүрәтләнә. Бесәндә Нурияға йылан ятҡан ерҙә йөрөргә тура килә. Ҡыҙыҡай, билдәле, ныҡ шөрләй. Шулай ҙа өләсәләренән, өлкәндәрҙән ишеткәндәрен әйтә һала: «Сығыр булһаң, сыҡ, йылан. Сыҡмаҫ булһаң, ят, йылан. Ятҡан ерҙә ҡат, йылан». Шулай әҫәрҙең һүрәтләнеше ыңғайында халҡыбыҙҙың йола фольклоры күренештәре, поэтикаһы тасуирланып, художестволы биҙәү алымы булараҡ файҙаланылған.

Трилогияны хасил иткән романдарҙың тел-стиль үҙенсәлектәрен баҙыҡландырып торған йәнә бер ысул булып, төбәк халҡының телендә, һөйләшендә, аралашыуында йыш осраған, тәбиғи рәүештә әйләнештә булған афоризмдары, аҡыллы һүҙҙәре тора: «Кеше ҡайғыһы төштән кире», «Йоғоп ҡалғанын юйма…», «Оло һүҙен тыңламаған – оронған да бәрелгән», «Андыҙ барҙа, ат үлмәй, ти…», «Утыҙ ике теш араһынан сыҡҡас, тотош ауыл белгән», «Исем атау – яҙмышыңа фатиха менән бер…», «Ҡатын-ҡыҙға етмеш ете һөнәр ҙә әҙ – етмешен ул тыуғанда уҡ белеп тыуа», «Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ», «Үгеҙ үлде, уртаға ярылды…» һ.б. Тел мәсьәләһенә килгәндә,

Г. Яҡупова тыуған яғы Ғафури районына хас диалектизмдар менән үтә ныҡ мауыҡмайынса ғына, ауылдаштары аралашыуының телмәрен геройҙарының һөйләшеү-аралашыуына ыҡсым ғына итеп индереп ебәрә: «баҡа», «һапа», «ҡолоҡас», «шилма», «иҫһеҙ», «бәләкәс ен ботағы», «йышпытыу», «мыҙыҡ» һ.б.

Эсенә өс дәүерҙе һыйҙырған өс быуын ҡатындар яҙмышын һүрәтләгән трилогия 2012 йылдың донъя ахыры, ахрызаман тип билдәләнгән көн алды – 20 декабрь менән тамамлана. Алда нимә булыры – билдәһеҙ, егерме беренсе көн әле тыумаған: «Иртәге көн – Юғары көс ихтыярында», ти әҙибә. Шулай ҙа эпик әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар быуындар бәйләнешендә үҫешә, бала-саҡтан аҡыл-зиһене бай булып үҫкән Нурия тормоштоң байтаҡ күренешенә шаһит була. Ана шул үҙе генә лә шаһит булғанын, күргән-ишеткәнен Оло Йыһан тарихы менән йәнәшә тасуирлап күрһәтеүе аша уҡыусыларға үткәндәрҙе иҫкә төшөрөргә мөмкинлек бирә. Һәм ул ошо донъя ахыры тигән көнөнән дә ҡурҡмай. Һәр кем был көн алдынан «үҙ аҡылы, иманы, холҡо кимәленән» сығып эш итә, әҙерләнә. Ә Нурия – Ҡатын, уйлы Әсә заттан булғанлыҡтан, уй донъяһында йөҙә, сөнки белә – донъяның ҡот-ырыҫы сәңгелдәк бәүеткән заттар ҡулында. Шуның өсөн ул бөгөнгөһө өсөн дә, киләсәктә тыуасаҡ көндәр өсөн дә тыныс. Әйтергә кәрәк, был идея гендер әҙәби әҫәренең төп мәғәнәһенә тура килеп, романдың лейтмотив функцияһын да үтәп килә, шул яғы менән мускулистик, йәғни ир-ат ижадынан айырылып тора.

***

Шулай итеп, теге йәки был әҙәби уй-фекер, образлы һүрәтләнеш буш ерҙә килеп тыумаған. Улар ҡасандыр халыҡтың боронғо мифик, образлы фекеренә, ҡарашына нигеҙләнеп, һуңынан ауыҙ-тел ижадында нығанып, үҙенсәлекле поэтик алымдар, художестволы образдар, клишелар һ.б. менән әҙәби тексҡа килеп инеүе ихтимал. Халыҡтан сыҡҡан яҙыусының йыр, әкиәт, легенда, риүәйәт, эпос менән таныш булыуы, әсә һөтө менән һеңдереүе мөмкин, йә булмаһа, фольклорҙы махсус өйрәнеп, яҙып алып, оҫталар, сәсәндәр ауыҙынан да ишетеп үҙләштереүе мөмкин. Шунлыҡтан әҙерлекле булған һәр кем әҙәбиәттә фольклор традицияларын таный, иҫенә төшөрә ала. Улай ғына ла түгел, бер әҙәби әҫәрҙең художестволы элементтары икенсе әҫәрҙә йәки кинофильмда сағылыуы ла ихтимал. Йәнә лә иҫкә

төшөрлөк, интуитив рәүештә ҡасандыр ишеткән, белгән күренеш хасил итеlә. Фәндә әҫәрҙәр текстары араһындағы диалог, күсә килештәр «интертекст бәйләнештәре» тип атала. Башҡорт әҙәбиәте лә, донъя әҙәби фекеренең бер өлөшө булараҡ, художестволы универсалийҙар законлыҡтарына буйһона. Милли сиктәрҙә ҡарағанда, иң әүәл әҙәбиәттең халыҡ ижады әҫәрҙәре, традициялары менән ошондай интертекст бәйләнештәрҙә тороуы асыҡлана. Быны боронғо әҙәбиәтебеҙҙең – Ҡол Ғәли, Б.Н. Рабғузи, Баһауи ише әҙиптәрҙең әҫәрҙәренән алып, XX быуат башы, XXI быуат әҙәбиәтендә лә күҙәттек.

Художестволы универсалийҙар сиктәрендә ҡаралған башҡорт әҙәбиәтенә шулай уҡ, гендер әҙәбиәте кеүек, феноменаль ижад күренеше лә хас. Ҡатын-ҡыҙ ижады, ғәҙәттә, күҙгә күренеп бармаған әйберҙәрҙе, әйтеп бөтөлмәгән фекерҙәрҙе, тешөнөп етелмәгән төшөнсәләрҙе нәфис күҙҙән үткәреп ҡарау менән ир-зат ижадынан айырыла. Әҙибәләр сығарған әҫәрҙәрҙә шулай уҡ фольклор традициялары үҙенсәлеклерәк художестволы сағылдырыуы менән дә айырым күренеш булып тора. Үрҙә ҡаралған Т. Ғарипованың «Бөйрәкәй», Г. Яҡупованың «Ҡатындар» романдары, Г. Ғиззәтуллинаның хикәйәләре халыҡ ижады күренештәренә, традицияларына күпкә нескәрәк һәм тәрәнерәк мәғәнә һалыуы, уларҙы тик ҡатындарға ғына хас ҡараш, логика аша үткәреп бағыуы менән дә бер башҡалыр. Шуға ла ундай әҫәрҙәрҙә фольклор менән интертекст бәйләнештәре сағыуыраҡ һәм һүрәтләнеше яғынан образға байыраҡ, тәрәнерәк сағылыш тапҡан.

## ЙОМҒАҠЛАУ

Башҡорт әҙәбиәтен донъя әҙәбиәтенең бер өлөшө итеп ҡарағанда, уны интертекст теорияһы күҙлегенән сығып, заманса ғилми тикшереү методтарына нигеҙләнеп ҡарау актуаль проблемаларҙың береһе һанала. Ошо йәһәттән үрҙә ҡаралғанса, башҡорт әҙәбиәтендә, дөйөм алғанда, интертекстың төрлө төрҙәре осраны: 1. Әҫәрҙәрҙә фольклорға булған һылтанмалар, текст-ара бәйләнеше – интертексы. 2. Әҙәби текстар (төрлө осорҙа башҡорт һәм башҡа милләт әҙәбиәтенә ҡараған) араһында ауаздашлыҡ, реминисценциялар. 3. Әҙәби фекер менән башҡа сәнғәт өлкәһенә ҡараған әҫәрҙәр (һынлы сәнғәт, кино сәнғәте) араһындағы интертекст бәйләнеш йәки имплицив һылтанма. 4. Бер әҙиптең ижадында үҙ-үҙенә аллюзиялы һылтанмалар. Әлбиттә, был төрҙәр исемлеге күберәк булыуы ихтимал, шуның өсөн уны тулы, тип әйтә алмайбыҙ.

Бөгөн бөтә донъяла глобаллаштереү процесы барған осорҙа гуманитар, айырып әйткәндә, художестволы фекерҙе ғилми яҡтан тикшереү ысулы ла заман талаптарына тап килтереп, дөйөм донъя киңлегендә ҡарау зарурлығы тыуа. Был процестан башҡорт милли әҙәбиәте лә ситтә тороп ҡала алмай, әлбиттә. Калыплашҡан, өйрәнелгән һәм үҙен быҒаса аҡлап килгән традицион алымдар менән бер рәттән бөгөнгө көндә байтаҡ фәндәрҙә юлға һалынған комплексы һәм системалы алымдарҙы әҙәбиәттә лә ҡулланыу ихтыяжы тыуа. Йәғни был юҫыҡта төрлө фәндәр интеграцияһына, бәйләнешенә килтергән ысулдар ярҙамында әҙәби әҫәрҙең бөтә художестволы үҙенсәлектәрен, семантик мәғәнәһен асып һалырға мөмкинлек аса.

Әҙәбиәт художестволы мәҙәниәт емеше булараҡ, әҙәбиәт ғилеме – культурология алымдарын файҙаланып ҡаралыуға мохтаж. Культурологик аспекттан сығып тикшереү әҙәбиәтте, бөгөнгө талаптарға тап килтереп, фәндәр бәйләнештәре сиктәрендә тағы ла тәрәнерәк һәм киңерәк даирәлә тикшерергә, художестволы-эстетик үҙенсәлектәрен бөтә яҡлап баҙығыраҡ күрһәтергә мөмкинлек бирер ине. Интертекст бәйләнеше методын ҡулланып анализлаған төрлө

әҙәби күренештәргә яңыса бағырға мөмкин, улар теге йәки был тарихи осорҙа ижад ителеп тә (ул әҙәбиәттә сағылыш алған фольклор әҫәре, сюжеты йәки мотивы ла булыуы ихтимал), уларға төрлө художестволы һылтанмаларҙы бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙә осратырға була. Бер үк фекер, бер үк идея, тимәк, заманалар үткәс тә яңы һыҙаттарҙы, ҡараштарҙы үҙһенеп, яңыса яңғырай башлай. Әммә төптә беҙгә күптән таныш күренештең йәки фекерҙең ятыуы асыҡлана.

Билдәле булыуынса, XIX–XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте халыҡ ижады традицияларын художестволы үҙләштереүен дауам итте. Әҙиптәр әҫәрҙәрендә тормошто бөтә ысынбарлығында һүрәтләү процесында инуитив рәүештә бала саҡтан ишетеп үҫкән, улар йоғонтоһонда тәрбиәләнгән боронғо әкиәт, эпос сюжеттарына, образдарына, легенда һәм риүәйәттәренә, йырҙарына мөрәжәғәт итеп, уларҙы үҙҙәренең әҫәрҙәрендә оҫта итеп художестволы үҙләштерҙе, төрлө һүрәтләү саралары ярҙамында уларҙы тағы ла баҙығыраҡ сағылдырҙы. Интертекстуаль методына таянып ҡарағас, уларҙың күптәрен хәҙерге әҙәбиәттә эксплицив йәки имлицив аллюзия, йәки реминисценция тыуҙырыуын асыҡланыҡ. Был йәһәттән бигерәк тә Һ. Салихов, Ф. Туйкин, Б. Мирзанов ише яҙыусыларҙың ижады айырыуса сағыу миҫал булып тора. Был, бер яҡтан, әҫәрҙәренең идея-эстетик һәм идея-художестволы үҙенсәлектәре хаҡында һөйләһә, икенсе яҡтан, уларҙың халыҡ ижады менән тығыҙ бәйләнешкә инеүе менән мәҙәниәттәр (фольклор менән әҙәбиәт) бәйләнешен дә хасил итте. Ә инде билдәле мотив һәм сюжеттарҙың байтаҡ төрки халыҡтары менән уртаҡ булып, хатта ки ҡайһы бер европа халыҡтары әкиәттәрендә лә сағылыш табыуын иҫтә тотҡанда, башҡорт әҙәбиәтенең мәҙәниәттәр универсалийҙарының бер өлөшө булып күҙалланыуы асыҡланды.

Милли ерлектә мәҙәниәт универсалийын булдырыуҙа татар әҙәбиәт классигы Ғ. Туҡайҙың да роле ҙур. Татар шағирының ижадында башҡорт фольклорынан тыш башҡа халыҡтар өсөн таныш булған традицияларының күҙәтелеүе, уларҙың күпселек осраҡта уртаҡ икәнлеге, шуның менән эксплицив һәм имплицив интертекст бәйләнешенең булдырылыуы ошо универсалийлыҡты көсәйтә һәм уның әһәмиәтен арттыра. Сөнки шағирҙың шиғырҙарында бер халыҡтың поэтиклаштырылған рухи донъя картинаһы башҡа ҡәрҙәш, шул иҫәптән башҡорттоң да, рухи ҡиммәттәре менән оҡшаш, уртаҡ булыуы дөйөм төрки халыҡтарының мәҙәниәте универсалийын тәшкил итә.

Ҡаралған мөһим проблеманың перспективалы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, башҡорт әҙәбиәтен шулай уҡ сыуаш йәки ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, ҡарасай кеүек башҡа төрки халыҡтары һүҙ сәнғәте менән сағыштырма рәүештә тикшереү үҙен аҡлар ине.

Китапта ҡаралған проблеманың мөһимлеген раҫлау маҡсатында хеҙмәтебеҙҙең ахырында уға бағышланған төрлө ғилми баҫмаларҙа, мәртәбәле фәнни журналдарҙа баҫтырылған мәҡәләләр килтерелә. Был инде әлеге ғилми мәсьәләнең апробацияланыу кимәлен күрһәтеп, уның ғәмәли ҡулланылышлы (прикладной) мәғәнәгә эйә булыуын билдәләп тора.

## ӘҘӘБИӘТ ИСЕМЛЕГЕ

*Абдуллина А.Ш.* Поэтика современной башкирской прозы. – Уфа; ИИЯЛ, 2009. – 352 с.

*Азадовский М.К.* Статьи о литературе и фольклоре. – М.–Л.: Наука, 1960. – 547 с.

*Аҡмулла*. Шиғырҙар / Төҙ., баш һүҙ авт. Ә.Х. Вилданов. – Өфө: Башкнигоиздат*, 1981. – 224 б.

Античность. Мышь [Электронный ресурс]: http:/www.symbolarium.ru

*Арзамазов А.А*. Эволюция образной системы и лингвосемантические трансформации в удмуртской поэзии половины 1970-х – начала 2010-х гг.: автореф. дисс. ... д-ра фил. наук. – Ижевск, 2016. – 41 с.

*Ауэзов М.О.* Мысли разных лет. – Алма-Ата: Наука, 1959. – 556 с.

*Бахтин М.М.* Эстетика словесного творчества. – М., 1986. – 445 с.

Башкирское народное творчество: Бытовые сказки / Н.Т. Зарипов (гл. ред.), Л.Г. Бараг, С.А. Галин и др. – Уфа: Башк. кн. издат-во, 1990. Т.5. – 294 с. (рус.тел.).

Башкирские шежере / Сост., пер. текстов, введен. и коммент. Р.Г. Кузеева. – Уфа: Башкнигоиздат, 1960. – 304 с.

Башҡорт халыҡ ижады: Тылсымлы героик әкиәттәр / Төҙ. М. Минһажетдинов, Ә. Харисов, аңлатмалар авт. Л. Бараг, М. Минһажетдинов – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1976. 2-се кит. – 376 б.

* Здесь и далее: Башкнигоиздат – Башкирское книжное издательство. – Н.Х.

Башҡорт халыҡ ижады: Новеллистик әкиәттәр / Төҙ., баш һүҙ, комм. авт. Ә.М. Сөләймәнов. – Өфө: Башҡ-н. кит. нәшриәте, 1981. – Т.4. – 400 б.

Башҡорт халыҡ ижады: әкиәттәр / төҙ., баш һүҙ авт. Ә.М. Сөләймәнов; аңлатмалар Л. Бараг менән Ә. Сөләймәновтыҡы. – Өфө: Баш.-н кит. нәшриәте, 1983. 5-се кит. – 390 б.

Башҡорт халыҡ ижады: Бытовые сказки / Сост. А.Сулейманов, авт. коммент. Л.Бараг и А.Сулейманов. – Уфа: Башкнигоиздат, 1990. – Т.5.– 496 с. (рус. тел.)

Башҡорт халыҡ ижады: Шаян әкиәттәр һәм көләмәстәр / Төҙ. Ә.М. Сөләймәнов, баш һүҙ авт. Л.Г. Бараг менән Ә.М. Сөләймәнов. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1992. – 464 б.

Башҡорт халыҡ ижады: йола фольклоры / төҙ., баш һүҙ авт. Ә.М. Сөләймәнов, Р.Ә. Солтангәрәева. – Өфө: Китап, 1995. – Т.1 – 560 б.

Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр. Легендалар / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатма авт. Ф.А. Нәҙершина. – Өфө: Китап, 1997. – Т.2. – 440 б.

Башҡорт халыҡ ижады: Эпос / Төҙ. Ә. Сөләймәнов, инеш мәҡәлә М. Сәғитовтыҡы, һүҙ ахыры Ә.Сөләймәновтыҡы; аңлатма М. Сәғитов менән Ә. Сөләймәновтыҡы. – Өфө: Китап, 1998. – Т.3. – 446 б.

Башҡорт халыҡ ижады: Эпос / Төҙ., аңлатма авт. М. Сәғитов, Б. Байымов; инеш мәҡәлә авт. М. Сәғитов, Б. Байымов, С. Галин. – Өфө: Китап, 1999. – Т.4. – 400 б.

Башҡорт әҙәбиәте: XX б. башы. Поэзия / Төҙ. В. Әхмәҙиев, И. Бүләков һәм Ғ. Хөсәйенов. – Өфө: Баш. кит. нәшриәте, 1983. 2-се кит. – 400 б.

Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: XIII–XVIII бб. / Төҙ., баш һүҙ авт. Нәҙерғолов М.Х., Хөсәйенов Ғ.Б. – Өфө: Китап, 1999. – Т.1.– 464 б.

Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: XIX б. / Төҙ., баш һүҙ авт. Ғ.Б. Хөсәйенов, М.Х. Нәҙерғолов, З.Я. Шәрипова. – Өфө: Китап, 2007. – Т.2. – 388 б.

Башҡорт халыҡ әкиәттәре / Төҙ. А.Усманов. – Өфө, 1952. – 107 б.

Башҡорт халыҡ әкиәттәре / Төҙ. Ғ.Ишбулатов. – Өфө, 1956. – 310 б.

*Бикбаев Р.Т.* «Атлы азамат» (башҡорт халыҡ ижадында йылҡы малын изгеләштереү) // Шәрҡиәт мәсьәләләре. – №2 (72). – 53–58-се бб.

*Буранғолов М.* Сәсән аманаты / Төҙ., баш һүҙ авт. Б. Байымов. – Өфө: Китап, 1995. – 352 б.

*Веселовский А.Н.* Историческая поэтика. – М.: Высшая школа, 1989. – 406 с.

*Галин С.А.* Фольклор һәм заман. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1972 – 112 б.

*Габен фон А.* Древнетюркская литература // Зарубежная тюркология / А.Н. Кононов (отв. ред.). – М.: Наука, 1986. – С. 297–306.

*Гончаров С.А.* Мифологическая образность литературной утопии // Литература и фольклор. Вопросы поэтики. – Волгоград, 1990. – С. 39–48

*Ғарипов Р.* Алырым ҡош менән Бирмәм ҡош. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1992. – 368 б.

*Ғарипова Т.* Бөйрәкәй: роман-эпопея. – Өфө: Китап, 2006. – 768 б.

*Ғафури М.* Һайланма әҫәрҙәр: Дүрт томда. Проза / Төҙ., аңлатма бир. Ғ. Рамазанов, М. Хәмиҙуллина. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1978. Т.2. – 496 б.

*Ғәли Ҡол.* Йософ ҡиссаһы / төркисәнән З. Шәрипова тәржемәһе. – Өфө: Китап, 1993. – 272 б.

*Гәрәева Р.Н.* Заман көҙгөһө: геройҙың рухи донъяһы. – Өфө, 2003. – 127 б.

*Далгат У.Б.* Литература и фольклор. – М.: Наука, 1981. – 248 с.

*Даль В.* Башкирская русалка // Башкирия в русской литературе. – Уфа: Башк. кн. издат-во, 1989. – С. 172–188.

*Жеребкина И.* «Прочти мое желание…». Постмодернизм. Психоанализ. Феминизм. – М.: Идея-Пресс, 2000. – 256 с.

*Жирмунский В.М.* Сравнительное литературоведение. – Л.: Наука, 1979. – 493 с.

*Зумбулидзе И.Г.* «Женская проза» в контексте современной литературы // Современная филология: материалы Международной научной конференции (г. Уфа, апрель 2011 г.). – Уфа, 2011. – С. 21–23.

*Иҙелбаев М.Х.* Боронғонан аманат. – Өфө: Китап, 2007. – 344 б.

*Иликаев А.С.* Мифы народов Башкирии. Боги и герои. – Уфа: Вагант, 2012. – 221 с.

*Илимбетова А.Ф.*, *Илимбетов Ф.Ф.* Культ животных в мифоритуальной традиции башкир. – Уфа: Гилем, 2012. – 704 с.

*Ильин И.* Интертекстуальность // Современное литературоведение (страны Западной Европы и США): концепции, школы, термины. Энциклопедический справочник. – М. 1999. – С. 204–205

*Ильясова Й.* Һарғайма, йәй!: Шиғырҙар. – Өфө: Китап, 1994. – 80 б.

*Исламов Р.Ф.* Урта гасыр төрки шигърияте үсешендә Шәрифнең «Шаһнамә»се. – Казан: Фикер, 2001. – 280 б.

История зарубежной литературы: XVIII в. / В.П. Неустроева, Р.М. Самарина (ред.). – М.: МГУ, 1974. – 414 с.

*Иткулова Л.А.* Нравственный выбор в башкирской сказке. – Уфа: РИО БашГУ, 2002. – 136 с.

*Кляшторный С.Г.* Летопись трех тысячелетий [Электронный ресурс]: http: //www. tatforum.info

*Короглы Х.Г.* Взаимосвязи эпоса народов Азии, Ирана и Азербайджана. – М.: Наука, 1983. – 355 с.

Краткая литературная энциклопедия. – М., 1975. – Т.8. – 853–854-се бб.

*Кристева Ю.* Изоляция, идентичность, опасность, культура… // Вестник Европы. – № 15. 2005. – С. 227–241.

*Ҡунафин Ғ.С.* Замандарҙың рухи балҡышы. Әҙәбиәт теорияһы, тарихи поэтика мәсьәләләре, ижади портреттар, әҙәби тәнҡит мәсьәләләре. – Өфө: Китап, 1996. – 492 б.

*Кунафин Г.С.* И песней, и сатирой: Развитие жанровой системы башкирской литературы песенной и сатирической поэзии XIX – начала XX века. – Уфа: Китап, 1999. – 256 с.

*Кунафин Г.С.* Башкирская поэзия XIX – нач. XX века: Вопросы жанровых и идейно-художественных особенностей. – Уфа: Гилем, 2011. – 480 с.

*Ҡунафин Ғ.С.* XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең идея-художество үҙенсәлектәре. – Өфө: Ғилем, 2016. – 368 б.

Кәрим М. Әҫәрҙәр: шиғырҙар һәм поэмалар. – Өфө: Китап, 1995. – Т.1 – 416 б.

*Кәрим М.* Һабантуйҙан ҡайтып киләм // Шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 2004. – 95–96-сы бб.

*Медриш Д.Н.* Литература и фольклорная традиция. Вопросы поэтики. – Саратов, 1980. – 296 с.

*Мелетинский Е.М.* Введение в историческую поэтику эпоса и романа. – М.: Наука, 1986. – 317 с.

*Миннуллин К.М.* Һәр чорның үз җыры. – Казан: Магариф, 2003. – 400 б.

Мифологическая библиотека. Аполлодор / пер. с древнегреч. В.Т. Боруховича. – М.: Астрель, 2004. – 380 с.

Мифологический словарь / гл. ред. Е.М. Мелетинский. – М.: Советская энциклопедия, 1990 г. [Электронный ресурс]: http://www.twirpx.com/file...

Населенные пункты Башкортостана. Уфимская губерния / Бурангулов Б.В. (отв. ред.). – Уфа: Китап, 2002. – Ч.1. – 432 с.

*Насыри И.* Әҫәрҙәр: ике томда / Төҙ., баҫтыр. әҙер. Кирәй Мәргән. – Өфө: Башҡ. кит. издат-һы, 1957. – 459 б.

*Нурланова К.Ш.* Эстетика художественной культуры казахского народа. – Алма-Ата: Наука, 1987. – 556 с.

*Нәҙерголов М.Х.* Мул емешле ижад (баш һүҙ) // Ф. Туйкин. Ватан ҡаһармандары. – 3–24-се бб.

*Нәҙршина Ф.А.* Халыҡ хәтере. – Өфө: Ғилем, 2006. – 320 б.

*Пиотровский М.Б.* Коранические сказания. – М.: Наука, 1991. – 219 с.

*Пропп В.Я.* Фольклор и действительность. – М.: Наука, 1976. – 326 с.

*Путилов Б.Н.* Героический эпос и действительность. – Л.: Наука, 1988. – 394 с.

*Родионов В.Г.* Чувашское сравнительное литературоведение. Теория и практика. – Чебоксары, 2017. – 92 с.

Русская литература: типы художественного сознания и диалог культурно-национальных традиций: материалы XI Всероссийской научной конференции с международным участием. – Екатеринбург, 2015. – С. 260–261.

*Соловьев Н.А.* «Человек чувства» или Макензи против Стерна// Вестник Московского университета. Филология.– 2004. – № 1. – С. 7–18.

*Сөләймәнов Ә.М.*, *Солтангәрәева Р.Ә.* Башҡорт халҡының йола фольклоры // Башҡорт халыҡ ижады: йола фольклоры / төҙ., баш һүҙ авт. Ә.М. Сөләймәнов., Р.Ә. Солтангәрәева – Өфө: Китап, 1995. – Т.1. – 7–48-се бб.

*Сөләймәнов Ә.М.* Әкиәттә хәҡиҡәт: Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәренең жанр составы, сюжет төрләлөгө, тормош ерлеге. – Өфө: Китап, 1997. – 294–400 б.

*Сөләймәнов Ә.М.* Өс мөғжизә. – Өфө: Китап, 2009. – 296 б.

*Сөләймәнов Ә.М.* Мәжит Ғафуриҙың башҡорт халыҡ ижады хаҡында борсолғаны // Ватандаш. 2010. № 7. – 181–190-сы бб.

*Сөләймәнов Ә.М., Хөббитдинова Н.Ә.* Әҙәби әҫәрҙе тикшереү юлдары. – Өфө: Китап, 2012. – 168 б.

*Сулейманов А.М.* Некоторые сходные и отличительные особенности башкирских и алтайских эпосов [Электронный ресурс]: URL: http://bash-portal.ru.

*Султангареева Р.А.* Башкирский фольклор: семантика, функции и традиции. – Уфа: Башк. энцикл., 2018. – Т.1. – 520 с.

*Сухих С.И.* Методология литературоведения; комплексный и системный методы анализа литературы // Вестник Нижегородского университета им. Н.И. Лобачевского. 2012. – № 6(1). – С. 298–303.

Татар мифологиясы. Энциклопедик сүзлек / Төз., баш сүз, аңлатма авт. Ф.Урманче. – Ҡазан: Магариф, 2008. Т.1. – 303 б.

Татар халыҡ ижады: Әкиәттәр / Төҙ., иҫкәртмә авт. Гатина Х.Х., Яхин Х.Х. – Ҡазан: Тат. кит. нәшр-те, 1978. 2 Кит. – 448 б.

*Твардовский А.* Василий Теркин [Электронный ресурс]: URL: http://rubook.org...

*Томашевский Б.В.* Пушкин и Франция. – Л., 1960. – 498 с.

*Трыкова О.Ю.* Отечественная проза последней трети XX века: жанровое взаимодействие с фольклором: Автореф. дисс… д-ра фил. наук. МПРУ, 1999. [Электронный ресурс]: URL: /http://philology.ru/filolog/intertex.htm.

*Туғыҙбаева Ф.* Фатихамды бирәм: шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: Китап, 1994. – 240 б.

*Тукай Ғ.* Шиғырҙар. Әкиәттәр. – Башҡ-н кит. нәшриәте, 1977. – 128 б.

*Тукай Ғ.* Таҙ // Шиғырҙар һәм поэмалар / Төҙ. С. Сафуанов, М. Сиражи. – Өфө; Башҡ-н кит. нәшриәте, 1986. – 90 б.

*Турсунов Е.Д.* Генезис казахской бытовой сказки. – Алма-Ата: Наука, 1973. – 216 с.

*Харисов А.И.* Литературное наследие башкирского народа (XVIII–XIX вв.). 2-е издание, дополненное. – Уфа: Китап, 2007. – 416 с.

*Хөббитдинова Н.Ә.* Башҡорт әҙәбиәтендә фольклор (XIII–XIX бб.). – Өфө: Ғилем, 2004. – 163 б.

*Хөббитдинова Н.Ә.* Художественное отражение фольклора в литературе XIX века (к проблеме русско-башкирских фольклорно-литературных взаимосвязей). – Уфа: Гилем, 2011. – 126 с.

*Хөббитдинова Н.Ә.* XIX быуат аҙағы – XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә фольклор традицияларының художестволы сағылышы. – Өфө: Ғилем, 2013. – 188 б.

*Хөббитдинова Н.Ә.* Фольклор в башкирской литературе: художественно-эстетический аспект (XIII–начала XX века). – Гилем, 2016. – 276 с.

*Хөсәйенов Ғ.Б.* Заман, әҙәбиәт, әҙиб. – Өфө: Башҡ-н. кит. нәшриәте, 1978. – 432 б.

*Хөсәйенов Ғ.Б.* Быуаттар тауышы. Башҡорт әҙәбиәте тарихы, теорияһы һәм тарихи поэтика буйынса очерктар. Өфө: Башҡ-н кит. нәшриәте, 1984. – 299 б.

*Хөсәйенов Ғ.Б.*, *Сөләймәнов Ә.М.*, *Нәҙерғолов М.Х.* Яҙма дастандар. – Өфө: Ғилем, 2006. – 146 б.

*Шәрипова З.Я.* Әҙәбиәт ғилеме һәм заман. – Өфө: Китап, 2001. – 320 с.

*Шәрипова З.Я.* Художестволы әҫәрҙә әҙәби алынмаларҙың функцияһы // Ағиҙел. – 2008. – № 6. – 139–152-се бб.

*Әбүзәров С.* Талант «Ҡапҡа»һы // «Башҡортостан» гәзите. – 2012. – 6 декабрь.

*Әхмәтйәнов К.Ә.* Матурлыҡ. Батырлыҡ. Шиғриәт. – Өфө: Башҡ. кит. нәшриәте, 1982. – 304 б.

*Әхмәтйәнов К.Ә.* Поэтик образлылыҡ. – Өфө, 1994. – 160 б.

*Әхмәтйәнов К.Ә.* Әҙәбиәт теорияһы: өсөнсө баҫма. – Өфө: Китап, 2004. – 220-се б.

*Яҡупова Г.* Мөхәббәткә мәдхиә. – Өфө: Китап, 1996. – 106 б.

# ҠУШЫМТА
# (ҠАРАЛҒАН ПРОБЛЕМАНЫҢ ҒИЛМИ ЯҠТЫРТЫЛЫШЫ)

## Ф.ТУЙКИН ИЖАДЫНДА ФОЛЬКЛОРҘЫҢ ЦИТАЦИЯЛАНЫУЫНА ҠАРАТА[142]

Тормоштоң тиҙ үҫешкән, үҙгәрештәр, модернизациялар кисергән бер мәлендә ниндәйҙер яңылыҡ, прогрессив алымдар артынан ҡыуғанда, ҡайһы саҡ күптән булдырылған, әммә ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында онотолған ғилми асыштарҙа, дөйөмләштереүҙәрҙә ана шул яңылыҡтарҙың булыуы асыҡлана. Филология фәнендә, русса әйтмешләй, «хорошо забытое старое», йәғни «онотолған иҫке яңы» булып, фольклор менән әҙәбиәттә ҡасандыр асылып та онотолоуға дусар ителгән интертекстуаль теория тора.

Әйтергә кәрәк, интертекстуаль теория, ул да булһа, текстар араһында бәйләнештәрҙең барлыҡҡа килеүе хаҡындағы төшөнсәне рус ғалимы М.М. Бахтиндың «Проблема содержания, материала и формы в словесном художественном творчестве» (1924) тигән хеҙмәтендә яҙғайны. Уны 1967 йылда ғалимә Юлия Кристева үҙ эштәрендә артабан үҫтерә. Ғалимдарҙың фекеренсә, текстар араһында тура йәки күсмә, асыҡтан-асыҡ йәки йәшертен бәйләнештәр була, һәм улар ниндәйҙер ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, бер-береһенә һылтаныусан. Интертекстуаль бәйләнештәрҙең булыуы иң әүәл художестволы әҙәбиәттә асыҡлана. Әммә уның мөмкинлектәре күпкә артығыраҡ. Мәҫәлән, текстар араһындағы бәйләнештәрҙе шулай уҡ һынлы сәнғәт, архитектура, музыка, театр сәнғәте һ.б. өлкәһендә лә күҙәтергә мөмкин. Картинаһы өҫтөндә эшләгән рәссам үҙенә тиклем ижад иткән рәссамдарҙың һүрәттәренә һылтана ала, ниндәйҙер

[142] Баҫылды: «Урал-батыр» и духовное наследие народов мира: Международная научно-практическая конференция. Сибай, 10 июня, 2011. – Уфа: ИИЯЛ УНЦ РАН, 2011. – С. 265–268.

айырым мотивтарын, сюжет һынланышын, деталдәрҙе файҙаланып, уның менән интертекст бәйләнешкә инә.

М. Бахтин билдәләүенсә, «помимо данной художнику действительности он имеет дело также с предшествующей и современной ему литературой, с которой он находится в постоянном “диалоге”, понимаемом как борьба писателя с существующими литературными формами» [3, 204]. «Даже прошлое, то есть рожденное в диалоге прошедших веков, смыслы никогда не могут быть стабильными (раз и навсегда завершенными, конечными) – они всегда будут меняться (обновляться) в процессе последующего, будущего развития диалога. В любой момент развития диалога существуют огромные, неограниченные массы забытых смыслов, но в определенные моменты дальнейшего развития диалога, по ходу его, они снова вспомнятся, оживут в обновленном (в новом контексте) виде» [1, 373]. Тимәк, һәр осор сәнғәте, мәҙәниәт өлкәһе өсөн был теория тап килә, ҡасандыр ниндәйҙер оҫта ҡулы аҫтынан сыҡҡан теге йәки был күренештәр, художестволы ижадтағы темалар, текстар, мотивтар һәм сюжеттар һәр осорҙа ла ниндәйҙер әһәмиәткә эйә булып, төрлө замандарҙа ла актуаль, мөһим булып сығыш яһай.

Художестволы әҙәбиәттә интертекстуаль бәйләнештәр нисегерәк сағыла икән? Ниндәй форма һәм төрҙәргә эйә?

Әҙәбиәттә текст араһындағы бәйләнештәр үҙләштереү, тема һәм сюжеттарҙың эшкәртелеше (переработка), эксплицитик (туранан-тура, асыҡ) һәм имплицитик (йәшерен, һиҙҙермәйенсә) цитациялауҙар, тәржемәләр, плагиат, аллюзия, парафраз, пародия, эпиграфтар, экранлаштырыу кеүек һ.б. билдәле күренештәрҙе тәшкил итеүсән.

Ошонан сығып ҡарағанда, филология фәнендә актуаль проблемаларҙан һаналған фольклор-әҙәби бәйләнештәрҙә бындай интертекст бәйләнештәре традицион төҫ ала. Художестволы әҙәбиәттә фольклорҙан алынған үҙләштереүҙәр түбәндәгесә: сюжеттың үҙләштерелеше (пересказ), структур яҡтан үҙләштереүҙәр, функциональ үҙләштереүҙәр, мотив һәм образдарҙың үҙләштерелеүе, фольклор әҫәрен цитациялау, фольклор тексын яңынан эшкәртеү (художестволы эшкәртелеш), троптарҙы, художестволы алымдарҙы заманса итеп үҙләштереү, пародиялау һ.б.[143]

[143] Ҡара: *Трыкова О.Ю.* Отечественная проза последней трети XX века: жанровое взаимодействие с фольклором: Автореф. дисс. … д-ра фил. наук. – МПРУ, 1999. – С. 3.

Был йәһәттән донъя әҙәбиәтенең бер өлөшө һаналған башҡорт әҙәбиәте лә был күренештәрҙән ситтә ҡала алмай.

Фольклор менән башҡорт әҙәбиәте араһындағы интертекст бәйләнештәренең сағыу миҫалының береһен, мәҫәлән, күренекле яҙыусы Фазыл Туйкиндың (1887–1938) «Иҙелбай» (1927) поэмаһында күҙәтергә мөмкин.

Поэмала һүҙ бик боронғо хәл-ваҡиғалар хаҡында бара:

*... Күп һыу аҡҡан илдән, күп ел иҫкән,*
*Ул мәлдәрҙе белгән ҡарт бөткән.*
*Былай түгел тормош әле ул саҡта,*
*Ут ҡуйыусы һирәк усаҡҡа... –*

тип һүрәтләнеүе менән «Урал-батыр» эпосында бәйән ителгән Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең – кешелектең тәү тормош осоро менән ауаздаш булыуына баҫым яһағандай итә:

*...Донъя-маҙар йыймаған,*
*Ҡашыҡ-аяҡ тотмаған,*
*Ҡаҙан аҫып, ут яғып,*
*Алар донъя күрмәгән...*
(«Урал батыр»).

Поэмала тирә-яғы үтмәҫлек ҡара урман, тау-таш уратып алған бер ерҙә эшсән, уңған Уралбай исемле ирҙең тормош көтөп ятыуы һүрәтләнә. Һәм ана шул тормошон нисек итеп көтөүенең тәфсирләп бирелеше лә эпосҡа һылтанғандай итә:

*...Бына шулай саҡтарҙа Уралбай ҡарт*
*Аҡ тирмәләр ҡороп йәйләгән,*
*Заманында емереп йәшәй белгән,*
*Теҙеп-теҙеп бейә бәйләгән...*
*Билен быуған, еңен һыҙғанған да*
*Түккән көсөн тағы ил өсөн...*
*Йәнлектәргә ҡаршы көрәш асҡан,*
*Шоңҡар, тойғон тотоп уйнатҡан.*
*Аҡбуҙатҡа менгән, һаҙаҡ кейгән,*
*Көндәр буйы бер ҙә тынмаған...*
(«Иҙелбай»).

«Урал батыр» эпосында ла Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡтың уландары менән көткән тормошо, көнкүрештәре тулы ғына итеп һүрәтләнгән:

*...Һунарҙа ат менмәгән,*
*Ҡулға һаҙаҡ тотмаған;*
*Менеренә – арыҫланды,*
*Балығына – суртанды,*
*Ҡошҡа сөйгән шоңҡарҙы,*
*Эте тотҡан йәнлекте,*
*Ҡан һурырға һөлөктө,*
*Үҙ иштәре яһаған...*

(«Урал батыр»).

Ф. Туйкиндың поэмаһы геройының исеме Уралбай тип аталыуы ла, уның Иҙелбай исемле улының булыуы ла (эпоста Урал батырҙың Иҙел исемле улының булыуы билдәле), тирә-яҡ мөхитте ҡара көстәр ҡиәфәтендәге төрлө йыртҡыс хайуандарҙың уратып алыуы ла, асыл-да, был ауаздашлыҡты, оҡшашлыҡты көсәйткәндәй итә, хатта ки эпосты цитациялағандай тойола.

Артабан һүҙ бала-сағаларға күсә. Был Ф. Туйкиндың әҫәрендә лә, халыҡ эпосында ла күҙәтелә: «Айҙар үткән шулай, йылдар үткән, Иҙелбайы үҫкән, ир булған. Улҡайына тормош бирер өсөн Уралбайға бөйөк уй ҡунған» («Иҙелбай») һәм «Ай үҫәһен көн үҫеп, Балалары иҫ белеп, Шүлгәнгә ун ике, Уралына ун тулып... ... Маҙаһына тейгән һуң, Икеһен дә саҡырып, Былай тиеп әйткән, ти...» («Урал батыр»).

Күреүебеҙсә, әҙәби әҫәр сюжетының башланышы һүҙмә-һүҙ булмаһа ла, йәшерен булһа ла (имплицитик рәүештә), «Урал батыр» эпосының тәүге өлөшөн хәтерләтә, шуны күҙалландыра. Тимәк, бында баяғы интертекстуаль бәйләнештең бер тибы – ижади эшкәртелештең, үҙләштерештең сағылышын күҙәтергә мөмкин.

Эпоста, билдәле булыуынса, Шүлгән менән Уралдың киләсәк яҙмышы хәл ителә, уларға төрлө ҡаршылыҡтар аша үтеп, сынығырға, мажаралы хәл-ваҡиғаларға осрарға тура килә һ.б. Ф. Туйкиндың поэмаһы сюжетының артабанғы үҫеше лә ошо принципҡа ҡоролған: ата менән ул мөһим эш менән өйҙән сығып китә – Иҙелбайға кәләш эҙләү ниәте менән.

Поэманың халыҡсанлыҡ сифатын тағы ла көсәйткән күренештәрҙең береһе – халыҡ йырының поэтиклаштырылыуы, йәғни «Ағын һыу» тигән йырҙың вариантын сағылдырыуы. Бының менән автор, ир-атҡа халыҡ биргән ысын батыр исеменә лайыҡ булыуы тураһындағы борондан килгән йолаға ишара иткәндәй тойола: уҡ-һаҙаҡтан мәргән атҡан, ат сабышында ла, яу ҡырында ла, һунарҙа ла

һынатмаған, көрәштә лә ал бирмәгән батыр ир-егет шулай уҡ йырмоңға ла әүәҫ булып, ҡурай тартып, йыр йырлаған. Сура батыр ҙа, Салауат батыр ҙа, Ҡаһым түрә лә ана шундайҙарҙан булған. Поэмалағы Уралбай батыр ҙа шундай сифаттарға эйә:

*Аҡбуҙатҡа менгән, һаҙаҡ кейгән,*
*Көндәр буйы бер ҙә тынмаған,*
*Кистәрендә һуҙып ҡурай тартҡан,*
*Моңло йырға шулай йырлаған:*
*«Ағиҙелкәйҙәрҙең шаулап ағыуын*
*Баҫып ҡарайым бейек ярҙарға*
*Ҡайҙарға ла барһаң, дуҫ-иш кәрәк*
*Ҡаршы сығып килгән яуҙарға...»*
(«Иҙелбай»).

Ижад процесында Ф. Туйкиндың фольклорға мөрәжәғәт итеүе көсәйгәндән-көсәйә төшә. Артабанғы сюжет үҫешендә поэмала һүҙ Уралбайҙың нисек Иҙелбай атлы улына кәләш әйттереүе хаҡында бара. Был, билдәле ғалим М.Х. Нәҙерғоловтың дөрөҫ күрһәтеүенсә, тулыһынса тип әйтерлек башҡорт халҡының «Ерәнсә сәсәндең килен эҙләгәне» тигән новеллистик әкиәтенең сюжеты менән һүҙмә-һүҙ тигәндәй тап килә: унда геройҙың нисек итеп улына аҡыллы һәм зирәк кәләш эҙләүе, бының өсөн ниндәй ысулды ҡулланыуы, ахырҙа киленде ниһайәт табыуы хаҡында ҡыҫҡа ғына итеп бәйән ителә. Нигеҙендә фәһемле идея ятҡан ошо әкиәт сюжетын Ф. Туйкин «туранан-тура шиғри юлдарға күсергән булыуы ихтимал, тигән уй тыуа», – тигән һығымтаға килә М. Нәҙерғолов [4, 15].

Шулай итеп, Ф. Туйкиндың ҡарап үтелгән «Иҙелбай» поэмаһында асыҡтан-асыҡ булмаһа ла, үҙенең башланыш структураһында башҡорт халҡының «Урал батыр» эпосының тәүге өлөшөнөң төҙөлөшө менән тап килеүе, геройҙар исемендәге реминисценцияның (тоноҡ хәтерләүҙәр, ишаралар) сағылыуы күҙәтелә. Артабан поэманың сюжеты башҡараҡ юҫыҡта эпостан алыҫлашып китһә лә, был асыштар үҙенең әһәмиәтен юғалтмай. Тимәк, Ф. Туйкин нисектер, әммә «Урал батыр» эпосы менән таныш булған, бәлки, уның бөтөн тексын күрмәһә лә. Был хаҡта уға М. Буранғоловтоң да әйтеүе мөмкиндер. Нисек кенә булмаһын, совет осоро әҙәбиәтенең башында торған Ф. Туйкиндың ижадында эпостың бер ни тиклем эшкәртелгән

өлөштәренең, уны хәтерләткән моменттарҙың урын алыуы яҙыусының эпос хаҡында хәбәрҙар булыуына ишара.

Ғөмүмән алғанда, башҡорт әҙәбиәтен өйрәнгәндә, бигерәк тә әҙәбиәттә фольклорҙың сағылышын, урынын ҡарағанда, 20-се йылдарҙа барлыҡҡа килгән һәм 60-сы йылдарҙа үҫтерелгән, камиллаштырылған, әммә онотолған интертекст бәйләнештәре теорияһы нигеҙендә анализлау үҙ һөҙөмтәләрен килтерер ине. Әҙәбиәт-фольклор бәйләнештәре проблемаһына ҡағылған әлеге мәҡәлә – ошо йүнәлештә алып бара башлаған тикшеренеүҙәрҙең тәүге тәжрибәһе.

## Ҡулланылған әҙәбиәт

1. *Бахтин М.М.* К методологии гуманитарных наук // М.М. Бахтин. Эстетика словесного творчества. – М. 1979. – С. 381–392.

2. Башҡорт халыҡ ижады: Эпос / Төҙ. Ә. Сөләймәнов, аңлатмалар авт. М. Сәғитов менән Ә. Сөләймәновтыҡы; яуаплы мөх. Н. Зарипов. – Өфө: Китап, 1998. – 448 б.

3. *Ильин И.* Интертекстуальность // Современное литературоведение (страны Западной Европы и США): концепции, школы, термины. Энциклопедический справочник. – М. 1999. – С. 204–205.

4. *Туйкин Ф.* Ватан ҡаһармандары / Төҙ., баш һүҙ авт., аңлатмалар, текстол. эш М. Нәҙерғоловтыҡы. – Өфө: Китап, 2007. – 200 б.

# ИНТЕРТЕКСТУАЛЬНОСТЬ КАК ЧАСТЬ КУЛЬТУРОЛОГИИ ПРИМЕНИТЕЛЬНО К БАШКИРСКОЙ ХУДОЖЕСТВЕННОЙ СЛОВЕСНОСТИ ОБЩЕТЮРКСКОГО ПЕРИОДА[144]

Культурология является дисциплиной гуманитарной науки, обладающей междисциплинарным характером, ведущим к интеграции, синтезу, взаимовлиянию, взаимосвязи и взаимопроникновению разнообразных областей знаний в исследовании общего объекта изучения. Известно, что наиболее тесно с культурологией связаны философия культуры, философская, социальная и культурная антропология, история культуры и социология. Тем не менее в данном случае изучение связей между фольклором и литературой в культурологическом аспекте также углубляет представление о культуре, культурной антропологии духовного наследия народа в целом, дополняя его собственными исследованиями и знаниями. Одним из способов выявления всех своеобразий этих связей является метод интертекстуального анализа традиций устно-поэтического народного творчества и художественной литературы.

В отечественной науке предпринималась попытка исследования вопросов художественной взаимосвязи и взаимовлияния фольклора и литературы в свете изучения интертекстуальной теории. Проблеме интертекстуального дискурса было посвящено немало работ, однако в отношении цитат, цитации до сих пор отсутствует единое мнение, нет теоретического исследования, в которых, как говорит Е.А. Козицкая, была бы «предпринята попытка суммировать накопленный опыт и предложить концепцию цитат с учетом многообразия имеющихся литературных фактов» (М.М. Бахтин, Юлия Кристева, В.М. Жирмунский, Роланд Барт, Д.Н. Медриш, О.Ю. Трыкова и т.д.)

---

144 Мир Центральной Азии – 4: материалы Международной научной конференции (Улан-Удэ, 4–7 октября 2017 г.) / науч. ред. Б.В. Базаров. – Иркутск: Оттиск, 2017. – С. 527–531.

[Козицкая]. Понятие интертекстуальности было впервые предложено в 1967 г. теоретиком постструктурализма Юлией Кристевой, которая, опираясь на идею «диалогичности» М.М. Бахтина, понимала под ней интертекстуальную связь между разными текстами. Она, в частности, приходит к мысли о том, что «… открытие, впервые сделанное Бахтиным в области теории литературы» заключается в том, что «любой текст строится как мозаика цитации, любой текст – это впитывание и трансформация какого-нибудь другого текста. Тем самым на место понятия *интерсубъективности* встает понятие *интертекстуальности,* и оказывается, что поэтический язык поддается как минимум *двойному** прочтению» [Кристева, 1995, с. 99; Кристева, 2004, с.166]. При этом тексты не только «пересказывают» друг друга, а вступают друг с другом в диалог, где смысл не только повторяется, а заново рождается именно в этом сопоставлении одного текста с другим [Десницкий, 2008, с.14].

В этом смысле чувство «двойного прочтения» вызывают народные афоризмы, обильно вкрапливаемые писателями в своих произведениях. Известно, что в народных пословицах и поговорках «с присущей им лаконичностью и экспрессией выражены острый ум, природная наблюдательность народа, его принципиальность, глубокая мудрость. В них заключены художественно обобщенный социально-исторический опыт народа, его мировоззрение, социально-этические идеалы» [Баласагуни, 1990, с.539]. «Пословицы, слова оракулов, сказок, эпоса, как правило, передаются лишь устно и, таким образом, ускользают, к сожалению, от нашего познания. В относительно позднее время лишь кое-что записывалось. Если в рукописях какая-либо мысль преподносится как общая сентенция, значит, это могло быть пословицей» [Башкирское народное творчество, 2006, с.297]. Культура использования народных афористических выражений в литературном творчестве, другими словами, их художественное использование в произведениях переросла в литературную традицию. Это во многом можно увидеть в средневековой тюркской, а затем и в тюркско-башкирской литературе, которая богата интертекстами на народные афоризмы. Они в авторском творчестве представляют собой общие сентенции. Раскрытие, обнаружение их в произведениях также является актуальным в разрезе культурологиче-

* Курсив по Ю. Кристевой. – *Н.Х.*

ского изучения национальной литературы в сочетании с традициями устно-поэтического народного творчества.

Кашгарский поэт XI века Юсуф Баласагуни, творчество которого было известно многим тюркским народам, в своей знаменитой книге «Благодатные знания»** наряду с народной мудростью, устным поэтическим творчеством тюркских народов, в целом, в нравственно-дидактических целях, в частности, использовал пословицы и поговорки. Они органично вплетены в сюжет повествования и призваны в различных житейских ситуациях выражать глубину мысли и мудрость познаний. Автор по разному прибегает к афористическому жанру, включая его в сюжетную канву: либо напрямую, либо художественно опосредованно. Так, в начале повествования, рассуждая о величии и достоинствах Богры-хана, он так и говорит:

110. В народе пословица древняя есть:
«Дар сыну – отцовское имя и честь».
Сын имя и честь получая в награду,
В наследстве стократ обретает отраду…[ Баласагуни, 1990, с.74]

Ведя речь о достоинстве и пользе языка, Баласагуни среди прочего изрекает:

170. Разумной считается мудрая речь,
А глупая снимет и голову с плеч [Баласагуни, 1990, с.79].

Данный раздел, посвященный пользе и вреду языка, впрочем, как и другие поучительные главы сочинения, изобилует интертекстами на мудрые изречения афористического характера, во многом напоминающие тюркские народные пословицы и поговорки, башкирские в том числе: «Неосторожно изрекший речь – скончался не от болезни», «Малословие смысл обретает, От большего слова беда придет», «За язык ответит голова» и т.д.

Следовательно, Баласагуни в своей поэме «Благодатное знание» показал, как он свободно владеет и применяет в своем творчестве пословицы и поговорки, используя их как напрямую, называя своими именами (т.е. говорит, что это высказывание является пословицей), так и художественно вплетает афористические выражения в саму ткань повествования. Это придает его языку и выразительным

** «Кутадгу билиг» – тюркское поэтическое сочинение XI в. Курсив по Ю. Кристевой. – *Н.Х.*

средствам изображения образность, аллегоричность, метафоричность, обогащая тем самым поэтику произведения.

В поэме XIV века «Гулистан бит-тюрки»* («Гулистан на тюрки») Сайфа Сараи – поэта периода Золотой Орды – также отчетливо прослеживается реминисценции на народные пословицы и поговорки.

Сборник хикаятов–историй С. Сараи «содержит фантастические сказки о всевозможных приключениях, к которым присовокуплены забавные истории, вдохнавленные реальной жизнью, легенды и исторические анекдоты» (например, известные сборники «Калила и Димна», «Синдбад-наме» и др.) [Бонбачи, 1986, с.271]. В нем приводятся жизненные и поучительные истории, в которых также обнаруживаются цитации на пословицы, поговорки о труде, знании, добре и зле и т.д. Здесь народные афоризмы помогают раскрыть основную идею произведения: прослеживается традиционная для эстетики сказок явление, когда народная пословица служит сюжетообразующим мотивом. Подобное, к примеру, можно проследить в башкирских народных сказках типа АТ 654В («Аминбек», «Карбуз», «Шакир»), где в виде мотива выступает известная тюркско-башкирская народная пословица «Для егета (юноши) и семи ремесел мало» (существует вариант «Для егета (юноши) и сорока ремесел мало»). В сборнике С. Сараи приведенная пословица как сюжетообразующий мотив лежит в основе хикаята «О преимуществах довольствования тем, что есть» (другими словами, довольствоваться малым). Когда сын изъявил желание приобрести навыки какого-нибудь ремесла с тем, чтобы поправить свое материальное положение, отец ему отвечает: «Одного желания для того, чтобы разбогатеть мало» и добавляет, мол, для этого необходимо владеть различными ремеслами и знаниями, которыми являются торговля, наука, мелодичный голос, владение каким-нибудь искусством. По его мнению, если не постичь всех этих навыков, то человек так и будет жить бесплодными мечтами – таков основной тезис хикаята. Используя народную мудрость «Егету (т.е. юноши) и 40 ремесел мало», автор в своем произведении мотивирует героя к дальнейшим действиям и решает важную идейно-эстетическую задачу.

Таким образом, на примере произведений Ю. Баласагуни и С. Сараи было устновлено, что в общетюркской и тюркско-башкирской

* Речь идет о «Бустане» в переводе С. Сараи на тюрки (1391 г.). – *Н.Х.*

литературе средневековья прослеживаются интертексты на народные пословицы и поговорки. В идейно-художественном отношении они способствовали решению важных идейно-эстетических, этических задач, поэтическому обогащению содержания. С культурологической точки зрения сочетание в творчестве писателя фольклорных и литературных традиций, их интертекстуальность позволяет говорить о культурной антропологии, изучающей конкретные культурные ценности, формы культурных взаимосвязей, механизмы трансляции культурных навыков от человека к человеку – от народа к конкретному писателю в данном случае.

**Использованная литература**


*Баласагуни Ю.* Благодатное знание / Пер. С.Н. Иванова, вступит. сл. М.С. Фомкина, примечан. А.Н. Малеховой. Л., 1990. – 255 с.

Башкирское народное творчество: Пословицы и поговорки / Сост., авт. вступит. ст., коммент. Ф.А. Надршина. – Уфа: Китап, 2006. 544 с.

*Бонбачи А.* Тюркские литературы. Введение в историю и стиль // Зарубежная тюркология. – М.: Наука, 1986. – С. 191–299.

*Десницкий А.С.* Интертекстуальность в библейских повествованиях / А.С.Десницкий // Вестник Московского университета. Серия 9. Филология. 2008. – № 1. – С. 14–20.

*Кристева Ю.* Бахтин, слово, диалог, роман // Вестник МГУ. Серия 9. Филология. 1995. – № 1. – С. 97–124.

*Кристева, Ю.* Избранные труды: Разрушение поэтики / пер. с франц. Г.К. Косикова, Г.К. Нарумова. – М.: РОССПЭН, 2004. – 656 с.

*Козицкая Е.А.* Цитата, «чужое слово», интертекст: материалы к библиографии [Электронный ресурс]: URL: // http://uchcom.botik.ru/az/lit

## ВОПРОСЫ ИНТЕРТЕКСТУАЛЬНЫХ СВЯЗЕЙ В КОНТЕКСТЕ ПРОБЛЕМЫ ФОЛЬКЛОРНО-ЛИТЕРАТУРНЫХ ВЗАИМОСВЯЗЕЙ (ПРИМЕНИТЕЛЬНО К НАЦИОНАЛЬНОЙ ЛИТЕРАТУРЕ)[145]

В современной науке существует метод структурного, системно-функционального, семантического изучения словесного искусства. Возникнув в 1920-е гг. XX века на основе лингвистической школы (Ф. де Соссюр, И.А. Бодуэн де Куртенэ, Р. Якобсон, Ш. Балли и др.), историко-антропологии (К. Леви-Стросс), формальной школы филологии (В.Я. Пропп, Б.В. Шкловский, Ю.Н.Тынянов, Б.М.Эйхенбаум и др.), структурализм получил философское обоснование и наибольшее распространение в 1960-е гг. во Франции (М.П. Фуко, Р. Барт), в Италии (У. Эко), в США (М. Элиаде). В России крупнейшими представителями структурализма в области культуры в целом были М.М. Бахтин, Ю.М. Лотман, Е.М. Мелетинский, В.Я. Пропп, Ю.Н. Тынянов, В.Н. Топоров и т.д. [2]

Методологической базой для структуралистов является структурная лингвистика. Успех движения структуралистов, охвативших и другие области культуры (культурная антропология, фольклористика, литературоведение), способствовал развитию семиотики, т.е. анализа различных явлений в терминах знаковых систем.

